Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы
Башҡортостан мәғариф үҫтереү институты

Ф.Г. Аҙнабаева, З.Ғ. Нафиҡова

# ОСҠОН

**Төрлө милләт балалары тәрбиәләнгән балалар баҡсаһында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү буйынса программа-күрһәтмә**

**Өфө – 2010**

ББК 74.10 (2 Рос = Баш)
УДК 372.3.4
А 35

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы*
*тарафынан тәҡдим ителде*

НафиҡоваЗ.Ғ., Аҙнабаева Ф.Г. Осҡон: төрлө милләт балалары тәрбиәләнгән балалар баҡсаһында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү буйынса программа-күрһәтмә. Төҙәтелгән һәм өҫтәлмәләр индерелгән 2-се баҫма. - Өфө, Башҡортостан мәғариф үҫтереү институты, 2010 йыл.

“Осҡон” программаһы - күрһәтмәһе мәктәпкәсә йәштәге төрлө милләт балаларына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү өсөн тәрбиәселәргә, гувернерҙарға, уҡытыусыларға, ата-әсәләргә, шулай уҡ урта һәм юғары профессиональ педагогик уҡыу йорттарының талиптарына тәғәйенләнә.

Рецензенттар:

*Шәфиҡова Г.Р.,* психология фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты.
*Яңыбаева Л.Ш.,* Сибай ҡалаһы мәғариф идаралығының мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү бүлеге методисы.

© Нафиҡова З.Ғ.,
Аҙнабаева Ф.Г., 2010.
©БИРО, 2010

ISBN 5-7159-0513-3

Халҡым теле миңә – хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Р. Ғарипов

## Аңлатма яҙыу

Һуңғы йылдарҙа башҡорт телен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә. Ә инде Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының теле тураһында"ғы законына ярашлы (апрель 1999) башҡорт теленә дәүләт теле статусы бирелгәс, уны рус теле менән бер рәттән барлыҡ мәғариф учреждениеларында ла өйрәтеү һәм өйрәнеү мөмкинселеге тыуҙы.

Башҡорт телен уҡытыу концепцияһына ярашлы башҡорт телен өйрәнеүсе мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы өс төркөмгә бүлергә мөмкин: *беренсе төркөм* - башҡорт мөхитендә тыуып, башҡортса теле асылған балалар. Улар тыуғанға тиклем үк башҡорт телен йөрөтөүсе гендарҙы мираҫ итеп алалар. Донъяға килгәс, был сабыйҙар илау, геүләү, тыпырсыныу һәм башҡа шуның кеүек саралар аша ата-әсәһе һәм башҡа ғаилә ағзалары менән аралашалар. Башҡорт һөйләшеүенә ҡолаҡ һалып, бәпестәр бишек йырҙары, ауыҙ-тел ижады өлгөләре аша (теләктәр, һамаҡтар, һөйҙөрткөстәр, һикерткестәр, экиәттәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар) телмәр үҙенсәлектәрен үҙләштерәләр. Бала һүҙ аша үҙе, кешеләр, тирә-йүн, тәбиғәт һәм йәмғиәт күренештәре тураһында белем ала, үҙенең милли сығышын, халҡының ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын, мәҙәниәтен, тарихын өйрәнә. Шулай итеп, әкренләп башҡортлоҡ һалына, башҡорт психологияһы үҙләштерелә.

*Икенсе төркөм* - ҡала шарттарында тыуған һәм үҫкән балаларҙың, башҡорт мөхите булмау сәбәпле һәм ғаиләлә башҡорт телендә һөйләшеү булмағанлыҡтан, әсә телен йөрөтөүсе гендары үҫешмәйенсә, онотолоп, юҡҡа сығалар. Бындай балалар, тыуғас та үҙ туған телдәрен ишетмәгән, йә иһә икенселәре - башҡортса теле асылып та, балалар баҡсаһында

башҡорт мөхите булмағанлыҡтан, үҙ теленән ситләшкән. Был хәл бигерәк тә, ҡала һәм ҡасаба шарттарында, шулай уҡ ҡатнаш никахта торған ғаиләләрҙә асыҡ күренә. Ата - әсә баланың киләсәк яҙмышын ҡайғыртмай, уның быуаттар буйына, нәҫелдән-нәҫелгә күскән, ата-бабанан ҡалған тел гендарын асырға, үҫтерергә булышлыҡ итмәй, шарттар тыуҙырмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер ата-әсәләр үҙҙәре лә туған телдәренән мәхрүм, уларҙың күптәре башҡорт телен көнкүрештә бер-береһе менән аралашырлыҡ кимәлдә генә белә йәки бөтөнләй белмәй.

*Өсөнсө төркөм* - башҡорт телен бөтөнләй белмәгән башҡорт йәки икенсе милләт балалары. Был балаларҙың ата-әсәһе үҙҙәре балаға башҡорт телен өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя һәм был эште атҡарып сығыуға ҙур көс һала. Бындай ата-әсәләрҙең балаға телде өйрәтеү маҡсаты - уның киләсәген ҡайғыртыу: ниндәй уҡыу йортона уҡырға барасағы, ниндәй һөнәр һайлаясағы һәм урындағы халыҡ менән аралашасағы – былар барыһы ла баланың тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итеү маҡсатында башҡарыла.

Шулай итеп, балалар баҡсаһында башҡорт телен өйрәтеү, ошо юғарыла күрһәтелгән өс төркөм балаларына яраҡлаштырылып төҙөлгән программалар нигеҙендә ойошторолорға тейеш. Беренсе төркөм балаларын уҡытыу һәм тәрбиәләү эшен "Башҡорт балалары баҡсалары өсөн уҡытыу-тәрбиәләү программаһы"на таянып ойошторола.

Тәҡдим ителгән был программа уҡытыу һәм тәрбиә эше рус телендә ойошторолған балалар баҡсаһына йөрөгән, башҡорт телен белмәгән икенсе һәм өсөнсө төркөм балаларына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү маҡсатында төҙөлдө.

Программа буйынса башҡорт телен дәүләт теле булараҡ мәктәпкәсә йәштәге балаларға биш йәштән өйрәтеү ҡаралған. Ике йыл эсендә телде өйрәнеү һөҙөмтәһендә кескәйҙәр башҡорт теленең барлыҡ өндәрен дә дөрөҫ әйтергә, көндәлек йәшәйештә тиҫтерҙәре һәм ололар менән ябай ғына кимәлдә аралаша белеү күнекмәләрен үҙләштерә алалар.

Педагогтар беренсе сиратта баланың телде ниндәй кимәлдә белеүен асыҡларға һәм ошо күрһәткестәргә таянып, тел өйрәтеү өсөн төркөмдәр

туплауҙы ойоштороорға тейештәр: телде әҙ-мәҙ кимәлдә белгән, йәки әйткәнде аңлаһа ла, үҙе һөйләшә белмәгән балаларҙы айырым төркөмгә туплау кәрәк. Телде бөтөнләй белмәгән кескәйҙәр уны икенсе төркөмдә өйрәнәләр.

Төркөмдәрҙә күмәкләп, бөтә балалар менән бергә башҡарыла торған эш алымдарынан башҡа, һәр бала менән айырым рәүештә эшләүҙе ойоштороорға кәрәк.

Тәжрибә күрһәтеүенсә, тел үҙләштереү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырылған осраҡта, баланың һәм ата-әсәләрҙең телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуы һәм теләге ҙур булһа, программа материалдары тулыһынса яҡшы үҙләштерелә. Хатта балалар беренсе класҡа уҡырға саф башҡорт кластарына төшә алалар.

Һеҙгә тәҡдим ителгән ошо әсбаптың эсенә «Осҡон» программаһы (авторҙар Аҙнабаева Ф.Г., НафиҡоваЗ.Ғ.), уның эстәлегенә ярашлы НафиҡоваЗ.Ғ. тарафынан төҙөлгән беренсе һәм икенсе йылдарҙа дәрестәр үткәреү өсөн һәр йылға яҡынса тематик пландар һәм дәрес өлгөләре бирелә, шулай уҡ һәр төркөм өсөн башҡорт телен үҙләштереү кимәле күрһәткестәре һәм уларҙы билдәләүгә эш төрҙәре бирелә. Балалар үҙләштерергә тейешле һүҙ байлығын үҙ эсенә алған башҡортса-русса һүҙлек тә бирелә.

Тәрбиәсе йәки башҡорт теле уҡытыусыһы үҙ ҡарамағы буйынса яҡынса тематик пландарҙы һәм дәрес өлгөләрен үҙгәртә, йәки уларға өҫтәлмәләр индерә ала.

Балаларҙың һәләтлелегенә һәм отҡорлоғона ҡарап, тәрбиәсе бирелгән материалдарҙы ижади ҡараш менән ҡулланыр тигән өмөттә ҡалабыҙ. Шулай уҡ был программа балаларға ла телде өйрәтеү һәм өйрәнеү эшмәкәрлегендә тәрбиәселәр, ата-әсәләр өсөн ҙур ярҙамсы булыр һәм был эште мәктәптә лә дауам итер өсөн ныҡлы нигеҙ һалырға ярҙам итер тип ышанабыҙ.

**Башҡорт дәүләт теленә өйрәтеүҙең төп маҡсаттары һәм бурыстары**

Балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙә түбәндәге маҡсаттар һәм бурыстар ҡуйыла:

башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды аңларға өйрәтеү (аудирование);

өндәрҙе ишетә һәм айыра белергә, уларҙы дөрөҫ итеп үҙ-ара һәм ололар менән башҡорт телендә аралашҡанда әйтә белергә, тәҡдим ителгән темалар буйынса эҙмә-эҙлекле, төҙөк һөйләмдәр менән һөйләй белергә өйрәтеү (говорение);

телмәр ағышынан - һөйләмде, һөйләмдән - һүҙҙе, һүҙҙән - өндө айыра белергә өйрәтеү;

балаларҙың һүҙ байлығын үҫтереү һәм уны актив һөйләү эшмәкәрлегендә ҡулланырға өйрәтеү;

һөйләгәндә һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөргә, үҙ һөйләменә тура һәм ситләтелгән телмәрҙе ҡатнаштыра белергә өйрәтеү;

диалогик һәм монологик телмәр төрҙәрен үҙләштерегә өйрәтеү;

әҫәрҙәрҙе эстетик тойғо менән ҡабул итергә, әҫәрҙең йөкмәткеһенә, ваҡиғаға, персонаждар ҡылығына үҙҙәренең шәхси мөнәсәбәтен әйтә белергә өйрәтеү;

өйрәнелгән шиғырҙарҙы, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен тасуири, диҡҡәт һәм эске кисереш менән яттан һөйләй белергә өйрәтеү;

башҡорт телен кескәйҙәргә көндәлек йәшәйештә, йәмғиәт тормошонда, хеҙмәт эшмәкәрлегендә үҙ-аллы файҙалана белергә өйрәтеү;

башҡорт халҡына, уның үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә ҡыҙыҡһыныу уятып, халыҡтың һәм тыуған илдең яҙмышы өсөн хәстәрлекле булған, үҙе йәшәгән төйәккә, тәбиғәткә, халыҡтың рухи байлығына битараф булмаған, аралашып йәшәгән башҡа милләт халҡына оло ихтирамлы булған ысын шәхес тәрбиәләү.

**Кескәйҙәргә тел өйрәтеүгә төп талаптар һәм принциптар**

Мәктәпкәсә йәштәге балаларға башҡорт телен өйрәткәндә дөйөм педагогик талаптар ҡуйыла:

– балаларҙың йәш, анатомо-физиологик һәм психик үҙенсәлектәренә таянып эш итеү;

– еңелдән ауырға, таныштан - таныш булмағанға, яҡындан - алыҫҡа һәм башҡа дидактик принциптарҙы һаҡлау;

– өйрәнелгән материалды сағыштырыу, анализлау һәм ошо нигеҙҙә төшөнсәләрҙең (һүҙҙәрҙең) мәғәнәләрен аңлау һәм үҙләштереү, предметтарҙы уларҙың билдәләре буйынса классификациялау, дөйөмләштереү, тирә-йүндәге сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен күҙәтеү һәм йәнле һөйләшеүҙә сағылдырыу.

**Программа нигеҙләнгән принциптар:**

- телде өйрәтеүҙе фәнни (педагогик, психологик, лингвистик) нигеҙҙә ойоштороу;
- программаның йөкмәткеһендә күсәгилешлекте һәм дауамсанлыҡты тормошҡа ашырыу;
- тел өйрәтеүҙе күргәҙмәлелеккә һәм кескәйҙәрҙең көндәлек тормошондағы һәр төрлө эшмәкәрлеккә бәйле рәүештә, уларҙың тирә-йүнде танып-белеүҙең төп сараһы булып торған уйын аша үткәреү;
- һәр бала менән системалы рәүештә айырым эш алып барыу, сөнки кескәйҙәр үҙҙәренең дөйөм үҫеш кимәле, телгә бәйле булған һәләтлелеге менән төрлө булалар;
- телде өйрәтеү, тәрбиәләү һәм үҫтереү бурыстарын бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә тормошҡа ашырыу;
- балаларҙың ижади үҫешенә булышлыҡ итеү һәм йәш кимәленә ҡарап, уларҙың һәләтлелектәрен асыу һәм үҫтереү.

**Программаның төҙөлөшө:**

Программа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеүҙе ике йыл эсендә үткәреүҙе күҙ алдында тота: өлкәндәр төркөмөнән башланып, мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә тамамлана. Һәр төркөмдә аҙнаһына ике дәрес үткәреү ҡарала. Дәрестәр үткәреү ваҡыты өлкән төркөмдә – 20-25 минут, мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә 25-30 минут.

Программаның йөкмәткеһе тематик яҡтан бер-береһе менән бәйле булған 4 ҙур блоктан тора:

1 блок - "Мин йәшәгән мөхит".

2 блок - "Егәрленең - ҡулы алтын".

3 блок - "Тыуған яғым - алтын бишек".

4 блок - "Башҡортостан - минең төйәгем".

Блоктар - темаларға, темалар - бүлектәргә бүленә. Темаларға яҡынса дәрестәр һаны күрһәтелгән. Һәр теманан һуң балалар тарафынан үҙләштерелергә тейешле актив һүҙҙәр исемлеге, типик грамматик конструкциялар һәм бәйләнешле телмәр өлгөләре бирелә.

**Башҡорт дәүләт телен өйрәтеүҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәре**

Балалар баҡсаһында рус телле башҡорт һәм башҡа милләт балаларына башҡорт дәүләт телен өйрәткәндә тәрбиәселәргә тәүҙә уларҙың телде белеү, аңлау дәрәжәһен, ғаиләлә ниндәй телдә һөйләшеүҙәрен асыҡлау мотлаҡ. Сөнки был эш тәрбиәсегә балаларға телде өйрәткәндә махсус алымдар билдәләүгә ярҙам итә.

Балалар баҡсаһында, шулай уҡ төркөмдәрҙә, балаға туған телде үҙләштереүҙә ярҙам итеүсе мөхит тыуҙырыу: бүлмәләрҙе милли биҙәктәр менән биҙәү һәм башҡорт халҡының көндәлек ҡулланыу әйберҙәре менән йыһазландырыу. Башҡортостан тарихына, мәҙәниәтенә, ғөрөф – ғәҙәтенә, халҡының хужалыҡ эшмәкәрлегенә, арҙаҡлы шәхестәренә бағышланған мөйөштәр, күргәҙмәләр булдырыу, уларҙың эстәлеген даими рәүештә алмаштырып тороу.

Балаларға башҡорт телен өйрәткәндә тик башҡортса һөйләшеү һәм аралашыу мотлаҡ. Тәүге осорҙа әйткән фекер, һүҙ руссаға тәржемә ителә. Балалар телде аңлай башлағас ҡына, тәрбиәсе тулыһынса башҡорт теленә күсә.

Әлбиттә, тәрбиәсе үҙе саф әҙәби телдә һөйләшергә тейеш, уның телмәре балаларға үрнәк, өлгө булырға тейеш. Төркөмдәге балалар менән эшләгән башҡа хеҙмәткәрҙәрҙең дә (музыка етәксеһе, тәрбиәсе ярҙамсыһы) әҙерәк булһа ла башҡорт телен белеүе кәрәк. Шулай уҡ ата-әсәләрҙең дә балаға башҡорт һүҙҙәрен өйрәнгәндә ярҙам итергә ынтылышы – уларҙың телде үҙләштереүен нәтижәле итә. Хатта, ата-әсәләр балалары менән бергә үҙҙәре лә телде өйрәнә алалар.

Төрлө милләт балалары тәрбиәләнгән һәм уҡытыу-тәрбиә эше рус телендә алып барылған балалар баҡсаһында тел өйрәтеү өсөн кескәйҙәрҙе

йәш үҙенсәлектәренә һәм һәләтлелегенә, отҡорлоғона, телде белеү кимәленә ҡарап 5-7-әр баланан торған төркөмдәргә бүлеү кәрәк.

Юғарыла әйтеүебеҙсә, башҡорт дәүләт телен өйрәтеү өлкәндәр төркөмөнән башланып, һәр төркөмдә аҙнаһына 2-әр тапҡыр дәрестәр формаһында үткәрелә. Улар балалар баҡсаһының дәрестәр үткәреү селтәрендә күрһәтелергә тейеш. Дәрестәр системалы рәүештә план буйынса үткәрелә. План мотлаҡ *башҡортса* яҙылырға тейеш.

Башҡорт теле дәрестәрен үткәреү методикаһы уның маҡсатына һәм эстәлегенә ҡарап билдәләнә. Тәрбиәсе беренсе осорҙа, әйтеп китеүебеҙсә, балаларҙың башҡорт телендә һөйләшә алыу дәрәжәһен, ниндәй һәм күпме һүҙ белеүҙәрен, һорауҙарҙы аңлауҙарын һәм уларға дөрөҫ яуап бирә белеүҙәрен, башҡорт теленә генә хас өндәрҙе әйтә алыу кимәлдәрен асыҡлай. Бының өсөн ул " Танышыу" тигән темаға ике – өс дәрес үткәрә. Шулай уҡ телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу йәһәтенән "Беҙ башҡорт телен өйрәнәбеҙ" тигән темаға ла бер нисә дәрес үткәреүҙе планлаштырырға кәрәк.

Телде өйрәнеү процессында, бигерәк тә баланың һүҙлек байлығы аҙ саҡта, комплекслы дәрестәр үткәреү отошло. Ындай дәрестәр программа йөкмәткеһе нигеҙендә планлаштырыла һәм билдәле бер темаға бағышланып, балаларҙың төрлө эшмәкәрлеген (рәсем, йыр, аң-белем үҫтереү, әүәләү, ҡорама йәбештереү һәм башҡаларҙы) үҙ эсенә ала. Дәрестәрҙе үткәреүҙә төрлө яңы алымдар ҡулланыу - балала тел өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра һәм уларҙы ялҡытмай.

Конкрет темаға бағышланған дәрестәрҙе үткәргәндә маҡсаттар аныҡ төҫ ала. Мәҫәлән: “Өҫ кейемдәре”, “Йәшелсәләр”, “Һауыт-һаба” һәм башҡа ошондай темаларҙы өйрәткәндә, түбәндәге алымдарҙы ҡулланып була: ҡурсаҡ ярҙамында яңы һүҙҙәр менән таныштырыу, уларҙы хәтерҙә ҡалдырыу күнекмәләре; дидактик йәки хәрәкәтле уйындар аша дәрестә өйрәнелгән һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләм өлгөләрен балаларҙың отоп алыуы, уларҙың мәғәнәһен аңлатыу һәм ҡабатлатыу, һүрәттәргә йәки предметтарға ҡарап, һорауҙар биреп, уға яуап ҡайтартып, үҙләштерелгән һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләм өлгөләрен нығытыу һәм башҡа

шундай эш төрҙәре алырға була. Һәр дәрестә мотлаҡ рәүештә өндәрҙе (фонемаларҙы) дөрөҫ әйтеү күнекмәләре үткәреү – балаларҙың фонематик һиҙгерлеген үҫтереүгә ярҙам итә.

Һорау тәүҙә башҡорт телендә, аҙаҡ - рус телендә ҡабатлана. Бала тәүҙә яуапты – русса, аҙаҡ – башҡортса ҡайтара ала. Тәүге ваҡыттарҙа бала һөйләмдәрҙе тәрбиәсе артынан ҡабатлаһа, һуңынан - үҙ-аллы һөйләмдәр төҙөргә өйрәнә, аңлы рәүештә дөрөҫ яуап ҡайтара башлай. Кескәйҙәр төркөмөндә һорауҙар ҡыҫҡа булырға, һөйләм конструкциялары үҙгәртелмәйенсә әйтелергә тейеш. Был балаға һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу өсөн уңайлы була. Ә инде баланың һүҙ байлығы үҫкән һайын, һөйләмдәр үҙгәрә, ҡатмарлана төшә.

Өйрәтелгән һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр дәрестән тыш, шулай уҡ уйын һәм башҡа көн тәртибенә ярашлы уҙғарылған балалар эшмәкәрлегендә ҡабатлатыла һәм нығытыла (йыуынғанда, ашағанда, саф һауала йөрөгәндә, йоҡларға ятҡанда, йоҡлап торғас). Өйрәнелгән һүҙҙәр дәрестәрҙә һәм унан тыш ҡабатланһалар ҙа, балалар уларҙы тиҙ онотолар. Шуның өсөн, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе 10-15 көндән һуң балалар телмәренә яңынан индерергә кәрәк.

Көн дә биш – ун минутлыҡ балалар менән махсус һөйләшеү ойоштороу кәрәк. Һөйләшеү баланың телде белеү дәрәжәһенә ҡарап үткәрелә һәм уға таныш булған темалар, көнкүрештәге төрлө осраҡтар алына. Һөйләшеүҙәр ойошторғанда, балаларға биреләһе һорау алдан уйланылған, ябай һәм аңлайышлы булырға тейеш. Бала ҡайһы бер саҡ ябай ғына һорауҙы ла аңлап еткермәҫкә мөмкин. Шуға күрә лә, тәүге осорҙа әңгәмә (диалог) һорау – яуап формаһында була: Был кем? Был – мин.

Программа тематик принципҡа нигеҙләнеп төҙөлдө, сөнки телде өйрәткәндә ҙур блоклы темаларға таянып, бәйләнешле текстарға, әҙер һөйләм конструкцияларына таянып өйрәтеү яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

Балаларға башҡорт телен өйрәтеү уларҙың билдәле бер күләмдә һүҙ байлығын булдырыуға йүнәлтелгән: шуға күрә лә программала балаларға һәр дәрестә тәүҙә яңы һүҙ өйрәтеү ҡарала, шул уҡ ваҡытта

таныш булған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, типик һөйләмдәр төрлө конструкцияларҙа ҡабатлатыла. Уларҙы баланың үҙ телмәрендә әүҙем ҡулланыуына ирешеү кәрәк.

Балаларҙың телмәрен үҫтереү бөтә төркөмдәрҙә лә төп бурыстарҙың береһе булып тора. Ә инде башҡорт телен өйрәтеүҙең маҡсаты – мәктәпкә барғанда баланың өндәрҙе дөрөҫ әйтеп, һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөп, үҙенең уй-фекерен эҙмә-эҙлекле, йөкмәткеле һәм бәйләнешле итеп, ашыҡмайынса һәм ҡаушамайынса һөйләй белеүенә ирешеү тора. Шуға күрә лә, һәр дәрестә бәйләнешле телмәр үҫтереү маҡсатында, балалар менән фонемалар өҫтөндәге эште, һүҙ байлығын үҫтереүҙе, телмәрҙең грамматик яҡтан дөрөҫ төҙөлөшөн үҙләштереү эштәрен комплекслы рәүештә башҡарыу һәм был бурыстарҙы бер-береһе менән бәйле, даими алып барыуҙы күҙ уңында тоторға кәрәк.

Уйын балалар тормошонда ҙур урын ала. Телде өйрәнгәндә лә бала уйын аша уның орфоэпик, орфографик, грамматик һәм башҡа нормаларын практик яҡтан үҙләштерә. Шунлыҡтан, һәр дәрестә, уның маҡсаттарынан сығып, төрлө уйын төрҙәре ҡулланылырға тейеш. Телде өйрәткәндә дидактик уйындар, лото, домино кеүек уйындарҙы балалар теләп, әүәҫ уйнай. Тик тәрбиәсе уйынды планлаштырғанда балаларҙың һүҙ байлығы кимәленән сығып, уларға таныш булған предметтарҙы, йәки уларҙың рәсемдәрен алырға тейеш. Яңы һүҙҙәр өйрәтелгәс кенә, уларҙы әкренләп уйынға индереү кәрәк.

Уйынсыҡтар араһында төп урын ҡурсаҡҡа бирелә. Ул да балалар менән бергә башҡорт теленең серҙәрен дәрестән дәрескә өйрәнә.

Балалар баҡсаһында һүҙле, йырлы түңәрәк уйындары, хәрәкәтле уйындар, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен ятлау, әкиәттәрҙе театрлаштырып уйнау, шуның һымаҡ башҡа яңы алымдар ҡулланылһа, балалар башҡорт һүҙҙәрен тиҙерәк отоп аласаҡтар. Бигерәк тә, йырлы түңәрәк уйындарын, хәрәкәтле һәм һүҙле уйындарҙы өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен өйрәткәндә ҡулланыу ғәйәт файҙалы була, сөнки һүҙҙәр һалмаҡ, көйләп, ижекләп һәм көслө тауыш менән әйтеләләр. Йырлы уйындарҙың һүҙҙәре балалар өсөн ҡыҫҡа текстлы, әйтер һәм отоп алыр өсөн еңел булырға һәм шулай уҡ тема эстәлегенә тура килергә тейеш.

Балалар, уйын һәм йыр һүҙҙәренең мәғәнәһен аңламайынса, тиҙ генә отоп алалар. Механик рәүештә отоп алынмаһын өсөн, тәрбиәсе текст һүҙҙәренең мәғәнәһен русса аңлата. Башта ул тексты башҡортса, ашыҡмай, матур итеп уҡый, хәрәкәттәр менән күрһәтә, ә йырлы уйын булһа – йырлай. Ике – өс тапҡыр шулай ҡабатлай, ә балалар бышылдап ҡына тәрбиәсе артынан эйәреп әйтеп ултыралар, унан һуң – текста әйтелгән хәрәкәттәрҙе күрһәтәләр. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә ирешкәс, текст балалар менән күмәкләп ҡабатлатыла. Аҙаҡ – һәр баланан текст әйттертеп сығартыла.

Уйындар уйнағанда тәрбиәсе бер үк һөйләмдәр менән эш итергә тейеш, сөнки балалар шул һөйләм конструкцияларын аҙаҡ үҙ – ара аралашҡанда, бер – береһе менән уйнағанда ҡуллана башлайҙар. Тәрбиәсе тарафынан дөрөҫ ойошторолған уйындар ғына баланың аҡыл үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Шунлыҡтан, педагог һәр төркөмгә ҡуйылған тәрбиә бурыстарын, балаларҙың йәш үҙенсәлектәрен, һәр уйындың эстәлеген һәм уны үткәреү методикаһын яҡшы белергә тейеш. Сюжетлы-ролле, түңәрәкле, хәрәкәтле уйындар үткәргәндә, ролдәргә бүлеү ифрат мөһим урын тота, сөнки уйын барышында баланың холоҡ үҙенсәлектәре, әүҙемлеге, отҡорлоғо асыҡ күренә һәм артабан уларҙы камиллаштырыу өҫтөндә эшләргә мөмкинселек бирә.

## Тәүге йылда башҡорт телен өйрәтеү өсөн п р о г р а м м а

*Өлкән төркөм (5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балалар)*

Был төркөмдә 1 сентябрҙән 1 июнгә тиклем башҡорт теленән аҙнаға ике тапҡыр 20-25 минутлыҡ дәрестәр үткәрелә.

### Һүҙлек эше

Һәр дәрескә 4-5 яңы һүҙ индерелә һәм улар төрлө грамматик конструкцияларҙа ҡулланыла.

Түбәндәге һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәләрен үҙләштереү: кейем-һалым (күлдәк, бүрек, яулыҡ, түбәтәй), уйынсыҡтар (ҡурсаҡ (-тар), туп (-тар), эт, бесәй, ҡуян, айыу); һауыт-һаба (сәйнүк, сынаяҡ, ҡалаҡ); йәшелсә (ҡыяр, кишер, һуған); емеш-елек (алма); бүлмә йыһаздары (өҫтәл, ултырғыс);

ғаилә ағзалары һәм яҡын кешеләренең (атай, әсәй, апай, ағай, өләсәй, ҡартатай) нисек аталыуын;

кеше кәүҙәһе өлөштәре (ҡул, аяҡ, баш, бармаҡтар);

предметтарҙың төҫтәрен (ҡыҙыл, күк, һары); дәүмәлен, күләмен (ҙур, бәләкәй); миҡдарын (әҙ, күп) һәм башҡа билдәләрен аңлатҡан һүҙҙәрҙе (тәмле, эҫе, һыуыҡ, күңелле);

көнкүреш һәм уйын хәрәкәттәрен аңлатҡан (йыуа (-лар), ашай (-ҙар), эсә (-ләр), кейә (-ләр), сисә (-ләр), йөрөй (-ҙәр), ултыра (-лар), атлай (-ҙар) хәҙерге заман ҡылымдарын, уларға күплек ялғауҙары ҡушыуҙы;

балаларҙың үҙ-үҙҙәрен нисек тоторға кәрәклеген аңлата торған һүҙҙәр: ярай, ярамай, яҡшы, насар.

## Фонемалар өҫтөндә эш

Башҡорт теленең өндәрен ишетә һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү өҫтөндә эш. Өндәрҙең ирен, тел һәм тештәр ярҙамында барлыҡҡа килеүен аңлатыу һәм күрһәтеү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡы [ә], [ө], [ү] өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәткәндә, тәүҙә кескәйҙәрҙең телмәр ағзаларын (ирендәр, тештәр, тел, тамаҡ) төрлө позицияларға ҡуйып, күнегеүҙәр үткәреү, уларҙы дөрөҫ итеп тын алырға, күкрәктән һауаны кәрәгенсә сығара белергә өйрәтеү.

Йыл аҙағында балаларҙың бөтә өндәрҙе лә дөрөҫ әйтә белеүҙәренә өлгәшеү.

## Грамматик яҡтан һөйләмде дөрөҫ төҙөү

"Был нимә? ", "Был кем? ", "Нимә эшләйһең? ", “Был нимәһе?”, “Ҡайҙа?”, “Кемдә?” кеүек һорауҙарға аңлы рәүештә тулы яуап ҡайтарырға һәм баланың үҙенең дә ябай ғына һорауҙар бирә башлауына ирешеү;

Ябай ғына типик грамматик конструкцияларҙы (төҙөлмәләрҙе) һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү:

Был мин (һин, ул, бүлмә, ҡурсаҡ, сынаяҡ, әсәй, апай);

Минең әсәйем (ҡурсағым, ҡалағым, бармағым) - эйәлек заты ялғауын ҡулланыу менән таныштыра башлау.

"Ҡыҙыл туп, ҙур туп, бәләкәй ҡурсаҡ" ошоларға оҡшаш һүҙбәйләнештәрҙә исемдәрҙең сифатын аңлатҡан һүҙҙәрҙе мәғәнәһе буйынса дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеү;

Ул уйнай, беҙ уйнайбыҙ, ҡурсаҡ уйнай - эйә менән хәбәрҙе берлектә, күплектә яраштыра белеү менән таныштыра башлау;

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү**

Балаларҙы ябай һөйләмдәр ярҙамында әйтелгән үтенестәрҙе аңларға һәм үтәргә өйрәтеү:

Ҡурсаҡты ал. Тупты бир. Уйынсыҡтарҙы кәштәгә ҡуй. Ҡалаҡ ал. Сынаяҡты өҫтәлгә ҡуй.

"Мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар" алмаштарын ҡуллана белергә өйрәтә башлау;

Балаларҙы үҙҙәре күҙәткән, күргән ваҡиғалар хаҡында һәм шулай уҡ сюжетлы һүрәттәр буйынса өлкәндәрҙең ябай ғына һөйләгәнен аңлай белергә өйрәтеү.

Телмәрҙә 2-3 һүҙле һөйләмдәр ҡуллана, алмаштар, сифаттар һәм рәүештәр индереп һөйләмдәр төҙөй белергә өйрәтә башлау.

Диалогик телмәр өҫтөндә эш алып барыу.

Уйынсыҡтар менән бер - ике күренештән торған кескәй генә әҫәрҙе, йә уның өҙөгөн уйнарға өйрәтеү.

Балаларҙы матур әҙәбиәт һәм ауыҙ-тел ижады өлгөләре менән таныштырыу. Уйынсыҡтар йәки һүрәттәр ярҙамында еңел аңлашыла торған, бәләкәй күләмле хикәйәләрҙе, шиғырҙарҙы, әкиәттәрҙе тыңларға һәм уларҙың йөкмәткеһен аңларға күнектереү.

**I блок: Мин йәшәгән мөхит – 18 дәрес.**

**1. Танышыу - 8 дәрес.**

1. Был мин, һин – 3 дәрес.
2. Уйынсыҡтар - 2 дәрес.
3. Аш бүлмәһе - 3 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Мин, һин, ул, был, кем, нимә, нисек, ул, уйынсыҡ (-тар), туп (-тар), айыу, бүре, ҡуян, төлкө, ҡурсаҡ (-тар), бирә (-ләр), уйнай (-ҙар), күп, ашай (-ҙар), ишек, тәҙрә, өҫтәл, ултырғыс, ултыра(-лар), бүлмә(-һе, -лә), икмәк, һөт, һыу, май, эсә (-ләр).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Телмәр аппаратын төрлө торошҡа (позицияға) ҡуйып күнегеүҙәр үткәреү, дөрөҫ тын алырға һәм башҡорт теленең һуҙынҡыларын [а – ә], [о – ө], [у – ү], [ы – и], [э] дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре. Башҡорт телендәге үҙенсәлекле тартынҡыларҙың әйтелешенә телмәр аппаратын әҙерләү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Был кем? Һин кем? Ул кем?

Был мин, (һин, ул, ҡурсаҡ);

Был нимә? Ул нимә? Ул туп, (айыу, ҡуян, төлкө, бүре, тәҙрә, ишек, өҫтәл, ултырғыс).

Был туп (уйынсыҡ). Был бүлмә (уйынсыҡ, өҫтәл, ултырғыс).

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Был кем? Был – мин. Был – һин. Был - Азат.

б) Был – бүлмә. Бүлмәлә уйынсыҡтар. Был айыу (ҡуян, төлкө, бүре, тәҙрә, ишек, өҫтәл, ултырғыс). Бүлмәлә уйынсыҡтар күп.

в) Был нимә? Был - уйынсыҡ(-тар). Был - туп. Саша тупты бирә. Туптар күп.

г) Был - аш бүлмәһе. Был - ҫтәл. Был - ултырғыс. Илгиз ултыра. Ул сәй эсә. Мин һөт эсәм. Катя икмәк, май ашай.

**2. Ғаилә - 6 дәрес**

1. Минең әсәйем, атайым һәм туғандарым - 4 дәрес.

2. Ҡунаҡ саҡырам - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Әсәй (-ем), атай (-ым), ағай (-ым), апай (-ым), улар, беҙ, ҡартатай (-ым), өләсәй (-ем), ҡунаҡ (-тар), саҡыра(-лар), килә (-ләр), һаумы (-һығыҙ), рәхмәт, сәй, бал, ялай, тел, тәмле, бәләкәй, ҙур, бала (-лар).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Башҡорт өндәрен ишетә һәм әйтә белергә өйрәтеү өҫтөндә эште дауам итеү. Парлы тартынҡыларҙы сағыштырып, уларҙың айырмаһын билдәләргә, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар яңғырашын тыңлай һәм ишетә белергә өйрәтә башлау.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Был кем? Был - әсәй (атай, ҡартатай, өләсәй). Был - минең әсәйем (атайым, ҡартатайым, өләсәйем).

Был - минең апайым, ағайым.

Һаумы, атай, (әсәй, ҡартатай, ағай).

Һаумыһығыҙ, апай ( Айрат ағай).

Мин ҡунаҡ саҡырам. Булат ҡунаҡ саҡыра.

Атай сәй эсә. Ҡартатай, өләсәй сәй эсәләр. Сәй тәмле.

Ағай - ҙур, мин -ҙур. Беҙ - ҙур. Ҡустым бәләкәй. Һеңлем бәләкәй.

*Бәйләнешле телмәр.*

а) – Был кем?

- Был – минең ағайым. Ул  – Азамат.

 - Был кем? - Был – атай (әсәй, апай). - Һаумы, атай!

б) Минең атайым (әсәйем, ҡартатайым, өләсәйем, апайым, ағайым) бар.

в) Әсәйем ҡунаҡ саҡыра. -Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар! Улар сәй эсәләр. Сәй тәмле. Рәхмәт!

г) Был - минең ағайым. Ул - ҙур. Был - минең апайым. Апайым - ҙур. Мин - бәләкәй.

**3. Тән өлөштәре - 4 дәрес.**

1. Ҡурсаҡтың тән өлөштәре - 2 дәрес.

2. Минең бармаҡтар - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Баш, күҙ (-ҙәр), танау, ауыҙ, теш (-тәр), аяҡ (-тар), ҡул (-дар), ҡурсаҡ (-тар), бармаҡ (-ғым, -тар), күп.

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Өндәрҙе ишетә һәм әйтә белеү, тартынҡыларҙың ҡуйылышын, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар айырмаһын билдәләү өҫтөндә эште дауам итеү. Дөрөҫ тын алыу, тауышты көсәйтеп, кәметеп сығарыу күнекмәләре.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Айгөл - ҡурсаҡ.

Был ҡурсаҡтың нимәһе?

Был ҡурсаҡтың башы (ҡулдары, аяҡтары, бармаҡтары, башы, танауы, ауыҙы, күҙҙәре, тештәре).

Бармаҡтарым күп. Был бармағым ҙур. Был бармағым бәләкәй.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Был минең ҡурсағым. Ул - Айгөл. Был - Айгөлдөң башы. Был – ҡулдары. Был – аяҡтары. Был минең - ҡулдарым, аяҡтарым. Минең бармаҡтарым ҙур. Ҡурсаҡтың бармаҡтары бәләкәй.

б) Был бармағым - атайым, был бармағым - әсәйем, был бармағым - өләсәй, был бармағым - ағайым, был бармағым - мин.

## II блок. Егәрленең - ҡулы алтын - 20 дәрес.

### 1. Һауыт-һаба - 6 дәрес.

1.Сәй эсәбеҙ, бутҡа ашайбыҙ - 2 дәрес.

2. Ҡурсаҡтарға һауыт - һаба һайлайыҡ - 2 дәрес.

3. Йәшелсәләр – 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Ҡалаҡ (-тар), сәйнүк, сынаяҡ (-тар), самауыр, кәстрүл, тәрилкә (-ләр), бешерә, аш, кишер, һуған, ҡыяр, кәбеҫтә, сөгөлдөр, тарата (-лар), ҡуя ( -лар), бутҡа, көршәк, оҡшай (-ҙар).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Телмәр аппаратын нығытыу өҫтөндә эш. [А-ә], [о-ө], [у-ү] өндәрен дөрөҫ әйтергә, уларҙы ишетә һәм айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Телмәр ағышында дөрөҫ тын алырға һәм тынды сығарырға өйрәтеү. Тартынҡыларҙың ҡуйылышы өҫтөндә эште дауам итеү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Ул, (әсәйем, өләсәйем) ҡалаҡтар тарата.

Әсәйем, (ағайым, апайым) өҫтәлгә сынаяҡтар ҡуя.

Балалар (ҡунаҡтар, әсәйем, атайым, ҡартатайым) сәй эсәләр.

Өҫтәлдә самауыр, (сәйнүк, сынаяҡтар, ҡалаҡтар).

Мин бутҡа (аш, кишер, ҡыяр, кәбеҫтә, һуған) ашайым.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Өҫтәлдә самауыр. Лилиә ҡалаҡтар тарата. Ләлә сынаяҡтар ҡуя. Диләлә сәйнүк. Балалар сәй эсәләр. Сәй тәмле.

б) Көршәктә бутҡа. Беҙ бутҡа ашайбыҙ. Бутҡа тәмле! Айгөл аш (кишер, ҡыяр, кәбеҫтә) ашай.

в) Ҡурсаҡ Айгөлдә ҡалаҡ. Был көршәк. Был сәйнүк. Был самауыр. Самауыр ҙур, сәйнүк бәләкәй. Улар ҡурсаҡҡа оҡшай.

г) Әсәйем аш бешерә. Ул кәстрүлгә кишер, кәбеҫтә, сөгөлдөр һала.

2. **Аҙыҡ-түлек - 6 дәрес.**

1. Иртәнге аш - 4 дәрес.

2. Бутҡа тәмле - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Аш, ашай (-ҙар), күңелле, һөт, килә (-ләр), эҫе, һыуыҡ, ярата (-лар).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

[Ө], [ү], [ә] һуҙынҡыларының ҡуйылышы һәм әйтелеше өҫтөндә эште дауам итеү. Тартынҡыларҙы [б – п], [д – т], [ғ – ҡ], [г – к] ишетә һәм дөрөҫ әйтә белеү өҫтөндә эште дауам итеү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Балалар, (ҡурсаҡтар) аш бүлмәһендә.

Улар икмәк, (бутҡа) ашайҙар.

Улар һөт, (сәй) эсәләр.

Көршәктә (сәйнүктә, сынаяҡта) нимә?

Көршәктә бутҡа (аш, һөт).

Сәйнүктә (сынаяҡта) сәй, (һөт).

Кем бутҡа ярата? Балалар бутҡа ярата.

Бутҡа (аш, сәй, һөт) ниндәй?

Сәй-эҫе. Бутҡа - тәмле.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Аш бүлмәһендә балалар. Улар аш ашайҙар. Зәйнәп бутҡа ашай. Роза сәй эсә.

б) Был аш бүлмәһе.

- Һаумыһығыҙ, балалар!

- Һаумыһығыҙ!

- Бутҡа тәмлеме?
- Бутҡа тәмле!

в) - Кем һөт ярата? Булат һөт ярата. Ул һөт эсә.

г) Беҙҙә ҡунаҡтар. Өҫтәлдә сынаяҡтар, ҡалаҡтар. Беҙ сәй эсәбеҙ. Беҙгә күңелле.

3. **Кейем-һалым - 8 дәрес.**

1. Беҙ кейенәбеҙ - 2 дәрес.

2. Балалар урамға сығалар - 4 дәрес.

3. Күлдәктәр ниндәй төҫтә? - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Кейем(-дәр), тун, (-дар) күлдәк (-тәр), салбар (-ҙар), кейә (-ләр), сыға (-лар), күк, ҡыҙыл, матур, һары, йылы, итек (-тәр), быйма (-лар), бүрек (-тәр), яулыҡ (-тар), урам (-дар).

*Фонемалар эш:*

Телмәр аппаратын үҫтереүгә күнекмәләр. Тартынҡыларҙы һәм һуҙынҡыларҙы ишетә, дөрөҫ әйтә һәм айыра белергә өйрәтеү өҫтөндәге эште дауам итеү. [А-ә], [у-ү], [ы-и], [о-ө] өндәренең ҡалынлығын һәм нәҙеклеген айырыуға күнекмәләр.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Был нимә? Был бүрек (яулыҡ, итек, быйма).

Ул нимә кейә? Ул бүрек (яулыҡ, итек, быйма) кейә.

Атай (әсәй, апай) бүрек (яулыҡ, итек, быйма) кейә.

Күлдәк (тун, яулыҡ) матур (күк, ҡыҙыл,һары, йылы).

Тун (күлдәк, салбар, итек, быйма) - кейемдәр.

Бүрек, яулыҡ,түбәтәй –кейемдәр.

Балалар урамға сығалар.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Мин күлдәк кейәм. - Самат нимә кейә? - Самат тун кейә. - Сабир нимә кейә? - Ул салбар, күлдәк кейә. Саша тун кейә.Тун, күлдәк, салбар - кейемдәр.

б) Марат итек кейә. Мансур бейма кейә. Быйма йылы. Балалар урамға сығалар.

в) Өләсәйемдә яулыҡ. Яулыҡ күк. Күлдәк ҡыҙыл. Итек һары. Ул йылы.

г) Ҡурсаҡ Айгөл  күлдәк, (салбар, тун) кейә. Аяҡтарында быйма. Башында бүрек. Быйма, бүрек йылы.

д) Ҡурсаҡтар нимә кейәләр? Ҡурсаҡтар күлдәктәр кейәләр. Күлдәктәр ниндәй? Күлдәктәр ҡыҙыл, күк, һары, йәшел.

## III блок. Тыуған яғым - алтын бишек - 18 дәрес.

### 1. Хайуандар һәм ҡоштар  донъяһы - 8 дәрес.

1. Минең этем Аҡбай - 1 дәрес.
2. Бесәй - бесәй - бес - 1 дәрес.
3. Йорт хайуандары - 2 дәрес.
4. Нимә урманда йәшәй?  - 2 дәрес.
5. Тауыҡ менән әтәскә ем бирәбеҙ - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Эт (-ем), өрә (-ләр) бесәй (-ҙәр), кескәй, йомшаҡ, мыр - мыр, йырлай (-ҙар), ем, ҡуян (-дар), айыу (-ҙар), көслө, тауыҡ (-тар), әтәс (-тәр), шаян.

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Телмәр аппаратын камиллаштырыу.   [А – ә], [о – ө], [ы – и], [у – ү] өндәренең айырмаһына, дөрөҫ тын алыу, тын сығарыу, интонация менән һөйләү өҫтөндә эште дауам итеү.

Модель-схемалар ярҙамында өндәрҙе билдәләргә һәм һүҙҙә уларҙың урынын (башында, аҙағында) табырға өйрәтеү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Бәләкәй эт, (бесәй, ҡуян).

Бесәй бәләкәй, йомшаҡ. Бесәй уйнай, йырлай.

Айыу (-ҙар) көслө; Ҡуян йомшаҡ, матур.

Тауыҡ (әтәс) ем ашай.

Нимә ҡунаҡҡа килгән?

Бесәй (эт, әтәс, тауыҡ, ҡуян, айыу) ҡунаҡҡа килгән.

Эт (ҡуян, бесәй) ниндәй? Эт (ҡуян, бесәй) бәләкәй, йомшаҡ.

Айыу ниндәй? Айыу ҙур, көслө.

Эт нимә эшләй? Эт өрә.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Минең этем бар. Исеме Аҡбай (Аҡтүш, Тузик). Ул бәләкәй, йомшаҡ. Аҡбай өрә.

б) Был - бесәй. Уның исеме Мыр-мыр. Мыр-мыр бәләкәй, йомшаҡ. Ул шаян. Мыр - мыр йырлай. Бесәй һөт ярата.

в) Был – тауыҡ. Был – әтәс. Мин тауыҡҡа (әтәскә) ем бирәм. Тауыҡ ем ашай. Әтәс ем ашай. Улар шатлана.

2. **Тылсымлы тәбиғәт - 10** дәрес.

1. Ағастар үҫә - 2 дәрес.
2. Бүлмәләге сәскәләр - 1 дәрес.
3. Йәшелсә-емештәр - 1 дәрес.
4. Һары көҙ - 1 дәрес.
5. Ҡар яуа - 1 дәрес.
6. Шыршы байрамы – 1 дәрес.
7. Балыҡ йөҙә - 1 дәрес.
8. Яҙ килә - 1 дәрес.
9. Әсәйҙәр байрамы - 1 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Ағас (-тар), ҡайын (-дар), шыршы (-лар), япраҡ(-тар), йәй, сәскә (-ләр), алма (-лар), кишер (-ҙәр), ҡыяр (-ҙар), һуған (-дар), ямғыр (-ҙар), яуа (-лар), ҡар ( –ҙар), ҡыш, килә (-ләр), сана, шыуа (-лар), Яңы йыл, байрам (-дар), бүләк (-тәр), Ҡыш бабай, балыҡ (-тар), йөҙә (-ләр), яҙ, ирей(-ҙәр), ҡояш, бейей(-ҙәр), бөгөн, сыға-(лар), үҫә (-ләр), йыр (-ҙар), йырлай (-ҙар), һыу (-ҙар).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Телмәр аппаратының үҫешенә булышлыҡ итеүсе артикуляция күнекмәләре. Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙе ҡушып әйтеп, ижектәр яһалышына әҙерлек алып барыу. [Ғ] – [г], [ҡ] – [к], [ҙ] – [з], [ҫ] – [с], [һ] – [х] өндәренең айырмаһын ишетеүгә һәм билдәләүгә юнәлтелгән эште дауам итеү.

Модель-схемалар ярҙамында өндәрҙе билдәләргә һәм һүҙҙә уларҙың урынын (башында, аҙағында) табырға өйрәтеү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Был нимә? Был ағас (япраҡ, шыршы, сәскә, ҡайын).

Был ниндәй ағас? Был - ҡайын (шыршы).

Был нимә япрағы? Был – (ҡайын, шыршы, сәскә) япрағы.

Сәскә ниндәй ? Сәскә ҡыҙыл (һары, күк, матур).

Был - ҡыяр, (кишер, һуған, алма).

Ямғыр яуа. Япраҡтар һары.

Көҙ (ҡыш, яҙ, Яңы йыл) килде.

Урамда ҡар. Айҙар (ҡурсаҡ) сана шыуа.

Был – балыҡ. Балыҡ нимә эшләй? Балыҡ һыуҙа йөҙә.

Бөгөн шыршы (әсәйҙәр) байрамы.

Атайым, (өләсәйем, Ҡыш бабай ) бүләк бирә.

Ҡар ирей. Япраҡ сыға.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Был ниндәй ағас? Был- ҡайын. Ҡайындар ҙур.

б) Бүлмәлә сәскәләр. Сәскәләр ниндәй ? Сәскәләр ҡыҙыл (һары, күк, матур).

в) Ҡыяр, кишер, һуған баҡсала үҫә. Ҡуян кишер ярата. Мин алма яратам.

г) Урамда һыуыҡ. Ямғыр яуа. Беҙ итек кейәбеҙ. Ағастарҙың япрағы һары. Көҙ килде.

д) Ҡар яуа. Урамда һыуыҡ. Ҡыш килде. Беҙ йылы кейенәбеҙ.

е) Ҡар яуа. Балалар сана шыуалар. Улар шатлана.

к) Һаумы, Яңы йыл! Шыршы матур. Шамил йыр йырлай. Ҡыш бабай бүләк бирә.

л) Был – балыҡ. – Балыҡ нимә эшләй? - Балыҡ һыуҙа йөҙә.

м) Ҡояш йылыта. Ҡар ирей, һыуҙар аға. Яҙ килде.

н) Бөгөн әсәйҙәр байрамы. Балалар йыр йырлай. Азат бейей. Әсәйҙәр шатланалар.

**IV блок. Башҡортостан - минең төйәгем - 6 дәрес.**

**1. Тыуған илем - Башҡортостан - 6 дәрес.**

1. Ҡурсаҡтар байрамға килгән - 1 дәрес.
2. Өләсәйҙә ҡунаҡта - 1 дәрес.
3. Башҡорт халыҡ уйынсыҡтары - 1 дәрес.
4. Башҡорт халыҡ уйындары - 1 дәрес.
5. Бәпесте уйнатабыҙ (ауыҙ-тел ижады: һикерткестәр, һөйҙөрткөстәр, һамаҡтар, һанашмаҡтар) - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Камзул (-дар), ҡашмау (-ҙар), түбәтәй (-ҙәр), сәк-сәк, ҡоймаҡ (-тар), бешерә (-ләр), дөңгөр (-ҙәр), шылтырай(-ҙар), ҡаса (-лар), тота (-лар), югерә (-ләр), йоҡлай (-ҙар), һикерә (-ләр).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Телмәр аппаратын үҫтереү һәм ныҒытыу маҡсатында артикуляция күнекмәләре үткәреү. Пауза, интонация, ритм өҫтөндә эште дауам итеү. Һүҙҙәрҙә өндәрҙең урынын (башында, уртаһында, аҙағында) билдәләүгә күнекмәләр.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Ҡурсаҡ нимә кейгән?

Ҡурсаҡ камзул (ҡашмау, түбәтәй) кейгән.

Таһирҙың (ҡурсаҡтың) башында түбәтәй.

Өләсәй нимә бешерә?

Өләсәй сәк-сәк (ҡоймаҡ) бешерә.

Дөңгөр шылтырай.

"Бесәй - сысҡан" уйыны уйнайбыҙ.

Бәпесте йоҡлатам (бейетәм, һикертәм).

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Бөгөн байрам. Ҡурсаҡ Айгөл камзул кейгән. Башында - ҡашмау. Таһирҙың башында - түбәтәй.

б) Өләсәйҙә ҡунаҡтар. Өҫтәлдә сәк-сәк, ҡоймаҡ. Беҙ сәй эсәбеҙ.

в) Был - дөңгөр. Дөңгөр шылтырай. Балалар дөңгөр уйнаталар.

г) "Бесәй- сысҡан" уйынын уйнайбыҙ. Нур бесәй була. Марат сысҡан була. Марат ҡаса. Нур Маратты тота. Сысҡан ҡаса.

д) Һанашмаҡ: Тауыҡ, әтәс, сыпсыҡ, береҥ ҡал, береҥ сыҡ!

Һикерткес: Һәт-һәт, һәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә,
Тиҙҙән үҫеп етәр ул,
Югереп тә китәр ул!

Һөйҙөрткөс: Сәпәкәй, сәпәкәй, сәпәкәй,
Бигерәк матур бәпескәй!
Үҙе йомро йомғаҡтай,
Йомшаҡ ҡына себештәй.

Әлли итер был бала,
Бәлли итер был бала,
Атаһын да, әсәһен дә
Ҡыуандырыр был бала.

Һамаҡ: Аҡ тирәк, күк тирәк,
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

**Халыҡ ижады өлгөләре һәм әҙәби әҫәрҙәр:**

*Уҡыу һәм һөйләү өсөн:*

"Кем көслө?", "Эт нисек үҙенә хужа тапҡан?", "Айыу һәм бал ҡорттары", "Сос малай".

*Ятлау өсөн:*

Шиғырҙар: "Мин ҡуян" (Г. Юнысова), "Иркә бесәй " (Ф. Рәхимғолова), "Шыршыҡай", "Ҡыш бабай" (М. Бикбова), "Аҡбай дуҫ" (Р. Янбулатова), «Бесәй балаһы» (Ҡ. Әлибаев), «Аҡ ҡуян» (М.Бикбова), «Сәп-сәп-сәпәкәй» (А. Йәғәфәрова).

**Йыл аҙағында балалар:**

- ололарҙың һорауын аңлап, уға дөрөҫ яуап бирә беләләр;

- башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡы өндәрен ишетә, әйтә, айыра беләләр;

- башҡорт теленең бөтә тартынҡы өндәрен дә ишетә, әйтә, айыра беләләр;

- һүҙҙәрҙә өндәрҙең урынын (башында, аҙағында) билдәләй беләләр;

- һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлә, ижектәрҙән һүҙ яһай беләләр;

- ҡыҫҡа күләмле халыҡ ижады һәм әҙәби әҫәрҙәрҙе яттан һөйләй, йәки улар буйынса иркен әңгәмәләшә беләләр;

- үҙенең исем - фамилияһын, ғаилә ағзаларының атамаларын әйтә беләләр.

## Икенсе йылда башҡорт телен өйрәтеү өсөн п р о г р а м м а

*(мәктәпкә әҙерлек төркөмө - 6 йәштән 7 йәшкә тиклемге балалар)*

Был төркөмдә 1 сентябрҙән 1 июнгә тиклем башҡорт теленән аҙнаға ике тапҡыр 25-30 - ар минутлыҡ дәрестәр үткәрелә.

**Һүҙлек эше**

Һәр дәрестә 4-5 яңы һүҙ алына һәм төрлө грамматик конструкцияларҙа ҡулланыла.

Балаларҙың йәш кимәленә бәйле дөйөм үҫеше арта барғанлыҡтан, уларҙың башҡалар һөйләгәндә аңлауы көсәйә һәм һүҙ байлығы арта төшә:

транспорт төрҙәренең (еңел машина, йөк машинаһы, машина өлөштәренең (тәгәрмәс, ишек); үҫемлектәрҙең (саған, үлән, бойҙай, ботаҡ, тамыр), йәшелсә-емештәрҙең (сейә, сөгөлдөр, картуф) атамаларын; йорт хайуандарының һәм ҡоштарының (ат, һыйыр, ҡаҙ) һәм уларҙың балалары исемдәрен (ҡолонсаҡ, быҙау, бәпкә) аңлатҡан һүҙҙәр менән байый; ҡырағай хайуандар (бүре, төлкө), уларҙың ҡайҙа йәшәүҙәрен (урманда, өй эргәһендә) әйтә белә;

балалар үҙ ғаилә ағзаларының хеҙмәте менән ҡыҙыҡһына башлай һәм уларҙың эшен, һөнәрен әйтә белә: атайым трактор йөрөтә, ул -

тракторсы, әсәйем һыйыр һауа - ул һауынсы, атайым дауаханала эшләй, ул - табип;

баҡса хеҙмәткәрҙәренең эшен (тәрбиәсе әкиәттәр һөйләй, уйын өйрәтә; йыйыштырыусы апай бүлмәне йыуа, аш ашата) сағылдырған һүҙҙәрҙе, кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте белдергән (ярҙам итергә, шатланырға, ҡыуанырға) үткән, хәҙерге ҡылымдарҙы ҡулланырға өйрәтеү;

ҡоштар (ҡарға, күгәрсен) осалар, ҡошсоҡтар сығара;

һауа торошоноң ниндәй булыуын (ямғыр яуа, ҡояш йылыта) әйтә белеүҙәрен өйрәтеүҙе, йыл миҙгелдәре менән таныштырыуҙы дауам итеү:

Көҙ. Япраҡтар ҡойола. Ямғыр яуа. Беҙ йәшелсә йыябыҙ.

Ҡыш. Ҡар яуа. Беҙ йылы кейемдәр кейәбеҙ. Балалар ҡар бабай яһайҙар. Сана шыуалар.

Яҙ. Ҡар ирей. Үләндәр үҫә. Сәскәләр күренә. Ағастар япраҡ яра.

Йәй. Ҡояш ҡыҙҙыра. Ағастарҙа йәшел япраҡтар. Балалар һыу инәләр. Мин балыҡ тотам.

**Фонемалар өҫтөндә эш**

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре әйтелеше өҫтөндә эште дауам итеү.

Балаларҙы тынды дөрөҫ алырға, тауыш менән идара итә белергә өйрәтеүҙе, артикуляция аппаратын нығытыуға һәм фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән эштәрҙе дауам итеү. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙың әйтелешен үҙләштереүҙе нығытыу өҫтөндә эш башҡарыу.

**Грамматик яҡтан һөйләмде дөрөҫ төҙөү"**

Исемең нисек? Ҡайҙа тора? Ниндәй төҫтә? Нисә туп, ҡурсаҡ? Нимә эшләйҙәр? Нимә эшләйһең?" һорауҙарына аңлы яуап биреү;

Исемдәрҙә, алмаштарҙа эйәлек заты ялғауҙарын дөрөҫ ҡуллана белеү: *минең әсәйем, ҡурсағым;*

"Ҡалын, нәҙек, тәпәш, бейек, тар, киң, әсе, сөсө" сифаттарын, "алыҫ, яҡын, түбән, юғары, уңда, һулда" рәүештәрен аңлап, үҙ-аллы телмәрҙә ҡуллана белеү;

әйберҙең төрлө өлөштәрен атарға, уларҙың сифаттарын һәм үҙенсәлектәрен, нимәнән эшләнгәнлеген әйтә белеү *(өй ҙур, бейек, таштан эшләнгән);*

дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә телмәрҙә ҡуллана белеү *(йорт хайуандары, ҡоштар, өҫ кейемдәре һәм башҡалар);*

әйберҙәрҙе төҫө, ҙурлығы, күләме һәм башҡа билдәләре буйынса табып килтерә *(ҡыҙыл тупты миңә бир, ҙур тупты ал),* уларҙың урынын билдәләй белергә *(йөк машинаһын яҡын ҡуй, ҙур ҡурсаҡты кәштәнән ал, айыуҙы карауатҡа һал),* кешеләрҙең, хайуандарҙың хәрәкәтен күрһәтеп, әйтә белеү.

Һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштыра башлау: *ярҙам-сы, трактор-сы, төҙөү-се;*

Тән өлөштәре менән танышыу дауам итә: *күҙ (-ҙәр), ҡолаҡ-тар), бит, танау, ауыҙ;*

Ун эсендәге һандарының әйтелеше һәм телмәрҙә ҡулланыуы менән таныштырыу;

*"Менән, ә"* бәйләүестәрен телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү;

*"-Ма, -мә"* юҡлыҡ киҫәксәләре менән таныштырыу;

Исемдәрҙе, алмаштарҙы ҡылымдар менән яраштырып әйтергә өйрәтеү: *мин йырлайым. Айрат бейей. Балалар туп уйнайҙар.*

Хайуандарҙың, ҡош-ҡорттарҙың һәм уларҙың балаларының исемдәренә күплек ялғауҙары ҡушып, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу: *(һыйыр - һыйырҙар, быҙау (-ҙар), бәпкә (-ләр).*

Һөйләшкәндә һөйләмдең тиң киҫәктәрен файҙалана белеү: *ҡурсаҡтар итек, быйма кейәләр.*

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү**

Балаларҙы һүрәттәргә, уйынсыҡтарға, иллюстрацияларға ҡарата тәрбиәсе биргән һорауҙарға яуап ҡайтарырға өйрәтеү.

Әкиәттәрҙе, кескәй күләмле хикәйәләрҙе, шиғырҙарҙы уҡығанда йәки һөйләгәндә тыңлай белергә өйрәтеү. Тәрбиәсе биргән һорауҙар ярҙамында (2-3 һорау) әҫәрҙең йөкмәткеһенә төшөнөү һәм ваҡиғаларҙың барышын һиҙемләй белеү.

Балаларҙы хикәйә төҙөп, һөйләй белергә әҙерләү: ҡаралған һүрәттәр йәки уйынсыҡтар хаҡында 3-4 һөйләмдән торған хикәйәләрҙе тәрбиәсе артынан ҡабатлатыу.

Таныш әкиәттәрҙе, хикәйәләрҙе ролдәргә бүлеп һөйләү: "Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?", "Ҡуяндың ҡолағы ниңә оҙон?", "Кем көслө?" - башҡорт халыҡ әкиәттәре.

Ҙур булмаған шиғырҙарҙы тасуири итеп яттан һөйләй, тирә - йүндәге күренештәргә иғтибарҙы туплай белергә өйрәтеү.

**I блок: Мин йәшәгән мөхит - 20 дәрес.**

**1. Танышыу - 8 дәрес.**

1. Исемең нисек? - 1 дәрес.
2. Уйын бүлмәһе йыһаздары - 1 дәрес.
3. Йоҡо бүлмәһендә - 1 дәрес.
4. Төшкө аш - 2 дәрес.
5. Ҡала урамдары буйлап - 1 дәрес.
6. Ҡурай моңо - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Таныш (-тыҡ), тәрбиәсе, тора (-лар), бейек, кәштә, өйрәтә (-ләр), төшкө аш, ҡурай (-ҙар), ҡурайсы, малай (-ҙар), ҡыҙ (-ҙар), күңелле, дауахана, табип (-тар), дауалай (-ҙар), ут, ян (-а, -ды), сыҡ (-ға, -ғабыҙ).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Тынды дөрөҫ алырға, тауыш менән идара итә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен [ә], [ө], [ү], [ғ], [ҡ], [ҙ], [ҫ], [һ], [ң] ишетә, әйтә, айыра белеү өҫтөндәге эште дауам итеү. Уларҙың һүҙ башында, уртаһында, аҙағында килгән осраҡтарына күнегеүҙәр үткәреү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

- Һинең исемең нисек? - Минең исемем - Айгөл.

- Беҙ таныштыҡ!

Тәрбиәсе уйын өйрәтә.

Илдар ашамай (уйнамай, ултырмай).

Азат (атайым, ағайым, мин, ул) - ҡурайсы.

Азат (атайым, ағайым, мин, ул) ҡурайҙа уйнай.

- Һин кем? Мин - ҡыҙ (малай), атай (әсәй).

Дауаханала табибтар эшләй.

Улар балаларҙы дауалай.

Теш табибы тештәрҙе дауалай.

Был – светофор.

Ниндәй төҫлө ут яна?

Ҡыҙыл, һары, йәшел төҫлө ут яна.

Юл аша сыҡ (сығабыҙ)!

Һин кем булаһың?

Мин табип (ташсы, ҡурайсы, бейеүсе, тәрбиәсе) булам.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) - Һинең исемең нисек?

- Минең исемем - Айнур.

- Мин - Гүзәл.

- Беҙ таныштыҡ! *Йәки:*

- Һинең исемең нисек?

- Мин – Оля!

- Мин – Азат! Мин малай.

- Ә мин - ҡыҙ.

б) Зилә ҡурсаҡ менән уйнай. Айһылыуҙа туп. Булат машина менән уйнай. Балаларға күңелле!

в) Был - уйын бүлмәһе. Беҙ уйнайбыҙ.

- Кәштәлә нимәләр бар?

- Кәштәлә уйынсыҡтар бар.

- Машина ҡайҙа тора? - Машина өҫтәлдә тора. Тәрбиәсе уйын өйрәтә.

г) Был - балалар баҡсаһы. Был - йоҡо бүлмәһе. Балалар йоҡлай. Карауаттар күп. Илшат йоҡламай. Ул бармаҡтары менән уйнай.

д) Беҙ – дауаханала. Дауаханала табиптар эшләй. Улар балаларҙы дауалай. Ул – теш табибы.

е) Беҙ – урамда. – Юл аша сығабыҙ! Светофорҙы ҡара! Ниндәй төҫлө ут яна?

- Ҡыҙыл төҫлө ут яна!

- Туҡтағыҙ! Бына йәшел ут янды. Юл аша сығырға була.

ж) Ҡартатайым ҡурай уйнай. Ул - ҡурайсы.

- Дилә нимә эшләй?

- Дилә бейей. Ул матур бейей.

**2. Ғаилә - 6 дәрес**

1. Өлкәндәр һәм балалар - 2 дәрес.

2. Күңелле байрам - 2 дәрес.

3. Әсәйемә бүләк - 2 дәрес

*Һүҙҙәр:*

Үҫ (-ә, -кәс, -әләр), татар, башҡорт, рус, кейем (-е, -дәр), Ҡыш бабай, китап-(тар), тыуған көн, йырлай (-ҙар), татыу, уңған, көслө.

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙе бергә ҡушып дөрөҫ әйтеү күнекмәләре аша, ижектәр яһалышына әҙерлек алып барыу. [Ғ - г], [ҡ – к], [ҙ – з], [ҫ – с], [һ – х], [ң – н] өндәренең айырмаһын ишетә һәм билдәләй алыу өҫтөндә эште дауам итеү.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Бала үҫкәс, апай (ағай) була.

Бала үҫкәс, әсәй (атай) була.

Тыуған көн.

Тыуған көн байрамы.

Шыршы байрамы.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Балалар үҫкәс, ҙур (көслө, матур, уңған) булалар. Мин үҫкәс, ағай булам. Мин ҡурайсы булам. Һеңлем Зилә бейеүсе була.

*Йәки:*

Был - минең атайым, әсәйем, олатайым, өләсәйем. Был - беҙҙең ғаилә. Беҙ ғаиләлә биш кеше. Мин малай (ҡыҙ) кеше. Өлкәндәр – дүртәү. Беҙҙең ғаилә - ҙур, татыу.

б) Бөгөн шыршы байрамы. Байрамда күңелле. Мансур күлдәк (камзул, салбар) кейгән.

- Мансур кем менән бейей? - Мансур Ҡыш бабай менән бейей.

*Йәки:*

Беҙҙә байрам. Һеңлемдең тыуған көнө. Илдар һеңлемә туп бирә. Илшат ике китап бирә. Бүләктәр матур.

е) Был - әсәйемә бүләк. - Был ниндәй сәскә? -Был - ҡыҙыл сәскә. - Минең әсәйем ҡыҙыл сәскә ярата. Мин әсәйемде яратам.

3. **Тән өлөштәре - 6 дәрес.**

1. Ҡурсаҡтың күҙҙәре, ҡолаҡтары - 2 дәрес.
2. Буратино - беҙҙең ҡунаҡ - 2 дәрес.
3. Беҙ йыуынабыҙ - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Ҡолаҡ (-тар), сәс (- тәр), күҙ (-ҙәр), һикерә (-ләр), көлә (-ләр), күрә (-ләр), ишетә (-ләр), һөртә (-ләр), таҫтамал (-дар), һаҡла.

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Тынды дөрөҫ алырға, тауыш менән идара итә белергә өйрәтеүҙе, [а – ә], [ы – и], [у – ү], [о – ө] ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларын айырыу өҫтөндәге эштәрҙе дауам итеү. Һүҙҙә өндәрҙең урындарын табыу.

Һүҙҙе ижектәргә бүлеү күнекмәләре.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Күҙ күрә. Күҙҙәр күрәләр.

Ҡолаҡ ишетә. Ҡолаҡтар ишетәләр.

Ҡулдар ҡалаҡ тоталар. Аяҡтар югерәләр, атлайҙар.

Башын (битен, ҡулдарын, аяҡтарын) йыуа (һөртә).

Таҫтамал йомшаҡ.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Был ҡурсаҡтың ҡолаҡтары. Был - сәстәре. Был - күҙҙәр. Күҙҙәр - икәү. Ҡолаҡтар - икәү. Ҡолаҡтар ишетәләр. Күҙҙәр күрәләр.

б) Буратино - беҙҙең ҡунаҡ. Ул һикерә, көлә. Буратино шатлана.

в) Балалар йыуыналар. Булат ҡулдарын йыуа. Айгөл битен йыуа. Таҫтамал йомшаҡ.

г) Күҙҙәр күрәләр. Ҡолаҡтар ишетәләр. Уларҙы һаҡла!

**II блок. Егәрленең - ҡулы алтын - 22 дәрес.**

**1. Көнкүреш әйберҙәре - 4 дәрес.**

1.Айҙар бөгөн ҡунаҡ көтә - 2 дәрес.

2. Минең бүлмәм - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Юрған (-дар), мендәр (-ҙәр), диван (-дар), иҙән (-дәр), тәҙрә (-ләр), ишек (-тәр), саң, һөртә (-ләр), ярҙамсы(-лар), ҡуя (-лар), бөгөн, һала (-лар).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Тынды дөрөҫ алырға, тауыш менән идара итә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Артикуляция күнекмәләре. [Ң], [ҡ], [ҙ], [ғ], [ҫ], [һ] тартынҡы өндәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләре.

Һүҙҙә өндәрҙең килеү тәртибе менән таныштырыу һәм уларҙы схемалар ярҙамында билдәләү күнекмәләре.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Иҙән йыуа (-лар).

Саң һөртә (-ләр).

Сәскә ҡуям (ҡуялар).

Төшкө ашҡа әҙерләнәбеҙ.

Беҙ – ярҙамсылар.

Ҡустымдың тыуған көнө.

- Тыуған көнөң менән ҡотлайым (-быҙ)!

- Бүләктәр ҡайҙа?

- Тәҙрә нисәү ? Тәҙрә икәү, өсәү.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Айҙарҙың бөгөн тыуған көнө. Ул ҡунаҡтар саҡырған. Өләсәйем бутҡа бешерә. Ағайым иҙән йыуа. Дилә саң һөртә. Мин өҫтәлгә сәскә ҡуям.

б) Беҙ - ярҙамсылар. Айгөл ҡалаҡтар тарата. Наташа сынаяҡтар ҡуя. Наза апай бутҡа һала. Беҙ төшкө ашҡа әҙерләнәбеҙ.

в) Ҡустымдың тыуған көнө. Диванда атайым, әсәйем ултыра. Ҡустым ултырғыста. Бесәй Мыяуҡай иҙәндә. - Тыуған көнөң менән ҡотлайбыҙ!

- Бүләктәр ҡайҙа? - Бүләктәр өҫтәлдә.

г) Бүлмәмдә карауат, өҫтәл, ултырғыс бар. Карауатта - мендәр, юрған. Мин карауатта йоҡлайым. Уйынсыҡтар - кәштәлә. Мин өҫтәлдә уйнайым.

д). Был - минең бүлмә. Бүлмәлә тәҙрә - икәү, ишек - берәү. Ултырғыстар - өсәү.

2. **Аҙыҡ-түлек - 6 дәрес.**

1. Өләсәйҙә ҡунаҡта - 2 дәрес.

2. Бойҙай ҡайҙа үҫә? - 2 дәрес.

3. Ҡулдарында уйнай ҡоралы! - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

Бәлеш, ҡорот, эшләй (-ҙәр), шифалы, ялан (-дар), бойҙай (-ҙар), ярма, комбайн (-сы), балта(-лар), бысҡы (-лар), өй (-ҙәр), быса (-лар), ҡырҡа (-лар).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Телмәр аппаратын үҫтереүгә, дөрөҫ тын алыуға, тауыштың темпы, көсө менән идара итә белеүгә күнекмәләр. Башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡыларын [ә], [ү], [ө] ишетә, айыра һәм дөрөҫ әйтә белеү эшен дауам итеү.

Һүҙҙә өндәрҙең килеү тәртибе менән таныштырыу һәм уларҙы схемалар ярҙамында билдәләү күнекмәләре. Ҡаты һәм йомшаҡ тартынҡылар билдәләнеше (был эште ойоштороуҙа «Башҡорт телен өйрәнәбеҙ» методик ҡулланмаһына күҙ һалырға тәҡдим ителә, авторы Нафиҡова З.Ғ., БМҮИ нәшриәте, 2005, 95 –се бит).

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Ҡорот әсе, шифалы. Өләсәйем ҡорот эшләй.

Яланда бойҙай үҫә.

Бойҙайҙан ярма эшләйҙәр.

Комбайн бойҙай йыя.

Атайым балта менән ағас ҡырҡа.

Атайым бысҡы менән ағас быса.

*Бәйләнешле телмәр:*

а) Өләсәйем бәлеш бешерҙе. - Бәлеш тәмлеме? - Тәмле! Беҙ бәлеш яратабыҙ.

б) Өләсәйем ҡорот эшләне. Ҡорот - әсе, шифалы. - Кем ҡорот ярата?

в) Яланда бойҙай үҫә. Бойҙайҙан ярма эшләйҙәр. Ярманан бутҡа бешерәләр.

г) Яланда бойҙай үҫә. Комбайн бойҙай йыя. Атайым - комбайнсы. Ул комбайн йөрөтә.

д) Комбайн ҙур. Уны комбайнсы йөрөтә. Ул бойҙай йыя.

ж) Атайым балта менән ағас ҡырҡа. Ағайым бысҡы менән ағас быса. Улар өй эшләйҙәр.

**3. Транспорт төрҙәре - 4** дәрес.

1. Автобусҡа ултырабыҙ - 2 дәрес.

2. Урамда - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:* Автобус, туҡталыш, өлкәндәр, туҡтай (-ҙар), еңел машина, тротуар, светофор, һаҡ бул, көтә (-ләр).

*Фонемалар өҫтөндә эш:*

Тынды дөрөҫ алырға, тауыш менән идара итә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. [Т – т'], [ғ - г], [л – л'], [д – д'], өндәренең дөрөҫ әйтелешенә, һүҙҙәрҙә ниндәй урында килеүҙәрен таба белеүгә һәм уларҙы схемалар ярҙамында билдәләргә өйрәтеү күнекмәләре. Һөйләм тураһында төшөнсә.

*Типик грамматик конструкциялар һәм һүҙбәйләнештәр:*

Автобус (троллейбус, трамвай, еңел машина) урам юлынан йөрөй.

Азат (өлкәндәр, балалар) тротуарҙан йөрөй.

Автобус (троллейбус, трамвай, машина) туҡталышта туҡтайҙар.

Беҙ автобусты (троллейбусты, трамвайҙы) туҡталышта көтәбеҙ.

Светофор автобусҡа (троллейбусҡа, трамвайға, еңел машинаға, ут һүндереүсе машинаға), өлкәндәргә (балаларға) юл күрһәтә.

Юлда һаҡ бул. Тротуарҙан йөрө!

*Бәйләнешле телмәр:*

а) - Юлда нимәләр йөрөй? - Юлда машиналар йөрөй. - Беҙ ҡайҙан барабыҙ? -Беҙ тротуарҙан барабыҙ. Туҡталышта автобус туҡтаны. Беҙ автобусҡа ултырҙыҡ.

б) Был - урам. Урамда машиналар. Беҙ туҡталышта трамвайға ултырҙыҡ. Трамвайға юлды светофор күрһәтә. Юлда һаҡ бул! Тротуарҙан йөрө!

**4. Һөнәрҙәр - 4** дәрес.

1. Атайым - төҙөүсе - 1 дәрес.
2. Ағайым - һалдат - 1 дәрес.
3. Өйҙәр ниндәй? - 2 дәрес.

*Һүҙҙәр:*

*Беренсе машина ниндәй төҫтә?*

*Беренсе машина ҡыҙыл төҫтә һ. б.*

Каждое задание оценивается отдельно.

Правильно выполняет задание – 2 балла.

Правильно выполняет задание после повторения вопроса на русском языке или с помощью педагога - за каждое задание по 1 баллу.

Ребенок не может выполнить задание - 0 баллов.

### ***III. Критерии для определения степени развития связной речи детей на башкирском языке***

- понимание и выполнение просьбы или указания, высказанные с помощью простых предложений;
- составление диалогов, состоящих из 2-3 предложений по конкретной предложенной ситуации;
- исполнение в ролях или с помощью кукол отрывки из сказок;
- понимание содержания и рассказывание 2-3 стихотворений наизусть;
- умение составлять рассказ о себе и членах семьи, состоящий из 3-4 предложений.

**Задания для определения степени развития связной речи детей на башкирском языке**

***Задание 1.*** *Дидактическая игра «Ҡурсаҡ кейенә». На столе сидит большая кукла и рядом расположена верхняя одежда для нее. Ребенку*

*предлагаются ответить на вопросы, одновременно выполняя задание: Ҡурсаҡ өҫтөнә нимә кейә?*

*Ҡурсаҡ башына нимә кейә? Ҡурсаҡ аяҡтарына нимә кейә?*

Правильно называет виды одежды - 2 балла.

Правильно выполняет задание после повторения вопроса на русском языке или с помощью педагога- 1 балл.

Ребенок не может выполнить задание - 0 баллов.

***Задание 2.*** *Ребенку даются опорные рисунки или персонажи настольного театра русской народной сказки «Шалҡан». Предлагается по ним обыграть сказку. Можно привлечь детей по желанию.*

Дети правильно выполняют задание - 2 балла.

Выполняют задание после повторения вопроса на русском языке или с помощью педагога - 1 балл.

Дети не могут выполнить задание - 0 баллов.

***Задание 3.*** *Отгадай загадку: «Аяғы юҡ, ҡулы юҡ, үҙе һүрәт төшөрә» (һыуыҡ). С какого звука начинается это слово? Найди символ этого звука!*

Каждое задание оценивается отдельно.

Дети правильно выполняют задание - 2 балла.

Выполняют задание с помощью педагога - 1 балл.

Дети не могут выполнить задание - 0 баллов.

***Задание 4.*** *Расскажи, какие стихи ты на башкирском языке знаешь.*

Ребенок может рассказать наизусть стихотворение - 2 балла.

Рассказывает с помощью педагога - 1 балл.

Не может выполнить задание - 0 баллов.

***Задание 5.*** *Расскажи, с кем ты живешь дома? Где работают твои родители? Знаешь ли ты свой адрес?*

Ребенок может рассказать о своей семье - 2 балла.

Рассказывает с помощью педагога - 1 балл.

Не может выполнить задание - 0 баллов.

***Задание 6.*** *Составь рассказ по картинке.*

Ҡушымта №2

Башҡортса-русса һүҙлек:

ағас(-тар) – дерев (-о,-ья)
ағыулы - ядовитый
аҡбур(-ҙар) - мел(-ки)
арҡа(-лар) – спина (-ы)
артыш - можжевельник
ай(-ҙар) - месяц(-ы)
айыу(-ҙар) - медведь(-и)
алтын - золото
алма(-лар) - яблоко(-и)
андыҙ - девясил
ат (-тар) - лошадь(-и)
ат ярышы - скачки
ата-әсәләр - родители
атай (-ым) – папа, мой папа
апай(-ым) – сестра, моя сестра
ағай(-ым) – брат, мой брат
аша(-йым, -ҙар) – кушай(куша-ю, куша-ют)
аш(-тар) - суп(-ы)
аш бүлмәһе - кухня
атала (-лар) - называется(-ются)
ауыл (-дар) - деревня(-и)
аяҡ (-тар) - нога(-и)
аяҡ кейемдәре - обувь
бай - богатый
байраҡ(-тар) - флаг(-и)
байый- заходит
байрам(-дар) - праздник(-и)
баҡсасы (-лар) - садовод(-ы)
балалар - дети
балалар баҡсаһы - детский сад
балыҡ(-тар) - рыба(-ы)
балта(-лар) – топор (-ы)
балаҫ(-тар) - палас(-ы)
бара (-м,-лар) - идет(ид-у, ид-ут)
бармаҡ (-ғым, -тар) – палец (пальцы)
батыр(-ҙар) - богатырь(-и)
баш(-тар) - голова(-ы)
баш ҡала - столица
баш кейемдәре - головные уборы
башҡорт - башкир
Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры - Башкирский государственный театр кукол
баҫҡыс(-тар) - лестница(-ы)
бейеү(-ҙәр) – танец (танцы)
бейек(-тәр) - высокий(-е)

бейей(-ем,-ҙәр) - танцует(-ю, -ют)
беҙ - мы
биҙәлгән - украшенный
бесәй(-ҙәр) - кошка(-и)
бел (-ә, -мәй, - мәйем) - знай(-ет, -не знает, -не знаю)
бер (ике, өс) бүлмәле – одно-, двух-, трехкомнатный
бешерә (-м,-ләр) - варит(-ю, -ят)
биҙәкләй(-ем, -ҙәр) - украшает(-ю, -ют)
бәйләү - вязание
бишек туйы – праздник колыбели
бирә (-м, -ләр) - дает(-ю, -ют)
бәлеш(-тәр) - пирог(-и)
бәпембә - одуванчик
бәпкә (-ләр) - цыпленок (цыплята)
бәшмәк (-тәр) - гриб (-ы)
бәләкәй(-ҙәр) - маленький(-е)
боронғо(-лар) - старинный(-е)
бойҙай - пшеница
ботаҡ(-тар) - ветка(-и)
боронғо - старинный
бөгөн - сегодня
Бөрө -Бирск
буҙа - буза
буран(-дар) - буря(-и)
бутҡа(-лар) - каша(-и)
бүләк(-тәр) - подарок(-и)
бүлмә(-ләр) - комната(-ы)
бүре (-ләр) - волк (-и)
бүре еләге - волчьи ягоды
бүрек(-тәр) - шапка(-и)
быҙау (-ҙар) - теленок (телята)
бысҡы(-лар) - пила(-ы)
быса (-м,-лар) - пилит (пил-ю, -ят)
быяла(-лар) - стекло(-а)
быйма(-лар) - валенки
был - этот
ваҡ таш(-тар) - галька(-и)
Ватан - Отечество
ғаилә(-ләр) - семья(-и)
дарыу үләндәре - лечебные травы
дауалай (-ҙар) - лечит(-ат)
дауахана(-лар) - больница(-ы)
диңгеҙ(-ҙәр) - море(-я)
Дим – Дема
дәүләт циркы - государственный цирк
дуҫ (-тар) - друг(-зья)
дөңгөр - (погремушка)
дөйә(-ләр) - верблюд(-ы)

ебәрә (-ләр) - отпускает(-ют)
eң (-дәр) - рукав (-а)
еңел машина (-лар) - легковая(-ые) машина (-ы)
ете ырыу - семь родов
ем(-дәр) - корм(-а)
ер шары - земной шар
ер(-ҙәр) - земля(-и)
ҙур(-ҙар) - большой(-ие)
ике - два
ил(-дәр) - страна(-ы)
Ил һаҡсыһы көнө - День защитника Отечества
иҙән - пол
иген - зерно
имән - дуб
иртән - утром
ирей(-ҙәр) – тает (-ют)
исем туйы – праздник наречения имени
итек(-тәр) - сапог(-и)
итәк - подол
инглиз - английский
ишек(-тәр) - дверь(-и)
ишетә (-м,-ләр) - слышит(-у, -ат)
йондоҙҙар - звезды
йорт (-тар) - дом(-а)
йом (-а) - закрой(-ывает)
йомаҡ(-тар) - загадка(-и)
йомшаҡ(-тар) - мягкий(-е)
йоҡлай (-ым,-ҙар) - спит(сплю, спят)
йәй - лето
йәшелсә(-ләр) - овощь(-и)
йәшенмәк - прятки
йөҙә (-м,-ләр) - плавает(-ю, -ют)
йөк(-тәр) - воз(-ы)
йөрәк(-тәр) - сердце(-а)
Йылайыр - Зилаир
йылы - теплый
йылға(-лар) - река(-и)
йыр (-ҙар) - песня(-и)
йырлай(-ым,-ҙар) - поет(-ю, -ют)
йырлау - пение
камзул(-дар) - камзол(-ы)
кейә (-м,-ләр) - одевает(-ю, -ют)
кейем(-дәр) - одежда(-ы)
кем - кто
кескәй - маленький
килә (-м,-ләр) - идет(-у, -ут)
китапхана(-лар) - библиотека(-и)
кирбес (-тәр) - кирпич(-и)

кис - вечер
китап(-тар) - книга(-и)
кишер(-ҙәр) - морковь(-и)
комбайн (-сы) - комбайн(-ер)
көршәк(-тәр) - горшок(-и)
көслө(-ләр) - сильный(-е)
көрәк (-тәр) - лопата(-ы)
көрәш - борьба
көршәк һуғыу – бить горшки
көлә (-әм,-ләр) - смеется(-юсь,- ются)
көтә (-м,-ләр) - ждет(жд-у, -ут)
күҙ (-ҙәр) - глаз(-а)
күгәрсен (-дәр) - голубь(-и)
күбәләк(-тәр) - бабочка(-и)
күрә (-м,-ләр) - видит(ви-жу,вид-ят)
күк йөҙө - небо
күкрәк - грудь
күтәрмә - крыльцо
күңелле - веселый
күк – синий
күлдәк(-тәр) - платье(-я)
күл(-дәр) - озеро(-а)
күп - много
кәүҙә өлөштәре - части тела
кәкүк сәйе – кукушкин чай
кәштә(-ләр) - полка(-и)
ҡабатлай (-ҙар, -быҙ) - повторяет(-ют, -ем)
ҡайын(-дар) - береза(-ы)
ҡала(-лар) - город(-а)
ҡар - снег
ҡартатай (-ым) – дедушка, мой дедушка
ҡаса (-м,-лар) - убегает(-ю, -ют)
ҡашмау(-ҙар) - головной убор(-ы)
ҡаҙ (-ҙар) - гусь(-и)
ҡалаҡ (-тар) - ложка(-и)
ҡалҡа(-м, -лар) - встает(-ю, -ют)
ҡар бабай(-ҙар) - снеговик(-и)
ҡарға (-лар) - ворона(-ы)
ҡарай (-ым,-ҙар) - смотрит(-ю, -ят)
ҡапҡа (-лар) - ворота(-ы)
ҡамыш(-тар) - камыш(-ы)
ҡат (-лы, -тар) - этаж(-ный, -и)
ҡорот - курут
ҡоймаҡ(-тар) - блин(-ы)
ҡойроҡ (-тар) - хвост(-ы)
ҡомартҡы(-лар) - наследие(-я)
ҡояш - солнце
ҡолаҡ (-тар) - ухо(-и)

ҡолон (-саҡ) - жеребенок
ҡом - песок
ҡошсоҡ (-тар) - птенец(-ы)
ҡош (-тар) - птица(-ы)
ҡуҙғалаҡ - щавель
ҡурай(-ҙар) - курай(-и)
ҡурайсы(-лар) - кураист(-ы)
ҡумыҙ - кубыз
ҡуя (-м,-лар) - ставит(ставл-ю, став-ят)
ҡул (-дар) - рука(-и)
ҡунаҡ (-тар) - гость(-и)
ҡурсаҡ (-тар) - кукла(-ы)
ҡуян(-дар) - заяц(-ы)
ҡыҙыл - красный
Ҡыҙыл майҙан - красная площадь
Ҡытай - Китай
ҡыш бабай - дед мороз
ҡыҙ(-ҙар) - девочка(-и)
ҡырҡа (-м,-лар) - режет(-у, -ут)
ҡыйыҡ(-тар) - крыша(-и)
ҡыш - зима
ҡыяр(-ҙар) - огурец(-ы)
ҡәҙерле(-ләр) - дорогой(-ие)
ҡәләм(-дәр) - карандаш(-и)
майҙан - площадь
малай(-ҙар) - мальчик(-и)
малайҙар күлдәге - рубашка для мальчиков
мамыҡ - вата
матур(-ҙар) - красивый(-е)
мейес(-тәр) - печка(-и)
менән - с
мендәр(-ҙәр) - подушка(-и)
мин - я
музыка ҡоралы(-дары) - музыкальный(-е) инструмент(-ы)
муйын(-дар) - шея(-и)
мылтыҡ - ружье
мәктәп - школа
Мәскәү - Москва
мәтрүшкә - душица
нимә - что
өҫ кейемдәре - верхняя одежда
өҫтәл(-дәр) - стол(-ы)
өй(-ҙәр) - дом(-а)
өлгө - образец
өлкәндәр - взрослые
өләсәй (-ем) - бабушка
өйрәт (ә, - әм, -ләр) - учи (-т, -у, -ат)
өс - три

өрә(-ләр) - лает(-ют)
ойоҡ (-тар) - чулок(-и)
оҡшай (-ҙар) - нравится(-ятся)
рус - русский
рәхмәт - спасибо
Рәсәй - Россия
рәсем - һүрәт
сана(-лар) - санки
саған(-дар) - клен(-ы)
саң - пыль
саңһурғыс - пылесос
саҡыра(-м, -лар) - зовет(-у, -ут)
салбар(-ҙар) - брюки
самауыр(-ҙар) - самовар(-ы)
серәкәй(-ҙәр) - комар(-ы)
сейә(-ләр) - вишня(-и)
сисә (-м,-ләр) - снимает(-ю, -ют)
Спорт һарайы - Дворец спорта
сөгөлдөр - свекла
суҡыш (-тар) - клюв(-ы)
сыға(-м,-лар) - выходит(-у, -ят)
сынаяҡ (-тар) - чашка(-и)
сәс (- тәр) - волос(-ы)
сәй(-ҙәр) - чай(-и)
сәйнүк(-тәр) - чайник(-и)
сәк-сәк - чак-чак
сәскә (-ләр) - цветок(-ы)
танышыу - знакомство
тарата (-м,-лар) - раздает(-ю, -ют)
тауыҡ(-тар) - курица(-ы)
таҡта(-лар) - доска(-и)
таҫтамал(-дар) - полотенце(-а)
тамыр(-ҙар) - корень(-и)
тау (-ҙар) - гора(-ы)
таусы(-лар) - горняк(-и)
ташсы(-лар) - каменщик(-и)
ташый (-ым,-ҙар) - таскает(-ю, -ют)
татыу - дружно
тел(-дәр) - язык(-и)
теш (-тәр) - зуб(-ы)
теш табибы – зубной врач
тиҙ - быстро
тимер - железо
тимер юл - железная дорога
тота (-м,-лар) - ловит(-лю, -ят)
тора (м,-лар) - стоят(-ю, -ят)
торба(-лар) - труба(-ы)
тун(-дар) - шуба(-ы)

туп (-тар) - мяч(-и)
туҡтай (-ым,-ҙар) - останавливается(-юсь, -ются)
туҡталыш(-тар) - остановка(-и)
туҡыма - ткань
тура - прямо
түбәтәй - тюбетей
түтәл(-дәр) - грядка(-и)
төлкө (-ләр) - лиса(-ы)
төҙөүсе(-ләр) - строитель(-и)
төҙөй (-өм,-ҙәр) - строит(-ю, ят)
төҫ (-лө) - цвет(-ной)
төймә (-ләр) - пуговица(-ы)
төшкө аш - обед
тырҡыш - мухомор
тырма (-лар) - грабля (-и)
тыуған көн - день рождения
тыуған ил - родная страна
тәҙрә(-ләр) - окно(-а)
тәрбиәсе(-ләр) - воспитатель(-и)
тәпәш - низкий
тәмле - вкусно
уйнай (-ым,-ҙар) - играет(-ю, -ют)
уйын бүлмәһе - комната для игр
уйынсыҡ (-тар) - игрушка(-и)
уйын ҡағиҙәләре - правила игры
ул - он
улар - они
ултырғыс(-тар) – стул (стулья)
ултыра(-м,-лар) - сидит(сижу, сидят)
уҡый (ым,-ҙар) - учится (учусь, учатся)
уҡыусы(-лар) - ученик(-и)
уҡытыусы(-лар) - учитель(-я)
умарта(-лар) – улей (ульи)
умырзая(-лар) - подснежник(-и)
үпкәләр) - легкие
урам(-дар) - улица(-ы)
Урал тауҙары - Уральские горы
урын  - место
ут (-тар) - огонь(-ни)
үтек(-тәр) - утюг(-и)
уҫал - злой
үҫә(-м,-ләр) - растет(-у, -ут)
фатир(-ҙар) - квартира(-ы)
фил(-дәр) - слон(-ы)
хат ташыусы(-лар) - почтальон(-ы)
хат (-тар) - письмо(-а)
халыҡ(-тар) - народ(-ы)
хәйләкәр - хитрый

һаҡ бул - будь бдителен
һабантуй - сабантуй
һалҡын - прохладный
һала (-м,-лар) - ложит(-у, -ат)
һалдат(-тар) - солдат(-ы)
һайлай (-ым,-ҙар) - выбирает(-ю, -ют)
һаулыҡ - здоровье
һары - желтый
һаумы (-һығыҙ) – здравствуй (-те)
һикерә (-м,-ләр) - прыгает(-ю, -ют)
һин - ты
һораша (-м,-лар) - спрашивает(-ю, -ют)
һоло - овес
һөртә (-м,-ләр) - вытирает(-ю, -ют)
һөйөклө(-ләр) - любимый(-е)
һөйләй(-ем,-ҙәр) - рассказывает(-ю, -ют)
һөт - молоко
һуған - лук
һыҙғыра - свистит
һыбыҙғы - свисток
һыйыр (-ҙар) - корова(-ы)
һыуытҡыс(-тар) - холодильник(-и)
һыу(-ҙар) - вода(-ы)
һыуыҡ - холодно
һәйкәл(-дәр) - памятник(-и)
һәнәк (-тәр) - вилы
һәпәләк - жмурки
шағир(-ҙар) - поэт(-ы)
шифалы - целебный
шиғыр(-ҙар) - стихотворение(-я)
шунан - потом
шыуа  - скользит
шыршы(-лар) - елка(-и)
эҫе - жарко
эс(-әм, -ләр) – пей (пью, пьют)
эт(-тәр) - собака(-и)
эшләй (-ем,-ҙәр) - работает(-ю, -ют)
әсәй (-ҙәр) – мама (-ы)
әтәс(-тәр) - петух(-и)
юл (-дар) - дорога(-и)
юл япрағы - подорожник
югерә (-м,-ләр) - бежит(-у, -ут)
юрған(-дар) - одеяло(-а)
яға  - топит
яҙ - весна
яҙа (-м,-лар) - пишет(-у, ут)
ялан(-дар) - поле(-я)
яна (-м,-лар) - горит(гор-ю, -ят)

Яңы йыл - Новый год
ямғыр(-ҙар) - дождь(-и)
япраҡ(-тар) - листок(-и)
ярата (-м,-лар) - любит(-лю, -ят)
ярҙамсы(-лар) - помощник(-и)
ярма(-лар) - крупа(-ы)
ярыша (-м,-лар) - соревнуется(-юсь, -ются)
яулыҡ(-тар) - платок(-и)

**Ҡушымта №3**

# Башҡортса һөйләшәбеҙ

Тәүге йылда башҡорт телен өйрәтеүгә яҡынса перспектив-тематик план

һәм дәрестәр өлгөләре (5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балалар өсөн)

Нафиҡова З.F. тарафынан төҙөлдө

| Айҙар | Нисәнсе дәрес | Темалар | Өйрәнеләсәк һүҙҙәр | Өндәр |
|---|---|---|---|---|
| Сентябрь | | Тәүге ике аҙна балаларҙың баҡсаның көн тәртибенә өйрәнеү ваҡыты | | |
| | 1-2 | Танышайыҡ | был, мин, һин, кем, һаумы (-һығыҙ), һау бул | у, т |
| | 3-4 | Айгөлдөң бүлмәһе | нимә, бүлмә, ул, уйынсыҡ, туп, матур, балалар, ин(-егеҙ), ишек, тәҙрә | һ, у |
| | 5 | Балалар баҡсаһы | балалар баҡсаһы, ҡайҙа, беҙ, бар(-быҙ) | һ, у |
| | 6 | Балалар баҡсаһы | өҫтәл, ултырғыс, карауат | и, а, ы, о |
| Октябрь | 7 | Уйын бүлмәһе | туп, шар, ҡуян, айыу, уйынсыҡ(-тар) | и, а, ы, о |
| | 8 | Аш бүлмәһе | аш бүлмәһе, сәй, һыу, һөт, эсә(-ләр) | ү, һ, ө, т |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 9 | Минең әсәйем, атайым | әсәй, атай, минең атайым, әсәйем | у, к, р |
| | 10 | Минең туғандарым | ҡунаҡ(-тар), ҡусты, ағай, апай, һеңле, ҙур, бәләкәй, нисек, ниндәй | х ,ң |
| | 11 | Айгөлдөң өләсәһе | өләсәй, һикерә, атлай | а, ә |
| | 12-13 | Өләсәйҙә ҡунаҡта | олатай, эс(-егеҙ), тәмле, яратам, кәнфит | ә, ө, ү |
| | 14 | Булат ҡунаҡ саҡыра | миңә, ҡунаҡҡа, рәхмәт, кил, саҡыра | ҡ, к |
| Ноябрь | 15 | Минең менән кемдәр йәшәй? | күтәр(-ә), итә, кит(-ә) | х, ң |
| | 16 | Йәшелсә-емештәр | кишер, һуған, ҡыяр | өноҡшаш тауыштар сығарыу |
| | 17 | Ағастар үҫә | ҡайын, шыршы, япраҡ(-тар), энә(-ләр) | ш |
| | 18-19 | Һары көҙ | ямғыр, яуа, ҡойола (-лар), һары, көҙ | ш, ы, ҡ |
| | 20 | Беҙҙең ҡулдар һәм аяҡтар | ҡул(-дар), аяҡ(-тар), сәпәкәй | ә, ү, ө, ф |
| | 21 | Минең бармаҡтар | бармаҡ(-тар), бармаҡтарым, бармағым, бер, күп | ы, и |
| | 22 | Айыуҡайҙың башы ауырта | баш(-ы), ауырта, йәллә(-йек) | с, ө, о |
| Декабрь | 23 | Сәй эсәбеҙ | сынаяҡ, сәйнүк | с, сь |
| | 24 | Бутҡа ашайбыҙ | бутҡа, көршәк, тәмле, тәрилкә, ҡалаҡ | ҡ, к |
| | 25 | Ҡурсаҡтарға һауыт-һаба һайлайыҡ (нығытыу өсөн) | һауыт-һаба, оҡшай, самауыр | һ |
| | 26 | Беҙ кейенәбеҙ | кейем (-дәр), кейә(-м), күлдәк, салбар, тун | ы-и айырмаһы |
| | 27-28 | Балалар урамға сығалар | итек, бейма, йылы, урам(-ға), бүрек | у-ү айырмаһы |
| | 29-30 | Шыршы байрамы | шыршы байрамы, Яңы йыл, Ҡыш бабай, бүләк, йыр, йырла(-й, -ҙар) | ш |
| Ғинуар | 31 | Ҡар яуа | ҡар, һыуыҡ, ҡыш, килде | к-ҡ айырмаһы |
| | 32 | Тышта уйнайбыҙ | сана, шыу(-лар), шатлана | ғ, һ, ә, ө |
| | 33 | Кемдең күлдәге матур? | ҡыҙыл, күк, һары, матур | ш, ҡ, к |
| | 34 | Иртәнге аш | аш, ашай (-ҙар) | ҙ – з айырмаһы |
| | 35 | Беҙҙә ҡунаҡтар (нығытыу өсөн) | беҙ(-гә), өҫтәл (-дә), күңелле | ҫ |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | 36 | Минең этем Аҡбай | эт(-ем), өрә, шаян, Аҡбай, йомшаҡ | р, һ |
| | 37 | Бесәй-бесәй-бес | бесәй, кескәй, мыр-мыр, йомшаҡ | б, ә, э |
| | 38 | Тауыҡ менән әтәскә ем бирәбеҙ | тауыҡ, әтәс, ем, бирә(-беҙ) | ҡ, т, с |
| Февраль | 39-40 | Ҡунаҡтарҙы һыйлайыҡ (нығытыу өсөн) | нимә ашатайыҡ, нимә (кем) ҡунаҡҡа килгән, ем, бутҡа, сәй, кишер һ.б. | ҫ, ғ, йү |
| | 41 | Бүлмәләге сәскәләр | сәскә(-ләр), үҫә (-ләр) | ү, л, р |
| | 42 | Балыҡ йөҙә | балыҡ, йөҙә, һыу (-ҙа) | ө, ҙ |
| | 43-44 | Өләсәйҙә ҡунаҡта | сәк-сәк, ҡоймаҡ (-тар), бешерә | к, ҡ, й |
| | 45-46 | Ҡурсаҡтар байрамға килгән | камзул (-дар), ҡашмау, түбәтәй | к-ҡ, у-ү |
| Март | 47-48 | Кем дөңгөрҙә уйнай? | дөңгөр (-ҙәр), шылтырай (-ҙар) | ө. ң, ы, ш |
| | 49 | Әсәйҙәр байрамы | байрам, бергә, ҡотлай(-ым, -быҙ) | ә, ҙ |
| | 50-51 | Яҙ килә | ҡояш,йылыта, ирей, аға(-лар), ҡыуана(-быҙ) | йы, ғ, ҙ |
| | 52 | Кем һанашмаҡ белә? | һан(-йыҡ), һанашмаҡ, сыпсыҡ, сыҡ | һ, ҡ, ы |
| | 53-54 | "Бесәй-сысҡан" уйнайыҡ | уйын, ҡас(-а), тот(-а), йүгер(-ә) | с-сь |
| Апрель | 55-56 | Әкиәт яратабыҙ | экиәт | ә, и |
| | 57-58 | Ҡурай тыңлайбыҙ | ҡурай(-ҙа), уйнай | ҡ, у, ң |
| | 59-60 | Ҡояш көлә | йәшел, үлән(-дәр), күренә (-ләр), ҡыҙҙыра | ө, ү, н |
| | 61-62 | Һыу менән тәжрибә үткәреү | һыу, шыйыҡ, ҡойола, һалҡын | ыу, ый, ҡ |
| Май | 63 | Бәпесте һыу индерәбеҙ | һабын, йыуа(-быҙ), таҫтамал, һөрт(-ә), һөртәбеҙ | т, д, ҫ |
| | 64-65 | Бәпесте йоҡлатайыҡ (һикерткес, һамаҡ) | һамаҡ, һикерт (-ә, -әбеҙ, әйек) | о, ә, т-ть |
| | 66-67 | Һауа менән тәжрибә үткәреү | һауа, ҡыҫыла, күренмәй | ҫ, һ, уа |
| | 68-69 | Беҙҙә байрам (дөйөмләштереү дәресе) | бөгөн, күңелле, шатланабыҙ | ң, ө, ш |
| | 70 | Балаларҙың белем кимәлен билдәләүгә диагностикалар үткәреү | күнекмәләр һәр тәрбиәсенең үҙ ҡарамағы буйынса алына | |

**Перспектив планға ярашлы дәрестәр өлгөләре**

**1, 2 – се дәрестәр**

**Тема:** "Танышайыҡ"

*Маҡсат:*

а) кескәйҙәргә башҡорт теле тураһындағы тәүге төшөнсәләрҙе биреү; *был, мин, һин, кем, һаумы (-һығыҙ), һау бул* тигән башҡорт һүҙҙәре менән таныштырыу; был һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү ;

б) *у*, *т* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) балаларҙың хәтерен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** башҡорт кейемендәге ҡурсаҡ ҡыҙ.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Ишек туҡылдаталар. Тәрбиәсе ишек аса һәм ҡурсаҡ Айгөлдө алып инә.

Тәрбиәсе:

- Дети, к нам в гости пришла девочка. Она маленькая и не понимает нас. Она говорит только по – башкирски. Посмотрите, какая у нее красивая одежда. Давайте, мы поздороваемся с ней, спросим, как ее зовут:

- Һаумы, һин кем?
- Мин – Айгөл.

- Һаумы, Айгөл! (тәрбиәсе тәүҙә үҙе ҡурсаҡ менән ҡул биреп һаулыҡ һораша, шунан балалар хор менән ҡабатлайҙар, аҙаҡ бер нисә бала үҙ теләктәре менән Айгөл янына килеп, ҡул биреп һаулыҡ һорашалар. Айгөл булып тәрбиәсе үҙе яуап бирә: "Һаумы, Саша… Маша… Даша һ.б."

Тәрбиәсе:

- Ребята, скажите: "Был кем? - Был - Айгөл. (балалар бергә бер нисә тапҡыр, аҙаҡ - бер нисә бала айырым ошо һөйләмдәрҙе ҡабатлайҙар).

Тәрбиәсе:

- Айгуль хочет с вами познакомиться: "Мин – Айгөл. Һин кем?" (Я – Айгуль. Ты кто?).

Ҡурсаҡ һәр бала янына килеп, уға һорау бирә, ә балалар: "Мин – Катя, Маша, Зифа һ.б. ", тип яуаплайҙар.

Паровоз ҡысҡырған тауыш ишетелә. Тәрбиәсе балаларға "Поезд" уйыны уйнарға, ҡурсаҡ Айгөлдө поезда йөрөтөргә тәҡдим итә.

Балалар бер – бер артлы тотоношоп, "Ту-ту-ту", - тип әйтеп, поездың ҡуҙғалғанын күрһәтәләр, "У-у-у", - тип поезд барыуына оҡшатып тауыш сығаралар. "Чух-чух-чух", - тип ҡурсаҡ Айгөл ултырған диван эргәһендә туҡтайҙар. Айгөлдө поездға ултыртып, артабан юлды дауам итәләр. Бүлмә уртаһында туҡтап, бергә бейеп, һикереп, сәпәкәйләп уйнап алалар.

Поезд кире диван янында туҡтай. Балалар яңынан урындарына ултыралар, Айгөл дә улар янында.

Тәрбиәселә туп, ул тупты балаға ырғытып, һорай: "Һин кем?" Бала үҙ исемен әйтеп (мин – Саша), тупты кире тәрбиәсегә ташлай. Икенсе тапҡыр тәрбиәсе тупты: "Һаумы, Катя!" - тип ташлай, ә бала: "Һаумыһығыҙ, Ғәлиә Айратовна!"- тип яуаплай.

Тәрбиәсе дәресте йомғаҡлап:

- Какие мы башкирские слова сегодня узнали, давайте скажем Айгуль, смотрите, как она радуется.

Тәрбиәсе балаларҙан: тәүҙә "Һин кем?" - тип һорау биреп, "Мин - Катя" - тигән яуап ала. Шунан: "Һаумы, Катя!" - тип һорап, "Һаумыһығыҙ, Ғәлиә Айратовна!" - яуабын бирҙертә.

Тәрбиәсе: кукле Айгуль понравилось, как мы говорим по – башкирски. Она нас приглашает к себе в гости. Мы обязательно пойдем, правда, ребята?

### 3, 4 – се дәрестәр

**Тема:** "Айгөлдөң бүлмәһе"

*Маҡсат:*

а) кескәйҙәргә башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү; *нимә, бүлмә, ул, уйынсыҡ, туп, матур, балалар, ин (-егеҙ), ишек, тәҙрә* тигән башҡорт һүҙҙәре менән таныштырыу; был һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *һ, у* өнөн дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) балаларҙың хәтерен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** һәр балаға йоҡаҡ ҡағыҙҙан киҫелгән төрлө төҫтәге япраҡтар,

**Дәрес барышы:**

Балалар түңәрәккә баҫалар. Тәрбиәсе уларға япраҡтар тарата һәм уларҙы устарына һалып, эскә тын алып, ирендәрҙе ослайтып, көс менән *"Һу-у-у"* тип өрөргә һорай. Осоп төшкән япраҡтарҙы алып, тағы ла өрәләр (күнегеү 4-5 тапҡыр ҡабатлана).

Тәрбиәсе: "Посмотрите, как красиво летят листики! Они танцуют и вас приглашают на путешествие. Садимся на поезд и едем в гости к Айгуль".

"Поезд" уйыны, *"у"* өнөнә күнекмә. Балалар башҡорт музейына, йә башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә бағышлап йыһазландырылған мөйөшкә килеп туҡтайҙар.

Балаларҙы Айгөл ҡаршылай (икенсе тәрбиәсе, йәки тәрбиәсе ярҙамсыһы). Ул:

- Һаумыһығыҙ, балалар! - тип сәләмләй. Балалар:

- Һаумы, Айгөл!

Айгөл:

- Был – бүлмә. Инегеҙ, - тип саҡыра. Балалар инәләр.

Тәрбиәсе: "Это – комната Айгуль. Был – бүлмә. Был ишек. Был тәҙрә. Бүлмә - матур " (тәржемә итеп аңлата).

"Был – бүлмә. Был ишек. Был тәҙрә. Бүлмә – матур" һөйләмдәрен балалар тәрбиәсе артынан бер нисә тапҡыр хор менән, аҙаҡ – айырым-айырым ҡабатлайҙар.

Ишек шаҡыйҙар. Ҡурсаҡ Азат инә. Ул:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин – Азат, танышайыҡ (тәрбиәсе тәржемә итә), шунан һәр бала менән: "Мин – Азат, һин кем?" - тип танышып сыға. Балалар: "Мин – Катя. Һаумы, Азат!" - тип яуаплайҙар.

Азат "Телефон" уйынын уйнарға тәҡдим итә. Балалар теҙелеп ултырғандар, тәрбиәсе иң беренсе балаға дәрестә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе бышылдап әйтә лә, артабан күршеһенең ҡолағына ғына әйтергә ҡуша. Аҙаҡ – Айгөл менән Азат ниндәй һүҙҙәр әйтелгәнен тыңлап сығалар, балаларҙы маҡтайҙар.

Поезд "Ту-ту-ту", - тип юлға саҡыра. Балалар ҡайтырға сығалар.

**5 – се дәрес**

**Тема:** "Балалар баҡсаһы"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, әйтелешен өйрәтеү: *балалар баҡсаһы, ҡайҙа, беҙ, бара (-быҙ), был нимә?* яңы һәм алдан өйрәнелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү, ҡабатлатыу, нығытыу;

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *һ, у* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) башҡорт теленә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** туп, поезд өсөн руль, ҡомда төҙөү кәрәк – яраҡтары, ҡурсаҡ Айгөл.

**Дәрес барышы:**

Дәрес балалар баҡсаһы урамында үткәрелә. Майҙансыҡта тәрбиәсе туп менән, балалар уның ыңғайына бергәләп, туп булып һикерәләр. Һикергәндә бөтәһе бергә: "Һоп-һоп-һоп", - тип әйтәләр. Һикереү 2-3 минут тирәһе бара.

Тәрбиәсе: "Отдохнем, набираем в рот воздух и выпускаем его силой, говоря "һы-һы-һы" (3-4 тапҡыр).

А теперь, поиграем. Игра называется "Дай руку!": бала үҙенең исемен, шунан күршеһенең исемен әйтеп, һаулыҡ һораша ла, уның ҡулын ҡыҫа. Мәҫәлән: "Мин-Катя. Саша, һаумы!"

Ҡурсаҡ Айгөл килә. Уны поездға ултыртып, баҡса тирәләй йөрөргә сығалар. Тәрбиәсе, балалар баҡсаһының бинаһына күрһәтеп: "Был нимә? - тип һорай. Балалар яуап бирәләр, русса яуап бирһәләр, тәрбиәсе тәржемә итә: "Был – балалар баҡсаһы. Балалар баҡсаһы ҙур. Был – ишек. Был – тәҙрә. Беҙ ҡайҙа барабыҙ? Беҙ балалар баҡсаһына барабыҙ", - тип яңы һүҙҙәрҙе өйрәтә. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһе русса аңлатыла, әйтелешен бергә хор менән, унан айырым-айырым әйтеп сығалар.

Поезд майҙансыҡтағы ҡом өйөмө янында туҡтай. Тәрбиәсе балаларға ҡомдан балалар баҡсаһы бинаһын эшләргә тәҡдим итә. Бергә эшләү дәүерендә башҡорт һүҙҙәре ҡабатлатыла.

Әгәр дәрес бүлмәлә үткәрелә икән, пластилин йәки балсыҡ менән әүәләү тәҡдим ителә.

**6 – сы дәрес**

**Тема:** "Балалар баҡсаһы"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, өйрәнелгәндәрен нығытыу, әйтелештәрен ҡабатлау: *ҡайҙа, өҫтәл, ултырғыс, карауат.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ы, и, о, а* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) башҡорт теленә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** балалар баҡсаһының ҙурайтылған фотоһүрәте, төҙөлөш материалдары, ҡурсаҡ Айгөл.

**Дәрес барышы:**

Балалар ярымтүңәрәк яһап ултырғандар.

Тәрбиәсе ҙур стена сәғәтен күрһәтә һәм сәғәт йөрөүен тыңларға тәҡдим итә (магнитофон яҙмаһын, йә сәғәт йөрөүенең үҙен). Русса алып барыла.

Сәғәт нимә ти? *Тик – так, тик – так.* Ҙур сәғәт нисек һуға? *Бим-бом, бим-бом.* Сәғәт йөрөһөн өсөн, уны нисек итеп бораларь, әйтеп күрһәтәйек әле: *трык –трак, трык-трак.*

Ҙур сәғәтте йөрөтәйек (балалар *трык-трак* һүҙҙәрен көслө тауыш менән әйтеп күрһәтәләр, шунан уның нисек йөрөүен, һуғыуын да көслө тауыш сығарып, әйтеп күрһәтәләр: *тик-так, бим-бом.*

Бәләкәй сәғәт тын ғына йөрөй, һуҡҡанда ла әҙ генә тауыш сығара (балалар бәләкәй сәғәт тауышын әкрен тауыш менән күрһәтеп бирәләр. Тәүҙә тәрбиәсе үҙе күрһәтә).

Тәрбиәсе балалар баҡсаһының фотоһүрәтен күрһәтеп, башҡортса һорай:

- *Был нимә?*

Балалар:

- *Был – балалар баҡсаһы. Был – тәҙрә. Был – ишек. Был – бүлмә.*

Тәрбиәсе балаларға төҙөлөш материалдарынан балалар баҡсаһын һәм бүлмәне төҙөргә тәҡдим итә. Ҡоролманы төҙөп бөткәс, өҫтәл, ултырғыс, карауат ҡуялар. Ҡурсаҡ Айгөлдө өҫтәл артына ултырғысҡа ултыртып, карауатҡа ятҡырып уйнайҙар. Уйын ваҡытында тәрбиәсе яңы үтелгән һүҙҙәрҙе ҡабатлата, нығыта.

**7 – се дәрес**

**Тема:** "Уйын бүлмәһе"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү: *туп, шар, ҡуян, айыу, уйынсыҡтар.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ы, и, о, а* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) башҡорт теленә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ҡағыҙ уйынсыҡтар: шар, айыу, ҡуян, ҡурсаҡ, машина.

**Дәрес барышы:**

Балалар түңәрәккә торалар. Бүлмә түбәһенә беркетелгәнептәрҙә йоҡа ҡағыҙҙан эшләнгән төрлө төҫтәге уйынсыҡтар. Уйынсыҡтар балалар башы өҫтөндә генә эленгән.

Тәрбиәсе "Уйынсыҡтарға өрәйек" уйынын уйната: балалар күкрәккә һауа алалар ҙа, тәрбиәсе командаһы буйынса, ауыҙҙарын борғо һымаҡ итеп, уйынсыҡтарға өрәләр (3 – 4 тапҡыр). Тәрбиәсе тәүҙә үҙе күрһәтә.

Уйынсыҡтар балаларҙың түш тәңгәленә тиклем төшөрөлә лә, тәрбиәсе: *"Был нимә?"* - тип һәр уйынсыҡты һорап сыға: *шар, айыу, ҡуян, ҡурсаҡ, машина.* Балалар әйтә алмаһалар, русса әйтәләр, ә тәрбиәсе тәржемә итә һәм уларҙың уйынсыҡтар икәнлеген әйтә. Тәрбиәсе:

- *Балалар, ҡайҙа уйынсыҡтар бар?*

Бергәләп, уйын мөйөшөнә баралар һәм уйынсыҡтарҙы ҡарап, сағыштырып, ептәрҙәге уйынсыҡтарҙың иштәрен табып күрһәтәләр һәм башҡортса әйтергә тырышалар: *Был – шар, был – туп, был – ҡуян, был – айыу. Был – уйынсыҡтар. Беҙ уйнайбыҙ* (тәрбиәсе ярҙамы менән).

Балалар уйынсыҡтар менән уйнайҙар, тәрбиәсе өйрәнелгән һүҙҙәрҙе уйын ваҡытында иҫтәренә төшөрөп тора.

**8-се дәрес**

**Тема:** "Аш бүлмәһе"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү: *аш бүлмәһе, сәй, һыу, һөт, эсә, эсәләр.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ү, һ, ө, т* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) алдан өйрәнелгән типик грамматик конструкцияларҙы ҡабатлау, нығытыу: *Һаумы, Айгөл! Һаумыһығыҙ, Гүзәл Айратовна! Был – кем? (нимә?); Был – ҡурсаҡ Айгөл, бүлмә, уйынсыҡ, айыу, ҡуян, һ.б.*

г) бәйләнешле телмәр күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһазландырыу:** ҡурсаҡ Айгөл, сынаяҡтар, уйынсыҡ айыу, ҡуян; эсемлектәр: һыу, һөт, сәй.

**Дәрес барышы:**

Балалар ултырғыстарҙа ултыралар. Поезд ҡысҡырған тауыш ишетелә. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм: *"Поезд килде, ҡурсаҡ Айгөлгә ҡунаҡҡа барабыҙ. Уйынсыҡтарҙы алайыҡ. Ҡайҙа айыу, ҡуян?"*- ти (тәүҙә башҡортса, аҙаҡ – русса әйтә).

Балалар бер-бер артлы тотоношоп, айыу менән ҡуянды иң алға "ултыртып" *"тү-тү-тү"* тип әйтеп, поезд ҡуҙғалғанын күрһәтәләр. *"Ү-ү-ү"* тип әйтә-әйтә, коридор буйлап, аш бүлмәһенә баралар. Уларҙы ҡурсаҡ Айгөл ҡаршы ала:

- Һаумыһығыҙ, балалар!
- Һаумы, Айгөл! - тип хор менән яуаплайҙар.

Айгөл: "Балалар, был аш бүлмәһе. Был–өҫтәл, был – ултырғыстар. Ултырығыҙ ултырғыстарға! - тип саҡыра. Ултырғыстар бер рәткә теҙелеп ултыртылғандар. Өҫтәлдең берееһендә сынаяҡтар. Сынаяҡтарҙа - һыу, һөт, сәй.

Тәрбиәсе: "Балалар, Айгөл беҙгә йомаҡ ҡоя - сынаяҡтағы эсемлекте тәмләп, унда нимә бар икәнлеген әйтер кәрәк": (тәүҙә башҡортса, шунан – русса аңлата.

Сынаяҡтағы эсемлектәр төрлөсә buталып ҡуйылған, эсемлекте эскәс, буш сынаяҡтар икенсе өҫтәлгә ҡуйыла).

Тәрбиәсе ҡушыуы буйынса һәр бер бала тороп, сынаяҡтағы эсемлекте тәмләп, йә эсеп ҡарай, уның нимә икәнлеген әйтә:

- Был – сәй (һөт, һыу). Русса әйтһә, Айгөл унан: "Нимә-нимә?" - тип һорай. Тәрбиәсе балаларға Айгөлдөң русса аңламағанлығын, шуға эсемлектәрҙең атамаларын башҡортса әйтеү кәрәклеген аңлата: сәй, һөт, һыу. Тәрбиәсе ярҙамында балалар башҡортса уларҙың атамаларын әйтәләр.

Балалар эсемлекте тәмләү ваҡытында тәрбиәсе уларға һорау бирә:

- *Катя нимә эшләй?*
- *Катя сәй эсә* һәм шулай артабан дауам итә.

Поезд тауышы сыға. Балалар Айгөл менән хушлашалар ҙа, кире ҡайтыр юлға сығалар.

Ҡайтып барғанда, тәрбиәсе уларҙан ҡайҙа булғандарын, нимә күргәндәрен, нимә эскәндәрен һорашып, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу өҫтөндә эшләй: был – аш бүлмәһе. Унда – өҫтәл, ултырғыстар бар. Өҫтәлдә – сынаяҡтар бар. Беҙ сәй, һыу, һөт эстек. Катя нимә эсте? Ул сәй эсте. Айыу һөт эсте һ.б.

Төркөм бүлмәһенә ингәс, тәрбиәсе ҡурсаҡтарҙы һәм уйынсыҡ йәнлектәрҙе сәй, һөт, һыу менән һыйларға тәҡдим итә. Уйын ваҡытында һүҙҙәрҙең әйтелеше нығытыла.

### 9 – сы дәрес

**Тема:** "Минең әсәйем, атайым"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *әсәй, атай, минең, атайым, әсәйем.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *у, х, р* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) алдан өйрәнелгән һәм яңы типик грамматик конструкцияларҙы ҡабатлау, нығытыу, өйрәнеү: *Һаумы, Айгөл! Һаумыһығыҙ, Гүзәл Айратовна! Был – кем? (нимә?); Был – ҡурсаҡ Айгөл (бүлмә, уйынсыҡ, айыу, ҡуян һ.б.). Был – минең әсәйем, атайым, һ.б.*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ айыу, өс ҡуян (береһе – балаһы, ҡалған икәүһе – уның ата-әсәһе), рәсем төшөрөү өсөн кәрәк-яраҡтар.

**Дәрес барышы:**

Балалар ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм уйынсыҡ ҡуян менән айыуға күрһәтеп:

- Был нимә? - тип һорай. Балалар:
- Был - айыу. Был – ҡуян.

Тәрбиәсе: "Балалар, улар беҙҙең менән уйнарға теләйҙәр". Айыу: "Минең һымаҡ бүлмә буйлап атлағыҙ әле" - ти. Балалар айпан-туйпан айыу булып йөрөп күрһәтәләр.

Айыу: "Минең һымаҡ ырылдағыҙ: хр-хр-хр". Балалар ҡабатлайҙар (3-4 тапҡыр).

Айыу: "Бал ялайбыҙ. Тәүҙә – тәпәйҙәрҙән, шунан – ирендәрҙән" (хәрәкәттәрҙе тәрбиәсе үҙе күрһәтә, уның артынан балалар ҡабатлайҙар).

Ҡуян да балаларға күнегеүҙәр бирә:

- Мин – ҡуян. Мин ҡурҡаҡ. Мин ҡурҡһам, ҡойроғом ошолай һелкенә. Телегеҙ менән күрһәтегеҙ әле, ул нисек һелкенә (балалар ауыҙҙарын иркен итеп асып, телдәре менән иренгә теймәйенсә, телде ауыҙҙың бер ситенән икенсеһенә йөрөтәләр).

- Мин һикерә беләм, йә күрһәтегеҙ әле (балалар һикерәләр). Төлкөнән мин үлән араһына ҡасам да *у-у-ух, у-у-ух* тип тын алам (балалар уның артынан 2-3 тапҡыр ҡабатлайҙар һәм урындарына ултыралар).

Ҡыуаҡ артынан ике ҙур ҡуян килеп сыға: береһе – ата ҡуян, икенсеһе – инә ҡуян. Ҡуян балаһы, шатланып:

- Әсәй, һаумы! Атай, һаумы! - тип уларҙы сәләмләй.
- Һаумы, Оҙон ҡолаҡ!

(тәрбиәсе балаларға аңлата: был ҡуяндың атаһы һәм әсәһе, ә уның үҙенең исеме – Оҙон ҡолаҡ икәнлеген, ни өсөн шулай атағандарын балаларҙан һораша).

Ҡуян балаларға:

- Был – минең әсәйем!
- Был – минең атайым!
- Был – мин, ҡуян. Минең исемем – Оҙон ҡолаҡ! Һинең исемең нисек?

Балалар:

- Мин – Катя, Саша һ.б.

(шул рәүешле ҡуян балаларҙан уларҙың исемдәрен һорашып, уларҙың һәр береһе менән танышып сыға).

Аҙаҡ тәрбиәсе һәр баланы эргәһенә саҡырып, уйынсыҡ ҡуяндарға күрһәтеп, уларҙың кем икәнлеген һорап, үтелгән яңы һүҙҙәрҙе ҡабатлатып сыға һәм балаларға өйҙән үҙ ғаиләләренең фотоһүрәтен алып килергә һорай.

**10 – сы дәрес**

**Тема:** "Минең тыуғандарым"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *ҡунаҡ (-тар), ҡусты, ағай, апай, һеңле, ҙур, бәләкәй, нисек, ниндәй;*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *х, ң* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Нимә эсә? Булат (Айгөл) ниндәй? Кемдең әсәһе (атаһы)?*

г) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** дүрт ҡурсаҡ: Айгөл, Азат, бәпес Асия, ағай Булат, коляска, төҙөлөш материалдары, стенала балаларҙың ата-әсәләре фотоһүрәттәре эленгән.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм уларҙы ғаилә фотоһүрәттәре эленгән стена янына саҡыра:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Ҡарағыҙ әле, беҙгә бөгөн бик күп ҡунаҡтар килгән. Был – беҙҙең атайҙар һәм әсәйҙәр. Катя, ҡайҙа һинең әсәйең, күрһәт! Ҡайҙа һинең атайың, күрһәт!

Катянан: - Был – минең әсәйем. Был – минең атайым, - тип әйттертә.

Тәрбиәсе:

- Әсәйеңдең (атайыңдың) исеме нисек? Бала:

- Әсәйемдең исеме Анна. Атайымдың исеме Айрат (шул рәүешле тәрбиәсе бөтә балаларҙан да фотоһүрәттән ата – әсәләрен күрһәттереп, исемдәрен әйттертеп сыға).

Ишек шаҡыйҙар. Ҡурсаҡ Айгөл инә. Ул һеңлеһен коляскала алып инә:

- Һаумыһығыҙ, балалар!
- Һаумы, Айгөл!

Айгөл: "Был – минең һеңлем (сестренка). Унын исеме Асия. Ул – бәләкәй. Мин – ҙур. Мин – апай (сестра).

Тағы ла ишек шаҡыйҙар. Ҡурсаҡ Азат инә. Уны ҙур ҡурсаҡ Булат етәкләгән. Тәрбиәсе (тәүҙә башҡортса, аҙаҡ - русса):

- Балалар, Азат ҡунаҡҡа килде. Был уның ағайы (брат) Булат. Булат – ҙур. Азат – бәләкәй.

- Балалар, әйҙәгеҙ ҡунаҡтарға сәй, һөт эсерәйек.

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарға ултыралар. Улар алдындағы өҫтәлдә ҡурсаҡтар. Тәрбиәсе балаларға һорауҙар бирә:

- Был кем? (Айгөл).
- Ә был кем? (Асия). Ул – һеңле. Ул – бәләкәй (балалар тәрбиәсе ярҙамында Асияның бәләкәй икәнлеген ҡулдарын бер-береһенә яҡынайтып күрһәтәләр).

- Асия нисек илай? *(ңа-а-а, ңа-а-а)* (балалар Асия кеүек илап күрһәтәләр, 2-3 тапҡыр).

- Асия нимә эсә? (*һөт эсә*) (балалар ирендәрен түңәрәкләтеп, һауаны эскә тартып, һөт эсеүҙе күрһәтәләр).

Тәрбиәсе балаларға түбәндәге һорауҙарҙы бирә:

- Был кем? Был – Азат. Был – Булат. Ул – Азаттың ағайы. Булат ниндәй? (ул – ҙур).

(Балалар ҡулдарын киң итеп йәйеп, Булаттың ҙур икәнлеген күрһәтәләр.

- Ул нисек көлә? *(ха-ха-ха).* Балалар 2-3 тапҡыр *ха-ха-ха* тип ҡабатлайҙар.

- Булат нимә эсә? (Булат сәй эсә). Балалар ирендәрен ослайтып, сәй эсеп күрһәтәләр. Тәрбиәсе балаларға Асия менән Булатҡа ултырғыс һәм өҫтәл төҙөргә тәҡдим итә. Кемгә ҙур, кемгә бәләкәй кәрәклеген белешә.

### 11 – се дәрес

**Тема:** "Айгөлдөң өләсәһе"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *өләсәй, һикерә, атлай.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *а, ә* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Нисек йөрөй? Нисек һикерә? Кемдең әсәһе (атаһы)?*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** өләсәй; уйынсыҡ ҡуян, айыу һүрәте, ҡурсаҡ – табиб, ҡурсаҡ Асия, ике ҙур айыу һәм бер айыу балаһы төшкән һүрәт.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Ҡурсаҡ табиб инә. Ул балаларҙың теştәре ауыртмаймы икән, шуны ҡарай.

Тәрбиәсе (башҡортса һәм русса аңлата) тәүҙә һаулыҡ һораша һәм:

- Балалар, врач апайға теştәрегеҙҙе күрһәтегеҙ! (тәрбиәсе ҡурсаҡ менән тиҙ генә балаларҙың теştәрен ҡарап сыға ла, бөтәгеҙҙең дә теştәрегеҙ яҡшы икән тип әйтә.)

- Ә хәҙер тамаҡтарығыҙҙы күрһәтегеҙ!

Балалар ауыҙҙарын киң итеп асып, *"а-а-а",* шунан *"ә-ә-ә"* тип 3-4 тапҡыр әйтәләр. Береһенең дә тамаҡтары ауыртмай.

Ишек туҡылдаталар.

Өләсәй булып кейенгән тәрбиәсе ярҙамсыһы инә һәм балалар менән һаулыҡ һораша ла: "Мин Айгөлдөң өләсәйе (бабушка). Айгөл һеҙҙе бик матур башҡортса һөйләшә ти. Ысынмы икән? (өләсәй биргән эштәрҙе тәүҙә башҡортса, аҙаҡ – рус телендә биреү кәрәк). Өләсәй:

- Әйтегеҙ әле, кем *хр-хр-хр* тип ҡысҡыра (айыу).Тәрбиәсе айыу һүрәтен күрһәтә.
- Айыу нисек йөрөй, күрһәтегеҙ әле! (балалар күрһәтәләр).
- Кем *ңа-ңа-ңа* тип илай? (ҡурсаҡ Асия, ул – бәләкәй). Тәрбиәсе ҡурсаҡ Асияны күрһәтә.
- Кем төлкөнән ҡаса? (ҡуян, тәрбиәсе уның һүрәтен күрһәтә).
- Ҡуян нисек һикерә? (балалар күрһәтә).

Өләсәй: - Ай, афариндар, һеҙ башҡортса бик матур һөйләшәһегеҙ икән! Ә мин әйткән был эштәрҙе һеҙ нисек үтәрһегеҙ икән?

Ике ҙур айыу, бер айыу балаһы төшкән һүрәт күрһәтеп:

- Айыуҡайҙың атаһы нисек ҡысҡыра? (көслө тауыш менән *хр-хр-хр* тип әйтәләр).

- Айыуҡайҙың әсәһе нисек ҡысҡыра? (әкренерәк тауыш менән *хр-хр-хр* тип әйтәләр).

- Айыуҡай үҙе нисек ҡысҡыра? (әкрен генә тауыш менән *хр-хр-хр* тип әйтәләр).

- Оҙон ҡолаҡ нимә ул? (ҡуян). Ул нисек һикерә? (балалар тороп, һикереп күрһәтәләр).

- Ҡуяндың атаһы нисек һикерә? (балалар ныҡ итеп баҫып, һикереп күрһәтәләр). Бәләкәй ҡуян үҙе нисек һикерә? (тауышһыҙ ғына һикерәләр).

Өләсәй балаларҙы маҡтай, үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра һәм хушлашып сығып китә.

**12-13 – сө дәрестәр**

Тема: "Өләсәйҙә ҡунаҡта"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *олатай, эс (-егеҙ), тәмле, кәнфит, яратам;*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ә, ө, ү* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Мин сәй яратам, кем ҡунаҡҡа килгән? Олатай сәй эсә.*

г) эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәтеү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** сынаяҡтар, сәй, һөт, кәнфиттәр, өләсәй һәм олатай ролендәге ололар йәки ҡурсаҡтар, ҡурай.

**Дәрес барышы:**

Дәрес башҡорт музейында, йә башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә бағышлап йыһазландырылған төркөм мөйөшөндә үткәрелә.

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм Айгөлдөң өләсәһенә ҡунаҡҡа барыуҙарын әйтә.

Әҙ генә атлағас, тәрбиәсе: "Беҙ аҙаштыҡ, әйҙәгеҙ Айгөлдө һәм өләсәйҙе саҡырайыҡ!" - ти.

Балалар көслө тауыш менән тәүҙә *"Өләсәй, ау-у-у"*, шунан һуң әкренерәк тауыш менән *"Айгөл, әү-ү-ү"* тип бер нисә тапҡыр ҡысҡыралар ҙа, яуап көтөп, тыңлап торалар.

Икенсе бүлмәнән, йә музейҙан тәүҙә "ау-у-у", аҙаҡ "әү-ү-ү" тигән яуап килә. Балалар туҡтап тыңлайҙар (тауыш 3-4 тапҡыр ишетелә).

Өләсәй менән Айгөл килеп сығалар:

- Тауышығыҙҙы ишетеп килдек. Бына олатай ҙа (дедушка) килде. Олатай балаларҙы бүлмәгә саҡыра:

- Ҡунаҡтар, әйҙәгеҙ, бүлмәгә инегеҙ!

Ингәс, олатай балалар менән танышып, уларҙың исемдәрен әйттереп сыға: "Һаумы, олатай! Мин - Катя".

Өләсәй балаларҙы һыйлай: "Был – сәй. Был - кәнфит. Сынаяҡта – һөт. Сәй эсегеҙ, балалар! Сәй тәмле!

Бергәләп сәй эсәләр. Олатай ҡурай уйнай (аудиояҙма), балалар бейей.

Икенсе дәрестә олатай өҫтәлдәге эсемлектәрҙең, өҫтәл артындағы уйынсыҡтарҙың атамаларын балаларҙан башҡортса әйттерә: *сәй, һөт, һыу, айыу, ҡуян, ҡурсаҡ Айгөл, уның һеңлеһе Асия, ҡурсаҡ Азат, уның ағайы Булат. "Кем ҡунаҡҡа килгән? Асия ниндәй? Ул нисек илай? һ.б.* ошондай һорауҙар ярҙамында өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һүҙбәйләнештәрҙе ҡабатлата.

**14 – се дәрес**

**Тема:** "Булат ҡунаҡ саҡыра"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *миңә, ҡунаҡҡа, рәхмәт, кил, саҡыр*а, бына;

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ҡ, к* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Сәй тәмлеме? Сәй эсегеҙ! Һау бул, Катя! Рәхмәт, Булат!*

г) диалог төҙөргә өйрәтеү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ике уйынсыҡ телефон, өҫтәлдә сәй эсеү өсөн һауыт-һаба һәм эсемлектәр, ҡурсаҡ Булат.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм ҡурсаҡ Булат булып телефондан:

- Таня, һаумы! Мин – Булат. Миңә ҡунаҡҡа кил!

Таня икенсе телефондан Булатҡа яуаплай:

- Һаумы, Булат! Ҡунаҡҡа киләм! Рәхмәт!

Ошо рәүешле бөтә балалар ҙа телефон аша һөйләшеп сығалар. Аҙаҡ барыһы ла ҡунаҡ бүлмәһенә (мөйөшөнә) йыйылалар, Булат уларҙы ҡаршы ала һәм:

- Бына өҫтәл. Бына ултырғыстар. Ултырығыҙ, - тип саҡыра.

Балалар өҫтәл артына ултыралар. Булат (тәрбиәсе) ҡунаҡтарҙы һыйлай, "Сәй тәмлеме? Кем һөт ярата? һ.б. һорауҙар биреп, балаларҙы һөйләшергә мәжбүр итә. Балалар:

- Рәхмәт! Һау бул, Булат! - тип ҡайтырға сығалар.

Булат:

- Һау бул, Катя, Зифа һ.б. Тағы кил! - тип барыһын да оҙата.

**15 – се дәрес**

**Тема:** "Минең менән кемдәр йәшәй?"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *күтәр (-ә, -гән), итә (иткән), кит (-ә);*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *х, ң* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Минең өйҙә әсәйем (атайым, олатайым, ағайым, апайым, ҡустым, һеңлем) бар. Һинең өйҙә кемдәрең бар?*

г) кескәй күләмле шиғыр ятларға өйрәтеү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, әүәләү өсөн кәрәкле әйберҙәр.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм:

- Ҡурсаҡ Айгөл шиғыр һөйләй, әйҙәгеҙ тыңлайыҡ! - ти (аңлатыу тәүҙә башҡортса, аҙаҡ русса):

Сәп-сәп- сәпәкәй,
Минең ҡурсаҡ бәләкәй.
Ҡулын күтәргән була,
Сәпәкәй иткән була.

(тәрбиәсе Айгөл булып һөйләй һәм хәрәкәттәрҙе башҡара). Тәрбиәсе:

- Балалар, әйҙәгеҙ, беҙ шиғырҙы отоп алайыҡ.

Күмәкләп хор менән, шиғыр һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр башҡарып, балалар шиғырҙы ятлайҙар. 4-5 тапҡыр ҡабатлағас, тәрбиәсе

бер нисә баланан уны ҡабатларға һорай. Айгөл ҡыуана, балалар унын менән бергә шиғырҙы тағы ла һөйләп сығалар.

Поезд тауышы сыға. Балалар "Поезд" уйынын уйнайҙар:

"Поезд килә: пип, пип, пип.

Юлда торма кит, кит, кит!" - тип поездға ултырып, өйгә ҡайталар (ултырғыстарға ултыралар).

Тәрбиәсе:

Бына өйгә ҡайтып еттек. Өйҙә кемдәр бар? Катя, һинең өйҙә кемдәр бар? (һорауҙы русса ҡабатлау кәрәк). Катя:

- Минең өйҙә әсәйем бар. Минең өйҙә атайым бар. Минең өйҙә олатайым (өләсәйем, апайым, һ.б.) бар.
- Кемдең өйҙә бәләкәй генә ҡустыһы бар?
- Кемдең өйҙә бәләкәй генә һеңлеһе бар?
- Кемдең өйҙә ҙур ағайы (апайы) бар? Тәрбиәсе балаларға туғандарына күстәнәс әүәләргә тәҡдим итә.

**16 – сы дәрес**

**Тема:** "Йәшелсәләр"

*Маҡсат:*

а) кескәйҙәргә яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм әйтелешен өйрәтеү: *кишер, ҡыяр, һуған, әсе;*

б) телмәр аппаратының һығылмалығын, хәрәкәтсәнлеген үҫтереү, нығытыу күнекмәләре үткәреү;

в) элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, типик фразаларҙы ҡабатлау, нығытыу.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) балаларҙа башҡорт телендә аралашыу теләге уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ҡуян Оҙонҡолаҡ, йәшелсәләр – кишер, ҡыяр, һуған, сүкеш, ҡыңғырау, барабан, ҡағыҙ, тылсымлы тоҡсай, тыштарына кишер, ҡыяр, һуған төшөрөлгән биҙрә йә ҡумта, ширма.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе ширма артында сүкеш туҡылдата, ҡыңғырау шылтырата, барабан һуға,

ҡағыҙ йомарлай һәм  балаларҙан ниндәй предметтың тауышы сыҡҡанды әйтергә һорай. Аҙаҡ предметтарҙы күрһәтеп, сыҡҡан тауыштарҙы әйтеп ҡарайҙар: сүкеш – туҡ-туҡ, ҡыңғырау – дзын-дзын, барабан – бом-бом, ҡағыҙ – шырҡ-шырҡ тауышын сығара.

Ҡунаҡҡа Айгөл менән Оҙонғолаҡ килә. Уларҙа тылсымлы тоҡсай. Уның эсендә йәшелсәләр.

Айгөл ҡуянға тоҡсай эсенә ҡулын тығып, һәрмәп, унда нимә ятҡанын әйтергә ҡуша. Ҡуян  кишерҙе таба ла: "Был – кишер! Мин кишер яратам! - тип, уны тоҡсайҙан сығарып балаларға күрһәтә. Айгөл балаларҙан һорай: "Был нимә? Кишерме? Балалар: "Әйе, был-кишер, -тип әйтәләр. Әгәр русса әйтһәләр, Айгөл аңламаған булып, ҡабатлап һорай. Тәрбиәсе ул саҡта тәржемә итеп, һүҙҙең мәғәнәһен аңлата.

Артабан Айгөл (тәрбиәсе) бер-ике баланы саҡырып, ҡыяр менән һуғанды һәрмәтеп, уларҙың атамаларын әйттертә: Был-һуған. Был-ҡыяр.

Өҫтәлдә ятҡан йәшелсәләрҙе тәрбиәсе бер-бер артлы балаларға алып күрһәтеп, уларҙың ниндәй һүҙ менән аталғандарын тағы ла ҡабатлата.

Ҡуян: "Уйын миңә бик оҡшаны, балалар ҙа уйнап ҡараһын!" - тип тағы ла тылсымлы тоҡсайҙы алып килә. Был юлы тоҡсайҙың эсенә өсәр-дүртәр кишер, ҡыяр, һуған һалынған. Бала тоҡсайҙың эсендә тәүҙә һәрмәп йәшелсәне таба, шунан уның нисек аталғанын әйтә. Аҙаҡ уны сығарып, балаларға күрһәтеп: "Был нимә?" - тип һорай. Балалар хор менән йәшелсәнең атамаһын әйтәләр.

Тәрбиәсе "Кем күберәк йәшелсә йыя?" уйынын уйнарға тәҡдим итә: бүлмә уртаһына тоҡсайҙағы йәшелсәләр түгелә, ситтәрәк өс бәләкәй биҙрә йәки ҡумта тора. Уларҙың тышына ҡыяр, кишер, һуған һүрәттәре төшөрөлгән. Балалар йәшелсәләрҙе кәрәкле һауыттарға йыйырға тейеш.Йәшелсәләр йыйылып бөткәс, өҫтәлгә ҡуйылалар. Кескәйҙәр шуның кеүек үк йәшелсәләрҙе Айгөл менән Ҡуянға күстәнәскә тип балсыҡтан әүәләйҙәр.

Эш барышында тәрбиәсе "Был нимә? Кишер ниндәй? Кем кишер ярата? Кем ҡыяр ярата? Һуған ниндәй?" һорауҙарын биреп, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығыта.

**17 – се дәрес**

**Тема:** "Ағастар үҫә"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм әйтелешен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү: *ағас (-тар), ҡайын, шыршы, энә (-ләр), япраҡ (-тар), йомшаҡ, осло;*

б) телмәр аппаратының һығылмалығын, хәрәкәтсәнлеген үҫтереү; *ш* өнөнөң әйтелешенә күнегеү үткәреү;

в) үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, типик фразаларҙы ҡабатлау, нығытыу.

г) яңы һүҙҙәрҙе бәйләнешле телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү;

д) балаларҙа башҡорт телендә аралашыу теләге уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, фланелеграф, ҡайын һәм шыршы ағасы ботаҡтары, тәрилкәләрҙә туралған ҡыяр, кишер, һуған киҫәктәре, һәр балаға ҡайын, шыршы силуэты төшөрөлгән альбом биттәре, ҡайын япрағы һәм шыршы энәләре трафареты.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе уларҙы өҫтәл янына саҡыра. Улар өҫтәл тирәләй түңәрәк яһап торалар. Өҫтәлдә өс тәрилкәлә бөтә балаларға ла етерлек киҫәктәргә туралған кишер, ҡыяр, һуған. Шулай уҡ һәр тәрилкәлә берәр бөтөн йәшелсә ята.

Тәрбиәсе балаларҙан: "Был нимә?" тип һорап, йәшелсәләрҙең нисек аталыуын әйттерә һәм һәр йәшелсәне тәмләп ҡарарға тәҡдим итә, һорауҙар биреп уларҙы яуапларға мәжбүр итә:

Был нимә? (кишер, ҡыяр, һуған)

Кишер ниндәй? (тәмле)

Ҡыяр ниндәй? (тәмле)

Һуған ниндәй? (әсе)

Балалар урындарына ултыралар. Фланелеграфта ҡайын һәм шыршы һүрәте. Тәрбиәсе балаларҙан уларҙың нимә һүрәте икәнлеген һорай. Балалар рус телендә яуаплай алалар.

Тәрбиәсе русса был ағастарҙың башҡортса нисек аталғандарын Айгөл килгәнсе өйрәнеп, уны аптыратайыҡ әле ти. Шыршы, ҡайын һүҙәрен балалар һүрәткә ҡарап тәүҙә хор менән әйтеп, аҙаҡ – һәр бала айырым рәүештә әйтеп, өйрәнәләр.

Айгөл инә. Ҡулында ҡайын һәм шыршы ботаҡтары. Айгөл һаулыҡ һораша һәм балаларға бүләк алып килеүен әйтә. Ботаҡтарға күрһәтеп, уларҙың нимә икәнлеген һорай. Балалар хор менән ике ағасты ла атайҙар, Айгөл ғәжәпләнә.

Тәрбиәсе балаларҙы маҡтай, фланелеграфҡа күрһәтеп, балаларҙан ағастарҙың нисек аталғандарын тағы ла әйтергә һорай. Балалар хор менән яуап бирәләр.

Тәрбиәсе ҡайын ботағын ҡулға алып, япраҡтарға күрһәтеп: "Был-япраҡтар", - ти. Бер япраҡты өҙөп, балаларға күрһәтеп: "Был-япраҡ", - ти. Шул рәүешле шыршы энәләренең мәғәнәһен аңлата.

"Япраҡ, япраҡтар, энә, энәләр" һүҙәрен балалар хор менән, аҙаҡ айырым-айырым ҡабатлайҙар.

Тәрбиәсе ел ваҡытында япраҡтар нисек шаулағанын әкрен генә *шшш-шшш* тип әйтеп күрһәтә, балалар уның артынан ҡабатлайҙар. Көслө ел иҫкәндә япраҡтар ныҡ шаулай, шуға балалар *шшш-шшш* тип көслө тауыш менән әйтәләр. Күнегеү дүрт-биш тапҡыр ҡабатлана.

Балалар ҡайын япраҡтарын тотоп, уларҙың йомшаҡ икәнлеген, шыршы энәләренең осло икәнлеген асыҡлайҙар. Тәрбиәсе ҡайын һәм шыршы ботаҡтарын фланелеграфтағы ағастарҙың ҡайһыныһына ҡуйырға мөмкин тип һорай һәм ни өсөн. Балалар аңлаталар.

Ағас ботаҡтары ваза менән өҫтәл уртаһына ҡуйыла. Балаларға ҡайын һәм шыршы һүрәттәрен эшләргә тәҡдим ителә. Улар альбом битендәге ағастар силуэтына трафарет ярҙамында япраҡтар һәм энәләр төшөрә.

**18-19 – сы дәрестәр**

**Тема:** "Һары көҙ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм әйтелешен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү: *ямғыр яуа, һары, көҙ, ҡойола (-лар);*

б) "Ямғыр яуа" уйынының һүҙҙәрен, уйнау тәртибен өйрәтеү;

в) һары төҫтө айыра белергә өйрәтеү;

г) яңы һүҙҙәрҙе бәйләнешле телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү;

д) балаларҙа иғтибарлылыҡ, тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ сифаттары тәрбиәләү.

**Йыһаз:** йоҡаҡ ҡына ҡағыҙҙан эшләнгән көҙгө япраҡтар, таҡтала таҙа ҙур ватман бите, өс һауытта шыйыҡса рәүешендәге ҡыҙыл, көрән, һары буяуҙар, уларҙы ҡаплаған поролон киҫәктәре.

**Дәрес барышы:**

Балалар ҡулында һары, ҡыҙыл, көрән төҫтәге еңел генә ҡағыҙ япраҡтар. Тәрбиәсе балаларға уларҙы өрөп, устарынан төшөрөргә ҡуша (өс-дүрт тапҡыр). Һуңғы тапҡыр япраҡтар иҙәндә ҡала.

Тәрбиәсе шул япраҡтарға күрһәтеп, рус телендә балаларға аңлата: "Көҙ еткәс, ағас япраҡтары һары төҫкә инәләр, ошолай ағастарҙан ергә ҡойолалар. Беҙ атлағанда улар *шырҡ-шырҡ* итеп ҡыштырлайҙар". Балаларға япраҡтарҙы күрһәтеп, һорай, яуаптарҙы ҡабатлата:

- Былар нимә? (япраҡтар)

- Япраҡ ниндәй? (һары)

- Япраҡтар ни эшләй? (ҡойола)

Тәрбиәсе балаларға тороп, япраҡтар ҡыштырлауын *шырҡ-шырҡ* тип әйтеп күрһәтеп, бүлмә буйлап йөрөргә ҡуша. Аҙаҡ япраҡтарҙы балалар йыйып алалар.

Тәрбиәсе балаларға "Ямғыр яуа" тигән уйын уйнарға тәкдим итә:

- *Бына һары япраҡтар* (балалар бүлмә буйлап йөрөйҙәр)
- *Ямғыр яуа : кап-кап* (балалар югереп, урындарына ултыралар).

Уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе көҙгө япраҡтарҙы балаларға ҡул суҡтары ярҙамында төшөрөргә тәҡдим итә. Таҡтаға ҙур ватман бите эленгән, уның эргәһендәге өҫтәлдә һары, ҡыҙыл, көрән төҫтәге шыйыҡ буяуҙар ҡойолған тәрилкәләрҙә поролон киҫәктәре.

Кескәйҙәр устарын поролон киҫәгенә батырып, ҡул суҡтарын буяу менән буяйҙар. Шунан ҡулдары менән ватман битенә баҫалар. Унда япраҡтарға оҡшаш эҙ ҡала.

Был һүрәтте һуңынан ҡабул итеү бүлмәһенә ата-әсәләргә күрһәтеү өсөн элеп ҡуйырға мөмкин.

**Икенсе дәресте** "Көҙгө япраҡтар" һүрәтен ҡарауҙан башлау кәрәк. "Япраҡтар, һары, ҡойолалар" һүҙҙәре ҡабатлатыла, "Ямғыр яуа" уйыны уйнатыла. Уйындың һүҙҙәрен балалар үҙаллы хор менән әйтеп уйнай алалар. Һүрәттән ҡайын, шыршы ағастарын табырға, уларҙың япраҡтарын, энәләрен сағыштырырға мөмкин.

**20 – се дәрес**

**Тема:** "Беҙҙең ҡулдар һәм аяҡтар"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *йоҡла, ҡул (-дар, -дарым), аяҡ (-тар, -тарым), сәпәкәй;*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ә, ү, ө, ф* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Ҡайҙа һеҙҙең ҡулдар (аяҡтар)? Бына беҙҙең ҡулдар (аяҡтар)! Ҡайҙа һинең ҡулың (аяҡтарың)? Бына минең ҡулым (аяҡтарым)! Сәпәкәй итә.*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ҡуян.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Өҫтәлдә ҡурсаҡ Айгөл һәм ҡуян. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм өҫтәлдәге уйынсыҡтарға күрһәтеп, уларҙың кем икәнлеген һораша ла:

- Айгөлдөң йоҡоһо килгән, ә ҡуян һикереп, уға йоҡларға бирмәй, - ти.

Балаларға Айгөлгә бишек йыры йырлап, уны йоҡлатырға тәҡдим итә (аңлатма тәүҙә башҡортса, аҙаҡ – русса):

*Әлли-бәлли, бәү-бәү,*

*Йоҡла, Айгөл, бәү-бәү* (ике тапҡыр йырлана).

Тәрбиәсе ҡулына Айгөлдө алып, ә балалар ҡулдарында бәпес тотҡан кеүек итеп, бәүетеп йырлайҙар. Тәүҙә шәп тауыш менән, аҙаҡ тауыш әкренәйә һәм бөтөнләй әкрен генә йырлана. Айгөл йоҡлап китә, уны карауатҡа һалалар.

Ҡуян тағы һикерә башлай, йығылып китә лә: "Уй-й-й! Ҡулдарым! Ой-й-й! Аяҡтарым! - тип ҡысҡырып илай. Тәрбиәсе тәүҙә башҡортса, аҙаҡ – русса балаларға ҡуяндың ҡулдары ауыртҡан, әйҙәгеҙ "өф-ф-ф" итеп өрөп, уны йәлләйек тип аңлата. Балалар 3-4 тапҡыр өрәләр.

Тәрбиәсе: - Ҡуяндың аяҡтары ла ауыртҡан (тағы ла 3-4 тапҡыр уның аяғына өрәләр). Ҡуян шатланып, балаларға рәхмәт әйтеп, бейей башлай.

Тәрбиәсе балаларҙан: - Ҡайҙа беҙҙең аяҡтар? - тип һорай һәм ҡуян менән бергә бейергә саҡыра.

- Ҡайҙа беҙҙең ҡулдар? (балалар ҡулдарын юғары күтәреп, фонарик эшләп бейейҙәр).

Ҡурсаҡ Айгөл уяна, тәрбиәсе унан балаларға үҙенең ҡулдарын, аяҡтарын күрһәтергә һорай һәм бергәләп түңәрәккә тороп, бейергә тәҡдим итә:

*Бына минең ҡулдарым (ҡулдарҙы өҫкә күтәреп, фонарик эшләргә),*

*Улар сәпәкәй итә (ҡул суҡтарын бер-береһенә һуғалар).*

*Бына минең аяҡтар,*

*Улар шулай бейейҙәр (тыпырлайҙар).* Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

## 21 – се дәрес

**Тема:** " Минең бармаҡтар"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *бармаҡ (-тар, -тарым), бармағым, бер, күп, ҡыңғырау.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *и, ы* өндәрен дөрөҫ әйтергә һәм уларҙың айырмаһын һиҙемләүгә күнекмәләр;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Нисә бармаҡ? Бына беҙҙең бармаҡтар! Был минең бармағым.*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ике ҡыңғырау: береһе – бәләкәй, икенсеһе – ҙур.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Өҫтәлдә ике ҡыңғырау. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм ҡыңғырауҙарҙы күрһәтеп (колокольчики), уларҙың береһе-ҙур, икенсеһе - бәләкәй икәнлеген асыҡлай һәм уйын уйнарға тәҡдим итә.

Малайҙар – ҙур ҡыңғырауҙар була, улар "дынь-дынь-дынь" тип зыңлайҙар, ә ҡыҙҙар – бәләкәй ҡыңғырауҙар булалар. Улар "динь-динь-динь" тип зыңлайҙар. Тәүҙә ҡыҙҙар, шунан малайҙар ҡыңғырауҙар булып 3-4 тапҡыр зыңлайҙар. Ҡыңғырауҙар нисек зыңлағынын тыңлап ҡарайҙар: ҡайһы ҡыңғырау ҡалын, ҡайһынының нәҙек әйтелгәнен асыҡлайҙар.

Аҙаҡ балалар ролдәрен алмашалар һәм уйын тағы ла 2-3 тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе бер бармағын күрһәтеп: "Был нимә? Нисә бармаҡ?" - тип һорай. Балаларға үҙҙәренең бармаҡтарын күрһәтергә ҡуша.

Шунан өҫтәл өҫтөндә тәүҙә бер бармаҡ, аҙаҡ бөтә бармаҡтар менән пианино уйнарға тәҡдим итә. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе бер нисә баланан: "Был – минең бармаҡтарым. Был – бер бармаҡ. Был бармаҡтар күп" - тип әйттереп, пианинола уйнатып ҡарата.

Тәрбиәсе:

- Балалар, Айгөл тағы шиғыр белә, тыңлайыҡ әле (үҙе һөйләй һәм күрһәтә):

*Был бармаҡ – олатай,*
*Был бармаҡ – өләсәй,*
*Был бармаҡ – атай,*
*Был бармаҡ – әсәй.*
*Был бармаҡ – бәләкәй,*
*Уның исеме Айгөл*

(һәр бала шиғырҙы ятлағанда үҙенең исемен әйтә).

Бергәләп һәм айырым шиғырҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар. Аҙаҡ бер нисә бала уны һөйләп бирә.

**22 – се дәрес**

**Тема:** " Айыуҡайҙың башы ауырта"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *баш(-ы), ауырта, йәллә (-йек).*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *с, ө, о* өндәренең дөрөҫ әйтелешенә күнекмәләр;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Был баш. Баш ауырта. Башым ауыртмай.*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) хәтерләү, ятлағанды иҫкә төшөрөү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айыуҡай, уның башы бинт менән бәйләнгән.

***Дәрес барышы:***

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе рус телендә, һуңынан башҡортса:

- Мин-ҡош, ә һеҙ-минең балаларым – ҡошсоҡтарым. Ҡошсоҡтар шатланалар, ҡанаттарын ошолай ҡағалар. Балалар уның артынан хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, иҙән буйлап йөрөйҙәр.

Ҡош-әсәй осоп килеп, балаларын ашата (балалар сүкәйеп ултыралар, баштарын өҫкә күтәреп, ауыҙҙарын киң итеп асалар).

Тәрбиәсе ҡошсоҡтарҙы ашата ла, осоп китә. Уйын өс-дүрт тапҡыр ҡабатлана.

Ҡурсаҡ Айыуҡай инә. Уның башы бинт менән бәйләнгән. Тәрбиәсе:

- Нимә булды, Айыуҡай? Башың ни эшләне?

Айыуҡай: - Ныҡ югерҙем, ишеккә бәрелдем! Башым ауырта!

Тәрбиәсе: - Балалар, айыуҡайҙың башы (тотоп күрһәтеп) ауырта, әйҙәгеҙ, уны йәлләйек!

Тәрбиәсе айыуҡай менән балалар рәтен урап үтә, балалар "өффф-өффф" тип уның башына өрәләр. Айыуҡай ҡыуана, балаларға рәхмәт әйтә һәм: "Башым ауыртмай", -ти.

Тәрбиәсе айыуҡайға "Бармаҡтарым" шиғырын һөйләп ишеттерергә тәҡдим итә:

*Был бармаҡ – олатай,*
*Был бармаҡ – өләсәй,*
*Был бармаҡ – атай,*
*Был бармаҡ – әсәй.*
*Был бармаҡ – бәләкәй,*
*Уның исеме Айгөл*

(Айгөл исемен Айыуҡайға алмаштыралар). Айыуҡай нык шатлана. 3-4 бала тәрбиәсе эргәһенә килеп, хәрәкәттәрҙе күрһәтеп, шиғырҙы һөйләп ишеттерәләр. Тәрбиәсе:

- Айыуҡай, беҙ тағы ла бер шиғыр беләбеҙ, тыңла әле, -тип, шиғыр һөйләп, хәрәкәттәрҙе башҡарып күрһәтә:

Бына минең башым,
Бына айыуҙың башы,
Минең башым ауыртмай,
Айыу башы ауыртмай.

Балалар менән бергә шиғырҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар һәм иҫтә ҡалдырырға тырышалар. Шиғырҙы ятлағас, күмәкләп хор менән әйтә-әйтә бүлмә буйлап һикереп, ырғып уйнайҙар.

**23 – сө дәрес**

**Тема:** " Сәй эсәбеҙ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *сынаяҡ, сәйнүк.*

б) телмәр аппаратының хәрәкәтсәнлеген үҫтереү, нығытыу; *с, сь* өндәренең айырмаһына күнекмәләр үткәреү;

в) шиғыр ятлау, хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, үҙ-ара аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ табиб, уйынсыҡ сынаяҡ, сәйнүк, ҡурсаҡ Айгөл.

***Дәрес барышы:***

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе рус телендә: "Беҙгә ҡурсаҡ табиб килгән. Ул һеҙҙең теште̮регеҙ таҙамы, юҡмы икәнлеген ҡарай. Әйҙәгеҙ, тештәрҙе тел менән уратып ялап сығайыҡ, ауыҙҙар ябыҡ (5-6 тапҡыр). Тәүҙә үҙе күрһәтә.

Хәҙер ауыҙҙы асып, тештәрҙе тел менән ялап сығабыҙ (биш-алты тапҡыр). Тәрбиәсе артынан балалар ҡабатлай.

Хәҙер беҙҙең тештәр таҙа, табибҡа күрһәтәйек (балалар рәтен ҡурсаҡ менән йөрөп урап үтә). Табиб тештәрегеҙ таҙа тине.

Айгөл беҙҙе ҡунаҡҡа саҡыра: өҫтәлдә сынаяҡтар, сәйнүк. Айгөл балаларға: "Был-сәйнүк. Был-сынаяҡ". "Мин сәй эсәм" тип күрһәтә. Балалар уның артынан бер нисә тапҡыр был һөйләмдәрҙе ҡабатлайҙар.

Тәрбиәсе балаларға уйынсыҡ сәйнүк, сынаяҡтар, йә уларҙы алмаштырған предметтарҙы таратып бирә. Ҡурсаҡ Айгөл булып тәрбиәсе балаларға түбәндәге йомоштарҙы үтәргә ҡуша:

*Сәйнүкте өҫтәлгә ҡуй.*

*Сәйнүктән сәй ҡой.*

*Сынаяҡты ал.*

*Сәй эс.*

*Сәй тәмле, рәхмәт.*

Хәҙер күршегеҙҙе сәй менән һыйлағыҙ. Балалар ошо уҡ фразаларҙы әйтеп, алмашлап бер-береһенә сәй эсерәләр.

Тәрбиәсе балаларға ҙур сәйнүк "сы-сы-сы", бәләкәй сәйнүк "си-си-си" тип йырлағанын әйтә. Балалар ҡулдары менән ҙур сәйнүкте күрһәтеп "сы-сы-сы" тип, "си-си-си" тип бәләкәй сәйнүк булып 3-4 тапҡыр әйтеп ишеттерәләр. Аҙаҡтан кем ниндәй сәйнүкте һайлап ала, шуның йырын бөтәһе бергә ҡушылып йырлайҙар.

Тәрбиәсе балаларға яңы шиғыр һөйләй һәм уны бергәләп ятларға тәҡдим итә:

*Сәйнүк йырлай си-си тип,*

*Сынаяҡта сәй-сәй тип,*

*Сәй бик тәмле, эс-эс тип.*

Балалар һуңынан балсыҡтан йәки пластилиндан ҡурсаҡ Айгөлгә сынаяҡтар һәм сәйнүк әүәләйҙәр.

**24 – се дәрес**

**Тема:** " Бутҡа ашайбыҙ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу һәм дөрөҫ әйтергә өйрәнеү: *бутҡа, көршәк, тәмле, тәрилкә, ҡалаҡ (-тар).*

б) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе типик конструкцияларҙа ҡулланырға өйрәтеү;

в) хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, өҫтәл, ултырғыс, тары ярмаһы, көршәк, тәрилкә, ҡалаҡ (-тар).

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе (русса):

- Ҡурсаҡ Айгөл оҙаҡ уйнап асыҡҡан. Әйҙәгеҙ, уға бутҡа бешерәйек. Ниндәй һауыт алабыҙ? (балалар русса *кастрюля, тарелка, горшок* тип әйтеүҙәре мөмкин).

Тәрбиәсе был һауыт-һабаны күрһәтеп, уларҙың тәржемәһен әйтә. Шунан тары ярмаһын алып, тәрилкәгә һалып, балаларға күрһәтә, уны

тотоп, һәрмәп ҡарау мөмкинселеген дә бирә. Тарыны йыуып, кәстрүлгә йәки көршәккә һыу ҡойоп, ярманы һала ла , плитәгә ҡуя.

"Тәрилкә, көршәк, бутҡа, бешерәбеҙ" һүҙҙәрен балаларға отоп алырға өйрәтә:

- Беҙ нимә бешерәбеҙ? (бутҡа)

- Бутҡа нимәлә бешә? (көршәктә, кәстрүлдә)

Бутҡа бешкәнсе кескәйҙәргә В. М. Федяевскаяның "Помощники" хикәйәһен һөйләй:

Саша с Алешей помогали накрывать на стол. Все сели обедать. Суп налили, а есть нечем. Вот так помощники: стол накрыли, а ложки не положили.

Как звали мальчиков?

Что они делали?

Что забыли положить мальчики?

А мы не забыли положить ложку? Да, забыли.

Вот она ложка, по-башкирски называется "ҡалаҡ". Балалар бергә ҡалаҡ һүҙен бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар.

Айгөлгә өҫтәлгә ашарға әҙерләйҙәр. Ул бик шат һәм балаларҙан бутҡаға күрһәтеп:

- Был нимә? (бутҡа)
- Бутҡа нимәлә беште? (кәстрүлдә, көршәктә)
- Бутҡаны нимәгә һалдыҡ (тәрилкәгә)
- Бутҡаны нимә менән ашайым (ҡалаҡ менән)

Башҡортса әйтелгән һорауҙарҙы рус телендә ҡабатлау кәрәк, сөнки кескәйҙәр аңламаҫҡа мөмкин. Яуаптарҙы русса әйтһәләр, мотлаҡ рәүештә башҡортсаға тәржемә итеп, һүҙҙәрҙе бер нисә тапҡыр ҡабатлатыу кәрәк. Айгөл балаларға рәхмәт әйтеп, хушлашып, ҡайтып китә. Кескәйҙәр уйын мөйөшөндә бутҡа бешереп уйнай башлайҙар.

**25 – се дәрес**

**Тема:** "Ҡурсаҡтарға һауыт-һаба һайлайыҡ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү: *һауыт-һаба, самауыр, оҡшай*; үткән дәрестәрҙә өйрәнелгәндәрҙе нығытыу: *сынаяҡ, сәйнүк, тәрилкә, көршәк, ҡалаҡ (-тар).*

б) телмәр ағзаларының хәрәкәтсәнлегенә күнекмәләр үткәреү; *һ* өнөнөң әйтелешен нығытыу;

в) *һауыт-һаба* дөйөмләштереү һүҙенең мәғәнәһе һәм ҡулланышы менән таныштырыу;

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре; диалогты телмәрҙә ҡуллана белергә өйрәтеү: *Ҡайһы тәрилкәне (сәйнүкте, сынаяҡты) алабыҙ? Ошо тәрилкәне (сәйнүкте, сынаяҡты) алабыҙ*;

д) телгә ҡыҙыҡһыныу, үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, уйынсыҡ һауыт-һаба: сәйнүк, сынаяҡ, самауыр, көршәк, тәрилкә, ҡалаҡ (-тар).

*Дәрес барышы:*

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе (русса): *"Тиҙҙән байрам – Айгөлдөң тыуған көнө. Беҙ уға бүләк һайлайыҡ. Хәҙер һауыт-һаба магазинына барабыҙ. Кейендек, балалар, тышта һыуыҡ."* (Балалар тәрбиәсе менән берлектә кейенеү хәрәкәттәрен башҡаралар, элек өйрәнелгән кейем-һалым атамаларын иҫкә төшөрәләр. Бүлмәнең бер мөйөшөндә – трамвай туҡталышында туҡтайҙар һәм трамвай көтәләр).

Тәрбиәсе: "Һыуыҡ, аяҡтар һәм ҡулдар өшөмәһен өсөн һикерешеп алайыҡ". Балалар тәрбиәсе менән бергәләп, *"Һоп-һоп-һоп",* - тип әйтеп ике аяҡлап һикерәләр, *"һу-у, һу-у, һу-у"* тип өрөп, ҡул устарын бер-береһенә ышҡып, йылыталар. (4-5 тапҡыр)

Трамвайға "ултырып" күрше бүлмәгә, йәки уйын мөйөшөнә баралар. Унда һауыт-һаба магазины. Һатыусы ролендә тәрбиәсе балаларҙы ҡаршы ала:

- *Һаумыһығыҙ, балалар!*

- *Һаумыһығыҙ!*
- *Һеҙгә нимә кәрәк? Нимә күрһәтәйем?*

Ҡулына һауыт-һабаны алып, балаларға күрһәтеп, *"Был нимә?"* - тип һорау биреп, үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе ҡабатлаттыра: *Был-сынаяҡ. Был-сәйнүк. Был-тәрилкә. Был-ҡалаҡтар. Был-көршәк.*

Тәрбиәсе кескәйҙәрҙе башҡортса матур һөйләшәһегеҙ икән тип маҡтай. Шунан уларға йомаҡ сисергә тәҡдим итә: *"Ике ҡуллы, дүрт аяҡлы, бер моронло, йыуан эсле – сәйе тәмле"* (йомаҡты мотлаҡ рәүештә рус теленә тәржемә итеү кәрәк).

Тәрбиәсе балаларға самауыр күрһәтә: *Балалар, был нимә? Кемдең өйҙә ошондай әйбере бар?* (балалар йә русса, йә башҡортса яуап бирәләр. Самауыр икәнлеген әйтә алмаһалар, тәрбиәсе үҙе әйтә һәм йомаҡта әйтелгән өлөштәрен тотоп күрһәтеп, йомаҡ һүҙҙәрен яңынан ҡабатлап әйтеп сыға. Күмәкләп "самауыр" һүҙен әйтәләр. Бер нисә бала самауыр янына килеп: *"Был-самауыр",* тип әйтә).

Тәрбиәсе: *Балалар, беҙ бөгөн Айгөлгә һауыт-һаба һайлайбыҙ.*

Һауыт-һаба тигән төшөнсәнең мәғәнәһен аңлата һәм балаларға уларҙың һәр береһен алып, өҫтәлгә ҡуйырға тәҡдим итә: *Саша, Айгөлгә ниндәй тәрилкәне алабыҙ?*

Саша тәрилкәләр араһынан берәүһен һайлап алып, өҫтәлгә ҡуя һәм: *"Ошо тәрилкәне алабыҙ",* - ти.

Шул рәүешле бөтә һауыт-һабаны алып, нисек аталғанын әйтеп, өҫтәлгә ҡуйып сығалар. Тәрбиәсе: *"Беҙ Айгөлгә ниндәй һауыт-һаба алдыҡ?"*- тип яңынан ҡабатлатып сыға. *"Һиңә сәйнүк, самауыр һ.б. оҡшаймы?"*- тип, тағы ла һүҙҙәрҙе ҡабатлата.

Һауыт-һабаларҙы ҡумтаға һалып, ҡайтыр юлға сығалар. Бүлмәлә уларҙы Айгөл ҡаршы ала. Балалар: *"Айгөл, һиңә бүләккә һауыт-һаба алдыҡ, бына",* - тип күрһәтеп, атамаларын әйтеп сығалар. Айгөл ҡыуана, шатлана:

- Миңә сынаяҡ, самауыр, тәрилкә һ.б. оҡшай! Әйҙәгеҙ сәй эсәйек! - тип уйын башлайҙар.

**26 – сы дәрес**

**Тема:** "Беҙ кейенәбеҙ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу, дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: *тун, салбар, күлдәк, кейен (-ә, -әбеҙ), кей (-ә, -әм);*

б) фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү: *ы - и* өндәренең айырмаһын ишетеүгә күнекмәләр;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: мин күлдәк (салбар, тун) кейәм; салбар, тун, күлдәк – кейемдәр; күлдәк - матур.

г) балаларҙың хәтерләү, иҫтә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү, һүҙҙәргә, уларҙың әйтелешенә иғтибарлылыҡ тәрбиәләү;

д) телгә ҡыҙыҡһыныу, үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл һәм ҡурсаҡ кейем-һалымы: күлдәк, салбар, тун.

***Дәрес барышы:***

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе: "Ҙур машина *бы-бы-бы*, бәләкәй машина *би-би-би* тип геүелдәй. Беҙ урамдан китеп барабыҙ. Ниндәй машина геүелдәүен әйтәйек әле".

Тәрбиәсе *бы-бы-бы* һәм *би-би-би* өндәр теҙмәһен бер-бер артлы аралаштырып әйтә, аҙаҡ берәй баланың әйтеүен һорай. Ҡалған балалар геүләү төрөнә ҡарап, *"ҙур машина, бәләкәй машина"* тип әйтәләр һәм ҡулдары менән уларҙың дәүмәлен күрһәтәләр.

Шунан тәрбиәсе автомобилдәрҙең һүрәтен күрһәтә, уларҙың нисек геүләүен әйтергә һорай. Кемдең ниндәй машина булаһы килә – шул машинаның тауышын сығарып, бүлмә буйлап йөрөргә тәҡдим итә.

Ишек шаҡыйҙар. Айгөл инә. Һаулыҡ һораша ла ( уның ролендә тәрбиәсе, тәүҙә – башҡортса әйтә, аҙаҡ аңлатыу рус телендә):

- *Тышта ҡояш, әйҙәгеҙ уйнарға*, - тип балаларҙы саҡыра.

Тәрбиәсе: *Тышҡа сығыр өсөн нимә кейәбеҙ?* - тип һорай (балалар йә русса, йә башҡортса һанап китәләр). Айгөл үҙенең күлдәгенә (салбарына, тунына) күрһәтеп: *"Мин күлдәк кейҙем. Ҡайҙа һеҙҙең күлдәктәр? Мин салбар (тун) кейҙем. Ҡайҙа һеҙҙең салбарҙар (тунығыҙ)?"- ти. Тун, салбар, күлдәк – минең кейемдәрем.*

Тәрбиәсе бер нисә балаға Айгөлгә үҙҙәренең күлдәген, салбарын, тунын күрһәтергә һорай. Балалар күрһәтәләр.

Айгөл ҡурсаҡтарҙы кейендереп, тышҡа алып сығырға тәҡдим итә һәм балаларҙы ҡурсаҡ мөйөшөнә саҡыра. Тәрбиәсе етәкселегендә ҡурсаҡтарҙы кейендереү һәм сисендереү уйыны башлана. Уйын барышында өйрәнелгән һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр нығытыла: *Мин күлдәк (салбар, тун) кейәм. Күлдәк (салбар, тун) матур. Күлдәк, салбар, тун – кейемдәр.*

Һөйләмдәрҙе айырым-айырым һәм хор менән ҡабатлатыу кәрәк.

**27-28 – се дәрестәр**

**Тема:** "Балалар урамға сығалар"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу, дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: *итек, бийма, бүрек, йылы;*

б) артикуляция күнекмәләрен үткәреү: *һо-һо, һу-һу* ижектәрен, *у-ү* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеүҙе нығытыу;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *Айгөл итек (бийма) кейә;* үткән дәрестә өйрәнелгән һөйләмдәрҙе: *мин күлдәк (салбар, тун) кейәм; салбар, тун, күлдәк – кейемдәр; күлдәк- матур – нығытыу*;

г) балаларҙың хәтерләү, иҫтә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү;

д) телгә ҡыҙыҡһыныу, үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡтар Айгөл һәм Азат, ҡурсаҡ кейем-һалымы: күлдәк, салбар, тун, итек, бийма, бүрек.

*Дәрес барышы:*

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе: "*Балалар, тышта ҡар яуа. Ҡар бөртөктәрен осорайыҡ әле. Һауаны эскә алабыҙ ҙа көс менән "һу-һу" тип әйтеп, устағы ҡар бөртөктәрен өрөп төшөрәбеҙ (һ-ғ тапҡыр).*

"Ел" уйыны. Тәрбиәсе:*"Ел сыҡты, ул әкрен генә "ү-ү-ү" тип иҫә".* Тәрбиәсе күрһәтеүенсә балалар бүлмә буйлап әкрен генә йөрөп, өрөп күрһәтәләр.

*"Ел тынды"*- балалар сүкәйеп ултыралар.

*"Ел көсәйҙе, ул "у-у-у" тип шәп иҫә".* Балалар көслө ел булып, "у-у-у" тип өрөп күрһәтәләр, бүлмә буйлап әйләнә-әйләнә йөрөйҙәр.

*"Ел тынды"*, - тип тәрбиәсе әйткәс, балалар тағы сүкәйеп ултыралар Уйын һ-ғ тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе ҡурсаҡтарҙы тышҡа алып сығырға кейендереү кәрәклеген әйтә: *"Бына беҙҙең ҡурсаҡтар Айгөл менән Азат. Уларға нимә кейҙерәбеҙ? Ҡайҙа Айгөлдөң (Азаттың) күлдәге (салбары, туны)?* (тәрбиәсе балалар менән бергәләп, ҡурсаҡтарҙы сиратлап кейендерә. Кейендереү барышында кейемдәрҙең исемен ҡабатлата).

*Аяҡтарына нимә кейҙерәбеҙ? Быйма, итеккә күрһәтеп: "Был нимә?" - тип һорай.* Балалар русса әйтһә, башҡортса тәржемә итә. *"Башына нимә кейҙерәбеҙ?"*- тип һорап, ҡурсаҡ кейемдәрен күрһәтә-күрһәтә, тәрбиәсе яңы типик һөйләмдәрҙе балаларҙан ҡабатлата:

*Айгөл (Азат) күлдәк (салбар, тун) кейә.*

*Айгөл (Азат) аяҡтарына итек (быйма) кейә.*

*Айгөл (Азат) башына бүрек кейә.*

Ике ҡурсаҡты ла балалар менән бергәләп кейендереп, уйынсыҡ диванға ултырталар. Тәрбиәсе етәкселегендә улар менән "Беҙҙең ҡулдар һәм аяҡтар" тигән уйын ойошторола, уның барышында элек өйрәнелгән һүҙҙәр нығытыла.

Тәрбиәсе: *"Ҡайҙа беҙҙең ҡулдар?"*

Балалар, ҡулдарын өҫкә күтәреп күрһәтеп, әйтәләр: *"Бына беҙҙең ҡулдар!"*

Тәрбиәсе: *"Беҙҙең ҡулдар нимә эшләй?"*

Балалар: *"Беҙҙең ҡулдар сәпәкәй итәләр"* (сәпәкәйләйҙәр).

Тәрбиәсе: *"Ҡайҙа беҙҙең аяҡтар?"*

Балалар: *"Бына беҙҙең аяҡтар"* (тыпырлатып күрһәтәләр)

Тәрбиәсе: *"Беҙҙең аяҡтар нимә эшләй?"*

Балалар: *"Беҙҙең аяҡтар бейей"* (тороп, бейейҙәр. Тәрбиәсе хәрәкәттәрҙе тәүҙә үҙе күрһәтә һәм балалар менән бергә ҡабатлай).

**Икенсе дәресте** шул уҡ күнекмәне *"һо-һо-һо", "һу-һу-һу"* ижектәре менән үткәреп, башлау кәрәк. "Ел" уйынын уйнатыу.

Тәрбиәсе Айгөлдөң кейемдәрен күрһәтеүҙе һорай. Бер нисә бала ҡурсаҡтың кейемдәрен күрһәтеп: *"Был Айгөлдөң күлдәге (салбары, туны, итеге, бүреге"* - тип, тәрбиәсе артынан ҡабатлап әйтә. Әгәр бала кейемдең исемен әйтмәй генә төртөп күрһәтә икән, был саҡта тәрбиәсегә: "Был нимә?"- тип башҡа балаларға мөрәжәғәт итеү кәрәк. Тәүҙә бер нисә баланан, аҙаҡ бөтә балаларҙан да бергә әйттереү кәрәк: *Был – күлдәк (салбар, тун, итек, бийма). Айгөл менән Азат ҡайҙа баралар? Тун йылымы? Тотоп ҡарайбыҙмы?*

Ҡурсаҡтарҙы ҡабул итеү бүлмәһенә тышҡа сығырға әҙерләп ултыртып ҡуялар.

Тәрбиәсе балаларға "Аяҡтар нисек һөйләшә?" тигән уйын уйната: ҡыҙҙар итек, ә малайҙар бийма "кейгән".

Тәрбиәсе: *"Итек кейгән аяҡтар нисек атлай?"* - тигәс, ҡыҙҙар "тып-тып" тип әйтә-әйтә бүлмә буйлап, тәүҙә яй, аҙаҡ – шәп итеп атлайҙар, ә малайҙар урындарында шулай уҡ *"тып-тып"* тип әйтеп, ҡул сабып ултыралар.

Тәрбиәсе: *"Биймалар нисек атлай?"*- тигәс, малайҙар тороп, шул уҡ хәрәкәттәрҙе ҡабатлайҙар, тик *"шып-шып"* тип әйтәләр, ә ҡыҙҙар ошо уҡ һүҙҙәрҙе әйтеп, әкрен генә ҡул сабалар. Аҙаҡ ролдәр алмашына. Уйын ә-һ

тапҡыр ҡабатлана. Иң һуңынан бөтә балалар ҙа тороп, итек һәм быйма тауышын әйтеп, бүлмә буйлап йөрөйҙәр.

Дәрес һуңында тәрбиәсе өйрәнелгән кейем-һалымдарҙың һүрәтен күрһәтеп, үҙләштерелгән типик грамматик һөйләмдәрҙе ҡабатлата.

**29 – сы дәрес**

**Тема:** "Ҡар яуа"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: *ҡар яуа, һыуыҡ, ҡыш килде;*

б) телмәр органдарын үҫтереүгә һәм нығытыуға бағышланған артикуляция күнекмәләре;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *ҡар яуа; ҡар һыуыҡ; Айгөл сана шыуа; ҡыш килде;*

г) балаларҙың һиҙеп-тойоу һәләтлеген үҫтереү, күҙәтеүгә, сағыштырыуға өйрәтеү күнекмәләре башҡартыу;

д) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ҡарға һәм уның ҡошсоғо һүрәте, тәрилкәлә ҡар өйөмө, уйынсыҡ сана.

***Дәрес барышы:***

Балалар, ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе ҡарғаның һәм уның балаһының һүрәтен күрһәтеп, рус телендә балаларҙан ҡарға-әсәй нисек ҡысҡыра тип һорай. Балалар : *"Кар-кар-кар"* тип яуаплайҙар. Тәрбиәсе был ҡарғаның асыулы булыуын, сөнки ул балаһына ем тапмаған икәнлеген әйтеп, асыулы ҡарға булып ҡысҡырып күрһәтә: *"Ҡар-ҡар-ҡар".* Балаларға үҙенең артынан ҡарға ҡысҡырыуын ҡабатлата, хор менән, айырым-айырым ҡысҡырып ҡарайҙар. Тәрбиәсе ҡарғаға ем бирә, ул шатланып: *"Кар-кар-кар"* - тип ҡысҡыра. Уның балаһы ла *"Кар-кар-кар"*- тип ҡысҡыра. Балалар ҙа ҡабатлай.

*"Ҡар-ҡар-ҡар"* һәм *"Кар-кар-кар"* һүҙҙәрен бер нисә тапҡыр аралаштырып тағы ла әйтәләр.

Тәрбиәсе: *"Ҡарғалар ем ашай туйҙылар. Улар ирендәрен ялайҙар. Беҙ ҙә улар артынан ҡабатлайыҡ әле",* - ти. Тәрбиәсе артынан балалар ҡабатлайҙар (тәрбиәсе күрһәтеүенә ҡарап, уның артынан ҡабатлайҙар):

- ирендәр асыҡ, йылмайыу ҡиәфәтендә, тел менән ирендәрҙе түңәрәтеп ялап сығыу;

- телде ауыҙҙан сығарып, ирендәр мөйөшөнә еткереп, уңға, һулға йөрөтөү;

- туңдырма ялау – телде ауыҙҙан ныҡ ҡына сығарып, кире индереү (күнегеүҙәр 3-4 тапҡыр ҡабатлана).

Тәрбиәсе балаларҙы тәҙрә янына саҡыра:

- Что видим на улице? (балалар төрлөсә рус телендә яуап бирә алалар). Что это такое белое, которое лежит на земле? Как называется снег по-башкирски? Балаларҙан кемдер белһә – һәйбәт, белмәһә – тәрбиәсе телефон аша Айгөлдән һорап белеп, балаларға *"ҡар"* тип әйтә. "Надо же точно также, как кричит сердитая ворона". Балалар *"ҡар"* тип бер нисә тапҡыр әйтәләр.

Тәрбиәсе усына ваҡ ҡына аҡ ҡағыҙ киҫәктәрен алып балаларға күрһәтә лә, ҡулын күтәреп аҫҡа һибә: *"Ҡар яуа – снег идет",* - ти ул. А когда идет снег? Когда холодно. Когда бывает холодно; Зимой. (был аңлатма тәржемә аша, уйнап күрһәтеү аша алып барыла):

*Ҡар яуа. Тышта һыуыҡ. Ҡыш килде.*

Ишек шаҡыған тауыш. Айгөл инә. Ҡулында һауытта ҡар өйөмө, икенсе ҡулында – сана. Тәрбиәсе уның менән һаулыҡ һораша һәм: *"Нимә ул һиндә?"*- тип һорай. Ә Айгөл балаларҙан һорай, балалар эргәһенән үтеп, уларға ҡарҙы тотоп ҡарарға тәҡдим итә. Балалар: *"Был-ҡар",* - тип яуаплайҙар. Айгөл: *"Ҡар ниндәй?" Балалар: "Ҡар һыуыҡ"* - тип әйтәләр.

Айгөл тышта уйнағанын, ҡарҙа сана шыуғанын әйтә, санаһын күрһәтә. Тәрбиәсе Айгөлдө санаһына ултыртып, тау макетынан шыуҙырып төшөрә: *Айгөл сана шыуа.*

Тәрбиәсе балаларға *"Ҡар яуа"* уйынын уйнарға тәҡдим итә. Ул *"Ҡар яуа",* - тип әйткәс, балалар урындарынан тороп, ҡулдарын йәйеп, ҡар бөртөктәре булып, әйләнеп-әйләнеп йөрөйҙәр. *"Ҡар ергә төштө",* тип

әйткәс, балалар сүкәйеп ултыралар. *"Ҡар һыуыҡ"* тигәс, тороп, ҡулдарын "һу-һу-һу" тип өрөп йылыталар. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

**30-31 – се дәрестәр**

**Тема:** "Шыршы байрамы"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: *шыршы байрамы, Яңы йыл, Ҡыш бабай, бүләк, йыр, йырла(-й, -ныҡ);*

б) телмәр органдарын үҫтереүгә һәм нығытыуға һәм дөрөҫ тын алыуға бағышланған артикуляция күнекмәләре;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *шыршы байрамы булды, шыршы матур, Ҡыш бабай бүләк бирә, һаумы Яңы йыл;*

г) балаларҙың иғтибарлылығын, аң-зиһенен, хәтерен үҫтереү күнекмәләре башҡартыу;

д) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, дуҫлыҡ, бер-береңә ихтирам тойғолары тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡтар Айгөл һәм Азат, уйынсыҡтар, балаларға күстәнәстәр, шыршы, пластилин, шыршы силуэты төшөрөлгән обой киҫәге, елем, Ҡыш бабай, уйынсыҡтар төшкә һүрәттәр.

***Дәрес барышы:***

Бүлмә уртаһында шыршы ағасы йәки шыршы ботаҡтары ҡуйылған ваза. Балалар бүлмәгә инеп, шыршы тирәләй ярым түңәрәк яһап, торалар. Тәрбиәсе был ағас нисек атала, япраҡтары ниндәй икәнлеген уларҙың иҫтәренә төшөрә. Балалар русса яуап ҡайтарһалар, үҙе әйтеп, ҡабатлата:

- *Балалар, был ниндәй ағас?*
- *Был шыршы ағасы.*
- *Япраҡтары бармы?*
- *Юҡ, энәләре генә бар.*
- *Шыршының энәләре ниндәй (осло, йәшел).*

Кескәйҙәр ҡул устары, бармаҡтары менән энәләргә тейеп ҡарайҙар.

Ишек туҡылдаталар. Тоҡсай йәки кәрзин тотоп, ҡурсаҡ Айгөл менән Азат инәләр. Кәрзиндә уйынсыҡтар. Айгөл:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Шыршыны байрамға биҙәйек. Яңы йыл байрамы була. Тәрбиәсе русса тәржемә итә. Унын ярҙамында балалар шыршыны биҙәйҙәр. Тәрбиәсе:

- Шыршы ниндәй булды?
- Шыршы матур булды.
- Шыршыла нимәләр бар?
- Шыршыла уйынсыҡтар бар.

- Балалар, шыршы байрамына Ҡыш бабай килә. Ул бүләктәр бирә. Беҙ уға башҡортса шиғыр һөйләйек, йыр йырлайыҡ, ярармы?

Балалар шиғыр ятлайҙар:

*Шыршы матур, шыршы матур,*

*Шыршы һәр саҡ йәм-йәшел,*

*Энәләрен ҡоймай бер ҙә,*

*Һәр ваҡытта йәпөйәш ул.*

*Шыршы матур биҙәкләнһә,*

*Ҡыш бабай ҙа ярата.*

*Ҡотло булһын, Яңы йыл! - тип*

*Беҙгә бүләк тарата.*

Балалар "Ҡар яуа" уйынын уйнайҙар Аҙаҡ пластилиндан ҡурсаҡтарға, йәнлектәргә уйынсыҡтар әүәләйҙәр.

**Икенсе дәресте лә** шул уҡ шыршы эргәһендә дауам итеү кәрәк. Балалар шыршы янында ярым түңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Йүгереп ҡуян килеп сыға ла, аптырап, балаларҙан һораша. Улар яуап бирәләр:

- Был нимә? (был-шыршы)
- Шыршыға нимәләр эленгән? (шыршыға уйынсыҡтар эленгән)
- Ни өсөн шыршы шулай матур? (бөгөн байрам)

- Ниндәй байрам? (Яңы йыл байрамы)
- Байрамда нимә эшләйҙәр (байрамда йыр йырлайҙар, шиғыр һөйләйҙәр, Ҡыш бабай бүләк бирә)

Ҡуян байрамға ҡурсаҡ Айгөлдө һәм Азатты, йәнлектәрҙе саҡыра. Бергәләп Ҡыш бабайҙы саҡыралар: "А-у, а-у, а-у, Ҡыш бабай!" Алыҫтан әкрен генә "А-у, а-у, а-у", - тип Ҡыш бабай яуаплай. Ошо рәүешле балалар тәүҙә әкренерәк тауыш менән, аҙаҡ ҡысҡырып Ҡыш бабайҙы саҡыралар, ул да шулай уҡ яуаплай (һ-ғ тапҡыр).

Таяғын туҡылдатып, Ҡыш бабай килеп инә. Уның тоҡсайында балалар әүәләгән бүләктәр һәм балаларҙың үҙҙәренә лә етерлек кимәлдә күстәнәстәр (кәнфит һ.б.) һалынған.

Ҡыш бабай һаулыҡ һораша, байрам менән ҡотлай. Кем ниндәй һөнәр белә, күрһәтергә һорай: бер нисә бала шиғыр һөйләй, ҡурсаҡтар бейей һ.б. Ҡыш бабай бүләктәр тарата һәм һаубуллашып сығып китә.

Балалар, шыршы байрамына бағышлап йәбештереү менән булышалар: өҫтәлдә йәшел шыршы йәбештерелгән обой киҫәге ята, тәрбиәсе балаларға төрлө уйынсыҡтар төшкән һүрәттәр таратып бирә. Балалар уларға елем һөртөп, шыршыға йәбештерәләр. Эш барышында тәрбиәсе балалар менән типик һөйләмдәрҙе ҡабатлата:

*Шыршы байрамы булды. Шыршы матур. Айгөл йыр йырлай. Беҙ бейенек. Ҡыш бабай бүләк бирҙе. Һаумы, Яңы йыл!*

## 32 – се дәрес

**Тема:** "Тышта уйнайбыҙ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *сана, шыуа (-лар), шатлана;* үтелгәндәрен нығытыу*;*

б) телмәр органдарын үҫтереүгә һәм нығытыуға, фонематик ишетеү һәләтен формалаштырыуға, тауыш көсөн билдәләй белеүгә күнекмәләр үткәреү;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *Айгөл сана шыуа. Азат шатлана;*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, өйрәнергә теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, кәзә, һыйыр, ҡаҙ, бесәй, эт һүрәттәре, фланелеграф йәки ковролин, унда урынлаштырыу өсөн сана шыуған ике бала һүрәте, уйынсыҡ сана, ҡарлы тау; йәбештереү өсөн һүрәттәр, елем.

*Дәрес барышы:*

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе йәнлектәр төшкән һүрәттәрҙе күрһәтә һәм улар һымаҡ тауыш сығарырға тәҡдим итә: кәзә – *бә-ә-ә, бә-ә-ә,* һыйыр – *мө-ө-ө, мө-ө-ө,* ҡаҙ – *ға-а, ға-а, ға-а,* бесәй – *мыяу-мыяу,* эт – *һау, һау,* - тип ҡысҡыра. Балалар рус өндәренә оҡшатып әйтәләр икән, ҡурсаҡ Айгөл һымаҡ итеп әйтегеҙ тип, ҡабатлатыу кәрәк.

Һүрәттәрҙе йыйып, тәрбиәсе Айгөл исеменән үҙе йәнлек тауыштарын ҡабатлап әйтә лә, балаларға ниндәй хайуандың тауышы икәнлеген билдәләргә ҡуша. Шунан кескәйҙәргә "Алыҫ һәм яҡын" уйынын уйнарға тәҡдим итә: үҙенең эргәһенә саҡырылған балаға эттең алыҫтан, аҙаҡ яҡындан өргәнен күрһәтергә ҡуша, ә ултырған балаларға эт тауышы ҡайҙан – алыҫтанмы әллә яҡынданмы ишетелгәнен әйтергә ҡуша. Шулай итеп, һүрәттәрҙәге бөтә йәнлектәр тауышы әйтелеп бөткәнсе, уйын дауам итә.

Тәрбиәсе фланелеграфҡа йәки ковролинға балаларҙың сана шыуған һүрәтен ҡуя:

- Балалар, былар кемдәр? (балалар Айгөл менән Азат, малай менән ҡыҙ, мальчик и девочка һ.б. тип әйтеүҙәре мөмкин. Башҡортсаға тәржемә итеп, һөйләшеүҙе башҡортса алып барыу кәрәк). Улар нимә эшләй? (сана шыуалар). Һүрәт буйынса кем нимә кейгән, ҡар ниндәй һ.б. балалар менән ҡабатларға мөмкин.

Аҙаҡ обой киҫәгенә сана шыуыуҙы һүрәтләгән күренеште йәбештерергә була: Айгөл менән Азат ҡарлы тауҙан сана шыуалар.

Тәрбиәсе һәр хәрәкәтен балалар менән кәңәшләшеп, уларҙы һөйләшеүгә саҡырып, башҡорт һүҙҙәрен, типик һөйләмдәрен ҡабатлатып, йәбештереү ысулы менән панно эшләй. Эште фланелеграфтағы һүрәткә ҡарап, сағыштырып, эшләү яҡшы була: Был

кем? (Айгөл һәм Азат), Был нимә? (тау, ҡар, сана һ.б.) Был Айгөл. Ул сана шыуа. Был Азат. Ул шатлана. Тауҙа ҡар. Ҡар һыуыҡ һ.б.

**33 – сө дәрес**

**Тема:** "Кемдең күлдәге матур?"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *ҡыҙыл, күк, һары;* үтелгәндәрен нығытыу*;*

б) балаларҙы төҫтәрҙе айырырға һә уларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *Был ниндәй төҫ? Ҡайҙа ҡыҙыл шар? Айгөлдөң күлдәге ниндәй төҫтә?;*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, өйрәнергә теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ҡыҙыл, күк, һары күлдәк кейгән өс ҡурсаҡ, һауа тултырылған күк, ҡыҙыл, һары төҫтәге шарҙар, һәр балаға таратма материалдар: ҡурсаҡ һәм уға "кейҙереү өсөн" өс төҫтәге киҫелгән күлдәк силуэттары, ошо уҡ төҫтәге төҙөлөш материалдары .

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Ҡыҙыл, һары, күк төҫтәге шарҙар стенаға эленгән. Һәр төҫтәге шар бер нисәү. Ошо уҡ төҫтәге күлдәктәр кейгән ҡурсаҡтар диванда ултыра.

Тәрбиәсе: - *Балалар, бөгөн Айгөлдөң тыуған көнө. Уға ҡунаҡтар килгән. Улар Айгөлгә шарҙар алып килгән. Әйтеп ҡарайыҡ әле, кем ниндәй шар алып килгән икән?*

Балалар тәүҙә ҡурсаҡтарға исем биреп сығалар. Тәрбиәсе: *"Әлиә тигән ҡурсаҡ Айгөлгә ҡыҙыл шар алып килгән. Ул үҙе лә ҡыҙыл күлдәк кейгән",* - тип, ҡыҙыл шарҙарҙы һайлап Әлиәгә, күк шарҙарҙы Санияға, һары шарҙарҙы Ғәлиәгә бирергә ҡуша.

*Был ниндәй төҫ? Санияның күлдәге ниндәй төҫтә?* һорауҙары аша тәрбиәсе балаларҙы төҫтәрҙе айырырға өйрәтә.

Айгөл инә, һаулыҡ һораша. Тәрбиәсе уны тыуған көнө менән ҡотлай һәм ҡунаҡтар барлығын, уларҙың бүләккә шарҙар алып килгәнлеген әйтә. Айгөл: *"Ҡайҙа ҡыҙыл (күк, һары) шар?* " - тип

балаларҙан һорай. Бер нисә бала тороп, ҡурсаҡтар исеменән ул һораған шарҙарҙы бер-бер артлы биреп, әйтәләр: тыуған көнөң менән ҡотлайым. Бына бүләккә ҡыҙыл шарҙар һ.б. Тәрбиәсе өҫтәлгә ҡурсаҡтарҙың өсәүһен дә ултырта һәм һорай: "Әлиәнең күлдәге ниндәй төҫтә?" (ҡыҙыл), күлдәге матурмы? (Уның күлдәге матур). Ошо рәүешле һәр ҡурсаҡтың күлдәктәрен баһалап сығалар. Балаларҙың үҙҙәренең дә ҡыҙыл, күк, һары төҫлө кейемдәрен табып күрһәтәләр.

Уйын "Шарҙы тот!". Тәрбиәсе берәмләп һәр балаға "Был ниндәй төҫтәге шар?"- тип шар тоттора. Бала: "Был ҡыҙыл (күк, һары) шар", - тип шарҙы кире тәрбиәсегә бирә.

Балалар өҫтәл артына ултыралар. Тәрбиәсе уларға ҡурсаҡ силуэты төшкән альбом бите һәм силуэтҡа яраҡлап киҫелгән өс төҫтәге күлдәктәрҙе таратып бирә. Ул ҡулына ҡурсаҡ Ғәлиәне алып:

- Бына Ғәлиә. Ул ниндәй төҫтәге күлдәк кейгән? (һары). Һеҙ ҙә үҙегеҙҙең ҡурсаҡҡа Ғәлиәнең күлдәге кеүек һары күлдәк кейҙерегеҙ.

Балалар ҡурсаҡ силуэты өҫтөнә һары күлдәкте һалалар. Шунан ҡалған ике ҡурсаҡ һымаҡ уҡ үҙ ҡурсаҡтарын ҡыҙыл, күк төҫтәге күлдәккә кейендерәләр.

"Шарҙарға өрәбеҙ" уйынын уйнатыу. Тәрбиәсе балаларҙы элеүле торған шарҙар янына саҡыра. Эскә һауа алып, ирендәрҙе торба һымаҡ ослайтып, һауа бөткәнсе, шарҙарға өрөргә тәҡдим итә. Уйын һ-ғ тапҡыр ҡабатлана. Аҙаҡ, кем ниндәй төҫтәге шарға өрҙө тип, тәрбиәсе бер нисә баланан һорай.

Дәрес аҙағында балалар өс төркөмгә бүленеп, ҡурсаҡтарға өй төҙөйҙәр: тәүге төркөм – ҡыҙыл, икенсе төркөм – күк, аҙаҡҡы төркөм – һары төҫтәге төҙөлөш материалдарынан төҙөй.

**34 – се дәрес**

**Тема:** "Иртәнге аш"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *аш бүлмәһе, аш, аша (-й, -йҙар, -йым;* үтелгәндәрен нығытыу*;*

б) балаларҙы исемдең төбәү килеш ялғауҙарын дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү;

в) *з* һәм *ҙ* өндәренең айырмаһын ишетә, әйтә белергә өйрәтеү*;*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, өйрәнергә теләк уятыу.

**Йыһаз:** уйынсыҡ һауыт-һаба, себен менән бал ҡорто һүрәте, пластилин йәки балсыҡ .

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе: "Ҡояш сыҡты. Ҡурсаҡтар ҙа, бөжәктәр ҙә йоҡонан торҙо. Бына себен менән бал ҡорто ла (һүрәттәрен күрһәтеп) иртәнге физкультура күнекмәләрен эшләйҙәр. Себен: *ззз-ззз-ззз*, бал ҡорто: *ҙҙҙ-ҙҙҙ-ҙҙҙ* тип йырлай-йырлай, ҡулдарын алға, өҫкә, ситкә һуҙалар ҙа, шунан аҫҡа төшөрәләр", - ти. Балаларҙы торғоҙоп, уларҙан себен һәм бал ҡорто бызылдауын һәм улар эшләгән хәрәкәттәрҙе ҡабатлата (һ- ғ) тапҡыр.

Тәрбиәсе: "Хәҙер ҡулдарҙы йыуабыҙ, ҡурсаҡтарҙы ла йыуындырабыҙ. Уларға иртәнге аш ашатабыҙ".

Уйын мөйөшөндә ҡурсаҡтарға өҫтәлдәр ҡуйылған, һауыт-һаба әҙерләнгән. Тәрбиәсе ҡурсаҡтарға нимә ашатыуҙы, бутҡаны ниндәй һауытҡа һалыуҙы, кем бутҡа ашай, кем аш ашай һ.б. һораша-һораша, ошо рәүешле балаларҙы өҫтәл әҙерләүгә йәлеп итеп, ҡурсаҡтарға аш, бутҡа ашаталар, сәй эсерәләр. Элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе ҡабатлап сығалар.

Дәрес һуңында балалар ҡурсаҡтарға, себенгә, бал ҡортона пластилиндан йәки балсыҡтан һауыт-һаба әүәләйҙәр. Эш барышында кем нимә ашай, ниндәй һауыттан, нимә менән ашай, нисек һөйләшә (зззз-ззз, ҙҙҙҙ-ҙҙҙҙ) - шулар тураһында әңгәмәләшәләр.

**35 – се дәрес**

**Тема:** "Беҙҙә ҡунаҡтар "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *беҙ (-гә), өҫтәл (-дә), күңелле, ҡунаҡ (-тар), ҡоймаҡ (-тар), эҫе;* үтелгәндәрен нығытыу*;*

б) артикуляция күнекмәләре: *ҫ* өнөн дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) бәйләнешле телмәр үҫтереү, шиғыр ятларға өйрәтеү;

г) телде өйрәнеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу,теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡтар өсөн уйынсыҡ һауыт-һаба, 3-4 ҡурсаҡ, пластилин йәки балсыҡ.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе: *"Балалар, бөгөн беҙгә ҡунаҡтар килә. Ҡунаҡтарҙы һыйларға ҡоймаҡ бешерәйек",* - ти. "Ҡоймаҡ бешерәбеҙ" уйынын уйната: бер ҡулдың усын йомоңҡорап (һауыт итеп) тоторға, икенсе ҡулдың һуҡ бармағы менән уның өҫтөндә болғау хәрәкәттәре яһап: *ҫҫҫ-ҫҫҫ-ҫҫҫ* тип әйтергә. Тәрбиәсе тәүҙә хәрәкәт үтәлешен үҙе күрһәтә. Шунан устарын бер-береһенә шапылдатып һуғып - "ҡоймаҡ бешереп" - *эҫе-эҫе* тип һамаҡлайҙар. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе ҡоймаҡтарҙың бешеүен, ҡунаҡтар килеүгә өҫтәл йәйеү кәрәклеген әйтә. Балалар менән бергәләп өҫтәлгә һауыт-һаба ҡуйыла һәм эш барышында типик һөйләмдәр ҡабатлатыла:

*Өҫтәлгә сынаяҡ (сәйнүк, тәрилкә) ҡуябыҙ.*

*Өҫтәлгә ҡалаҡтар һалабыҙ.*

*Тәрилкәлә ҡоймаҡтар.*

*Сынаяҡта сәй һ.б.*

Тәрбиәсе балаларға шиғыр өйрәтә:

*Беҙ саҡырҙыҡ ҡунаҡтар,*

*Ҡунаҡтарҙың килеүенә*

*Беҙ бешерҙек ҡоймаҡтар* (шиғыр күмәкләп, айырым-айырым ҡабатлатыла).

Ишек шаҡыйҙар. Ҡунаҡтар инә. Һаулыҡ һорашҡас, уларҙы өҫтәл артына ултырталар, балалар нимә эшләгәнлектәрен яңынан ҡабатлап, әйтеп сығалар. Өйрәнелгән шиғырҙы ла һөйләп ишеттерәләр. Пластилиндан йәки балсыҡтан ҡунаҡтарға ҡоймаҡ әүәләйҙәр.

**36 – сы дәрес**

**Тема:** "Минең этем Аҡбай "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *эт (-ем), өрә, шаян, йомшаҡ, Аҡбай;* үтелгәндәрен нығытыу*;*

б) артикуляция күнекмәләре: *р һәм һ* өндәрен дөрөҫ әйтеүҙе нығытыу;

в) һорауҙарға аңлы рәүештә яуап бирә белергә өйрәтеү;

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк, уятыу.

**Йыһаз:** уйынсыҡ эт балаһы, төҙөлөш материалдары.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе ҙур йомшаҡ эт уйынсыҡты күрһәтеп, балаларҙан һорай: *Был нимә?* (балалар йә русса, йә башҡортса әйтәләр).

Тәрбиәсе: *"Был-эт. Уның исеме Аҡбай",* - тип әйтә. Аҡбай балалар менән: *"Мин Аҡбай. Һинең исемең нисек?"*- тип танышып сыға. *"Мин өрә беләм: һау-һау-һау. Һеҙ минең һымаҡ өрә беләһегеҙме?* (балалар уның артынан ҡабатлай). *Мин асыуланһам, ррр-ррр-ррр тип әйтәм, ә һеҙ минең һымаҡ әйтә беләһегеҙме?* (балалар ҡабатлай)".

Аҡбай балаларҙы һикерешеп уйнарға саҡыра. Улар бергәләп, бүлмә буйлап, эт булып өрөп, ырылдап уйнайҙар.

Тәрбиәсе Аҡбайҙы ҡулына алып, уны шаярта: диванға һикертеп мендерә, артҡы аяҡтарына торғоҙа, диванда тәгәрәтеп-тәгәрәтеп

әйләндерә, ҡолаҡтарын уйната, балаларҙың битен ялата, уны балаларҙан тотороп ҡаратып *"йомшаҡ"* тип әйттереп һ.б. уйната л:

- *Балалар, Аҡбай йомшаҡ. Эт шаян,* - тигән төшөнсәләрҙе аңлата. Төҙөлөш материалдарынан Аҡбайға өй эшләйҙәр. Эш барышында өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе ҡабатлап сығалар:

*Минең этем бар. Уның исеме Аҡбай. Эт бәләкәй. Ул йомшаҡ, шаян.*

**37 – се дәрес**

**Тема:** "Бесәй-бесәй-бес "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *бесәй, кескәй, мыр-мыр;* үтелгәндәрен нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән күнегеүҙәр үткәреү, *"б, ә, э, с"* өндәренең әйтелешен нығытыу, телмәр ағзаларын өндәр әйтергә әҙерләү;

в) бәйләнешле телмәр үҫтереү: яңы типик һөйләмдәрҙе отоп алыу: бесәй йомшаҡ, кескәй. Бесәй мыр-мыр тип йырлай;

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк, уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ бесәй балаһы, ҡурсаҡ Айгөл, пластилин йәки балсыҡ.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар.

Ишек артында бесәй мыяулаған тауыш ишетелә (аудиояҙма йәки ололарҙан кемдер бирәү).

Тәрбиәсе: "Нимә ҡысҡыра икән?"- ти. Балалар кошка йә бесәй тип әйтә алалар. Тәрбиәсе ишекте асып, бесәйҙе индерә һәм уны балаларға күрһәтеп, әйтә:

- *Был-бесәй. Бесәй йомшаҡ, бәләкәй. Бесәй кескәй генә* (бәләкәй, кескәй тигән һүҙҙәрҙең бер үк мәғәнәне аңлатыуын төшөндөрә).

Тәрбиәсе балаларға уйын тәҡдим итә: өҫтәлдәге бесәй янына килеп, *"бесәй-бесәй-бес"* тип әйтеп, уның арҡаһынан һыйпарға кәрәк. Бесәй тәпәйе менән баланың ҡулына тейергә тырыша. Кемдең ҡулына бесәй

тейә – ул бала урынына ултыра һәм башҡаса уйында ҡатнашмай. Бөтә балалар ҙа урындарына ултырғансы уйын дауам итә.

Айгөл инә. Ул бесәй балаһы тураһында шиғыр белеүен, уны һөйләп күрһәтә:

*Бесәй, бесәй, бесәй шул,*

*Бесәй әле кескәй шул.*

*Үҙе мырлай ҙа мырлай,*

*Әллә ул шулай йырлай.*

Бесәй шиғыр өсөн шатлана, үҙенең *мыр-мыр* тип йырлауын әйтә. Тәрбиәсе балаларға мырлауҙың мәғәнәһен аңлата һәм бесәй кеүек уларға ла йырлап ҡарарға тәҡдим итә. Балалар тәүҙә әкрен, шунан көслөрәк тауыш менән мыр-мыр тип әйтеп күрһәтәләр.

Тәрбиәсе балаларҙан: "Бесәй тағы ла нисек ҡысҡыра әле?"- тип һорай. Балалар: *"Мыяу-мыяу-мыяу!"*- тип әйтәләр. Тәрбиәсе бесәй асыҡһа, шулай мыяулай, ә туйып, йоҡоһо килһә, *мыр-мыр* тип әйтә ти. Тәрбиәсе балаларға: "Бесәй асыҡҡан!" тиһә – улар *мыяулап* күрһәтәләр, "Бесәй йоҡлай!" - тигәс *мыр-мыр* тип бер нисә тапҡыр әкрен, шунан көслө тауыш менән әйтеп күрһәтәләр. Тәрбиәсе был күнекмәләрҙең үтәлешен иң алда үҙе башҡарып күрһәтә.

Тәрбиәсе балаларға бесәйгә һөт эсергә һауыт әүәләргә тәҡдим итә. Эш барышында өйрәнелгән һүҙҙәр ҡабатлатыла, Айгөлдөң шиғырын бер нисә тапҡыр үҙе һөйләп ишеттерә.

**38 – се дәрес**

**Тема:** "Тауыҡ менән әтәскә ем бирәбеҙ "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *тауыҡ, әтәс, ем, бир (-ә, -әбеҙ;* үтелгән һүҙҙәрҙе һәм типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) *ҡ* өнөнөң дөрөҫ әйтелешен нығытыу;

в) бәйләнешле телмәр үҫтереү, кескәй генә өҙөктө сәхнәләштереп уйнарға өйрәтеү; балаларҙың хәтерен, иғтибарлылығын, фекерләүен үҫтереү;

г) телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү, уны өйрәнеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ театры персонаждары: әтәс, тауыҡ; һауытта бойҙай, пластилин йәки балсыҡ.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балалар алдындағы өҫтәлгә "ти-пә, ти-пә, ти-пә" тип бойҙай бөртөктәре һибә. "Ҡо-ҡо-ҡо" тип әтәс, "ҡу-ҡу-ҡу" тип тауыҡ килеп сыға. Улар, суҡыштары менән туҡылдап, ем сүпләйҙәр.

Тәрбиәсе балаларҙан әтәс менән тауыҡҡа күрһәтеп, һорай: - *Был нимә?* (балалар әйтә алмаһа, үҙе тәржемә итә, йә Айгөлгә шылтыратып белә)*: был-әтәс. Был-тауыҡ. Был-ем. Әтәс менән тауыҡ ем ашай.* Был һөйләмдәрҙе балалар менән бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар, бер нисә баланан айырым әйттереп ҡарай.

Тәрбиәсе балаларҙы өҫтәл ҡурсаҡ театры уйнарға саҡыра. Тәрбиәсе – әтәс, бер бала – тауыҡ ролендә. Әтәс "ҡо-ҡо-ҡо" тип килеп сыға:

- *Һаумыһығыҙ, балалар! Тауыҡ ҡайҙа? Күрмәнегеҙме?*

Балалар: - *Юҡ!*

Әтәс: - *Әйҙәгеҙ, уны саҡырайыҡ: "Тауыҡ, тауыҡ, һин ҡайҙа? Тауыҡ, тауыҡ, кил бында!"*

Тауыҡ: - *Ҡу-ҡу-ҡу, киләм-киләм, ашарға ем алып киләм!*

Тауыҡ килеп инә: - - *Һаумыһығыҙ, балалар! Мин әтәскә ем алып килдем,* - тип өҫтәлгә ем һибә.

Тауыҡ менән әтәс үҙ йырҙарын йырлай-йырлай ем сүпләй башлайҙар (өҙөк 2-3 тапҡыр ҡабатлана. Тәрбиәсе ролен әкренләп балалар башҡара алалар).

Тәрбиәсе: "Тауыҡ менән әтәс шатланып, өйҙәренә ҡайтып киттеләр. Ишетәһегеҙме, әтәс ҡунаҡ саҡыра: "Ки-кә-ри-күк, ки-кә-ри-күк!" Әйҙәгеҙ, әтәстең ҡунаҡтарына сәк-сәк бешерәйек. Балалар сәк-сәк әүәләй башлайҙар.

## 39-40 – сы дәрестәр

**Тема:** "Ҡунаҡтарҙы һыйлайыҡ " (үткәндәрҙе нығытыу дәрестәре)

*Маҡсат:*

а) үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡабатлау *;*

б) артикуляция күнекмәләрен башҡарыу: *ç* өнөнөң дөрөç әйтелешен нығытыу;

в) бәйләнешле телмәр үçтереү, "Ямғыр" яңы уйыны менән таныштырыу, һүҙҙәрен, хәрәкәттәрен отоп алыу;

г) балаларҙы үҙенең уй-фекерен үҙаллы әйтә белергә өйрәтеү, хәтерҙе, иғтибарлылыҡты үçтереү.

**Йыһаз:** өйрәнелгән уйынсыҡ йәнлектәрҙең, йә уларҙың һүрәттәре, уйынсыҡ һауыт-һаба, аҙыҡ-түлек, пластилин йәки балсыҡ.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе өçтәлгә сағыу уйынсыҡтар йәки уларҙың һүрәттәрен һала. Ковролинға йә фланелеграфҡа уларҙы тәүҙә әйттереп, шунан һүрәтен элеп бара:

Был-әтәс (тауыҡ, бесәй, эт, айыуҡай, ҡуян). Уларҙың нисек ҡысҡырғанын әйтеп сығалар. Тәрбиәсе: "Йәнлектәр беҙгә ҡунаҡҡа килгән, әйҙәгеҙ уларҙы һыйларға өçтәл йәйәйек", - тип балаларға өçтәл әҙерләргә тәҡдим итә.

Өçтәлгә нимә ҡуябыҙ (тәрилкә, самауыр, сәйнүк, ҡалаҡтар).Ҡунаҡтарға нимә бешерәбеҙ (бутҡа, аш, сәй, ҡоймаҡтар). "Ҡоймаҡ бешерәбеҙ" уйынын уйнаҙар (35-се дәресте ҡара). Ҡунаҡтарҙы бутҡа, ҡоймаҡ, сәй, аш менән һыйлайҙар. Бергәләп:

*Беҙ саҡырҙыҡ ҡунаҡтар,*

*Ҡунаҡтарҙың килеүенә*

*Беҙ бешерҙек ҡоймаҡтар,* - йырын йырлап бейейҙәр.

**Икенсе дәресте** тәрбиәсе балаларға: "Кемде ҡунаҡҡа саҡырайыҡ?" - тип мөрәжәғәт итеп башлай. Һәр бала тороп, үҙе теләгән ҡурсаҡты, уйынсыҡты алып, өҫтәлгә ҡуя. Ҡуйыр алдынан: "Был – эт. Ул матур, йомшаҡ", - тип уйынсыҡ тураһында үҙе теләгәнен башҡортса әйтә. Тәрбиәсе ярҙамында әлбиттә.

Уйынсыҡтар өҫтәлгә йыйылғас, тәрбиәсе балаларға пластилин бирә: беренсе төркөмгә һауыт-һаба, икенсеһенә – аҙыҡ-түлек әүәләргә ҡуша. Эш барышында өйрәнелгән һүҙҙәр, һөйләмдәр ҡабатлатыла.

Әүәләп бөткәс, уларҙы өҫтәлгә матур итеп теҙәләр, ҡурсаҡтарҙы өҫтәл тирәләй ултырталар һәм ҡунаҡ итәләр.

Тәрбиәсе балаларға *"Ямғыр"* түңәрәк уйынын уйнарға өйрәтә:

*Бер тамсы, ике тамсы,*

*Бер тамсы, ике тамсы*

(балалар ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, әкрен генә түңәрәктә баралар),

*Ә һуңынан, һуңынан, һуңынан*

(һүҙ әйтелеше һәм хәрәкәт көсәйә),

*Өҫкә ямғыр түгелә,*

*Барыһы ла йүгерә, йүгерә, йүгерә*

(шәп итеп түңәрәк буйлап йүгерәләр). Уйын 2-3 тапҡыр уйнала.

Балалар урындарына ултыралар. Уларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен үҫтереү маҡсатында тәрбиәсе "Нимә юҡ булды?" уйынын уйната. Тәүҙә өҫтәлдәге уйынсыҡтарға иғтибар менән ҡарарға, шунан күҙҙәрен йоморға тәҡдим итә. Улар күҙҙәрен йомған ваҡытта, берәй уйынсыҡты алып, артына йәшерә. Балаларҙан "Нимә юҡ булды?" тип һорай. Балалар дөрөҫ әйтһәләр, уйынсыҡ урынына ҡуйыла, дөрөҫ әйтмәһәләр – ситкә алына. Шул рәүешле бөтә уйынсыҡтарҙы ла йәшергәнсе уйын дауам итә.

**41 – се дәрес**

**Тема:** "Бүлмәләге сәскәләр "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *сәскә (-ләр), үҫә (-ләр), күбәләк (-тәр);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың төҫтәрҙе, төрлө тауыштарҙы ишетеп, айыра белеү һәләтен үҫтереү;

в) аңлы рәүештә диалог төҙә һәм яуап бирә белергә өйрәтеү;

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡағыҙ, дөңгөр, тас, сүмес менән һыу, сынаяҡ аҫты менән өҫтө, бүлмә гөлө, күк, һары, ҡыҙыл сәскәләр һәм шул уҡ төҫтәге күбәләктәр, ҡурсаҡ Айгөл.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе ширма артында ҡағыҙ ҡыштырлата, дөңгөр (погремушка) шылтырата, тасҡа һыу ҡоя, бармаҡтары менән өҫтәлдә туҡылдай, сынаяҡ сылтырата һәм балаларҙан нимә тауышы икәнлеген билдәләргә һорай. Балалар әйткәс, предметтың үҙен күрһәтеп, тағы ла ҡабатлата.

Тәрбиәсе өҫтәлгә бүлмә гөлөн алып ҡуя һәм: "Был нимә?"- тип һорай. Балаларҙың цветок, горшок, земля һ.б. тип әйтеүҙәре мөмкин.

"Цветок" башҡортса нисек була тип һорай, әгәр ҙә берәүһе лә әйтә алмаһа, ҡурсаҡ Айгөлгә шылтыратып белә: сәскә. Был һүҙҙең әйтелешен бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар.

Тәрбиәсе: "Бүлмәлә тағы ла сәскә бармы? Күпме? Нисәү?" - тип һорай. Өстән артыҡ булһа, балалар "*сәскә күп"* тип әйтәләр.

Тәрбиәсе русса сәскә ҡайҙа үҫә (растет), уны тышҡа сығарып буламы, юҡмы. Тышта ул туңа, өшөй, сөнки был бүлмә сәскәһе (комнатный цветок) тигән төшөнсәләрҙе балаларға аңлата. Сәскә үҫкән көршәктең ерен әҙ генә соҡоп, тәрбиәсе сәскәнең тамырын күрһәтә. Балаларҙан тәрбиәсе башҡортса һораша:

- Сәскәнең япрағы бармы? Япраҡтар күпме?

Айгөл инә, уның ҡулында сәскәләр гөлләмәһе (букет). Үҙенең тәрбиәсегә сәскәләр алып килеүен әйтә. Айгөл балаларға: "Һеҙ сәскәләр яратаһығыҙмы, мин яратам. Был ниндәй сәскә?(ҡыҙыл, күк, һары). Сәскәне күбәләктәр ҙә ярата" - ти. Тәрбиәсе "Сәскәләр һәм күбәләктәр" уйынын уйната: өҫтәлдә Айгөлдөң сәскәләре. Балалар уларҙың төҫтәрен әйтеп сығалар. Сәскәнең төҫөнә ҡарап, шул уҡ төҫтәге күбәләкте уның өҫтөнә ҡуялар: Был ҡыҙыл сәскә. Уны ҡыҙыл күбәләк ярата.

Балалар пластилиндан сәскәләр әүәләйҙәр.

## 42 – се дәрес

## Тема: "Балыҡ йөҙә "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *өрә (-беҙ), өрҙөк, ҡыуыҡтар, төрлө, балыҡ (-тар);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ө, ҙ, ҡ, ғ* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) - мы, -ме, -мө, -мо һорау киҫәксәләре ярҙамында бирелгән һорауға яуап бирә белергә өйрәтеү;

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк уятыу.

**Йыһаз:** һабын ҡыуыҡтары өрөргә кәрәк булған набор, балыҡтары булған аквариум, ҡумтала ятҡан ж.-ҙ уйынсыҡ, бал ҡорттары, тауыҡтар, ҡаҙҙар һәм балыҡтар һүрәттәре, һәр балаға балыҡ силуэты төшкән альбом бите һәм төҫлө ҡәләмдәр.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балаларға һабын ҡыуыҡтары өрә торған әйберҙәргә күрһәтә лә, уларға йомаҡ әйтә (мәғәнәһен русса аңлата):

*Һабынлы һыуҙан сыҡҡан*
*Әйләнеп матур шарға,*
*"Ҡояшҡа киттем мин", - тип*
*Осто ул юғарыға.*

*Ләкин барып етмәне,*

*Шунда уҡ ул шартланы.*

Балаларҙан йомаҡты сисергә һорай, улар русса яуап бирһәләр, башҡортсаға тәржемә итә: "һабын ҡыуыҕы – мыльный пузырь".

Тәрбиәсе һабын ҡыуыҡтарын өрөп күрһәтә һәм балалар уларҙың осоуын күҙәтәләр. Аҙаҡ тәрбиәсе балаларға күкрәккә тулы итеп һауа алып, "өфф-ф" итеп өрөп, был ҡыуыҡтарға осорға ярҙам итергә һорай ё4-5 тапҡыр).

Шунан тәрбиәсе балаларҙан һорай:

- Беҙ нимә эшләнек? (шарҙар йәки ҡыуыҡтар өрҙөк).
- Һабын ҡыуыҡтары ниндәй? (улар матур, төрлө-төрлө).
- Ҙур ҡыуыҡтар бармы? (ҙур ҡыуыҡтар бар).
- Бәләкәй ҡыуыҡтар булдымы (эйе, бәләкәй ҡыуыҡтар булды).
- Беҙ нисек итеп өрҙөк? ("өфф-ф" итеп өрҙөк).
- Ҡыуыҡтар ниндәй төҫтә? (ҡыуыҡтар ҡыҙыл, йәшел, күк, һары төҫтә).

Тәрбиәсе балаларға һабын ҡыуыҡтары булып бүлмә буйлап әйләнеп "осорға" тәҡдим итә.

Уйын бөткәс, балалар урындарына ултыра һәм тәрбиәсе уларға бал ҡорттары, тауыҡтар, ҡаҙҙар һәм балыҡтар һүрәттәрен йәки уйынсыҡтарын күрһәтә лә, улар нисек итеп һөйләшәләр, шуны күрһәтергә һорай: *бал ҡорттары (ҙҙҙ-ҙҙҙ), тауыҡтар (ҡо-ҡо-ҡо), ҡаҙҙар (ға-ға-ға) балыҡтар (бер нәмә лә өндәшмәйҙәр).*

Тәрбиәсе балаларҙы аквариум эргәһенә килеп, балыҡтарҙы күҙәтергә саҡыра һәм балаларға һорау бирә:

- Балыҡтар күп-ме? (*-ме* һорау киҫәксәһен айырыбыраҡ әйтеп)
- Балыҡтар ҙур - мы? (юҡ, балыҡтар бәләкәй)
- Балыҡтар матур –мы? (эйе, балыҡтар матур)
- Балыҡтар һөйләшә – ме? (юҡ, балыҡтар һөйләшмәй)
- Балыҡтар атлай-мы? (юҡ, балыҡтар атламай, улар йөҙә)

- Балыҡтар ҡайҙа йөҙә? (балыҡтар һыуҙа йөҙә).

Тәрбиәсе балаларға "Эйе, юҡ" уйынын уйнарға тәҡдим итә. Өҫтәлдә ҡумта, унын эсендә төрлө уйынсыҡтар. Тәрбиәсе ҡумта эсендәге берәй предметты ала ла, уны күрһәтеп, балаларҙан һорай: "Был тупмы?" Туп булһа, балалар: "Эйе, был туп", әгәр туп булмаһа "Юҡ, был туп түгел", - тип яуаплайҙар. Аҙаҡ тәрбиәсе урынына 1-2 бала сығып, уйынды ошо рәүешле дауам иттерә ала.

Тәрбиәсе балаларға балыҡ силуэты төшкән альбом биттәре таратып бирә һәм уны төҫлө ҡәләмдәр менән буярға тәҡдим итә. Балыҡтарҙы буяп бөткәс, таҡта эргәһендәге ептәргә элеп ҡуйып, ҙур "аквариум" эшләйҙәр. Эш ваҡытында өйрәнелгән һүҙҙәр нығытыла.

**43-44 – се дәрестәр**

**Тема:** "Өләсәйҙә ҡунаҡта"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *сәк-сәк, ҡоймаҡ, тәмле, бешерә (-ләр);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ҡ-к, э, ө, ф* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) "эйе, юҡ" киҫәксәләрен һәм эйәлек заты ялғауын аңлы рәүештә ҡуллана белергә өйрәтеү;

г) балаларҙың иғтибарын, хәтерен үҫтереү, башҡортса үҙ-ара һөйләшергә ынтылыш уятыу.

**Йыһаз:** "Ғаилә" сюжетлы һүрәте, конверт эсендә саҡырыу ҡағыҙы, сәк-сәк, ҡоймаҡтар сәй.

***Дәрес барышы:***

Балалар ҡулға-ҡул тотоноп, бәләкәй түңәрәк яһап, бүлмә уртаһында торалар. Тәрбиәсе: "Был – һабын ҡыуығы, беҙ хәҙер уны өрөп тултырабыҙ", - ти. Балалар бергә "Өфф-ф" тип өрә-өрә, яй ғына артҡа табан сигеп, түңәрәкте ҙурайталар. Шул рәүешле ҡул суҡтары айырылғансы баралар һәм ҡулдар ысҡынғас, "Пух-х-х" тип ҡыуыҡты (шарҙы) шартлаталар (3-4 тапҡыр).

Тәрбиәсе "Ғаилә" сюжетлы һүрәтен күрһәтә, унда кемдәр барлығын балалар менән бергә асыҡлайҙар (әсәй, атай, мин, һеңлем, ҡустым, өләсәйем, олатайым). Тәрбиәсе балаларҙы берәм-берәм янына саҡырып, баланан һүҙгә эйәлек заты ялғауҙарын ҡушып әйтеүҙе ҡабатлата:

- Был – минең  әсәйем.

- Был – минең атайым һ. б.

Тәрбиәсе өҫтәлдән конверт ала һәм уны асып, Айгөл һәм уның өләсәһе балаларҙы ҡунаҡҡа саҡырыуҙы әйтә.

Балалар ҡунаҡҡа йыйыналар: ниндәй кейем кейергә, Айгөл менән өләсәһенә ниндәй күстәнәс алырға бергәләп һөйләшәләр. Тәрбиәсе уларға бүләк итеп шиғыр ятларға тәҡдим итә:

*Минең өләсәйемә*

*Һоҡланмаған кеше юҡ.*

*Бөтәһе лә маҡтай уны:*

*"Уңғанлыҡта – ише юҡ".* Шиғырҙың мәғәнәһе русса аңлатыла, сюжетлы һүрәттәр аша балаларға өләсәйҙең нимәләр эшләүен төшөндөрөү үткәрелә (сәк-сәк, ҡоймаҡ бешерә, ойоҡ бәйләй һ.б.)

"Ғаилә" һүрәте буйынса "Эйе, юҡ" уйынын уйнатып, үтелгән һүҙҙәрҙе, грамматик категорияларҙы нығыталар: - Был атай – мы? (Юҡ, был атай түгел. Эйе, был атай).

Шиғырҙы тағы ла бер нисә тапҡыр күмәкләп ҡабатлап, аҙаҡ берәм-берәм һөйләп ҡарап, ятлайҙар. Тәрбиәсе балаларға иртәгә өләсәйгә ҡунаҡҡа барасаҡтарын, матур күлдәктәр кейеп килергә кәрәклеген иҫтәренә төшөрә.

**Икенсе дәрес** башҡорт музейында йәки башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә бағышлап йыһазландырылған төркөм мөйөшөндә үткәрелә. Ата-әсәләрҙе, олатай-өләсәйҙәрҙе саҡырып, сәй эсеү ойоштороп була.

Музейҙа балаларҙы өләсәй менән Айгөл ҡаршылайҙар. Һаулыҡ һорашып, ултырғыстарға ултырғас, өләсәй балаларға бөгөн байрам икәнлеген, бик күп ҡунаҡтар килгәнлеген әйтә һәм өҫтәлдәге ашамлыҡтарға күрһәтеп: - Мин ҡунаҡтарға тәмле ризыҡтар әҙерләнем. Бына – сәк-сәк, бына – ҡоймаҡ, тип ашамлыҡтарҙы күрһәтеп сыға. – Аш алдынан уйнап-бейеп алайыҡ, - тип өләсәй бөтәһен дә күңел асырға саҡыра ( 1-2 йыр, 2-3 шиғыр, ололар һәм балалар бейеүе башҡарыла).

"Беҙ ун ике ҡыҙ инек" ("Йәйғор" 1-се китап, 206 бит) тигән башҡорт халыҡ уйыны башҡарыла. Уйында ололар ҙа, кескәйҙәр ҙә ҡатнаша ала.

Һуңынан бергәләп сәй эсәләр, ашамлыҡтарҙың исемдәрен иҫкә төшөрәләр.

**45-46 – сы дәрестәр**

**Тема:** "Ҡурсаҡтар байрамға килгән "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *камзул (-дар), ҡашмау, түбәтәй (-ҙәр);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *р, ы, и* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы башҡорт кейемдәре менән таныштырыу ;

г) үҙ-ара аралашырға теләк уятыу.

**Йыһаз:** уйынсыҡтар: айыу, ҡурсаҡ, ҡуян, өҫтәл, ултырғыс, туп, ҙур һәм бәләкәй түңәрәктәр; башҡорт кейемендәге ҡыҙ һәм малай ҡурсаҡтар; балалар һанына етәрлек ҡашмау һәм түбәтәйҙәр.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе ҡурсаҡ айыуҙы ҡулына ала ла балаларға: - Айыуҡай уйынсыҡтарҙы дөрөҫ итеп әйтә алмайым, - ти. Әйҙәгеҙ уны дөрөҫ әйтергә өйрәтәйек!

Тәрбиәсе айыуға ҡурсаҡты күрһәтә. Айыу: "Ҡу – саҡ", ти. Тәрбиәсе нисек итеп әйтергә кәрәк тип балаларҙан һорай. Балалар: "Ҡуррр – саҡ", тип әйтеп күрһәтәләр. Айыу улар артынан дөрөҫ итеп һүҙҙе ҡабатлай.

Шул рәүешле *ҡуян (уян), өҫтәл (өтәл), туп (тук), ултырғыс (тырғыс)* һүҙҙәре менән күнегеүҙәр үткәрелә.

Тәрбиәсе "Ҡыңғырауҙар" уйынын уйнарға тәҡдим итә. Ул русса унының эстәлеген аңлата: ҙур ҡыңғырау (ҙур түңәрәкте күрһәтеп) "дзын – дзын-дзын" тип, бәләкәй ҡыңғырау (бәләкәй түңәрәкте күрһәтеп) "дзинь – дзинь-дзинь" тип зыңғырлай. Мин ҙур түңәрәкте күрһәтһәм – ҙур ҡыңғырауҙар, бәләкәй түңәрәкте күрһәтһәм – бәләкәй ҡыңғырауҙар зыңғырлай, ти. Төркөмдәге балаларҙың яртыһы - ҙур, икенсе яртыһы – бәләкәй ҡыңғырауҙар.

Тәрбиәсе сигналы менән улар зыңғырлап күрһәтәләр. Аҙаҡ ролдәр алмашына.

Тәрбиәсе бөгөн байрам булыуын, байрамға ҡурсаҡтар килеүен әйтә һәм: "Бына улар – Айгөл менән Урал", - тип, башҡорт кейемендәге ҡурсаҡтарҙы алып, уларҙың кейемдәренә күрһәтә. Тәрбиәсе:

- Айгөлдөң күлдәге бик матур. Башында ҡашмау. Өҫтөндә – камзул. Уралдың түбәтәйе лә ныҡ матур!

Тәрбиәсе балаларға ҡашмау һәм түбәтәй кейҙереп сыға. Тәүҙә уларҙы тотоп ҡарап, нисек аталғандарын күмәкләп һәм айырым-айырым әйтеп, иҫтә ҡалдыралар. Тәрбиәсе үҙе ысын башҡорт кейемен кейә.

Балалар менән бергәләп күңел асыу ойошторалар (өләсәйҙәге ҡунаҡ ваҡытындағы сығыштарҙы ҡабатлау мөмкин). Уйын-йыр ваҡытында өйрәнелгән һүҙҙәр, һөйләмдәр ҡабатлатыла.

**47-48 – се дәрестәр**

**Тема:** "Кем дөңгөрҙә уйнай? "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *дөңгөр, ҡағыҙ, дөгө, борсаҡ, сүкеш, таш (-тар);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ү, у, ө, ң, ш, ы* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү; в) балаларҙы башҡорт уйынсыҡтары менән таныштырыу ;

г) үҙ-ара аралашырға теләк уятыу, иғтибарлылыҡ, хәтер үҫтереү.

**Йыһаз:** һәр балаға ҡауырһын, ҡурсаҡ Айгөл, барабан, сүкеш, һыу, дөңгөр, 3 бәләкәй пластик шешә, тәрилкәлә борсаҡ, дөгө, ваҡ таштар, уйынсыҡ айыу, ҡуян, төлкө.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балаларға ҡауырһындар таратып бирә һәм улар түңәрәккә тороп, уларға "Фуу-у-у" тип өрәләр, осҡандарын күҙәтәләр. Алып, тағы ла өрәләр. (3-4 тапҡыр).

"Айыу балалары бал ашай" уйыны. Тәрбиәсе балаларҙың айыу балалары булыуын, уларҙың бал ашарға яратыуҙарын әйтә. Устарҙы ауыҙ эргәһенә яҡын килтереп (бармаҡтар баланың түшенә ҡаршы тора), устарға теймәйенсә генә, бал ялау хәрәкәттәрен башҡаралар. (3-4 тапҡыр).

Тәүҙә хәрәкәттәрҙе тәрбиәсе үҙе күрһәтә. Аҙаҡтан тәрбиәсе айыуҙар бал ялап туйҙы, улар ирендәрен ялайҙар тип, өҫкө һәм аҫҡы ирендәрҙе ярарға тәҡдим итә. "Үү-ү-ү" тип эстәрен һыйпайҙар.

Ҡурсаҡ Айгөл инә. Ул балаларға "Тауышты таны!" уйынын уйнайыҡ ти. Ҡорған артында ҡағыҙ ҡыштырҙаған, барабан туҡылдаған, крандан һыу тамған, сүкеш менән тимергә һуҡҡан һәм дөңгөр (погремушка) шылтыраған тауыштар ишетелә. Балалар тауыш сығарған предметтарҙы танып, уларҙың исемдәрен әйтәләр. Русса әйтһәләр, Айгөл тәрбиәсенән башҡортсаға тәржемә итергә һорай. Һуңынан Айгөл (тәрбиәсе) был предметтарҙы балаларға күрһәтеп, уларҙан был әйберҙәрҙең нисек тауышланғанын әйттереп сыға:

*Ҡағыҙ "шырҡ-шырҡ"ти.*
*Барабан "бом-бом" ти.*
*Һыу "тып-тып" ти.*
*Сүкеш "туҡ-туҡ" ти.*
*Дөңгөр "шылтыр-шылтыр" ти.*

Балалар менән дөңгөрҙө алып, тикшереп ҡарайҙар. Тәрбиәсе уның эсендә ваҡ ҡына таштар барлығын, һелкетһәң – ул таштар шылтырай икәнлеген аңлата.

Айгөл дөңгөрҙө алып шылтырата, балаларға бейергә тәкдим итә. Балалар күмәкләп бейейҙәр, йүгереп уйнайҙар.

Дәрес аҙағында тәрбиәсе балаларға:

Был – дөңгөр. Дөңгөр шылтырай. Айгөл дөңгөрҙә уйнай, - тигән һөйләмдәрҙе отоп алырға өйрәтә.

**Икенсе дәрестә** Айгөл өс бәләкәй пластик шешә, тәрилкәләрҙә борсаҡ, дөгө, ваҡ таштар алып инә. Ул балаларға:

- Мине атайым дөңгөр эшләргә өйрәтте. Бына ҡарағыҙ, - ти. Тәрбиәсе Айгөл менән берлектә шешәләргә борсаҡ, дөгө һәм таштарҙы һалып, ҡапҡастарын бороп ҡуялар. Эш ваҡытында һүҙҙәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә.

Тәрбиәсе: "Бына, балалар, дөңгөрҙәр эшләнек, әйҙәгеҙ уларҙы уйнатайыҡ", -тип балаларҙың һәр береһенә дөңгөрҙәр таратып бирә. Балалар уларҙы шылтыратып уйнайҙар.

Балалар урындарына ултыралар. Өҫтәлдә ҡурсаҡтар: айыу, ҡуян, төлкө. Тәрбиәсе ҡурсаҡтарға бүләк әҙерләгәнлектәрен әйтеп, балалар менән айыуға, ҡуянға, төлкөгә дөңгөрҙәр бүләк итәләр. Дөңгөрҙе биргән бала: "Был – дөңгөр. Дөңгөр шылтырай", - тип уны һелкетеп бирә.

Аҙаҡ ҡунаҡтар дөңгөрҙә уйнайҙар, балалар бейейҙәр.

## 49 – сы дәрес

**Тема:** "Әсәйҙәр байрамы "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *байрам, бергә, ҡотлай (-ым, -быҙ), шатлана (-быҙ, -лар), сәскә (-ләр), тиҙҙән;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ө, ә, с, к* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларға шиғыр өйрәтеү, әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә ҡарата ихтирам, һөйөү тәрбиәләү;

г) иғтибарлылыҡ, хәтер, фекерләү ҡеүәтен үҫтереү.

**Йыһаз:** әсәйҙәр фотолары йәбештерелгән панно; себеш, тауыҡ, әтәс, бесәй, эт, туп, ҡурсаҡ, дөңгөр, машина һүрәттәре йәки уйынсыҡтары; йәбештереү өсөн һәр балаға ситтәре киртләсләп киҫелгән ҙур һәм бәләкәй түңәрәктәр, икешәр япраҡ һәм сәскә силуэты төшөрөлгән альбом бите, елем, бумала.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе таҡтаға әсәйҙәрҙең фотоһүрәте ҡуйылған панноны элә лә, балаларҙан: "Был-минең әсәйем. Уның исеме Анна", - тип әйттереп, үҙенең әсәһен күрһәттереп сыға.

Тәрбиәсе тиҙҙән байрам буласағын, байрамға әсәйҙәр киләсәген әйтә һәм байрамға шиғыр өйрәнергә тәкдим итә:

*Әсәйем йылмайғас,*
*Өй эсе йәмлерәк,*
*Әсәйем бешергән*
*Аштар ҙа тәмлерәк.*

(тәрбиәсе шиғырҙың мәғәнәһен һүрәттәр аша аңлата, үҙе тасуири итеп һөйләп ишеттерә. Балалар менән күмәкләп бер нисә тапҡыр ҡабатлағас, аҙаҡ бер нисә бала айырым-айырым һөйләп ишеттерә.

Тәрбиәсе "Иғтибарлы бул!" тигән уйнарға өйрәтә. Тәүҙә ҡағиҙәһен аңлата: «Мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, әгәр йәнлектәр булһа, һеҙ ниндәй йәнлек күрәһегеҙ – шул булып ҡысҡыраһығыҙ; әгәр уйынсыҡтар күрһәтһәм, һеҙ уларҙың нисек аталғанын әйтәһегеҙ».

Йәнлектәр: *себеш, тауыҡ, әтәс, эт, бесәй;*

Уйынсыҡтар: *туп, ҡурсаҡ, дөңгөр, машина.*

Тәрбиәсе: "Беҙ хәҙер әсәйҙәргә бүләк әҙерләйбеҙ – йәбештереп, сәскәләр эшләйбеҙ". Һәр балаға сәскәнең силуэты төшөрөлгән ҡағыҙ бите, түңәрәктәр, икешәр япраҡ, елем һәм бумала тарата. Нисек эш итеүҙе тәрбиәсе үҙе күрһәтә. Эш барышында тәрбиәсе түбәндәге һөйләмдәрҙе балалар менән ҡабатлай: *Тиҙҙән әсәйҙәр байрамы. Мин әсәйемде ҡотлайым. Мин сәскә бүләк итәм. Әсәйем шатлана.*

**50-51 – се дәрестәрТема: "Яҙ килә "**

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *ҡояш апай, һыуыҡ ағай, ирей (иретә), яҙ килде;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *у, ү, ҡ, к* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы ҡарҙың үҙенсәлектәре, ҡояш тураһындағы һамаҡ менән таныштырыу ;

г) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** тәрилкәлә ҡар өйөмө, ковролинда ҡояш һүрәте һәм уйынсыҡ йәнлектәр (бесәй, эт, кәзә, ҡуян һ. б.), һәр балаға ҡағыҙ биттәре, түңәрәк-трафарет, төҫлө ҡәләмдәр.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балаларға һауытҡа һалынған ҡарҙы күрһәтеп һорай:

- Был нимә? (ҡар-снег)

- Ҡар ниндәй? (ҡар һыуыҡ, аҡ)

- Ҡарҙы ҡулдарығыҙға аҙ ғына итеп алығыҙ ҙа, устарығыҙға һалып, ҡулдарығыҙҙы йомоғоҙ. Ҡар нимә эшләне? (ҡар ирей-снег тает)

- Ҡар ирегәс, нимә булды? (һыу булды)

- Ҡар ҡайҙа күп?

Тәрбиәсе балаларҙы тәҙрә янына саҡыра ла, тышты (урамды) күҙәтергә тәҡдим итә: юлдарҙа һыу, ҡайҙан килгән был һыу? Ни өсөн ҡар ирей икән, балалар? Уларҙы бер кем дә ҡулдарына алмаған бит, - тип һораша. Балалар үҙаллы: "Ҡояш ҡарҙы иретә", - тип һығымта яһарға тейештәр. Башҡортса әйтә алмаһалар, рус телендә әйттереү кәрәк һәм аҙаҡ был мәғәнәне төшөндөрөү талап ителә.

Тәрбиәсе балаларға ҡояшты саҡырырға тәҡдим итә һәм: "Ҡояш килергә тейеш ине, әле килеп етмәгән икән", - тип ковролинға күрһәтә. Тәрбиәсе ҡояш саҡырғанда әйтелә торған һамаҡты һөйләй:

*Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,*

*Һыуыҡ бабай, кит, кит!*

*Көндәр йылынып китһен*

*Һәм ҡарҙар иреп бөтһөн!*

Балалар менән бергәләп был һамаҡты өйрәнеп, күмәкләп әйткәс, ҡояш күренә. тәрбиәсе балаларҙан уның нимәгә оҡшағанын, төҫө ниндәй икәнлеген белешә:

- Ҡояш ниндәй? (һары, түңәрәк, яҡты, йылы)
- Ул нимәгә оҡшаған? (ҡоймаҡҡа, ҡауынға, тупҡа, тәрилкәгә һ. б.)
-Ҡояш нимә эшләй? (йылыта, яҡтырта, ҡыҙҙыра)

Тәрбиәсе балаларға ҡағыҙ биттәре, төҫлө ҡәләмдәр таратып бирә һәм трафарет менән түңәрәк һыҙырға ла уны һары төҫкә буяп, ҡояш эшләргә ҡуша. Эшләп бөткәс, уларҙы ҡабул итеү бүлмәһенә элеп ҡуялар, элеү ваҡытында һамаҡты ҡабатлайҙар.

**Икенсе дәрестә** тәрбиәсе балаларҙан тағы ла ҡояшты саҡырырға һорай. Һамаҡты 2-3 бала һөйләгәс, бөтәһе лә бергә ҡабатлайҙар. Шунан ковролинда ҡояш күренә. Балалар шатланалар. Тәрбиәсе ҡояш килеүенә йәнлектәрҙең дә шатланыуын әйтә һәм ковролинға ҡуянды, бәрәсте, айыуҙы, этте, бесәйҙе һ. б. теҙеп ҡуйып сыға. Теҙер алдынан балаларҙан: "Беҙгә кем ҡунаҡҡа килде?" - тип һорап, уларҙан: "Беҙгә ҡуян ҡунаҡҡа килде һ. б." тип яуаплата.

Аҙаҡтан балалар "Ел" уйынын уйнайҙар. (27 – се дәресте ҡара). Балаларҙы тынысландырыу һәм үтелгән һүҙҙәрҙе нығытыу маҡсатында тәрбиәсе "Нимә юҡ булды?" уйынын уйната. Өҫтәлдә уйынсыҡтар, балалар ярымтүңәрәк булып ултыралар. Тәрбиәсе тәүҙә өҫтәлдәге уйынсыҡтарҙы балаларға күрһәтеп, уларҙың исемдәрен әйттереп сыға. Аҙаҡ балаларға күҙҙәрен йоморға ҡуша һәм улар күҙҙәрен йомған арала бер уйынсыҡты алып йәшерә һәм күҙҙәрҙе астыра ла һорай: "Нимә юҡ булды?"

Балалар: "Ҡуян (тейен, бесәй һ. б. ) юҡ булды", - тип әйтәләр. Уйын бөтә уйынсыҡтар ҙа алынып бөткәнсе дауам ителә.

### 52 – се дәрес

**Тема:** "Кем һанашмаҡ белә?"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *һана (-йыҡ), һанашмаҡ, сыпсыҡ, сыҡ, еләк;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *һ, ы, ҡ, р* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы һанашмаҡ менән таныштырыу, "Айыу-бүре юҡ икән" уйынын уйнарға өйрәтеү;

г) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** тәрилкәлә ҡар өйөмө, ковролинда ҡояш һүрәте һәм уйынсыҡ йәнлектәр (бесәй, эт, кәзә, ҡуян һ. б.), һәр балаға ҡағыҙ биттәре, түңәрәк-трафарет, төҫлө ҡәләмдәр.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, өҫтәл артында ултыралар. Тәрбиәсе балаларға элек өйрәнгән бармаҡ уйындарын уйната:

*Был бармаҡ – олатай,*
*Был бармаҡ – өләсәй,*
*Был бармаҡ – апай,*
*Был бармаҡ – атай,*
*Был бармаҡ – әсәй,*
*Был бармаҡ – бәләкәй,*
*Уның исеме –* (һәр бала үҙенең исемен әйтә).

Тәрбиәсе бармаҡтарҙы уйнатып алырға тәҡдим итә:

*Бына беҙ йүгерҙек урамға* – һуҡ һәм урта бармаҡтарҙы өҫтәл. йә итәк буйлап йүгертеү, бармаҡтарҙы йөрөткәндә "тып-тып" тип әйтеп барыу кәрәк. Тәүҙә тауышһыҙ, шым ғына, аҙаҡ – ныҡ баҫып, шәп итеп йүгертеү. Был осраҡта аяҡтар менән дә ярҙам итеп була. Иң һуңынан аяҡтар бейей, бармаҡтар пианинола уйнай.

Тәрбиәсе "Айыу-бүре юҡ икән" тигән башҡорт халыҡ уйынын уйнарға тәҡдим итә. Иң беренсе булып *көтөүсене* (йәки *айыуҙы)* һайлап алыу кәрәклеген әйтә. Көтөүсе һанашмаҡ аша билдәләнә. Тәрбиәсе баларға һанашмаҡты нисек итеп әйтеү һәм һанау ысулын күрһәтә.

Тәрбиәсе артынан 2-3 бала һанашмаҡты ҡабатлап әйтәләр һәм балаларҙы һанап күрһәтәләр. Балалар һанашмаҡты ятлап алғас, кескәйҙәр бөтәһе лә түңәрәк яһап теҙелеп торалар. Уртаға бер бала сығып, һанашмаҡты (считалка) әйтеп, кәрәкле хәрәкәттәрҙе күрһәтеп, көтөүсене (айыуҙы) билдәләйҙәр. Һанашмаҡты бөтә балалар ҙа урталағы бала менән бергә әйтеп баралар, ә теге бала ҡулын һәр баланың түшенә тейҙереп бара:

*Тауыҡ, этәс, сыпсыҡ, берең ҡал, берең сыҡ!*

Айыуға бүлмәнең бер мөйөшөндә "өң" билдәләнә, ә балалар бүлмәнең икенсе башында үҙ "өйҙәрендә"- ултырғыстарында йәки иҙәндә ултыралар.

Балалар йырлай-йырлай айыу йөрөгән яҡҡа күмәкләп еләк йыйырға китәләр (тәрбиәсе уйындың ҡағиҙәһен русса аңлата):

*Еләк йыям, еләк йыям,*
*Әсәйемә бүләккә.*
*Бында еләк күп икән,*
*Айыу, бүре юҡ икән.* (һуңғы ике юл ике тапҡыр ҡабатлана).
Балалар йырлап бөткәс, "айыу" өңөнән йүгереп сығып, уларҙы баҫтыра, балалар "өйҙәренә" ҡасалар.

Тотолған бала, йә башҡа бала үҙ теләге менән "айыу" була, уйын яңынан башлана.

Уйнап бөткәс, тәрбиәсе балаларға урындарына ултырырға ҡуша һәм ҡояш апайҙы саҡырырға тәҡдим итә (үткән дәрестәге һамаҡ ҡабатлатыла) һәм балаларға ҡояшты әүәләргә тәҡдим итеlә.

**53-54 – се дәрестәр**

**Тема:** "Бесәй-сысҡан уйнайыҡ"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *сысҡан, шаян, ҡас (-а, -ты), баҫтыр (-а, -быҙ);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *h, а, и, о* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) эйәлек заты ялғауҙарын ҡабатлатыу,

г) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү, үҙ-ара аралашыуға ҡыҙыҡһыныу, теләк уятыу.

**Йыһаз:** туп, тылсымлы тоҡсай эсендә балалар өсөн таныш булған уйынсыҡтар.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе, тупты ҡулына алып: - Миндә шаян туп. (Шаян һүҙенең мәғәнәһен бергәләп асыҡлайҙар.) Ул көлә белә. Айгөл уның менән уйнаһа, ул "һа-һа-һа" тип, Булат менән уйнаһа "һи-һи-һи" тип көлә (балалар ҡабатлайҙар). Туп төшөп китһә, йә ҡолаһа, ул "аһ-оһ"-ти.

Тәрбиәсе: - Мин хәҙер тупты һеҙгә ташлайым, һеҙ туп булып көләһегеҙ. Тәүҙә – малайҙар, аҙаҡ – ҡыҙҙар. Туп төшөп китһә, бөтәбеҙ ҙә "аһ – оһ" тип әйтәбеҙ, - тип уйындың ҡағиҙәһен аңлата.

Уйын шәп кенә темпта алып барыла, аҙаҡ малайҙар һәм ҡыҙҙар ролдәр менән алмашыналар, уйын яңынан ҡабатлана.

Балалар урындарына ултыралар, тәрбиәсе тылсымлы тоҡсай эсендә бер-бер артлы уйынсыҡтарҙы ала ла, ул:

"Ки-кә-рикүк", "Ҡыт-ҡытаҡ, ҡыт-ҡытаҡ", "Мүү-ү – мүү-ү", "Һаоу –һаоу", "Пиии-и – пиии-и", "Мыяу - мыяу" тип әйтеп, нимә шулай тауыш сығара, уларҙың исемдәрен танып, әйтергә һорай.

Балалар дөрөҫ әйтһә, уйынсыҡты сығарып күрһәтә һәм баланан: - Был әтәс ҡысҡыра һ.б. тип әйтергә һорай. Бала ҡыйынһынһа, башҡаларҙан, йә үҙе Айгөл булып әйтә. Иң аҙаҡтан тоҡсайҙан бесәй һәм сысҡан килеп сығалар.

Тәрбиәсе "Сысҡанды бесәй ашайым, ти. Сысҡан ҡаса, бесәй уны эҙләп таба, ләкин тота алмай. Балалар, шундай уйын да бар, әйҙәгеҙ

уйнарға өйрәнәйек", - тип, өйрәнелгән һанашмаҡты иҫкә төшөрөп, унының ярҙамында тәүҙә сысҡанды, шунан – бесәйҙе билдәләтә.

Тәрбиәсе рус телендә уйындың йөкмәткеһен һәм уйнау ҡағиҙәләрен аңлата. Балалар ҡулға-ҡул тотоноп, түңәрәккә торалар. "Бесәй" түңәрәк тышы буйлап йүгереп, сысҡанды баҫтыра, ә сысҡан ҡаса. Балалар: "Сысҡан, ҡас!", "Бесәй, сысҡанды баҫтыр!" - тип әйтергә өйрәнәләр. Бесәй сысҡанды тотһа, ул "сысҡан" була, элекке "сысҡан" бесәй ролендә булып, уйынды яңынан башлайҙар. Уйынды яңынан башлағанда "сысҡан менән бесәй" һанашмаҡ ярҙамында яңынан билдәләнә.

**Икенсе дәрестә** "Айыу – бүре юҡ икән", "Бесәй – сысҡан" уйындарын һәм дөңгөр менән уйнап, үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡабатлайҙар.

**55-56 – сы дәрестәр**

**Тема: "Әкиәт яратабыҙ "**

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ж, ҙ,* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы «Сыбар тауыҡ» рус халыҡ экиәте менән таныштырыу;

г) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, «Сыбар тауыҡ» экиәтенең өҫтәл театры персонаждары, пластилин, әкиәт геройҙарының һүрәттәре.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балаларға «Ҡуңыҙ» тигән уйын уйнарға тәҡдим итә: - Беҙ ҡуңыҙҙар. Улар «ж-ж-ж» тип бызылдайҙар. Беҙ бөтәбеҙ ҙә осабыҙ һәм ҡуңыҙҙар булып быжылдайбыҙ. Мин устарыма һуҡһам, ҡуңыҙҙар япраҡтарға ултыра. Мин кемгә ҡулым менән тейәм, ул «ҡуңыҙ» тора ла, тағы ла быжылдап, осоп китә. Уйын бөтә балалар ҙа «осҡансы» дауам итә.

Балалар урындарында. Тәрбиәсе бөгөн ҡунаҡҡа ҡурсаҡ Айгөл килеүен һәм уның менән бергәләп «Сыбар тауыҡ» әкиәтен ҡараясаҡтарын әйтә. Өҫтәлдә әкиәт күрһәтеү өсөн кәрәк-яраҡтар. Тәрбиәсе балаларға әкиәттең һәр бер персонажын күрһәтеп, уларҙың кем икәнлектәрен белешә. Балалар русса әйтһәләр, тәрбиәсе менән Айгөл бергәләп уларҙың атамаларын иҫкә төшөрәләр: дед – бабай, баба – әбей, курочка Ряба – Сыбар тауыҡ, яйцо – йомортҡа, мышка – сысҡан.

Тәрбиәсе: - Хәҙер әкиәтте Айгөлгә уйнап күрһәтәбеҙ, - ти һәм өҫтәл театрын ҡулланып, әкиәт эстәлеге буйынса хәрәкәттәр башҡара. Башҡарылған һәр бер хәрәкәт һүҙҙәр ярҙамында аңлатылып барыла:

- Давным – давно жили дед да баба. Балалар, башҡортса был нисек була, кем әйтеп күрһәтер икән?

-Борон-борон заманда бабай менән әбей йәшәгән. (Тәүҙә тәрбиәсе үҙе әйтеп күрһәтә, һуңынан 2-3 баланан ҡабатлаттыра). Была у них курочка Ряба. Уларҙың Сыбар тауығы булған. Курочка Ряба снесла яйцо. Не простое, а золотое. Тауыҡ йомортҡа һалған. Ябай түгел, алтын йомортҡа. Дед бил, бил яйцо, не разбил его. Баба била, била яйцо, не разбила его и дальше.

Ошо рәүешле әкиәтте күрһәтеп һәм һөйләп бөткәс, тәрбиәсе балаларға һорауҙар бирә:

- Әкиәт оҡшанымы? Кем беҙгә әкиәтте яңынан күрһәтеп сыға? (2-3 бала әкиәтте ҡабатлап һөйләп, күрһәтеп сыға. Һүҙҙәр, һөйләмдәр ҡабатлатыла).

«Кем таный?» дидактик уйыны. Тәрбиәсе әкиәт геройҙарының һүрәттәрен күрһәтә, ә балалар башҡортса уларҙың нисек аталыуҙарын әйтәләр. Тәрбиәсе һәр бер персонаждың нисек итеп ҡысҡырыуҙарын әйттереп сыға: тауыҡ «ҡо-ҡо-ҡо», сысҡан «пи-пи-пи», бабай нисек итеп һуҡҡан «туҡ-туҡ-туҡ», йомортҡа нисек ярылған «ба-бах» һ. б.Тәрбиәсе әбей менән бабайға күп итеп йомортҡа әүәләргә тәҡдим итә.

## Икенсе дәрес

**Йыһаз:** тылсымлы тоҡсай, әкиәт геройҙары һүрәттәре һәм уйынсыҡтары.

Тәрбиәсе «Тылсымлы тоҡсайҙан» уйынсыҡтарҙы алып, балаларға күрһәтә һәм уларҙың нисек итеп ҡысҡырғанлыҡтарын күрһәтергә һорай. Һуңынан был йәнлек тураһында: «Был – әтәс. Ул *ки-ки-ри-күк* тип ҡысҡыра», - тип әйттерә. Шул рәүешле үткән дәрестәге бөтә әкиәт геройҙарын да иҫкә төшөрөп сығалар.

Дәрестә «Айыу – бүре юҡ икән», «Бесәй-сысҡан» уйындарын уйнап, «Сыбар тауыҡ» әкиәтен өҫтәл театры ярҙамында уйнап, үткән дәрестәге һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡабатлайҙар.

**57 – се дәрес**

**Тема:** "Әкиәт яратабыҙ "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ҡ, һ, ә, ү* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы «Йорт хайуандары» әкиәте менән таныштырыу ;

г) «Кемдең усында таш?» уйынын уйнарға өйрәтеү;

д) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, өҫтәл театры персонаждары, пластилин, әкиәт геройҙарының һүрәттәре.

*Дәрес барышы:*

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе балаларға «Тылсымлы тоҡсайҙан» уйынсыҡтарҙы алып балаларға күрһәтә һәм уларҙың нисек итеп ҡысҡырғандарын әйтергә һорай.

Аҙаҡ уларҙың ниндәй йәнлек тауышы икәнлеген асыҡлайҙар: әтәс: *ки-кә-ри- күк;* тауыҡ: *ҡо-ҡо-ҡо;* сысҡан: *пи-пи-пи;* бесәй: *мыяу – мыяу;* эт: *һаоу - һаоу;* быҙау: *мү-мү-мү* һәм башҡа йәнлек тауыштарын.

Тәрбиәсе һуңынан үҙе йәнлек тауыштарын ҡабатлап әйтә, ә балаларҙан был йәнлектең һүрәтен табырға һәм: «Был әтәс. Ул *ки-кә-ри-күк* тип ҡысҡыра, һ. б.», - тип әйттертә.

Тәрбиәсе балаларға әкиәт һөйләйем ти. Тәүге дәрестәге кеүек үк әкиәт рус телендә, аҙаҡ башҡортса һөйләнелә. Һөйләү барышында тәрбиәсе ковролинға, йәки өҫтәл театрына әкиәт геройҙарын ҡуйып бара:

- Әбей менән бабайҙың тауығы, әтәсе булған. Иртә менән иң алда әтәс йоҡонан тора икән. Ул: «Ки-кә-ри-күк!», - тип бөтәһен дә уята икән. Тәүҙә *ҡо-ҡо-ҡо* тип тауыҡ тороп, тышҡа сыға. Унан *һаоу, һаоу* тип эт ояһынан сыға.Шунан *мү-мү-мү* тип быҙау һарайҙан сыға. Ул эсергә һөт һорай. Хатта сысҡан да *пи-пи-пи* тип йүгереп килә.

Әбей менән бабай һаман йоҡлайҙар ти. Бесәй уларҙы: «Тороғоҙ! Беҙ торҙоҡ! Ҡояш та торған. Ашайыҡ!», - тип уята ти.

Әбей менән бабай уянып, тышҡа сығалар һәм йәнлектәрҙе ашаталар. Йорт хайуандары шатланалар, ҡыуанышып бейейҙәр, йырлайҙар.

Тәрбиәсе балалар менән «Айыу – бүре юҡ икән» уйынын уйнарға тәҡдим итә. Аҙаҡ йорт һәм ҡыр хайуандары нимә менән бер-береһенән айырыла икән, шуны асыҡлайҙар.

Балаларҙы тынысландырыу һәм уларҙың һүҙ байлығын үҫтереү маҡсатында «Кемдең усында таш?» уйыны уйнатыла. Һанашмаҡ ярҙамында «көтөүсе» һайлана, ул балаларға арҡаһы менән әйләнеп тора. Тәрбиәсе ултырғыстарҙа теҙелеп ултырған балалар усына таш һалған кеүек хәрәкәтте башҡарып, улар рәтен урап сыға. Хәрәкәт башҡарыу ваҡытында кемдеңдер усына ташты һалып китә. «Көтөүсе» әйләнеп, таштың кемдә икәнлеген әйтергә тейеш. Балалар: «Минең ташым усымда!», - тип һамаҡлап ултыралар. Тәрбиәсе көтөүсенән: «Әйт әле, таш кемдә?», - тип һорай. Көтөүсе таштың кемдә икәнлеген дөрөҫ әйтһә, ул бала «көтөүсе» була һәм уйын яңынан башлана.

**58- се дәрес**

**Тема:** "Ҡурай тыңлайбыҙ "

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *көй, ҡурай, тын алыу, һауа сығарыу*; үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ш, у, ө, ҡ* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы ҡурай менән таныштырыу ;

г) балаларҙы һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыу, уларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурай, дөңгөр, барабан, ҡурай көйө яҙылған аудио йәки видеояҙма, ҡурсаҡ Айгөл, пластилин.

***Дәрес барышы:***

Балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе аудио йәки видеояҙма аша уларға ҡурай тауышын ишеттерә һәм:

- Балалар, тыңлағыҙ әле, ниндәй матур көй. Был ниндәй музыка ҡоралының тауышы икән? (балалар әйтә алмаһалар, Айгөл әйтә).

Тәрбиәсе: «Кемдең ҡурайҙы күргәне бар? Бына өҫтәлдә музыка ҡоралдары, улар араһында ҡурай бармы, кем күрһәтә? Ул ниндәй музыка ҡоралына оҡшаған?» (дудкаға).

Тәрбиәсе русса: Ҡурай – оҙон ағас үләндән эшләнә. Үләндең ике осон ҡырҡып, трубка (оҙон нәҙек торба) яһайҙар. Ҡурайҙың эсе буш, тишектәре бар. Ҡурайҙы ауыҙға алып, эсенә өрәләр, ә бармаҡтар менән тишектәренә бер-бер артлы баҫалар. (күрһәтә). Шулай көй сыға. Ҡурай уйнаған кешенең тыны оҙон булырға тейеш. Уның өсөн көн дә күнекмәләр эшләү кәрәк. Бына шулай: эскә танау аша тын алабыҙ ҙа, ауыҙҙан һауаны оҙаҡ итеп сығарабыҙ. (тәүҙә үҙе күрһәтә, аҙаҡ балалар ҡабатлайҙар):

Ауыҙ аша тын алыу – ауыҙ аша һауа сығарыу.

Устарҙа ятҡан мамыҡтарға өрөү.

Балаларға ҡағыҙҙан эшләнгән ҡурайҙар таратыла: улар бергәләп «ҡурайҙа» уйнайҙар. Был күнекмә ваҡытында ҡурай көйө яҙылған аудиояҙма ҡуйыу отошло була.

Тәрбиәсе өҫтәлдә ятҡан музыка ҡоралдарының атамаларын һәм уларҙың ниндәй тауыш сығарыуҙарын әйтергә һорай:

Барабан: бом-бом-бом, дөңгөр: шырҡ-шырҡ, ҡурай тауышын "у", "ү", "ө" өндәрен һуҙып көйләтеп ишеттерәләр. Аҙаҡтан бөтә балаларға ла музыка ҡоралдары таратыла һәм оркестрҙа уйнарға тәҡдим ителә.

Ҡурайҙа уйнаған видео йәки аудио яҙма ҡуйыла. Тәрбиәсе балаларҙан:

- Был ағай нимәлә уйнаны? - тип һорай. - Ул кем була? Ҡурайҙа уйнаған кеше ҡурайсы була. Барабанда уйнаған кеше барабансы, дөңгөрҙә уйнаған кеше дөңгөрсө, бейегән кеше бейеүсе була. Ҡурай көйөнә беҙ ҙә бейеп алайыҡ! Бейеп бөткәс, балалар пластилиндан ҡурай әүәләйҙәр.

**59-60 – сы дәрестәр**

**Тема:** "Эт нисек үҙенә хужа тапҡан?" башҡорт халыҡ әкиәте менән таныштырыу.

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *бүре, айыу, арыҫлан, ҡуркаҡ, хужа*; үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ғ, р, ы, у, и, ә, ң* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы башҡорт халыҡ әкиәте менән таныштырыу ;

г) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, ковролинда эт, бүре, айыу, арыҫлан, батыр егет һүрәте, Аҡбай эт уйынсығы, төҙөлөш материалдары.

***Дәрес барышы:***

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе:

- Балалар, беҙгә ҡунаҡҡа уйынсыҡтар килгән. Бына эт. Ул нисек өрә (лает)? Балалар эт булып өрөп күрһәтәләр: *һоау-һоау-һоау.*

- Бына бүре. Ул нисек олой (воет)? *У-у-у.*

- Быны айыу. Ул нисек ырылдай (рычит): *хр-хр-хр.*

- Бына арыҫлан (лев).

Тәрбиәсе русса арыҫландың ҡойроғо, аяҡтары, ҡоаҡтары һ. б. барлығын, уның алыҫта, йылы яҡта йәшәгәнлеген аңлата. Ул «ғыр-ғыр» тип ырылдай тип әйтә. Һәр йәнлек тауышын балалар әйтеп ишеттереп баралар. Аҙаҡ тәрбиәсе йәнлек тауыштарын ҡабатлап әйтә лә, балаларҙан был йәнлекте табып, күрһәтергә һәм «Был айыу. Ул *хр-хр-хр* тип ырылдай», - тип әйтергә һорай.

Балалар «Айыу-бүре юҡ икән» уйынын уйнап алалар. Тәрбиәсе:

-Мин һеҙгә әкиәт һөйләйем. (Һөйләү барышында әкиәт геройҙарын ковролинға теҙеп бара). Борон-борон заманда бер эт йәшәй. Ул нисек өрә әле? (балалар кәрһәтәләр). Эт үҙенә хужа эҙләй. (Ищет хозяина). Бүрене күрә. Эт: «Һаумы, бүре!» - ти. Бүре: «Һаумы, эт!. Ниңә килдең?» - тип һорай. Эт: «Миңә хужа кәрәк. Мине эргәңә ал!».

Эт менән бүре бергә китәләр. Айыу күренә. Бүре: «Айыу килә, әйҙә ҡасайыҡ. Ул беҙҙе ашай»,- ти. Бүре ҡаса, ә эт айыу эргәһенә бара: «Һаумы, айыу! Мин хужа эҙләйем. Мине эргәңә ал!» - ти. Эт менән айыу бергә китәләр. Арыҫлан күренә. Айыу: «Арыҫлан килә, ҡасайыҡ. Ул беҙҙе ашай», - ти. Айыу ҡаса, ә эт арыҫлан эргәһенә бара:

- Һаумы, арыҫлан! Мин хужа эҙләйем. Мине эргәңә ал!

Эт менән арыҫлан бергә китәләр. Кеше күренә. Арыҫлан: «Кеше килә, ҡасайыҡ. Ул беҙҙе үлтерер».- ти. Арыҫлан ҡаса, ә эт кеше эргәһенә килә:

- Һаумы, кеше! Мин хужа эҙләйем, мине эргәңә ал, - ти.

Шунан бирле улар бергә йәшәйҙәр.

Тәрбиәсе: «Оҡшанымы һеҙгә әкиәт? Беҙ тағы ла ниндәй әкиәттәр беләбеҙ? (балалар төрлө әкиәттәрҙе һанап китә алалар, әгәр әйтә алмаһалар,

тәрбиәсе үҙе ярҙамға килә). Был әкиәт нисек аталды, балалар? Өйҙә кемдең эте бар? Һеҙ уны яратаһығыҙмы, ашатаһығыҙмы һ. б.

Ҡурсаҡ Айгөл Аҡбай менән килеп инәләр. Айгөл:

- Бына минең этем. Мин уның хужаһы. Уның исеме Аҡбай. Мин уны яратам. Эткә кем оя эшләргә ярҙам итә?

Балалар бергәләп Аҡбайға оя эшләйҙәр. Аҡбай өйөн ҡарап сыға, уларға рәхмәт әйтә, бик шатлана.

**Икенсе дәрес**

Маҡсат: үтелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡабатлау; яңы һүҙҙәр отоп алыу: *мырлай, сәскә, өҙмә,*

*ә, и* , *ҫ, р* өндәренең әйтелешен нығытыу;

хәтерҙе, иғтибарҙы үҫтереү.

**Йыһаз:** һары түңәрәктәр, күк һәм ҡыҙыл овалдар, аҡ ҡағыҙ бите, елем, бумала, өҫтәл театры персонаждары – эт, бүре, айыу, арыҫлан, ағастар.

**Дәрес барышы:**

Балалар театрға килгәндәр, улар ултырғыстарға ултыралар. Тәрбиәсе: «Балалар, беҙ бөгөн театрҙа әкиәт ҡарайбыҙ. Ул «Эт үҙенә нисек хужа тапҡан?, - тип атала». (әкиәт өҫтәл театры ярҙамында күрһәтелә). Тәрбиәсе:

- Был әкиәттә кемдәрҙе күрҙек? Кем һеҙгә оҡшаны? Хәҙер уйынсыҡтар араһынан әкиәттәге йәнлектәрҙе табып, миңә күрһәтегеҙ әле.

-Бүре нисек олой? Айыу нисек ырылдай? Арыҫлан нисек ҡысҡырҙы? Эт нисек өрә?

Кемдең ниндәй хайуан булаһы килә, уның кеүек ҡысҡырып, бүлмә буйлап, шул йәнлектәргә оҡшатып йөрөйбөҙ.

Тәрбиәсе балаларҙы урындарына ултырта һәм уларға бармаҡтар менән уйнап алырға тәҡдим итә:

*-Бесәй, бесәй, бесәй шул,*
*Бесәй әле кескәй шул.*
*Үҙе мырлай ҙа мырлай,*

*Әллә ул шулай йырлай.*(балалар тәрбиәсе етәкселегендә бармаҡтар менән бесәйҙе эшләйҙәр һәм шиғырҙы бер нисә тапҡыр уйнай-уйнай ҡабатлайҙар. Аҙаҡ мырлап, йырлап та күрһәтәләр).

Тәрбиәсе балаларға түңәрәккә торорға тәҡдим итә һәм улар менән өндәрҙе дөрөҫ әйтеү маҡсатында уйын үткәрә:

Балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк буйлап *кә-кә-кә-кә-кә* тип йөрөйҙәр, туҡтап *бик матур сәскә* тип әйтеп өс тапҡыр ҡул сабалар; *ҫә-ҫә-ҫә-ҫә-ҫә* тип тағы ла түңәрәктә йөрөйҙәр. *Ул бында ғына үҫә*, - тип тағы ла ҡул сабалар.

Ҡулдарға тотоношоп, әкрен генә түңәрәк уртаһына йыйылалар һәм: *Бына сәскә, ул матур. Өҙмәй генә ҡарап тор,* - тип бергәләп әйтәләр.

Уйын 2-3 тапҡыр ҡабатлана. Тәрбиәсе балаларға таратма материалдар (күк, ҡыҙыл төҫтәге овалдар, һары төҫтәге түңәрәктәр) таратып сыға һәм уларҙан ҡағыҙ битенә сәскә йыйырға , ә аҙаҡ йәбештереп сығырға тәҡдим итә. Эште тәүҙә үҙе башҡарып күрһәтә. Сәскәләрҙе ҡабул итеү бүлмәһенә ҙур панно итеп элеп ҡуялар.

**61-62 – се дәрестәр**

**Тема:** "Ҡурай"

Маҡсат:

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү, үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ҡ, р, ң, у,* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы башҡорт музыка ҡоралы ҡурай менән таныштырыуҙы дауам итеү;

г) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, балалар йәбештергән сәскәләр төшкән панно, уның уртаһында ҡурай сәскәһе, пластилин.

***Дәрес барышы:***

Балалар үҙҙәре эшләгән панно янында торалар. Ҡурай моңо ишетелә. Тәрбиәсе:

- Был ниндәй музыка ҡоралы тауышы? Балалар, ҡарағыҙ әле, беҙҙең һүрәттең уртаһында ниндәйҙер сәскә күренә. Кем төшөргән икән? Ҡурсаҡ Айгөл:

- Мин төшөрҙөм уны. Был ҡурай сәскәһе. Ул урманда үҫә. Уны ҡырҡып алып өйҙә киптерәләр., шунан тишектәр эшләйҙәр. Бына атайым эшләгән ҡурай, бик һаҡ ҡына тотоп ҡарайыҡ әле: эсе буш, тишектәре бар. Уйнаған саҡта тишектәрҙе бармаҡ менән ҡаплайҙар. (Видеояҙманан ҡурайсының уйнауын ҡарайҙар, ҡурай уйнаусы нисек аталғанды иҫкә төшөрәләр).

Тәрбиәсе балаларға «Ҡурай» уйыны уйнарға тәҡдим итә. Балалар түңәрәккә баҫалар, ҡулдары менән ҡурай уйнаған хәрәкәттәрҙе башҡаралар һәм:

*Бына беҙҙең ҡурай,*
*Ул шулай уйнай.*
*Тып-тып итеп баҫабыҙ,*
*Бейешәбеҙ беҙ шулай.*

(шиғырҙың һуңғы ике юлын әйткәндә тыпырҙап бейеп, үҙҙәре тирәләй әйләнәләр). Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

Балалар «Ямғыр» уйынын (40-сы дәресте ҡара), «Айыу – бүре юҡ икән» икән уйындарын уйнайҙар.

Ҡурсаҡ Айгөл балаларға ҡурай сәскәһен пластилиндан әүәләргә тәҡдим итә һәм улар бергәләп эш башлайҙар.

**Икенсе дәрестә** ҡурайға бағышлап шиғырҙар, йырҙар башҡарырға, арҙаҡсы ҡурайсыларҙың берәүһенең ижады менән таныштырып була.

Йыл аҙағына тиклем ҡалған дәрестәрҙе тәрбиәсе үҙ ҡарамағы буйынса үткәрә: уҡыу йылы аҙағында ата-әсәләр өсөн байрам үткәреүҙе алыу һәм балаларҙың телде үҙләштереү кимәлен асыҡлауға бағышланған дәрестәр алыу мотлаҡ кәрәк тип һанала.

# Башҡортса һөйләшәбеҙ

## балалар баҡсаһында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү буйынса "Осҡон" программаһының мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн дәрес өлгөләре

(Нафиҡова З.Ғ. тарафынан төҙөлдө)

Төркөм балалары ике төркөмсәгә бүленә, һәр бер төркөмсә менән айырым дәрестәр үткәрелә. Дәрестәр балалар баҡсаһының дәрестәр үткәреү селтәрендә күрһәтелә һәм системалы рәүештә план буйынса алып барыла.

Тәҡдим ителгән темалар һәм яҡынса дәрес өлгөләре балалар баҡсаһының мәктәпкә әҙерлек төркөмөнә тәғәйенләнә. Тәрбиәсе тәүҙә балаларҙың башҡорт телендә һөйләшә алыу дәрәжәһен, ниндәй күләмдә һүҙ белеүҙәрен, һорауҙарҙы аңлап, уларға яуап бирә, башҡорт теленә генә хас өндәрҙе әйтә алыу кимәлдәрен асыҡлай. Икенсе тел өйрәнгәндә баланың һүҙлек байлығы самалы булыуҙы иҫтә тотоп, күберәк комплекслы дәрестәр үткәреү отошло. Дәрестәрҙә темаға ярашлы төрлө эшмәкәрлек төрҙәрен (рәсем, йыр, аң-белем үҫтереү, әүәләү, ҡорама йәбештереү һәм башҡалар) башҡарыу ҡарала. Шулай уҡ дәрестәр үткәреүҙә төрлө уйындар һәм яңы методик алымдар ҡулланыу – балаларҙа тел өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра һәм уларҙы ялҡытмай.

Һәр дәрестә мотлаҡ рәүештә өндәрҙе (фонемаларҙы) дөрөҫ әйтеү күнекмәләре үткәреү кәрәк. Кескәйҙәр өндәрҙе ишетә, айыра, дөрөҫ әйтә алыр өсөн уларҙың телмәр ағзаларының һығылмалылығын, хәрәкәтсәнлелеген үҫтереүгә бағышланған артикуляция, дөрөҫ тын алыу һәм тын сығарыу күнекмәләрен ойоштороу ифрат файҙалы була.

Дәрестәрҙә яңы һүҙҙәр өйрәтеү ҡарала, шул уҡ ваҡытта таныш булған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, типик һәйләмдәр төрлө конструкцияларҙа ҡабатлатыла. Уларҙы баланың үҙ телмәрендә әүҙем ҡулланыуына ирешеү кәрәк. Өйрәнелгән һүҙҙәр дәрестәрҙә һәм унан тыш ҡабатланһалар ҙа, балалар уларҙы тиҙ оноталар. Шуның өсөн, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе 10-15 көндән һуң балалар телмәренә яңынан

индерергә кәрәк. Көн дә биш – ун минутлыҡ балалар менән махсус һөйләшеү ойоштороу кәрәк. Балаға бирелгән һорауҙар ҡыҫҡа булырға, һөйләм конструкциялары үҙгәртелмәйенсә әйтелергә тейеш. Был балаға һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыуға ярҙам итә. Был эшкә ата-әсәләрҙе лә йәлеп итеү кәрәк. Төркөмдөң ҡабул итеү бүлмәһендә махсус стенд әҙерләп, унда дәрестә өйрәнелгән һүҙҙәр, диалогтар, шиғырҙар, һүҙҙәрҙең грамматик формалары өлгөләрен урынлаштырыу ата-әсәләргә ҙур ярҙам күрһәтәсәк.

Мәктәпкә барғанда баланың өндәрҙе дөрөҫ әйтеп, ябай һөйләмдәр төҙөп, үҙенең уй-фекерен ҡаушамайынса әйтә белеүенә ирешеү тора. Шуға күрә лә, һәр дәрестә бәйләнешле телмәр үҫтереү маҡсатында, өндәрҙе дөрөҫ ҡуйыуҙы, һүҙ байлығын үҫтереүҙе, телмәрҙең грамматик яҡтан дөрөҫ төҙөлөшөн үҙләштереүҙе комплекслы рәүештә башҡарыу һәм был бурыстарҙы бер-береһе менән бәйле, даими рәүештә алып барыуҙы күҙ уңында тоторға кәрәк.

Дәрес өлгөләрендә төрлө уйын ҡулланыу ҙур урын ала. Бала уйын аша телдең орфоэпик, орфографик, грамматик һәм башҡа нормаларын практик үҙләштерә. Тәрбиәсе уйынды планлаштырғанда, балаларҙың һүҙ байлығы кимәленән сығып, уларға таныш булған предметтарҙы, йәки уларҙың рәсемдәрен алырға тейеш. Яңы һүҙҙәр өйрәтелгәс кенә, уларҙы әкренләп уйынға индереү кәрәк. Уйындар уйнағанда тәрбиәсегә бер үк һөйләмдәр менән эш итеү кәрәк, сөнки балалар һөйләм конструкцияларын шул килеш отоп ала һәм аҙаҡ үҙ-ара аралашҡанда, бер-береһе менән уйнағанда ҡуллана башлайҙар.

Тәҡдим ителгән дәрес өлгөләрендә программа эстәлегенә ярашлы балаларҙы һүҙгә өн-ижек анализы үткәрергә, өндәрҙең билдәһе булған хәрефтәр һыҙмаһы менән таныштырырға, схема-моделдәр ярҙамында һөйләмдә һүҙҙәр килеү тәртибен һәм уларҙың һанын билдәләргә өйрәтеү ҡаралған. Бөтә был эштәр дидактик уйындар формаһында үткәрелә һәм баланы мәктәптә уҡырға әҙерлек эшенең бер өлөшөн тәшкил итә. Яҡынса йыллыҡ план бирелә, ул тәрбиәселәргә һәм башҡорт теле

уҡытыусыларына эште дөрөҫ планлаштырырға һәм ойоштororға ярҙам буласаҡ.

# Яҡынса йыллыҡ тематик план һәм дәрес өлгөләре

| Айҙар | Аҙналар | Дәрестәр һаны | Дәрестәр темаһы |
|---|---|---|---|
| сентябрь | I - II | 1-4 | Балаларҙың башҡорт телен үҙләштереү кимәлен билдәләү |
| | III | 5<br>6 | Танышыу<br>Азамат менән Айгөл |
| | IV | 7<br>8 | Көҙ килде<br>Көҙгө урожай |
| октябрь | I | 9<br>10 | Айгөлдөң тыуған көнө<br>Бойҙай ҡайҙа үҫә? |
| | II | 11<br>12 | Йәшелсә-емештәр<br>Минең ғаиләм |
| | III | 13<br>14 | Беҙҙең бүлмә<br>Ҡурай моңо |
| | IV | 15<br>16 | Ҡала урамдары буйлап<br>Ҡурсаҡтың тән өлөштәре |
| ноябрь | I | 17 | Кем нимә эшләй? |
| | | 18 | Бүлмә йыһаздары |
| | II | 19 | Бүлмә йыһаздары |
| | | 20 | Дауаханала ҡунаҡта |
| | III | 21 | Тештәрҙе дауалайбыҙ |
| | | 22 | Был - мин |
| | IV | 23 | Айгөл беҙҙә ҡунаҡта |
| | | 24 | Йорт хайуандары һәм ҡоштары |
| декабрь | I | 25<br>26 | Ҡыр хайуандары һәм ҡоштары<br>Әкиәт яратабыҙ |
| | II | 27<br>28 | Сыбар тауыҡ<br>Ҡыш килде |
| | III | 29<br>30 | Урамда ҡыш<br>Ҡыш бабай |
| | IV | 31<br>32 | Ҡыш бабай<br>Яңы йыл байрамы |
| ғинуар | I | | Ҡышҡы каникул |
| | II | | Ҡышҡы каникул |
| | III | 33<br>34 | Яңы йыл байрамы<br>Төҙөүселәр |
| | IV | 35<br>36 | Ҡышҡы уйындар<br>Күҙҙәр, ҡолаҡтар |
| февраль | I | 37<br>38 | Буратино – беҙҙең ҡунаҡ<br>Айгөлдөң тыуған көнө |
| | II | 39<br>40 | Беҙҙә ҡунаҡтар<br>Беҙҙең Аҡбай |
| | III | 41<br>42 | Эт хужаһын нисек тапҡан?<br>Ағайым – һалдат |
| | IV | 43<br>44 | Беҙ – ил һаҡсылары<br>Әсәйҙәр байрамына әҙерләнәбеҙ |
| март | I | 45 | Бүләктәр һайлайбыҙ |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | 46 | Йыл миҙгелдәре |
| | II | 47<br>48 | Яҙ килә. Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!<br>Аҙна көндәре |
| | III | 49<br>50 | Башҡортостан – беҙҙең ил<br>Өфө – беҙҙең баш ҡала |
| | IV | 51<br>52 | Кем ҡайҙа йәшәй?<br>«Тирмәкәй» әкиәтен сәхнәләштереү |
| апрель | I | 53<br>54 | «Тирмәкәй» әкиәтен сәхнәләштереү<br>Сыйырсыҡ |
| | II | 55<br>56 | Бүлмә гөлдәре<br>Аквариумда нимәләр йәшәй? |
| | III | 57<br>58 | Бөжәктәр донъяһы<br>Ҡурай тыңлайбыҙ |
| | IV | 59<br>60 | Кем йыр ярата?<br>Һабантуй – яҙ байрамы |
| май | I | 61<br>62 | Думбырала уйнайым<br>Хайуандарҙың балаларын табайыҡ |
| | II | 63<br>64 | Дарыу үләндәре<br>Дарыу үләндәре |
| | III - IV | | Балаларҙың программа йөкмәткеһен үҙләштереү кимәлен билдәләү |

## Дәрес өлгөләре

1-4 –се дәрестәрҙә балаларҙың башҡорт теленән тәүге йылда алған белемдәрен иҫкә төшөрөү һәм уларҙың ниндәй кимәлдә хәтерҙә һаҡланыуын билдәләү диагностикаһы үткәрелә.

**5 – се дәрес**

**Тема: "Танышыу"**

**Маҡсат:** а) балаларҙың башҡорт теле тураһындағы элек өйрәнелгән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү; был, мин, һин, кем, һаумы (-һығыҙ), һау бул, минең, һинең, таныштыҡ, нисек, эт, бесәй, ҡурсаҡ, туп, һикерә, бәләкәй, йомшаҡ, өрә, мыяулай тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлау һәм уларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

б) *һ* , *ә* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) балаларҙың хәтерен, иғтибарлылығын үҫтереү, башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Йыһаз:** бесәй, эт, туп, ҡурсаҡ, фланелеграф, сюжетлы һүрәттәр

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Беҙ бөгөн тағы ла башҡорт телен өйрәнеүҙе башлайбыҙ. Тәүҙә танышайыҡ. Мин … булам.

«Мин һәм минең күршем» уйынын уйнайыҡ! Тәрбиәсе һәр баланан «Һин кем?» «Күршең кем?»-тип һорау бирә. Бала үҙенең исемен, шунан күршеһенекен әйтә:

- Һин кем?

- Мин Юля.

- Ул Аделя.

Хәҙер бер-берегеҙҙән исемегеҙҙе һорап, танышығыҙ.

Тәрбиәсе: - Балалар, мин һеҙгә уйынсыҡтар алып килдем (бесәй, эт, туп, ҡурсаҡ). Улар башҡортса нисек аталалар, иҫкә төшөрәйек. Бына был бесәй. Йә, әйтегеҙ әле, бесәй (кошка). Бесәйҙе нисек саҡырабыҙ әле: «Бесәй, бесәй бес-бес-бес» (бер нисә тапҡыр күмәкләп, аҙаҡ - бер нисә бала ҡабатлап әйтеп күрһәтә).

- Был эт. - Был туп. - Был ҡурсаҡ.

Балаларҙан ҡабатлатып әйттереп, уларҙың нисек тауыш сығарғанын һәм хәрәкәтләнеүен күрһәттертеү:

- Был нимә?

- Бесәй.

- Бесәй нисек мыяулай? Ул нисек йөрөй?

- Бесәй ниндәй?

- Эйе, бесәй, ул матур, йомшаҡ.

- Был эт. Эт өрә. Өй һаҡлай. Эт нимә ти? «Һау-һау-һау?». Эт йорт һаҡлай.

- Был туп. Туп ҡыҙыл. Туп һикерә. Йәгеҙ әле, туп кеүек һикереп алайыҡ һоп-һоп-һоп».

- Был ҡурсаҡ. Ҡурсаҡ матур. Ҡурсаҡ ултыра. (күмәкләп, берәмләп ҡабатлайҙар) Ҡурсаҡ атлай, йоҡлай, һикерә. Ҡурсаҡ нимә эшләй? Бесәй нимә ти? Эт нимә ти?

- Уйнап алайыҡ:

Тәрбиәсе балалар менән артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләре үткәрә («Тылсымлы өндәр» китабын ҡара).

һа-һа-һа  һаумы бесәй

һо-һо-һо  һоп-һоп әйтеп

һы-һы-һы  һыу эсә

«Бесәй-бесәй-берс» уйыны. Балалар ҡулдарын тубыҡтарына һала, тәрбиәсе уйынсыҡ бесәй ярҙамында «Бесәй йомшаҡ, бесәй матур, бесәй бәләкәй» һүҙҙәрен әйтә-әйтә уларҙың ҡулын һыйпап, яратып уйната. «Берс» тигәндә, бала ҡулын алып өлгөрөргә тейеш. Кемдең ҡулы тотола, ул бала тәрбиәсе урынында уйынды дауам итә.

Сюжетлы һүрәттәр бирелә:

Бесәй йомғаҡ менән уйнай.

Эт ихатала үҙенең ояһында ята

Тәрбиәсе балаларға һүрәттәрҙе күрһәтеп, унда нимәләр төшөрөлгән, өйрәнелгән һүҙҙәр ярҙамында ябай ғына һөйләмдәр төҙөргә өйрәтә.

Дәресте йомғаҡлау.

Тәрбиәсе һүҙ ярҙамында уйынсыҡты һүрәтләй һәм ошо һүрәтләү буйынса балаларға өҫтәлдән уйынсыҡтарҙы алып күрһәтергә тәҡдим итә:

- Йомшаҡ, бәләкәй, матур. Ул нимә?

Бала яуаплай: - Бесәй йомшаҡ, бәләкәй, матур.

Тәрбиәсе: - Бесәй нисек мыяулай? Нисек һикерә? Нисек йүгерә? Кем күрһәтә был хәрәкәттәрҙе һәм һүҙ менән әйтеп бирә.

- Ҡурсаҡты кем һикертә, атлата?

- Эт нисек йүгерә, һикерә, өрә?

Бесәй нисек мыяулай?

Эт нисек өрә?

Туп нисек һикерә?

**6 – сы дәрес**

**Тема:** "Азамат менән Айгөл"

***Маҡсат:*** *а) кескәйҙәргә башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;* күлдәк, камзул, итек, сулпы (-лар), һары, йәшел, сәсе, биҙәлгән, малай, ҡыҙ, батыр, билбау, елән, ниндәй төҫтә *тигән һүҙҙәр менән таныштырыу; был*

*һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;* һары, йәшел, аҡ, күк *төҫтәрен айыра белергә, дөрөҫ атарға өйрәтеү;*

б) телмәр аппаратын үҫтереү һәм нығытыу; *ө, ҫ* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) балаларҙың хәтерен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** башҡорт кейемендәге ҡыҙ һәм малай ҡурсаҡтар, туп, уйынсыҡ бесәй, эт; һары, йәшел, аҡ, күк төҫтәге туп һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе:

- Һаумыһығыҙ. Мин һеҙгә ҡурсаҡ алып килдем. Ул һеҙҙең менән уйнарға, танышырға теләй. Уның исеме Айгөл.

Балалар «Был ҡурсаҡ. Уның исеме Айгөл» тип ҡабатлайҙар. Айгөл һәр бала янына килә, улар менән таныша. Айгөл:

- Һин кем?

- Мин Катя, Нина, Дима… (бөтәһе менән таныша).

- Балалар, ҡарағыҙ әле, Айгөл өҫтөнә нимә кейгән (күлдәк, камзул, итек).

- Әйе, Айгөл ниндәй матур күлдәк кейгән. Был башҡорт ҡыҙы кейеме. Был күлдәк ниндәй төҫтә?

- Был күлдәк һары төҫтә.

- Был камзул. Камзул йәшел, ул биҙәлгән.

- Был итек. Итек аҡ төҫтә.

- Айгөлдең сәсе оҙон, сулпы менән үрелгән. Сулпы – это украшение для волос, состоящее из узорчатой серебряной подвески из монет и вставками из цветных камней. Сулпы – сәс биҙәү әйбере.

- Ҡабатлайыҡ әле, Айгөл нисек кейенгән: - Айгөл матур. Һары күлдәк кейгән. Йәшел камзул кейгән. Сәсе оҙон, сулпылар менән биҙәлгән. (күмәкләп, берәмләп һәр һөйләмде ҡабатлайҙар).

Тәрбиәсе: - Балалар, Айгөлгә туп менән уйнап күрһәтәйек. Тәрбиәселә туп, ул тупты балаға ырғытып, һорай: "Һин кем?" Бала үҙ исемен әйтеп (мин – Саша), тупты кире тәрбиәсегә ташлай. Икенсе

тапҡыр тәрбиәсе тупты: "Һаумы, Катя!" - тип ташлай, ә бала: "Һаумыһығыҙ, Зифа Маратовна!"- тип яуаплай.

Тәрбиәсе:

- Айгөл, беҙҙең балалар башҡортса һөйләшергә өйрәнәләр. Бына ҡара, улар ниндәй күп башҡорт һүҙҙәрен беләләр!

- Был нимә? Туп.

– Туп ниндәй? Туп түңәрәк, туп - күк.

- Туп нимә эшләй? Туп һикерә, тәгәрәй.

- Был нимә? Был ҡурсаҡ.

- Ҡурсаҡ ниндәй? Ҡурсаҡ матур, бәләкәй.

- Ҡурсаҡ нимә эшләй? Ҡурсаҡ һикерә, атлай, йоҡлай.

- Был нимә? Был эт.

- Эт ниндәй? Эт ҙур, йомшаҡ.

- Эт нисек өрә? Эт «һау-һау-һау» тип өрә. Ул өй һаҡлай.

- Был нимә? Был бесәй.

- Бесәй ниндәй? Бесәй йомшаҡ, бәләкәй, матур.

- Бесәй нисек ҡысҡыра? Бесәй «мыяу-мыяу-мыяу» тип ҡысҡыра.

- Афарин, балалар! Хәҙер Айгөл менән уйнайыҡ! «Бесәй-бесәй-берс» уйыны.

- Айгөл, уйын оҡшанымы?

*Өндәрҙе дөрөҫ әйтергә әҙерлек күнекмәләре үткәреү.* Тәрбиәсе балаларға түңәрәк яһап торорға тәҡдим итә. Түңәрәкте туп итеп күҙ алдына килтерергә һорай.

Тәрбиәсе: "Балалар, беҙ тупты һауа менән өрөп тултырайыҡ!"

Балалар: "Пөфф-ф - пөфф-ф – пөфф-ф! " - тип әйтә-әйтә "өрәләр" һәм ҡулдарын ҡулға тотоношоп, түңәрәкте ҙурайта баралар.

Тәрбиәсе: "Туп шартланы, унан "ççç – ççç - ççç" тип һауа сыға"- ти. Балалар "ççç – ççç - ççç" тип әйтә-әйтә түңәрәк уртаһына йыйылалар. Уйын ошо рәүешле 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

«Ө» һәм «Ç» өндәренең әйтелешен ҡабатлайҙар: ирендәр торба кеүек алға һуҙыла һәм оҙаҡ итеп һуҙып әйтелә. «Ç» өнөн әйткәндә ирендәр

йылмайған кеүек, тештәр араһында тел осо ҡыҫылған. Эстәге һауаны көс менән сығарабыҙ: ççç-ççç.

Тәрбиәсе: "Тупты яҡшы итеп өрөп тултырҙыҡ, хәҙер уның менән уйнайбыҙ". Ҡул менән иҙәнгә туп һуҡҡанды күрһәтеп, балалар "һоп-һоп-һоп" тип әйтеп күрһәтәләр, аҙаҡ – аяҡ остарында әкрен генә үҙҙәре туп булып һикерәләр. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

Ишек шаҡыйҙар. Ҡурсаҡ Азамат инә. Ул балалар менән һаулыҡ һораша һәм һәр береһе менән танышып сыға:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин Азамат. Танышайыҡ: - Һин кем?

- Мин Катя, Нина, Дима… (бөтәһе менән таныша).

Тәрбиәсе: - Балалар, был Азамат. Ул – малай кеше, ә Айгөл - ҡыҙ кеше. Айгөл күлдәк, камзул кейгән, ә Азамат салбар, елән кейгән, билендә билбау. Ул башҡорт малайы. Азаматтың салбары ниндәй төҫтә? (ҡара төҫтә). Азаматтың еләне ниндәй төҫтә? (йәшел төҫтә). Азаматтың күлдәге ниндәй төҫтә? (аҡ төҫтә). Азаматтың билбауы ниндәй төҫтә? (ҡыҙыл төҫтә). Азамат малай кеше. Ул үҫкәс, батыр була.

- Ә беҙҙең төркөмдә малайҙар бармы? Ә ҡыҙҙар?

- Йә, ҡыҙҙар баҫығыҙ әле. (Малайҙар ҡул саба). Балалар «Беҙ ҡыҙҙар» тип хор менән ҡабатлайҙар.

- Хәҙер малайҙар баҫығыҙ ( 2-3 тапҡыр). (Ҡыҙҙар ҡул саба). Улар «Беҙ малайҙар», - тип ҡабатлайҙар.

- Афарин, балалар.

Тәрбиәсе балаларға предметлы һүрәттәр күрһәтә: *бесәй, эт, туп, ҡыҙ ҡурсаҡ, малай ҡурсаҡ.* Уларҙың башҡортса нисек аталғанын әйтергә һәм һәр һүҙҙең ниндәй өндән башланғанын билдәләргә тәҡдим итә.

Дәресте йомғаҡлап, тәрбиәсе дәрестә нимә эшләгәндәрен һорай. *Һары, йәшел, аҡ, күк, ҡыҙыл* төҫтәге туп һүрәттәрен күрһәтеп, уларҙың төҫөн әйтергә тәҡдим итә.

- Балалар, бөгөн һеҙ бик матур итеп дәрестә һөйләнегеҙ, уйнанығыҙ, күп кенә башҡорт һүҙҙәрен өйрәндегеҙ. Ҡайтҡас, уларҙы ата-әсәләрегеҙ менән ҡабатлағыҙ, йәме.

- Һау булығыҙ!

## 7 – се дәрес

**Тема:** "Көҙ килде"

***Маҡсат:*** а) элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу, яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен төшөндөрөү һәм уларҙың әйтелешен өйрәтеү: *бесәй, эт, туп, ҡыҙ ҡурсаҡ, малай ҡурсаҡ, һары, йәшел, аҡ, күк, ҡыҙыл, ҡыҙ, кәзә, поезд, камзул, күҙҙәр.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *з, ҙ* өндәренең айырмаһын билдәләргә һәм уларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** «Көҙ килде» темаһына сюжетлы һүрәт; предметлы һүрәттәр - ҡыҙ, кәзә, поезд, камзул, күҙҙәр; йәшелсә муляждары, ҡурсаҡтар Азамат менән Айгөл.

### Дәрес барышы:

Тәрбиәсе: -Балалар, тәүҙә "Һин кем?" уйынын уйнап алайыҡ. Бер-беребеҙгә һаулыҡ – иҫәнлек теләйек. Ҡояш менән дә һаулыҡ һорашайыҡ. Матур көн килтергәне өсөн уға рәхмәт әйтәйек!

Хәҙер беҙ башҡортса матур итеп һөйләшергә өйрәнер өсөн телде, тештәрҙе, ирендәрҙе уйнатып, уларҙы әҙерләп алайыҡ әле:

- Ауыҙҙы киң итеп асырға һәм бер нисә секунд асыҡ тоторға.
- «Ә-ә-ә» тип һуҙып *бер, ике, өс* тигәнсе йырларға, ә ҡулдар менән ошо ваҡыт эсендә сәпәкәйләргә.
- Ирендәр әҙ генә асыҡ, тештәрҙе бер-береһенә тигеҙеп, еңелсә туҡылдатыу;
- "Йылмайыу"- ирендәр асыҡ, йылмайыу күренешендә, тештәр ҡыҫылған. «З-з-з» тип серәкәй йырын йырлау.

- Ҡойманы әҙ генә астыҡ – серәкәй ҡыҫылды, йырлай алмай. Ул тик «Ҙ-ҙ-ҙ» тип тауыш бирә (телде теш араларына ҡыҫтырыу).

Балалар, беҙ ҙә йырлап ҡарайыҡ әле:

З-з-з - *кә-зә*

Ҙ-ҙ-ҙ - *ҡайҙа (3-4 тапҡыр ҡабатлайҙар)*

-Танау аша тәрән итеп тын алыу, оҙаҡ итеп ауыҙ аша һауаны сығарыу;

- "Эйәкте туңдырыу" - өҫкө иренде аҫҡы ирен аҫтына төшөрөргә, бер тын эсендә аҫҡа, эйәккә һалҡын һауаны өрөү;

-"Ҡулдың һыртын туңдырайыҡ" - ябыҡ ирендәрҙе йылмайған кеүек һуҙырға, ҡул һыртын эйәккә терәргә, тын алырға ла, тын бөткәнсе ҡул һыртына өрөргә.

Тәрбиәсе: - Ковролинда көҙ һүрәте. Ҡарағыҙ, һүрәттә нимәләр төшөрлөгән (һүрәт буйынса һөйләй):

- Көҙ килде. Япраҡтар һары. Улар ергә ҡойола. Балалар йәшелсәләр йыя. Был кишер. Был һуған. Был кәбеҫтә. Был ҡыяр.

*«Тылсымлы тоҡсай» уйыны.* Тәрбиәсе:

- Был тылсымлы тоҡ. Унда төрлө йәшелсәләр бар. Марсель, кил әле. Һин тоҡтан нимә алырһың икән. Бала тоҡтан йәшелсәне алып, уның атамаһын әйтә, башҡа балалар уның менән бергәләп йәшелсәнең атамаһын аңлатҡан һүҙҙе 3-4 тапҡыр ҡабатлайҙар.

Тәрбиәсе:

-Балалар, телде, тештәрҙе, ирендәрҙе уйнатып, уларҙы башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтергә әҙерләп алайыҡ әле (үткән дәрестәге күнекмәләр ҡабатлатыла).

Тәрбиәсе: - Балалар, кәзә килеп йәшелсәләрҙе ашап киткән. *«Нимә юҡ» уйыны:* өҫтәлдә йәшелсә муляждары, «*Төн*», - тип әйтеп, тәрбиәсе йәшелсәнең береһен йәшерә. ә балалар күҙҙәрен йомоп ултыра. *«Көн»,* - тип әйткәс, балалар ниндәй йәшелсә юғалғанлығын әйтергә тейештәр.

Тәрбиәсе:

- Балалар, серәкәй менән бал ҡорто килгән. Улар үҙҙәренең йырҙарын йырлап ишеттерергә һорайҙар.

- Ҡыҙҙар, һеҙ серәкәйҙәр. Малайҙар - бал ҡорттары. Остоҡ!

Ҡыҙҙар серәкәй булып «ззз-ззз-ззз», малайҙар бал ҡорто булып «ҙҙҙ-ҙҙҙ-ҙҙҙ» тип көйләп, бүлмә буйлап осоп йөрөйҙәр. Тәрбиәсе сигналы буйынса улар урындарына ултыралар һәм ролдәр алмашына.

Тәрбиәсе:

- Балалар, мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, ә һеҙ унда нимә төшөрөлгәнен ҡысҡырып әйтегеҙ. Ниндәй һүҙҙә «ҙ» өнө бар - бер тапҡыр, ниндәй һүҙҙә «з» өнө бар - ике тапҡыр сәпәкәй итәбеҙ.

Һүрәттәр – ҡыҙ, кәзә, поезд, камзул, күҙҙәр.

Тәрбиәсе: - Балалар, беҙгә ҡунаҡтар килгән: ҡурсаҡ Айгөл, ҡурсаҡ Азамат, эт, бесәй, кәзә, ҡаҙ. (уларҙың атамаһын бергәләп хор менән ҡабатлайҙар).

Тәрбиәсе балаларға ҡунаҡтарға үҙҙәренең яңы өйрәнгән һүҙҙәрен әйтеп күрһәтергә тәҡдим итә.

«Көҙ килде» сюжетлы һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөтә:

*Көҙ килде. Япраҡтар һары. Балалар йәшелсәләр йыя. Был кишер. Был һуған. Был кәбеҫтә. Был ҡыяр.*

Тәрбиәсе: - Балалар, Айгөл көҙ тураһында бик матур шиғыр ятлаған. Ул шиғыр «Көҙ килгән» тип атала. Уны Гөлфиә Юнысова апай яҙған. Тыңлағыҙ әле:

*Көҙ килгән, көҙ килгән,*
*Көҙ быйыл бик тиҙ килгән.*
*Ҡайындар, тирәктәр, талдар*
*Һарынан күлдәк кейгән.*

*Көҙ килгән, тиҙ килгән,*
*Тиҙ килгәнен кем белгән?*
*Көҙ бит, һорап та тормайса,*
*Баҡсаға барып ингән.*

Дәресте дөйөмләштереп, тәрбиәсе балаларҙан нимә эшләгәндәрен һорай, уйнатып ҡарата, уларҙың эшенә баһа бирә.

### 8 – се дәрес

**Тема:** "Көҙгө урожай"

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, өйрәнелгәндәрен нығытыу һәм уларҙың әйтелештәрен ҡабатлау;***

б) телмәр аппаратының һығылмалылығын үҫтереү, нығытыу; *ы, и, о, а* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) үҙ-ара башҡортса аралаша белеүҙәренә ҡыуаныс, шатлыҡ тойғолары уятыу.

**Йыһаз:** фланелеграф, көҙ миҙгелен һүрәтләгән сюжетлы һүрәт, йәшелсә һүрәттәре йәки муляждары, йәнлектәр һүрәте, малай һәм ҡыҙ кейемендәге ҡурсаҡтар.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе: - Балалар, тәүҙә "Һин кем?" уйынын уйнап алайыҡ. Бер-беребеҙгә һаулыҡ – иҫәнлек теләйек. Ҡояш менән дә һаулыҡ һорашайыҡ. Матур көн килтергәне өсөн уға рәхмәт әйтәйек!

Хәҙер беҙ башҡортса матур итеп һөйләшергә өйрәнер өсөн телде, тештәрҙе, ирендәрҙе уйнатып, уларҙы әҙерләп алайыҡ әле (тәрбиәсе балалар менән артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләре үткәрә («Тылсымлы өндәр» китабын ҡара).

Тәрбиәсе ҙур стена сәғәтен күрһәтә һәм сәғәт йөрөүен тыңларға тәҡдим итә (магнитофон яҙмаһын, йә сәғәт йөрөүенең үҙен). Тәрбиәсе:

- Был ниндәй сәғәт? Был бәләкәй сәғәт. Бәләкәй сәғәт нимә ти? *Тик – так, тик – так.* (тын ғына, әкрен генә тауыш менән әйтеп күрһәтәләр). – Был ниндәй сәғәт? Был ҙур сәғәт. Ҙур сәғәт нисек һуға? *Бим-бом, бим-бом.* Көслө тауыш сығарып, әйтеп күрһәтәләр.

Тәрбиәсе: - Беҙ бөгөн ҡурсаҡ Айгөл менән Азаматҡа театр күрһәтәбеҙ. Фланелеграфҡа һүрәттәрҙе ҡуйып, көҙ миҙгелен һүрәтләйбеҙ :

*Көҙ килде. Япраҡтар һары. Балалар йәшелсәләр йыя. Был кишер. Был һуған. Был кәбеҫтә. Был ҡыяр. Был шалҡан.*

Бына кәзә килә. Кәзә нимә ярата? Кем әйтә?

Бына ҡуян килә. Ҡуян нимә ярата? Ҡуян кишер ярата.

Бына Айгөл менән Азамат. Улар нимә ярата? Улар ҡыяр ярата.

Беҙ нимә яратабыҙ, һанап китәйек әле, балалар!

Һәр бала тороп, өҫтәлдән үҙе ниндәй йәшелсәне ярата, шуның һүрәтен алып, фланелеграфҡа ҡуя. Тәрбиәсе:

- Балалар, бесәй тураһында ниндәй уйын беләбеҙ, уйнап алайыҡ! «Бесәй-бесәй-берс» уйыны. Тәрбиәсе:

- Бесәй тураһында кем шиғыр белә, иҫкә төшөрәйек әле:

*Бесәй, бесәй, бесәй шул.*

*Бесәй әле кескәй шул.*

*Үҙе мырлай ҙа мырлай,*

*Әллә ул шулай йырлай.*

- Ҡуян тураһында шиғырҙы иҫкә төшөрәйек:

*Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,*

*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.*

*Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,*

*Ҡолағы оҙон икән!*

- Ҡуяндың нимәләре бар? (ҡойроғо, ҡолаҡтары, аяҡтары йәки тәпәйҙәре, башы, күҙҙәре, танауы, ауыҙы).

Тәрбиәсе: - *Ҡолаҡ, ҡойроҡ, ҡыҫҡа, ҡуян, ҡунаҡ, ҡурсаҡ, ҡыҙ* һүҙҙәрендә иң беренсе булып ниндәй өн (звук) ишетелә? «Ҡ» өнө нисек әйтелә. Ул өн нисек әйтелә? Тамаҡ төбөндә ҡылсыҡ йәбешкән, уны тамаҡ ҡырып сығарыр кәрәк. Тәрбиәсе балалар менән бергәләп «ҡ» өнөн әйтеп ҡарайҙар һәм тәүге өндө айырып, бирелгән һүҙҙәрҙе ҡабатлайҙар: ҡҡҡҡ-олаҡ, ҡҡҡҡ-ойроҡ, ҡҡҡ-ыҙ һ.б.

Дәресте йомғаҡлау: шиғырҙарҙы ҡабатлау, «Бесәй-бесәй-берс», "Һин кем?" уйындарын уйнайҙар.

### 9 – сы дәрес

**Тема:** "Бойҙай ҡайҙа үҫә?"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү: *бойҙай, башаҡ (-тар), ялан.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *б, ш, ҡ* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) балаларҙың хәтерен, иғтибарын үҫтереү, тел өйрәнеүгә теләк уятыу.

**Йыһаз:** бүлмә түбәһенә беркетелгән ептәрҙә йоҡа ҡағыҙҙан эшләнгән төрлө төҫтәге япраҡтар; «Көҙ етте» һәм «Урожай йыйыу» сюжетлы һүрәттәре; ҡурсаҡтар - Азамат менән Айгөл; бесәй, кәзә, ҡуян, эт, ҡаҙ уйынсыҡтары, ҡағыҙ биттәре, ҡәләмдәр.

## Дәрес барышы:

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша, шулай уҡ уларҙан да бер-береһе менән һаулыҡ һораштырып, исемдәрен әйттертә. «Һаумы, ҡояш! Һаумы, яңы көн!», - тип теләк теләргә өйрәтә.

Балалар түңәрәккә торалар. Бүлмә түбәһенә беркетелгән ептәрҙә йоҡа ҡағыҙҙан эшләнгән төрлө төҫтәге япраҡтар. Улар балалар башы өҫтөндә генә эленгән.

Тәрбиәсе "Япраҡтарға өрәйек" уйынын уйната: балалар күкрәккә һауа алалар ҙа, тәрбиәсе сигналы буйынса, ауыҙҙарын борғо һымаҡ итеп ослайтып, япраҡтарға өрәләр (3-4 тапҡыр). Тәрбиәсе япраҡтарҙы балаларҙың түш тәңгәленә тиклем төшөрә һәм: *"Былар нимә?"* - тип һорай. Балалар: «Япраҡтар», - тип яуаплайҙар. Шунан уларҙың төҫөн билдәләйҙәр (һары, ҡыҙыл, йәшел). Ҡасан япраҡтар төрлө төҫкә ингәнен асыҡлайҙар. «Көҙ етте» сюжетлы һүрәте буйынса әңгәмәләшәләр:

- *Көҙ килде. Япраҡтар һары. Балалар йәшелсәләр йыя. Был кишер. Был һуған. Был кәбеҫтә. Был ҡыяр. Был шалҡан.*

Ишек туҡылдаталар. Айгөл менән Азамат инәләр. Улар тәрбиәсе менән һаулыҡ һорашалар һәм балалар менән «Һин кем? Һаумы, Миша…» уйынын уйнайҙар.

Азамат:

- Балалар, беҙ Айгөл менән ауылға барҙыҡ. Яланда комбайндар урожай йыя. Бына беҙ һеҙгә бойҙай башаҡтары алып килдек. (Тәрбиәсе балаларға вазаға ҡуйылған бойҙай башаҡтарын күрһәтә).

Тәрбиәсе «Урожай йыйыу» сюжетлы һүрәтен күрһәтеп, балалар менән әңгәмәләшә (рус телендә аңлатыу мөмкин). *Ялан* – это поле, где растет пшеница. *Пшеница* – это бойҙай. *Башаҡ* – это колосок. Здесь много колосков, поэтому мы говорим по-башкирски *башаҡтар.*

Яңы һүҙҙәрҙе тәүҙә хор менән, аҙаҡ бер нисә бала айырым-айырым ҡабатлап сығалар: ялан, бойҙай, башаҡ.

Ишек туҡылдаталар. *Бесәй, кәзә, ҡуян, эт, ҡаҙ* уйынсыҡ хайуандар инәләр. Улар йәшелсәләр алып килгәндәр. Һәр береһе йәшелсәне күрһәтеп, балаларҙан «Был нимә? Ул ниндәй төҫтә?», тип һорайҙар.

Азамат, хайуандарға бойҙай башаҡтарын күрһәтеп, әйтә:

- *Был бойҙай башаҡтары. Бойҙай яланда үҫә. Бойҙайҙы комбайн йыя.* Тәрбиәсе:

- Балалар, *бойҙай* һүҙе ниндәй өндән башлана. Бергәләп әйтеп беләйек әле: bбб-ой-ҙай. Тағы ла ниндәй һүҙҙәр «б» өнөнән башлана? (ббб-ашаҡ, ббб-есәй, ббб-ала).

Тәрбиәсе балаларға ҡағыҙ биттәре, ҡәләмдәр тарата һәм уларға бойҙай башаҡтары төшөрөргә тәҡдим итә.

Дәресте йомғаҡлап, тәрбиәсе бөтә һүрәттәрҙе лә бер урынға йыя һәм балаларҙан нимә эшләгәндәрен һорап, үткәндәрҙе ҡабатлата.

## 10-сы дәрес

**Тема:** "Айгөлдөң тыуған көнө"

*Маҡсат:* а) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу: *кәбеҫтә, шалҡан, кишер, һуған, картуф, помидор; ҡоймаҡ, бәлеш, сәк-сәк, икмәк; күстәнәс,*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *у, һ, ө, ә* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) типик грамматик конструкцияларҙы ҡабатлау, нығытыу: *«Яҡшы көн теләйем һиңә!»; Он нимәнән эшләнгән? Он бойҙайҙан эшләнгән. Бойҙай ҡайҙа үҫә? Бойҙай яланда үҫә.*

г) бәйләнешле телмәр күнекмәләре үткәреү; башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһазландырыу:** ҡурсаҡ Айгөл менән ҡуян; кәбеҫтә, шалҡан, кишер, һуған, картуф, помидор, ҡоймаҡ, бәлеш, сәк-сәк, икмәк муляждары йәки үҙҙәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе: - Һаумыһығыҙ, балалар! Кәйефтәр нисек? Бер-беребеҙ менән танышып, һаулыҡ һорашып, яҡшы теләктәр теләйек! Бер-береһенә күрше ултырған балалар менән *«Һин кем? Һаумы, ...» уйынын* уйнайҙар. Тәрбиәсе уларҙы «Яҡшы көн теләйем һиңә!» тип өҫтәп әйтергә өйрәтә.

- Балалар, беҙ бөгөн байрамға әҙерләнәбеҙ. Пианино уйнап, йырлап алайыҡ әле (бармаҡтар менән тубыҡтарҙа пианино уйнаған хәрәкәттәр

башҡаралар. Шул уҡ ваҡытта **«ә», «ө», «ү», «и», «о», «ы»** өндәрен һуҙалар. 5-6 секунд эсендә, һәр өндө 3-4 тапҡыр. Тәүҙә әкрен генә, аҙаҡ – көслө тауыш менән һуҙалар).

- Башҡортса матур һөйләшер өсөн тел гимнастикаһы эшләп алайыҡ («Тылсымлы өндәр» китабын ҡара, «һ», «ө», «ү» өндәренә фонетик күнекмәләр алыу кәрәк).

- Балалар, бөгөн Айгөлдөң тыуған көнө. Беҙ Айгөлгә күстәнәстәр алып килдек (йәшелсәләр өҫтәлдә ята, тәрбиәсе балаларҙы эргәһенә саҡырып, йәшелсәнең атамаһын әйттерә, уның ниндәй төҫтә икәнлеген билдәләтә. Мәҫәлән, был ҡыяр. Ул йәшел).

Тәрбиәсе (һәр хәрәкәтте һәм йәшелсәне күрһәтеп):

- Беҙ аш бешәрәбеҙ. Кәстрүлгә нимә һалабыҙ (кәбеҫтә, шалҡан, кишер, һуған, картуф, помидор).

- Балалар, Айгөл ҡоймаҡ, бәлеш, сәк-сәк, икмәк бешергән, ҡарағыҙ әле! Улар ниндәй тәмле! Улар нимәнән бешерелгән? (ондан). Он нимәнән эшләнгән? Бойҙайҙан. Бойҙай ҡайҙа үҫә. Яланда.

Тәрбиәсе «Урожай йыйыу» сюжетлы һүрәтен күрһәтеп, балалар менән үткән дәрес материалдарын иҫкә төшөрә.

*«Тылсымлы тоҡсай»* уйыны. Балалар тоҡсай эсендә йәшелсәне һәрмәп ҡарап, уның атамаһын әйтәләр. Сығарып, башҡаларға күрһәтеп, бергәләп: - Был ҡыяр (шалҡан, кишер…), - тип хор менән әйтәләр.

*«Өндө дөрөҫ билдәлә!»* уйыны. Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә. Балалар һүҙҙә «ҡ» өнө булһа, ҡулдарын күтәрәләр: *ҡуян, ҡаҙ, бесәй, ҡыяр, туп, ҡоймаҡ.* Дөрөҫ билдәләнгәнме-юҡмы икәнлеген бергәләп, һүҙҙе әйтеп ҡарап, тикшерәләр. «Ҡ» өнөнөң әйтелешә иғтибар бирелә. Тәрбиәсе:

- Ҡунаҡҡа ҡуян килгән. Ул күстәнәс алып килгән. Был кишер. Ул ҡыҙыл, тәмле. Рәхмәт, ҡуян!

Айгөл һинең турала шиғыр белә. Ҡуян тураһында шиғырҙы иҫкә төшөрәйек:

*Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,*
*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.*

*Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,*

*Ҡолағы оҙон икән!*

- Ҡуяндың нимәләре бар? (ҡойроғо, ҡолаҡтары, аяҡтары – тәпәйҙәре, башы, күҙҙәре, танауы, ауыҙы). Кем шиғырҙы һөйләп күрһәтә?

Айгөлдө ҡотларға бесәй ҙә килгән. Ул: - Уйын уйнайыҡ, - ти.

- Балалар, бесәй тураһында ниндәй уйын беләбеҙ, уйнап алайыҡ!

«Бесәй-бесәй-берс» уйыны.

Дәресте йомғаҡлау. Ҡуян, бесәй тураһындағы шиғырҙарҙы ҡабатлау.

**11 – се дәрес**

**Тема:** "Йәшелсә-емештәр"

*Маҡсат:* а) элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу; яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, дөрөҫ әйтелешен үҙләштереү һәм уларҙы телмәрҙә ҡуллана белергә өйрәтеү: *әфлисун, алма, груша, лимон, ҡарбуз, банан; картуф, кишер, кәбеҫтә, һуған, помидор, ҡыяр.*

Төҫтәрҙе билдәләүҙе нығытыу.

1-5-кә тиклем рәт һандарын һанарға һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү.

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; ***ә, э, а, у, ө*** өндәрен дөрөҫ әйтеүҙе нығытыу;

в) алдан өйрәнелгән һәм яңы типик грамматик конструкцияларҙы ҡабатлау, нығытыу: *Был нимә? Был алма. Алма ниндәй? Алма йәшел. Ҡуян нимә ярата? Ҡуян кәбеҫтә ярата.*

«Юҡ» һәм «әйе» һүҙҙәрен ҡуллана белеүҙе нығытыу.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү: Был нимә? Ул ниндәй? һорауҙарын бирә белергә өйрәтеү;

г) башҡорт телендә аралашыуға ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** йәшелсә һәм емеш-еләк муляждары, эш дәфтәре, буяуҙар һәм бумала, фломастерҙар, йәшелсә силуэттары төшкән ҡағыҙ биттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша, балалар ҙа бер-береһе менән һаулыҡ һорашып, яҡшы теләктәр теләйҙәр. Тәрбиәсе:

- Телде уйнатып алайыҡ әле! Ул ҡайҙа йәшәй! (бүлмәлә - ауыҙ эсендә). Телдең хужаһы кем? (һин, мин – һәр кем үҙенең теленең хужаһы). Тел ҡайҙа уйнарға ярата? (бүлмәнең түбәһендә – на потолке). Тел ҡоймаларҙы (тештәрҙе) ҡарап сыҡты. Юлда ул ҡоштарҙы осратты. Урманда нисек өкө ухылданы? ууу-ууу.

Тумыртҡа нисек туҡылданы?

Бүре нисек олоно? үүү-үүү.

Айыу нисек аҡырҙы? ааа-ааа.

Тел фермаға барып сыҡты. Унда һыйыр баҡырҙы: мөө-ммөө.

Эт ырылданы: ыррр-ыррр.

Ике ҡуңыҙ талаштылар: жжжуу – жжжжы, ыжжж - ужжж.

Тел йылғаға барып етте. Арыны, ял итергә ултырҙы. Һауа саф, таҙа. Тел рәхәтләнеп тын алды (күрһәтегеҙ).

Һыу инергә һыуға төштө. Һыу һыуыҡ. Нисек һыуыҡ, күрһәтегеҙ! Тел өшөнө, ҡалтырай башланы (күрһәтегеҙ). Бышҡыра, сөскөрә башланы, нисек? Температураһы күтәрелде, ауырып китте: *«эээх, өөөф, ыууф, әәәһ», - тип ыхылдай.* Табип килде, Телгә әсе дарыу бирҙе, Тел сырайын һытып, дарыуҙы эсеп ебәрҙе. Нисек әсе булды, күрһәтегеҙ!

Тел йоҡлап китте. Нисек йоҡланы, күрһәтегеҙ! Афарин, бөтәгеҙ ҙә бик матур итеп уйнаттығыҙ телегеҙҙе!

Тәрбиәсе кәрзиндән йәшелсәләр һәм емеш-еләк муляждарын алып күрһәтә һәм һорау бирә:

- Был нимә? Был кишер.
- Был нимә? Был әфлисун(һ.б.)

**«Кем дөрөҫ әйтә!» уйыны.**

Тәрбиәсе: - Хәҙер мин һеҙҙе яңылыштырырға тырышам – йәшелсәне күрһәтәм дә, уның атамаһын бутап әйтәм. Һеҙ уны дөрөҫләп әйтә белерһегеҙме икән? Дөрөҫ булһа, һеҙ: Әйе, был ҡыяр (һ.б.), - тип әйтәһегеҙ. Дөрөҫ булмаһа: -«Юҡ, был кишер (һ.б.)», - тип яуап бирәһегеҙ. (шул рәүешле тәүҙә тәрбиәсе үҙе, һуңынан 2-3 баланан уйынды уйната).

Тәрбиәсе: - Өҫтәлдә төҫлө ҡәләмдәр ята. Миңә ҡыҙыл, һары, йәшел төҫтәге ҡәләмдәрҙе алып күрһәтегеҙ! (балалар төҫтәрҙе әйтеп, ҡәләмдәрҙе күрһәтәләр).

– Мин хәҙер һеҙҙе тағы ла бутарға тырышам: ҡыяр ҡыҙыл төҫтә. Һеҙ: - «Юҡ, ҡыяр йәшел төҫтә», - тип дөрөҫ атарға тырышаһығыҙ. *Кишер йәшел төҫтә. Лимон ҡыҙыл төҫтә. Помидор һары төҫтә.*

Тәрбиәсе: - Өҫтәлдәге стаканда нисә ҡәләм, һанап күрһәтегеҙ әле? (биш). Беҙҙең бармаҡтар нисәү? (бишәү).

**«Бармаҡтар» уйыны:**

Был бармаҡ – олатай,

Был бармаҡ – өләсәй,

Был бармаҡ – атай,

Был бармаҡ – әсәй,

Был бармаҡ – мин,

Исемем минең - …

**Уйын «Мин нимә яратам?».** Тәрбиәсе һөйләм өлгөһө бирә: *Мин алма яратам.*

Балаларға һорау биреп, уларҙан яуап ала:

- Катя, һин нимә яратаһың?

Катя:

- Мин кишер яратам (һ.б.)

Ишек туҡылдаталар. Ҡуян инә. Тәрбиәсе:

- Нимә беҙгә ҡунаҡҡа килгән? Ул ниндәй? Ҡуян нимә ярата?

Ҡуянға йыр йырлайыҡ:

*Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,*

*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.*

*Ашамаған, эсмәгән,*

*Үсегеп ҡайтып киткән!*

- Ни өсөн ҡуян үсегеп ҡайтып киткән? (йәшелсә бирмәгәндәр). Беҙ хәҙер ҡуянға күп итеп йәшелсәләр төшөрөп бирәбеҙ (йәшелсәләр силуэты төшкән ҡағыҙ биттәре тарата һәм ундағы йәшелсәләрҙе (кишер, ҡыяр,

помидор) буярға тәҡдим итә. Эш барышында йәшелсә, емеш-еләк төҫтәре атамалары нығытыла.

*Дәресте йомғаҡлау:*

-Нимәләр тураһында һөйләштек?

- Тел менән уйнау оҡшанымы?

- Йәшелсәләрҙе кем сығып күрһәтеп, һанап сыға?

- Емеш-еләктәрҙе кем сығып күрһәтә?

Ҡул устарын өҫкә күтәрҙек, минең менән хушлаштыҡ! Һау булығыҙ!

**12 – се дәрес**

**Тема:** "Минең ғаиләм"

*Маҡсат:* а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *ҡусты, әсәй, атай, ғаилә, бәләкәй, сәпәкәй, һикерә, күтәрә; 1-5-кә тиклем рәт һандарын һанарға өйрәтеү.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; ***ә, ҡ, с*** өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) алдан өйрәнелгән һәм яңы типик грамматик конструкцияларҙы ҡабатлау, нығытыу, өйрәнеү: *Бесәй йомшаҡ. Туп һикерә. Ҡуян ҡурҡаҡ. Ҡуяндың ҡолағы оҙон. Кәзә кәбеҫтә ярата.*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телендә һөйләшә белеүгә ҡыуаныс, шатлыҡ уятыу.

**Йыһаз:** Ҡурсаҡ Айгөл һәм уның ҡустыһы Тимур; «Ғаилә»һүрәте; уйынсыҡ ҡуян, бесәй, эт, айыуҡай; фломастерҙар һәм аҡ ҡағыҙ биттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша, балалар ҙа бер-береһе менән һаулыҡ һорашып, яҡшы теләктәр теләйҙәр. Тәрбиәсе:

- Балалар, беҙ йырлап, телдәрҙе уйнатып алайыҡ. (асыҡ, ябыҡ ижектәрҙе һуҙып әйтәләр, бармаҡтар менән пианинола, йә ҡурайҙа уйнау хәрәкәттәре башҡарыла):

| | |
|---|---|
| Лә-лә-лә | әл-әл-әл |
| Тә-тә-тә | әт-әт-әт |
| Сә-сә-сә | әс-әс-әс |
| Рә-рә-рә | әр-әр-әр (һәр күнегеү 2-3 тапҡыр ҡабатлана). |

Тын алыу күнекмәләре үткәрелә (7-се дәресте ҡара). Бер тын алышында үткән дәрестә өйрәнелгән һөйләмдәрҙе ҡабатлайҙар. Күнегеү тәрбиәсе күрһәтеүе һәм етәкселегендә башҡарыла:

*Бесәй йомшаҡ. Туп һикерә. Ҡуян ҡурҡаҡ. Ҡуяндың ҡолағы оҙон. Кәзә кәбеҫтә ярата.*

Ишек шаҡыйҙар. Ҡурсаҡ Айгөл инә. Ул бәләкәй генә ҡурсаҡ малай менән. Айгөл балалар менән һаулыҡ һораша, үҙе менән бергә ҡустыһын алып килеүен әйтә:

- Был минең ҡусты. Уның исеме Тимур. Тимур бәләкәй. Ул һикерә белә. Сәпәкәй итә. Ҡулдарын күтәрә белә. Бына ҡарағыҙ. (тәрбиәсе Айгөл булып ҡурсаҡты хәрәкәтләндерә).

Тәрбиәсе: - Балалар, әйҙәгеҙ, Тимур тураһында йыр тыңлайыҡ (таныш көйгә һалып йырлап ишеттерә):

*Сәп-сәп сәпәкәй,*

*Минең ҡустым бәләкәй.*

*Ҡулын күтәргән була*

*Сәпәкәй иткән була* (аҙаҡ 2-3 тапҡыр бергәләп йырлайҙар).

Тәрбиәсе: Айгөл һеҙгә фотоһүрәт алып килгән. Унда Айгөлдөң ғаиләһе төшкән, ҡарағыҙ әле:

*- Был кем? Был әсәй.*

*- Был кем? Был атай.*

*- Был кем? Был - бәләкәй малай. Уның исеме Тимур. Ул – ҡусты.*

*- Был Айгөл. Ул ҙур. Ул – апай.*

*- Һүрәттәге бөтә кешеләр – Айгөлдөң ғаиләһе.*

Бармаҡ уйыны уйнап алайыҡ. Тәүге йылда өйрәтелгәнде иҫкә төшөрөү:

*Был бармағым - олатай.*

*Был бармағым - өләсәй.*

*Был бармағым - атай.*

*Был бармағым - әсәй.*

*Был бармағым бәләкәй,*

*Ул минең ҡусты,*

*Исеме унын̡ Тимур.*

Уйынды 2-3 тапҡыр уйнағас, бармаҡтарҙы ял иттерәләр: ҡул суҡтарын һелкеп алалар, устары менән ҡул һырттарын һыйпайҙар, бармаҡтарҙы һанап ҡарайҙар: был – беренсе бармаҡ, был – икенсе бармаҡ, был – өсөнсө бармаҡ, был – дүртенсе бармаҡ, был – бишенсе бармаҡ. Тәрбиәсе:

- Балалар, беҙгә уйынсыҡтар ҡунаҡҡа килгән – ҡуян, бесәй, эт, айыуҡай. Улар менән һаулыҡ һорашып сығайыҡ әле!

Һәр бала ҡурсаҡ менән танышып, һаулыҡ һорашып, уларҙың атамаларын иҫкә төшөрөп, һүҙҙең әйтелешен нығыталар:

- Һин кем? Мин – бесәй. - Һаумы, бесәй! - Һаумы, Катя!»

«Бармаҡтар» уйынын тағы яңынан уйнайҙар. Балалар ике төркөмгә бүленәләр, тәрбиәсе: «Ҡайһы төркөм балалары һүҙҙәрҙе яҡшыраҡ әйтеп уйнар икән?», - тип уларҙы дәртләндерә. Хәҙер был төркөм уйнай, йәки ҡыҙҙар уйнай, ә малайҙар тыңлап тора тип, балаларҙы ҡыҙыҡһындыра.

Тәрбиәсе:

- Балалар, кем Айгөлдөң ҡустыһы Тимур тураһында йыр йырлап күрһәтә? «Сәпәкәй»ҙе хор менән, шунан айырым-айырым йырлайҙар.

Һәр балаға үҙенең ғаиләһенең һүрәтен төшөрөргә тәҡдим итә. Аҙаҡ һүрәттәрҙе таҡтаға элеп ҡуялар.

Дәресте йомғаҡлап, тәрбиәсе шиғырҙарҙы ҡабатлата, өйрәнелгән уйындарҙы уйната.

**13 – сө дәрес**

**Тема:** "Беҙҙең бүлмә"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: ниндәй; яҡты, мендәр, юрған, уйын бүлмәһе, йоҡо бүлмәһе, аш бүлмәһе, өҫтәл, ултырғыс, ишек, тәҙрә.

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *һ, ҡ* өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәтеү: *Ҡайҙа һинең әсәйең? Был – минең әсәйем (атайым, ҡустым, апайым). Был ниндәй бүлмә? Был уйын (аш, йоҡо) бүлмәһе.*

г) телде өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл һәм унының ҡустыһы Тимур; таҡтала балаларҙың ата-әсәләре һүрәттәре эленгән; йорт-йыһаздары, һауыт-һаба, уйынсыҡ һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм уларҙы балалар үткән дәрестә төшөргән ғаилә һүрәттәре эленгән таҡта янына саҡыра:

- Ҡарағыҙ әле, беҙгә бик күп ҡунаҡтар килгән. Был – беҙҙең атайҙар һәм әсәйҙәр. Катя, ҡайҙа һинең әсәйең, күрһәт! Ҡайҙа һинең атайың, күрһәт!

Катя: - Был – минең әсәйем. Был – минең атайым, - тип әйтә.

Тәрбиәсе шул рәүешле һәр баланан һорап сыға.

- Йәгеҙ, телде уйнатып, йырлап алайыҡ! (ижектәр тәрбиәсе теләге буйынса алына).

Лә-лә-лә-лә. Ла-ла-ла-ла.

Ҡө-ҡө-ҡө-ҡө. Ҡа-ҡа-ҡа-ҡа.

Һә-һә-һә-һә. Һа-һа-һа-һа.

- Беҙгә бөгөн, Айгөл менән Тимур ҡунаҡҡа килергә тейештәр, бүлмәне матурлайыҡ!

- Был - беҙҙең уйын бүлмәһе. Унда уйынсыҡтар күп. Ҡабатлайыҡ әле: «уйын бүлмәһе, уйынсыҡтар күп».

Балалар уйын мөйөшөндәге бүлмә йыһаздары, уйынсыҡтар менән танышалар. Тәрбиәсе балаларҙан уларға күрһәтеп предметтарҙың атамаларын һорай, һүҙҙәрҙе ҡабатлата:

- Был нимә? Был ҡурсаҡ (туп, өҫтәл, ултырғыс, ишек, тәҙрә).

- Был йоҡо бүлмәһе. Ул ҙур, яҡты. Был карауат, мендәр, юрған. Беҙ бында йоҡлайбыҙ.

- Был аш бүлмәһе. Был - тәрилкә, ҡалаҡ, сынаяҡ, самауыр.

Тәрбиәсе «Бармаҡтар» уйынын уйната. Айгөл менән Тимур инәләр. Һаулыҡ һорашып, түргә үтәләр. Тәрбиәсе:

- Был Айгөл. Ул кем – ҡыҙмы әллә малаймы? Кем ҙур – Айгөлмө әллә Тимурмы? Тимур Айгөлгә кем була? Ул малаймы, әллә ҡыҙмы?

Тимур тураһында ниндәй йыр beләбеҙ әле, йырлайыҡ, хәрәкәттәрен күрһәтеп.

Айгөл: - Миңә һеҙҙең бүлмәләр бик оҡшай, күрһәтегеҙ әле – ти.

Балалар урындарынан тороп, бүлмәләрҙе күрһәтәләр. Тәрбиәсе һорау биреп, өйрәнелгән яңы һүҙҙәрҙе ҡабатлата:

- Был ниндәй бүлмә?

- Йоҡо бүлмәһе. Был мендәр, карауат, юрған, - тип балалар һөйләмде әйтеп бөтөрә.

- Был ниндәй бүлмә?

- Был уйын бүлмәһе. Был уйынсыҡтар. Уйынсыҡтар күп, матур. Был машина, ҡурсаҡ, туп һ.б.

- Был ниндәй бүлмә?

- Был - аш бүлмәһе.

- Был нимә? Был - өҫтәл (ултырғыс, ҡурсаҡ һ.б. һауыт-һаба атамалары ҡабатлатыла).

Тәрбиәсе:

- Балалар, мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, «Нимә юҡ?» тигән уйын уйнайыҡ! (йорт-йыһаздары, һауыт-һаба, уйынсыҡ һүрәттәре күрһәтелә).

Балалар һәр һүрәттең атамаһын әйтеп сығалар. Шунан һуң тәрбиәсе һүрәттәрҙе таҡтаға теҙеп ҡуя. Ул «Төн» - тип әйткәс, балалар күҙҙәрен йома. Тәрбиәсе бер һүрәтте йәшерә. Ул «Көн» - тип әйтһә - балалар күҙҙәрен аса. «Нимә юҡ» - тип һорай тәрбиәсе. Юҡ булған предметтың атамаһын балалар хор, аҙаҡ бер-ике бала айырым ҡабатлай.

Һүрәттәр бутап ҡуйыла. «Нимә артыҡ?» уйыны үткәрелә.

Дәресте йомғаҡлау.

**14 – се дәрес**

**Тема:** "Ҡурай моңо"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу:. Башҡортостан (-да), йәшәй (-беҙ), ҡала (-лар), ауыл-дар, матур-мы, ҡумта, ҡурай, тишек-тәр.

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *а, ә* өндәренең айырмаһына төшөнөргә һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Ҡайҙа йәшәйбеҙ? Туп ҙурмы? Ауыл матурмы?*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт һүҙҙәрен һиҙемләүгә, тойомлауға иғтибар уятыу; хәтерҙе иҫтә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** күк һәм ҡыҙыл ҡумталар, ҙур һәм бәләкәй туптар, ҡурай, ҡурай моңо аудиояҙмаһы, ҡурай сәскәһе һүрәте, «Ғаилә» темаһына сюжетлы һүрәт, ҡурайҙа уйнаған олатай һүрәте.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе улар менән иҫәнләшеп, дәрес башлай: - Балалар беҙ ниндәй республикала йәшәйбеҙ?

Балалар яуап бирә: - Беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ. (хор менән ҡабатлайҙар).

- Башҡортостанда ниндәй ҡалалар бар? (балалар рус телендә әйтергә мөмкин). - Беҙ ниндәй ҡалала (ауылда) йәшәйбеҙ? Матурмы беҙҙең ҡала (ауыл)?

Тәрбиәсе:

- Телде, ирендәрҙе уйнатып, матур итеп һөйләшергә әҙерләп алайыҡ әле.

- Са-са-са- Салауат.

- Сә-сә-сә- сәләм.

- Сәләм, һиңә, Салауат!

- Ҡу-ҡу-ҡу-ҡурай.

- Салауат ҡурайҙа уйнай.

- Салауат Салауат ҡалаһында йәшәй.

- Салауат матур ҡала!

**«Ҙур – бәләкәй» уйыны.** Өҫтәлдә ике ҡумта – береһе күк, икенсеһе – ҡыҙыл. Ҙур һәм бәләкәй туптар. Ҙур тупты – ҙур ҡумтаға, бәләкәйҙе - бәләкәй ҡумтаға һалыу кәрәк. Һалғанда:

- Был - ҙур туп, был бәләкәй туп. Ҙур (бәләкәй) тупты ҙур (бәләкәй) ҡумтаға һалам. Йәки уйынды ярыш итеп үткәрергә була: Бер команда балалары йәки ҡыҙҙар ҙур тупты – ҙур ҡумтаға, икенсе команда ағзалары

йәки малайҙар бәләкәй тупты – бәләкәй ҡумтаға һалалар. Аҙаҡ – ролдәр алмашына.

**«Бармаҡтар» уйынын** уйнайҙар. Балалар менән бергәләп, бармаҡтарын һанап күрһәтәләр.

Ҡурай моңо тауышы ишетелә (аудиояҙма). Тәрбиәсе:

- Балалар, был ниндәй тауыш? Кем әйтә? (ҡурай).

- Ҡурайҙы күргәнегеҙ бармы? Өҫтәлдән ҡурай һүрәтен алып фланелеграфҡа элегеҙ!

- Бына ҡурай (ысын ҡурайҙы күрһәтә). Ҡурай урманда үҫә (һүрәтен күрһәтеп). Уны киҫеп алалар, бына ошондай тишек эшләйҙәр. Һанайыҡ, нисә тишек эшләнгән икән. (биш тишек, өҫтән – дүрт, аҫ яҡтан – бер тишек).

-Хәҙер ҡурайҙа уйнап алайыҡ: «а», «ә», «о», «ө», «у», «ү» һуҙынҡыларын тәрбиәсе етәкселегендә 4-5 секунд тирәһе һуҙып әйтәләр, бармаҡтар менән ҡурайҙа уйнау хәрәкәттәрен башҡаралар.

«Ғаилә» темаһына сюжетлы һүрәт ковролинға элenә. Ғаилә ағзаларының атамаһын иҫкә төшөрәләр.

- Был кем?

- Был атай, әсәй, ҡыҙ, ул, олатай, өләсәй.

Айырым ҡурайҙа уйнаған олатай һүрәте элenә. Тәрбиәсе:

- Был олатай. Ул ҡурайҙа уйнай. Ул – ҡурайсы. Бөгөн байрам. Беҙ ҙә уйнап алайыҡ. (ҡурай көйөнә бейейҙәр, бармаҡтарҙы уйнаталар, «Сәпәкәй» шиғырын ҡабатлайҙар).

«Нимә юҡ?» уйыны (йорт-йыһаздары, һауыт-һаба, уйынсыҡ һүрәттәре һүҙҙәр ҡабатлатыла).

*Дәресте йомғаҡлау.*

- Мендәр, юрған, карауат ниндәй бүлмәлә?

- Тәрилкә, ҡалаҡ, самауыр ниндәй бүлмәлә?

- Туп, машина, ҡурсаҡ ниндәй бүлмәлә?

- Ҡурайсы нимәлә уйнай?

- Кем бармаҡ уйынын күрһәтә?

Афарин, балалар! Бөтәгеҙ ҙә бик матур башҡортса һөйләштегеҙ!

## 15 – се дәрес

**Тема:** "Ҡала урамдары буйлап"

*Маҡсат:* а) алдан өйрәнгән һүҙҙәрҙе нығытыу, яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *ҙур, бейек, бәләкәй, тәпәш, бер ҡатлы, ҡала йорто (йорттары), ауыл өйө (өйҙәре)*, рәт һандарын иҫкә төшөрөү;

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; ***ә, ө, ү, у, о*** өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Был өй ниндәй? (бәләкәй, тәпәш, бер ҡатлы). Был өй ҡайҙа төҙөлгән? (ауылда). Нисә тәҙрәһе бар?*

г) эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәтеү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡортса һөйләшә белеүгә ғорурлыҡ тойғолары уятыу.

**Йыһаз:** бейек, ҡатлы ҡала йорттары һәм ауыл өйө төшөрөлгән һүрәттәр; йәшел, ҡыҙыл, һары төҫтәге түңәрәктәр; светофор, йәшелсәләр, уйынсыҡтар һүрәте.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша, бергәләп ҡала буйлап йөрөүҙәрен әйтә.

Бейек, ҡатлы ҡала йорттары һәм ауыл өйө төшөрөлгән һүрәттәрҙе күрһәтеп:

- Балалар, ҡайҙа ҙур һәм бейек йорттар? Был өйҙәр ҡайҙа төҙөлгән? (ҡалала, улар бейек, ҙур). Һанайыҡ, нисә ҡатлы икән? Тәҙрәләре бармы? Улар нисәү? (тәҙрәләре ҙур, күп).

Тәҙрәнән ҡурай тауышы ишетелә: - Әйҙәгеҙ беҙ ҙә ҡурай уйнап алайыҡ әле: «а», «ә», «о», «ө», «у», «ү» һуҙынҡыларын тәрбиәсе етәкселегендә 4-5 секунд тирәһе һуҙып әйтәләр, бармаҡтар менән ҡурайҙа уйнау хәрәкәттәрен башҡаралар.

- Был өй ниндәй? (бәләкәй, тәпәш, бер ҡатлы). Был өй ҡайҙа төҙөлгән? (ауылда). Нисә тәҙрәһе бар, һанағыҙ!

- Балалар, был бейек йорттарҙы ҡалала төҙөйҙәр. Уларҙа бик күп кеше йәшәй. Өйҙәр нимә эргәһендә теҙелгән? Дөрөҫ, юл эргәһендә. Юлдан машиналар йөрөй. Машиналар юлда светофорға ҡарап йөрөйҙәр.

(тәрбиәсе светофор күрһәтә һәм балаларҙан ниндәй төҫтәге ут янһа атлайбыҙ, ҡайһы ут янғанда туҡтайбыҙ икәнлеген һораша).

*«Атла! Туҡта! Көт!»* уйынын уйнау. Тәүҙә ҡағыҙә аңлатыла, шунан тәрбиәсе йәшел, ҡыҙыл, һары төҫтәге түңәрәктәр күрһәтә, ниндәй хәрәкәтте башҡарырға икәнлеген әйтеп, йә атларға, йә туҡтарға, йә көтөргә ҡуша. Бөтә балалар ҙа бүлмә буйлап йөрөйҙәр, кем яңылыша – ул урынына ултыра.

Тәрбиәсе балаларҙы бүлмә буйлап, «урамда» йөрөтә, светофорға ҡарап хәрәкәтләндерә:

- Балалар, беҙ урам буйлап йөрөргә өйрәндек. Бына урамда магазин. Унда нимәләр һатыла? (йәшелсәләр һүрәте күрһәтелә) Кем нимә һатып алырға теләй? Балалар тәрбиәсе күрһәткән йәшелсәнең атамаһын әйтеп, һөйләм төҙөй: *Был кишер. Мин кишер һатып алам.*

*«Тылсымлы моҡсай»* уйыны уйнатыла. Йәшелсә атамаларын ҡабатлайҙар һәм һәр һүҙҙең ниндәй өндән башланған икәнлеген билдәләйҙәр. Мәҫәлән, *ккк-ишер, ҡҡҡ-ыяр, һһһ-уған.*

Тәрбиәсе:

- Балалар, бына тағы магазин. Унда уйынсыҡтар һатыла, әйтегеҙ әле, ниндәй уйынсыҡтар бар икән? (уйын мөйөшөндә уйынсыҡтар ҡуйылған).

- Был ҙур машина. Был бәләкәй машина. Бында уйынсыҡ хайуандар – ҡуян, бесәй, айыуҡай, төлкө.

«Ниндәй?» уйыны уйнатыла. Тәрбиәсе уйынсыҡтарҙы күрһәтеп, «Был нимә? Ул ниндәй?» һорауҙарын бирә. Балалар ул уйынсыҡты һүрәтләгән һүҙҙәрҙе әйтергә тейеш. Мәҫәлән, ҡуян бәләкәй, ҡурҡаҡ, аҡ, йомшаҡ. Тәрбиәсе:

- Балалар, әйҙәгеҙ төркөмгә кире ҡайтабыҙ. Бына светофор. *«Атла! Туҡта! Көт!»* уйынын иҫкә төшөрөү. Тәрбиәсе:

- Балалар! Гөлфиә Юнысова апай «Светофор» тигән бик матур шиғыр яҙған, тыңлайыҡ әле:

*Оҙон ағайҙың өс күҙе:*

*Ҡыҙыл, һары, йәшел ут.*

*Икеһе һүнеп торғанда,*

*Береһе яна шунда уҡ.*

*Юл аша сыҡҡанда һәр кем*

*Ҡарай ошо күҙҙәргә.*

*Һәр бер күҙҙең – үҙ фарманы,*

*Һис кәрәкмәй һүҙҙәр ҙә.*

*Һары күҙ янһа – «Көтөп тор!»*

*«Туҡта!» - ҡыҙыл янғанда.*

*«Тиҙерәк бул, атла алға!» -*

*Йәшел күҙ йылмайғанда.*

Тәрбиәсе:

- Шиғыр оҡшанымы? Кем өҫтәл янына сығып, оҙон ағайҙың өс күҙен теҙеп күрһәтә? Улар ниндәй фарман (приказ) бирәләр, әйтеп күрһәтә?

*Дәресте йомғаҡлау.*

**16 – сы дәрес**

Тема: "Ҡурсаҡтың тән өлөштәре"

*Маҡсат*: а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *танауым, күҙем, башым, ҡулым, бармағым, аяғым;*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; ***һ, ң*** өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү һәм өндөң һүҙҙә урынын билдәләү;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Ул (һин) – ҡыҙмы әллә малаймы? Кем ҙур? Беҙҙә малайҙар (ҡыҙҙар) бармы?* - һорау киҫәксәһен ҡуллана белеү күнекмәләре;

г) диалог төҙөргә өйрәтеү;

д) телде өйрәнеүгә ынтылыш уятыу.

**Йыһаз:** Ҡурсаҡ Айгөл менән Тимур; Ә. Зиннурованың«Был - мин» йырының магнитофон яҙмаһы; көҙ миҙгелен һүрәтләгән рәсем; йәшелсә һүрәттәре йәки муляждары; светофор һүрәте.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе иҫәнләшеп, дәрес башлай:

- Телде, ирендәрҙе уйнатып, матур итеп һөйләшергә әҙерләп алайыҡ әле:

| | |
|---|---|
| һа-һа-һа – һауа | һә-һә-һә - һәнәк |
| һо-һо-һо – һоло | һө-һө-һө – һөт |
| һу-һу-һу – һунар | һү-һү-һү – һүрәт |
| һы-һы-һы – һыу | һи-һи-һи – һигеҙ |

Тәрбиәсе:

- «Һ» өнөнә ниндәй һүҙҙәр әйттек? Улар ниндәй өндән башланды? «Һ» өнө нисек әйтелә? (һәр һүҙҙең беренсе өнөн һуҙып әйтеп күрһәтергә). Был һүҙҙәр нимә аңлата? (рус теленә тәржемә итергә мөмкин).

Тәрбиәсе:

- Мин бик матур йыр өйрәндем әле, тыңлағыҙ! (Ә. Зиннурованың «Был - мин» тигән йырын йырлай, йәки магнитофон яҙмаһын ҡуя). Йырҙың һүҙҙәре буйынса үҙҙәренең тән өлөштәрен күрһәтәләр:

- Бына танауым, күҙем, башым, ҡулым, бармағым, аяғым (бер-нисә тапҡыр йырлап, һүҙҙәрҙең әйтелешен нығыталар).

Тәрбиәсе *«Бармаҡтар» уйынын* уйната.

Ҡурсаҡ Айгөл менән Тимур инәләр.

Һаулыҡ һорашып, түргә үтәләр. Тәрбиәсе:

- Был Айгөл. Ул кем – ҡыҙмы әллә малаймы? Кем ҙур – Айгөлмө әллә Тимурмы? Тимур Айгөлгә кем була? Ул малаймы әллә ҡыҙмы?

*«Ҡыҙмы – малаймы?» уйынын* уйнатыу. Һәр бер бала үҙенең күршеһенән: «Һаумы, Катя! Һин малаймы? Һин ҡыҙмы?» - тип һорай. Икенсе бала: «Һаумы, Оля! Мин - ҡыҙ» - тип яуаплай.

Тәрбиәсе:

- Беҙҙә малайҙар бармы? Малайҙар, тороғоҙ! Әйтегеҙ әле, светофорҙа ниндәй төҫтәге уттар яна?

- Беҙҙә ҡыҙҙар бармы? Ҡыҙҙар, тороғоҙ! Бармаҡ уйынын уйнап күрһәтегеҙ әле!

- Хәҙер бармаҡтарҙы һанайыҡ! Кем һанап күрһәтә? - Оля, әйт, һинең нисә бармағың бар? (шул рәүешле бер нисә баланан рәт һандарын ҡабатлата).

- Был нимә? Ҡурайҙың нисә тишеге бар?

Тәрбиәсе таҡтаға күҙ миҙгелен һүрәтләгән рәсем элә. Балалар менән бергә «Көҙ килгән» шиғырын иҫкә төшөрәләр, һүрәттәр ярҙамында көҙ миҙгеле билдәләрен ҡабатлайҙар, нығыталар.

«Нимә юҡ?» уйынын уйнап, йәшелсә исемдәрен иҫкә төшөрәләр.

Тәрбиәсе: - Светофор тураһында ниндәй шиғыр тыңлаған инек әле. Шул шиғырҙы ятлайыҡ. Өйгә ҡайтҡанда әсәйҙәргә һөйләрбеҙ.

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Айгөл менән Тимурға тән өлөштәрен кем күрһәтә?

- Бергәләп бөгөн өйрәнгән йырҙы йырлап алайыҡ, йырҙа әйтелгән тән өлөштәрен күрһәтәйек!

- «Бармаҡ» уйынын кем матур итеп уйнап күрһәтер икән?

- «Һ» өнөнә кем һүҙҙәр белә?

- Ошо кәрзингә кем йәшелсәләрҙе һала?

**17 – се дәрес**

**Тема:** "Кем нимә эшләй?"

**Маҡсат:** а) хәрәкәттәрҙе аңлатҡан яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: тороғоҙ, торабыҙ; һикерегеҙ, һикерәбеҙ; күтәрегеҙ, күтәрәбеҙ;

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; ***ф, ө, һ*** өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү күнекмәләре;

в) эйәлек заты ялғауын ҡуллана белеү күнекмәләре: *Минең атайым, олатайым, ағайым, апайым, ҡустым, һеңлем;* Айгөлдөң *атайы, олатайы, ағайы, апайы, ҡустыһы, һеңлеһе;*

г) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *Нимә эшләй? Улар ҡайҙа йәшәй? Был ниндәй өй? Айгөлдөң кемдәре бар?*

д) кескәй күләмле шиғыр ятларға өйрәтеү;

е) башҡортса аралашыуға ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** Сюжетлы һүрәттәр - ҡыҙ бала кейенә, ҡурсаҡ менән уйнай, ҡулдарын йыуа; малай туп менән уйнай, йоҡлай, сисенә; уйынсыҡ йәнлектәр; «Ғаилә» темаһына сюжетлы һүрәт; ауыл өйө һүрәте; фланелеграф; өй төҙөү өсөн кубиктар.

## Дәрес барышы:

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны. Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр: «Кем алыҫыраҡ өрә?» уйыны – өҫтәлдәге мамыҡтарға «өф-өф» тип өрөү; «Ҡулдарҙы йылытайыҡ!» уйыны – ҡулдарҙы ыуалап, «һу-һу»тип өрөү;

Сюжетлы һүрәттәр күрһәтеп: «Был кем? Ул нимә эшләй?» - тип тәрбиәсе балаларға һорауҙар бирә. (Һүрәттә ҡыҙ бала, ул кейенә, ҡурсаҡ менән уйнай, ҡулдарын йыуа. Малай туп менән уйнай, йоҡлай, сисенә). Балалар хәрәкәттәрҙе аңлатҡан һүҙҙәрҙе әйтергә тейештәр, әйтә алмаһалар, тәрбиәсе ярҙамға килә.

Уйын «Кем нимә эшләй?». Тәрбиәсе уйынсыҡ йәнлектәрҙе төрлөсә хәрәкәтләндереп, уларҙың нимә эшләгәнлектәрен балаларҙан әйттерә:

- Ҡуян нимә эшләй?

- Ҡуян һикерә.

- Айыуҡай нимә эшләй?

- Айыуҡай йоҡлай.

- Бесәй нимә эшләй?

- Бесәй һөт эсә.

- Кәзә нимә эшләй?

- Кәзә һыу эсә.

Тәрбиәсе:

- Балалар, Айгөл беҙгә фотоһүрәт ебәргән. «Ғаилә» темаһына сюжетлы һүрәт фланелеграфҡа эленә:

- Был кем? (атай, әсәй, олатай, өләсәй, ағай, апай).

- Атай, (әсәй, олатай, өләсәй, ағай, апай) нимә эшләй?

- Улар ҡайҙа йәшәй? (өйҙә).

- Был өй (һүрәт күрһәтелә). Өйҙөң нимәһе бар? (тәҙрә, ишек, ҡыйыҡ, күтәрмә).

-Был ниндәй өй? Был – ауыл өйө. Ул бәләкәй. Унда Айгөл йәшәй.

- Айгөлдөң кемдәре бар? (атайы, әсәйе, олатайы, өләсәйе, ағайы, апайы, ҡустыһы).

Тәрбиәсе балаларға төрлө командалар бирә. Балалар уларҙы башҡарырға тейеш һәм һүҙ менән нимә эшләгәндәрен әйтергә тейештәр:

Тәрбиәсе: - Балалар, тороғоҙ!

Балалар: - Беҙ торабыҙ!

Тәрбиәсе: - Балалар, ултырығыҙ!

Балалар: - Беҙ ултырабыҙ!

Тәрбиәсе: - Балалар, һикерегеҙ!

Балалар: - Беҙ һикерәбеҙ!

Тәрбиәсе: - Балалар, ҡулдарҙы күтәрегеҙ!

Балалар: - Беҙ ҡулдарҙы күтәрәбеҙ!

Тәрбиәсе: - Балалар, ҡулдарҙы төшөрөгөҙ!

Балалар: -Беҙ ҡулдарҙы төшөрәбеҙ!

Өҫтәлдә кубиктар. Балалар уларҙан өй төҙөйҙәр, һәр өлөшөн башҡортса әйтеп баралар.

Тәрбиәсе: Тышта һыуыҡ ел өрә. Тып-тып ямғыр яуа башланы. Был ниндәй ваҡыт? «Көҙ килгән» шиғырын ҡабатлау.

*Дәресте йомғаҡлау.*

Балалар, беҙ нимәләр эшләргә өйрәндек бөгөн дәрестә?

Был нимә? Ул нимә эшләне? (Был ҡуян. Ул һикерә).

Кем ҡуян тураһында шиғыр белә?

Ҡуян һүҙе ниндәй өндән башлана?

## 18 – 19-сы дәрестәр

**Тема:** "Бүлмә йыһаздары"

*Маҡсат:* а) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм әйтелешен өйрәтеү: *ҡунаҡ (-ка), ел, иҫә, әкрен, көслө, эҫе (-ме), түтәл (-дә).*

б) телмәр аппаратының һығылмалығына, хәрәкәтсәнлегенә күнекмәләр үткәреү; *ү, р, ҙ, у* өндәрен автоматлаштырыу;

в) элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, типик фразаларҙы ҡабатлау, нығытыу.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) балаларҙың хәтерен, иҫтә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл менән ҡурсаҡ Тимур, ҡуян, телефон, бүлмә йыһаздары (ултырғыс, өҫтәл, карауат, мендәр, юрған, балаҫ); аҙыҡ-түлек муляждары; балсыҡ йәки пластилин, бойҙай башаҡтары; тыштарына кишер, ҡыяр, һуған төшөрөлгән ҡумта; көҙ тураһында сюжетлы һүрәт.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм ҡурсаҡ Айгөл булып телефондан балаларҙы ҡунаҡҡа саҡыра.

Һәр бала телефон трубкаһынан яуаплай: - Таня, һаумы! Мин – Айгөл. Миңә ҡунаҡҡа кил!

Таня: - Һаумы, Айгөл! Ҡунаҡҡа киләм! Рәхмәт!

Ошо рәүешле балалар телефон аша һөйләшеп сығалар. Аҙаҡ ҡунаҡ бүлмәһенә (мөйөшөнә) йыйылалар, Айгөл уларҙы ҡаршы ала һәм:

- Бына өҫтәл. Бына ултырғыстар. Ултырығыҙ, - тип саҡыра.

Балалар өҫтәл артына ултыралар. Айгөл (тәрбиәсе) ҡунаҡтарҙы һыйлай: *- Бына сәй. Бына һөт. Был сәк-сәк. Был бәлеш. Был ҡоймаҡ. Ашағыҙ, ҡунаҡтар!*

Тимур инә. Айгөл:

- Был минең ҡустым Тимур. Ул бәләкәй. Ҡарағыҙ, ул бына нимәләр эшләй белә! (Тәрбиәсе Айгөл ролендә ҡурсаҡ Тимур менән төрлө хәрәкәттәр эшләй, балалар ул хәрәкәттәрҙе башҡортса әйтергә тейештәр):

- Тимур нимә эшләй? Тимур атлай (һикерә, ултыра, йүгерә, ята, тора, бейей, ҡулын күтәрә, ҡулын төшөрә).

- Тимур тураһындағы йырлап алайыҡ:

*Сәп-сәп сәпәкәй,*

*Минең ҡустым бәләкәй.*

*Ҡулын күтәргән була*

*Сәпәкәй иткән була* (2-3 тапҡыр бергәләп йырлайҙар).

Айгөл: - Бында Тимурҙың бүлмәһе. Был карауат. Был өҫтәл. Был – ултырғыс.

- Был нимә, әйт әле, Тимур? Ул онотҡан, был нимә? (балалар Тимурға ярҙам итәләр): - Был – мендәр, был - юрған, ә иҙәндә – балаҫ.

Айгөл:

- Тимур төрлө йәнлектәр булып йырлай белә. Тыңлағыҙ әле, ул кем булып йырлай икән:

- «Ззз-ззз-ззз» (серәкәй).

- «Ҙҙҙ – ҙҙҙ - ҙҙҙ» (бал ҡорто).

- «Мыяу-мыяу-мыяу» - бесәй.

- «Ррр – ррр - ррр» - эт.

Айгөл:

- Тимур бармаҡ уйындарын ярата, әйҙәгеҙ, беҙ уға бармаҡ уйынын уйнап күрһәтәйек.

- Тимур шиғырҙар тыңларға ярата. Кем ниндәй шиғыр һөйләп ишеттерә? (бесәй, ҡуян, көҙ тураһында).

Ҡунаҡҡа ҡуян килә. Ул тылсымлы тоҡсай тотҡан. Уның эсендә йәшелсәләр. Ҡуян балаларға тоҡсай эсенә ҡулды тығып, һәрмәп, унда нимә ятҡанын әйтергә һорай. Бала йәшелсәне һәрмәп тапҡас, ҡуян унан: "Был – нимә?- тип һорай, шунан ғына йәшелсәне тоҡсайҙан сығарып, балаларға күрһәтә. Балаларҙан тағы ла: "Был кишерме, әллә һуғанмы? - тип һорай. Балалар: "Был һуған түгел, был кишер, -тип әйтәләр.

Тәрбиәсе "Кем күберәк йәшелсә йыя?" уйынын уйнарға тәҡдим итә: өҫтәлгә тоҡсайҙағы йәшелсәләр, йә уларҙың һүрәттәре һалына, ситтәрәк өс ҡумта тора. Уларҙың тышына *ҡыяр, кишер, һуған* һүрәттәре төшөрөлгән. Балалар йәшелсәләрҙе кәрәкле һауыттарға йыйырға тейеш.

Йәшелсәләр йыйылып бөткәс, тәрбиәсе:

- Был биҙрәлә нимә? Кем һанай, унда нисә ҡыяр бар!

- Икенсе биҙрәлә нимә? Кем һанай, унда нисә кишер бар!

- Өсөнсө биҙрәлә нимә? Кем һанай, унда нисә һуған бар!

- Был биҙрәлә нимә? Кем һанай, унда нисә кишер бар!

Балаларға балсыҡтан йәшелсәләр әүәләргә тәҡдим ителә. Эш барышында тәрбиәсе "Был нимә? Кишер ниндәй? Кем кишер ярата? Кем

ҡыяр ярата? Ҡуған нindәй?" һорауҙарын биреп, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығыта.

## Икенсе дәрес

Өҫтәлдә балалар әүәләгән йәшелсәләр тәрилкәлә, эргәһендәге вазала - бойҙай башаҡтары. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм ниндәй матур йәшелсәләр барлығына аптырай. Тәрбиәсе:

- Кем шул тиклем күп итеп йәшелсәләр йыйған? Ниндәй йәшелсәләр бар бында, кем әйтер икән? (балалар сығып, һәр йәшелсәне алып, уның атамаһын әйтеп, икенсе тәрилкәгә һала). Йәшелсәләр ҡайҙа үҫә? Кем әйтә? (түтәлдә).

- Был вазала нимә, кем белә?

- Бойҙай башаҡтары ҡайҙа үҫә? (яланда).

- Йәшелсәләр, башаҡтар ҡасан өлгөрә? (көҙ еткәс).

Фланелеграфҡа көҙ тураһында сюжетлы һүрәт эленә, уның буйынса тәрбиәсе балалар менән әңгәмә үткәреп, уларҙың элек өйрәнгән белемдәрен нығыта:

- Япраҡтар ниндәй төҫтә? Улар ҡайҙа ҡойола?

- Ҡояш нисек йылыта? Тышта эҫеме?

- Кешеләр нисек кейенә? Улар нимә йыялар?

Тәрбиәсе:

- Балалар, көҙ көнө йыш ҡына һыуыҡ ел иҫә, ямғыр яуа. Хәҙер «Ел» уйынын уйнап алайыҡ. Ел әкрен генә «үүү-үүү-үүү» - тип иҫә. Мин «Әкрен ел иҫә», тип әйтһәм, беҙ бүлмә буйлап яй ғына, «үүү-үүү-үүү» - тип әйтеп йөрөйбөҙ. Мин «Ел тымды», - тип әйтһәм, һеҙ сүкәйеп ултыраһығыҙ.

Мин «Көслө ел иҫә», тип әйтһәм, беҙ бүлмә буйлап йүгереп, көслө итеп «ууу-ууу-ууу» - тип әйтеп йөрөйбөҙ. Мин «Ел тымды», - тип әйтһәм, һеҙ тағы ла сүкәйеп ултыраһығыҙ (уйын 2-3 тапҡыр ҡабатлана). Тәрбиәсе:

- Тел уйындарын уйнап алайыҡ!. Минең арттан ҡабатлағыҙ:

кү-кү-кү – күк күлдәк
тү-тү-тү –түтәл түгел

бү-бү-бү – бүлмәлә бүләк

Тәрбиәсе һүрәттәр күрһәтеп, һорай:

- Түтәлдә нимә үҫә? (йәшелсәләр).

- Күк күлдәкте кем кейгән? (Айгөл).

- Бүлмәләге бүләк кемгә? (сәскәләр әсәйгә бүләккә).

Тәрбиәсе: - Балалар, беҙ әсәйебеҙҙе яратабыҙ! Улар ҙа беҙҙе ярата. «Был - мин» йырын йырлап алайыҡ әле.

Бармаҡ уйынын уйнайыҡ. Үҙебеҙҙең ғаиләне иҫкә төшөрәйек.

Ҡурсаҡ Айгөл инә: - «Мин һеҙгә әкиәт алып килдем – ти ҡурсаҡ. Бай һүрәтле «Шалҡан» әкиәтен уҡыу һәм һүрәттәрен ҡарау.

Тәрбиәсе әкиәтте уҡып, балаларға һөйләп аңлата, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе ҡабатлап әйтәләр. Йөкмәткеһе буйынса һорауҙар ярҙамында әңгәмә үткәрелә.

*Дәресте йомғаҡлау.*

**20 – се дәрес**

**Тема:** "Дауаханала ҡунаҡта"

*Маҡсат:* а) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм әйтелешен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү: *дауахана (-ла), табип (-тар), йөрәк (-те), тамаҡ (-ты), сайҡа (-та), дауала (-а, -йым), фонендоскоп, шпатель, йөрәк;*

б) телмәр аппаратының һығылмалығын, хәрәкәтсәнлеген үҫтереү; *һ, ғ* өндәренең әйтелешен нығытыу;

в) яңы һүҙбәйләнештәрҙе, типик фразаларҙы ҡабатлау, нығытыу: *тамаҡ ауырта; тамаҡты ҡарайҙар, ауыҙҙы сайҡат;*

г) яңы һүҙҙәрҙе бәйләнешле телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү;

д) балаларҙың хәтерен, иҫтә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, дауаханала табип кәрәк-яраҡтары, тәрилкәлә емеш-еләктәр һәм йәшелсә киҫәктәре; «Ғаилә» һәм «Дауахана» темаһына сюжетлы һүрәттәр.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән иҫәнләшә, уларға бер-береһе менән һаулыҡ һорашып, «Хәйерле көн» теләргә тәҡдим итә һәм бөгөн дауаханаға ҡунаҡҡа барыуҙарын әйтә (бүлмә мөйөшөнә).

Тәрбиәсе балаларға һорау бирә һәм уларҙың яуаптарын хор менән ҡабатлата:

- Балалар, дауаханала кемдәр эшләй? (табиптар).

- Улар нимә эшләйҙәр? Кешеләрҙе дауалайҙар.

- Табиптар өҫтәренә нимә кейәләр? (халат).

- Халат ниндәй төҫтә? (аҡ төҫтә)

- Был ниндәй ҡорал? (фонендоскоп).

- Уның менән нимәне тыңлайҙар? (йөрәкте).

- Был шпатель. Ул ҡалаҡҡа оҡшаған. Уның менән нимәне ҡарайҙар (тамаҡты). Тәрбиәсе:

- Мин табип. Мин кешеләрҙе дауалайым. Коля, кил бында! Мин фонендоскоп менән һине тыңлайым. Ҡайҙа һинең йөрәк? Күрһәт!

Бала: - Бына минең йөрәк. Ул ауыртмай. Мин зарядка эшләйем. Витамин ашайым.

Тәрбиәсе: - Катя, кил бында! Үҙеңдең тамаҡ төбөн күрһәт! Тамаҡ ауыртамы?

Бала: - Минең тамаҡ ауырта. Мин һыуыҡ һөт эстем.

Тәрбиәсе: - Бына һиңә, Катя, дарыу, эс!

- Балалар, беҙгә йәшелсәләр, емеш-еләктәр ныҡ булырға ярҙам итә. Көн һайын уларҙы ашарға кәрәк, уларҙа витаминдар күп.

**Уйын "Тәмлеме?"** Тәрбиәсе балаларға емеш-еләк һәм йәшелсә киҫәктәрен тәмләп ҡарарға тәҡдим итә, һорауҙар биреп уларҙың атамаһын әйттерә һәм тәмен билдәләргә һорай:

*Был кишер (ҡыяр, һуған, алма, сейә, груша).*

*Кишер (ҡыяр, һуған, алма, сейә, груша) тәмлеме?*

*Ҡыяр, һуған, алма, сейә, груша (тәмле, йәки юҡ, әсе)*

**«Ел» уйынын** уйнайҙар.

Тәрбиәсе: - Тышта һыуыҡ. Ҡулдар өшөй. Уларҙы йылытайыҡ «һу-һу-һу», «һо-һо-һо». Тамаҡтарҙы сайҡайыҡ: «ғы-ғы-ғы». Урында һикереп алайыҡ: «һоп-һоп-һоп». Телдәр менән уйнап алайыҡ: «Сәғәт», «Бәүелсәк», «Йылмайыу», «Торба», «Аттар сабыуы», «Көрәк».

Тиҙәйткесте ятлау:

*Һыуыҡ һыу һалҡын була, һыуыҡ килһә – һыу туңа.*

Бармаҡ уйынын уйнау.

«Ғаилә» темаһына сюжетлы һүрәт. Унының буйынса үтелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе иҫкә төшөрөү.

*Дәресте йомғаҡлау:*

«Дауахана» сюжетлы һүрәте буйынса әңгәмә.

Тиҙәйткесте кем һөйләп ишеттерә?

Кем табип булып ҡуяндың йөрәген тыңлай һәм тамағын ҡарай?

**21– се дәрес**

**Тема:** "Тештәрҙе дауалайбыҙ"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу: *бишек йыры, теш (-е, -тәр), ауырта, дауалай, табиб, сайҡат (-ырға, -абыҙ),*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ҙ, з* өндәрен дөрөҫ әйтеүҙе нығытыу;

в) яңы типик грамматик конструкцияларҙы өйрәнеү: *кемдәрҙе дауалай? теш таҙарта; тешен йыумаған, ауыҙҙы сайҡатырға;*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре үткәреү;

д) башҡорт телен өйрәнеүгә ынтылыш, теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Тимур, ҡуян, фланелеграф; дидактик уйын өсөн кейемһалым, йәшелсәләр, уйынсыҡтар; хайуандар һүрәте, табип Айболит һүрәте, табиптың эш ҡоралдары һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Балалар, ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Өҫтәлдә ҡурсаҡ Тимур һәм ҡуян. Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм өҫтәлдәге уйынсыҡтарға күрһәтеп, уларҙың кем икәнлеген һораша һәм:

- Тимурҙың йоҡоһо килгән, ә ҡуян һикереп, уға йоҡларға бирмәй. Балаларға, бишек йыры йырлап, Тимурҙы йоҡлатайыҡ, - ти.

*Әлли-бәлли, бәү-бәү,*

*Йоҡла, Тимур, бәү-бәү* (ике тапҡыр йырлана).

Тәрбиәсе: - Ҡуяндың теше ауырта. Тештәрен бөгөн йыумаған, таҙартмаған. Балалар, уға күрһәтәйек әле, нисек итеп теш таҙарталар:

- телде аҫҡы һәм өҫкө тештәр буйлап уңдан һулға, аҙаҡ - киреһенсә йөрөтөү;

- ауыҙ йомоҡ, ауыҙ эсендәге һауанан «туп» эшләү, һауаны тышҡа сығарып, «тупты» тишеү;

- ауыҙ йомоҡ, ауыҙ эсендәге һауа менән тештәрҙе сайҡатыу;

- өҫкө тештәр менән аҫҡы иренде тешләү һәм киреһенсә - аҫҡы тештәр менән өҫкө иренде тешләү;

- тел осо менән тештәрҙе эске яҡтан таҙартыу;

- «Йылмайыу» - ирендәр асыҡ, йылмайыу рәүешендә, тештәрҙе туҡылдатыу.

Тәрбиәсе:

- Тештәрҙе таҙарттыҡ. Ҡуяндың теше хәҙер ауыртмай. Үҙебеҙҙең тел-тештәрҙе уйнатып алайыҡ:

Серәкәй йырлай «з-з-з»,

Ҡапҡа асылды

Серәкәй ҡыҫылды «ҙ-ҙ-ҙ»

Серәкәй сыға алмай:

ҙ-ҙ-ҙа-ҙа-ҙа

ҙ-ҙ-ҙо-ҙо-ҙо

ҙ-ҙ-ҙу-ҙу-ҙу

ҙ-ҙ-ҙы-ҙы-ҙы

Тәрбиәсе: - Мин һүҙҙәр әйтәм, «ҙ» өнөн ишетһәгеҙ, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ: *ҡыҙ, күҙ, беҙ, һеҙ, кәзә, бесәй, ҡуян, ҡаҙ. Ул өн ишетелмәһә – ҡулдарҙы тубыҡҡа һалабыҙ.*

Тәрбиәсе доктор Айболиттың һүрәтен фланелеграфҡа элә:

- Был кем? Ул кемдәрҙе дауалай? Өҫтәлдән хайуандарҙың һүрәтен алығыҙ. Уларҙың тештәре ауырта. Табип Айболитҡа алып барығыҙ.

Балалар Айболит менән йәнлектәр булып һаулыҡ һорашалар, теш ауыртҡанын әйтәләр:

- Һаумы, табип Айболит!. Мин ҡуян. Минең тешем ауырта. Тешемде дауала, зинһар өсөн!

Айболит: - Балалар, теш ауыртмаһын өсөн нимә эшләргә кәрәк? (таҙартырға). Теште нимә менән таҙарталар? (паста һәм теш щеткаһы менән). Теште көнөнә нисә тапҡыр таҙарталар? (ике). Ашағас, нимә эшләргә кәрәк? (ауыҙҙы һыу менән сайҡатырға). Тештәр ауыртмаһа, матур итеп һөйләшеп, йыр йырлап була.

Тәрбиәсе: - Балалар, беҙҙең тештәр ауыртмай, шулай бит? Беҙ тештәрҙе таҙартып торабыҙ. кәнфитте лә күп ашамайбыҙ. Ашағас, ауыҙҙы һыу менән сайҡатабыҙ, әйе бит? Айболитҡа шиғырҙар һөйләп, йыр йырлап ишеттерәйек әле.

Өйрәнелгән шиғырҙар ҡабатлатыла. «Был - мин», «Сәпәкәй» йырҙарын йырлайҙар.

«Нимә юҡ?» уйыны уйнатыла (кейем-һалым, йәшелсәләр, уйынсыҡтар алына).

Бармаҡ уйынын уйнап, «бармаҡ» һүҙе ниндәй өндән башланғанын билдәләйҙәр.

*Дәресте йомғаҡлау:*

Тимур – бәләкәй. Уның тураһында ниндәй шиғыр беләбеҙ?

Тештәрҙе нисек таҙартабыҙ, кем күрһәтә?

Тештәрҙе таҙартыу өсөн нимәләр кәрәк була, һүрәттәрҙе өҫтәлдән алып фланелеграфҡа элегеҙ!

Кем тел төҙәткесте иҫкә төшөрөр икән:

Телтөҙәйткес: *Беҙ, беҙ, беҙ инек,*
*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*
*Баҙға төшөп май ашаныҡ,*
*Таң атҡансы юҡ булдыҡ! (йондоҙҙар).*

**22 – се дәрес**

**Тема:** "Был - мин"

**Маҡсат:** а) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү: бармаҡ (-тар, -тарым), бармағым, ҡаш (-ы, -тар), бер, күп, танау (-ҙар); *бишкә тиклем һанай белеүҙе нығытыу.*

б) телмәр аппаратын үҫтереү, нығытыу; *ә, а,* өндәрен дөрөҫ әйтергә һәм уларҙың айырмаһын һиҙемләүгә күнекмәләр;

в) эйәлек заты ялғауын дөрөҫ ҡулланыуға күнегеүҙәр башҡарыу: *Был минең бармағым (күҙем, башым, ҡулым, аяғым, танауым, ҡашым).*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) иғтибарлылыҡ, хәтер үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл; предметлы һүрәттәр - алма, әтәс, әсәй, атай, ағас, әфлисун; кейем-һалым, йәшелсәләр, уйынсыҡтар һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Балалар ултырғыстарҙа ултыралар. Ҡурсаҡ табип инә, ул балаларҙың тештәре ауыртмаймы икәнлеген ҡарай:

- Тештәрегеҙ ауыртмаймы, күрһәтегеҙ! (ҡарап сыға). Күрһәтегеҙ әле, нисек итеп теш таҙарталар:

- телде аҫҡы һәм өҫкө тештәр буйлап уңдан һулға, аҙаҡ - киреһенсә йөрөтөү;

- ауыҙ йомоҡ, ауыҙ эсендәге һауанан «туп» эшләү, һауаны тышҡа сығарып, «тупты» тишеү;

- ауыҙ йомоҡ, ауыҙ эсендәге һауа менән тештәрҙе сайҡатыу;

- ауыҙҙа һыу, уның менән «ғ» өнөн сығарып ауыҙ сайҡау;

- өҫкө тештәр менән аҫҡы иренде тешләү һәм киреһенсә - аҫҡы тештәр менән өҫкө иренде тешләү;

- тел осо менән тештәрҙе эске яҡтан таҙартыу;

- «Йылмайыу» - ирендәр асыҡ, йылмайыу рәүешендә, тештәрҙе туҡылдатыу.

- Тамаҡтарҙы күрһәтегеҙ, «ааа-ааа-ааа», тип йырлап ишеттерәйек, ә хәҙер кәзә бәрәсе булып баҡырабыҙ: «бәә-бәә-бәә»;

Тиҙәйткестәрҙе ҡабатлайбыҙ: *Әлиә менән Әсмә сәй эсәләр икәүләп. Азат Азаматҡа аш ашата. (2-3 тапҡыр.)*

Тәрбиәсе: «Азамат» һүҙе ниндәй өндән башлана, «Әлиә» һүҙендә беренсе өн ниндәй?

«Кем иғтибарлы?» уйыны. Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, балалар һүҙҙең башында «а» өнө килһә, ҡулдарын күтәрәләр, «ә» өнө килһә – аяҡ өҫтө торалар: *алма, әтәс, әсәй, атай, ағас, әфлисун.*

Ҡурсаҡ Айгөл инә. Уның бер бармағына лейкопластырь йәбештерелгән. Тәрбиәсе Айгөлдөң бармағы ауыртҡанлығын әйтә һәм уны балалар рәтенән үткәреп, бармағына «өфф-өфф-өфф»тип өрөргә һорай.

Тәрбиәсе: - Балалар, Айгөлдөң нисә бармағы ауырта? (бер). Нисә бармағы ауыртмай, һанайыҡ әле? Бөтәһе нисә бармаҡ? (биш). Үҙебеҙҙең бармаҡтарҙы һанап күрһәтәйек Айгөлгә!

Шунан өҫтәл өҫтөндә тәүҙә бер бармаҡ, шунан ике, өс, аҙаҡ - бөтә бармаҡтар менән пианино уйнарға тәҡдим итә. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана. Тәрбиәсе:

- Балалар, Айгөлгә бармаҡ уйынын уйнап күрһәтәйек әле:

*Был бармаҡ – олатай,*
*Был бармаҡ – өләсәй,*
*Был бармаҡ – атай,*
*Был бармаҡ – әсәй.*
*Был бармаҡ – бәләкәй,*
*Уның исеме Айгөл*

Тәрбиәсе: Айгөл һеҙгә шиғыр һөйләп ишеттерә:

*Бына танауым,*
*Бына минең ҡашым,*
*Бына минең күҙем,*
*Бына минең ҡолағым,*
*Бына минең башым.*

Тәрбиәсе: Балалар, беҙҙең күҙҙәр (ҡолаҡтар, ҡаштар) нисәү? Танау икәүме, баш нисәү? Айгөлдөң шиғырын ҡабатлайыҡ, тән ағзаларын күрһәтәйек! (бергәләп һәм айырым шиғырҙы бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар. Аҙаҡ бер нисә бала уны һөйләп бирә).

Тәрбиәсе: Балалар, беҙ «Был - мин» тигән йырҙы ла беләбеҙ, шулай бит. Ул йырҙың һүҙҙәрен Рәсимә Ураҡсина апай яҙған, ә көйөн Әлфиә Зиннурова апай уйлап тапҡан. Йырҙы йырлағанда, тороп йырларға һәм хәрәкәттәр ярҙамында тән өлөштәрен күрһәтеү кәрәк:

*Бына – танауым,*

*Был – минеӊ ҡашым,*

*Күҙем, ҡолағым,*

*Ә бына башым.*

*Ауыҙҙы асһам,*

*Телем күренә.*

*Теҙелгән тешем*

*Өс бөртөк кенә.*

*Ҡулды күтәрҙем –*

*Аяҡ тыпырлай.*

*Үҙенән - үҙе*

*Бейергә һорай.*

Тәрбиәсе: - Балалар, йырҙа кем тураһында йырлана. *Мин, минеӊ турала*, шулай бит. Кем йырҙы йырлай, ул үҙе тураһында йырлай.

Ҡурсаҡ Айгөлдөӊ тән өлөштәрен кем күрһәтә?

Мин һеҙгә бер генә предметты күрһәтәм, ә һеҙ улар күп булғанда нисек атала, шулай итеп әйтегеҙ: *ҡул – ҡулдар, ауыҙ- ауыҙҙар, танау – танауҙар, күҙ – күҙҙәр, баш – баштар, аяҡ – аяҡтар, ҡаш – ҡаштар.*

«Нимә юҡ?» уйыны уйнатыла (кейем-һалым, йәшелсәләр, уйынсыҡтар алына).

Бармаҡ уйынын уйнап, «бармаҡ» һүҙе ниндәй өнгә бөткәнен билдәләйҙәр.

Кем телтөҙәткесте иҫкә төшөрөр икән:

Телтөҙәткестәрҙе: *Беҙ, беҙ, беҙ инек,*
*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*
*Баҙға төшөп май ашаныҡ,*
*Таӊ атҡансы юҡ булдыҡ! (йондоҙҙар).*

Тиҙәйткесте:
*Һыуыҡ һыу һалҡын була, һыуыҡ килһә – һыу туӊа.*

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Беҙ бөгөн нимә тураһында һөйләштек?

- Тән өлөштәрен күрһәтәйек әле!

- «Был - мин» тигән йырҙы йырлап алайыҡ әле!

**23 – сө дәрес**

**Тема:** " Айгөл беҙҙә ҡунаҡта"

**Маҡсат:** а) элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү һәм нығытыу: сынаяҡ, сәйнүк, самауыр, көршәк, тәрилкә, ашъяулыҡ, һ.б.

б) телмәр аппаратының хәрәкәтсәнлеген үҫтереү, нығытыу; *сь, съ* өндәренең айырмаһына күнекмәләр үткәреү;

в) шиғырҙар ятлау, хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, уйынсыҡ һауыт-һаба, тәүге өндө билдәләүгә предметлы һүрәттәр.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны.

Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр: «Кем алыҫыраҡ өрә?» уйыны – өҫтәлдәге мамыҡтарға өрөү, ҡулдарҙы өрөп йылытыу, туп кеүек һикереү һ.б.

Тиҙәйткестәрҙе ҡабатлау:

*1. Беҙ, беҙ, беҙ инек,*
*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*
*Баҙға төшөп май ашаныҡ,*
*Таң атҡансы юҡ булдыҡ!*

*2. Һыуыҡ һыу һалҡын була, һыуыҡ килһә – һыу туңа.*

*3. Азат Азаматҡа аш ашата.*

*4. Әлиә менән Әсмә сәй эсәләр икәүләп.*

Ишек шаҡып, Айгөл инә. Тәрбиәсе балаларға башҡортса предметтарҙы атап, үҙе ҡушҡанды үтәргә һорай:

- Балалар, беҙгә ҡунаҡҡа Айгөл килде, тиҙ генә өҫтәл әҙерләп, уны ҡунаҡ итәйек:

- Ҡайҙа өҫтәл? (бына өҫтәл)

- Өҫтәлгә нимә йәйәбеҙ? (өҫтәлгә ашъяулыҡ йәйәбеҙ)

- Сәй эсергә һауыт-һаба ҡуябыҙ (өҫтәлгә сынаяҡтар, самауыр, сәйнүк, ҡалаҡтар ҡуябыҙ).

Тәрбиәсе бер-бер артлы 2-3 баланы эргәһенә саҡырып, түбәндәге йомоштарҙы үтәргә ҡуша:

*Сәйнүкте өҫтәлгә ҡуй. Сәйнүктән сәй ҡой. Сынаяҡты ал. Сәй эс.*

Аҙаҡтан башҡа балаларға уйынсыҡ сәйнүк, сынаяҡтар, йә уларҙы алмаштырған предметтарҙы таратып бирә һәм берәй баланан юғарыла әйтелгән диалогты ҡабатларға ҡуша, ә урындарында ултырған балалар яуапты күплектә әйтергә тейештәр:

*Беҙ сәйнүкте өҫтәлгә ҡуйҙыҡ. Беҙ сәйнүктән сәй ҡойҙоҡ. Беҙ сынаяҡты алдыҡ. Беҙ сәй эстек. Рәхмәт, сәй бик тәмле.*

Тәрбиәсе: - Күршегеҙҙе сәй менән һыйлағыҙ! Балалар ошо уҡ фразаларҙы әйтеп, алмашлап бер-береһенә сәй эсерәләр.

Тәрбиәсе балаларға ҙур һәм бәләкәй сәйнүкте күрһәтеп, ҙур сәйнүк "сы-сы-сы", бәләкәй сәйнүк "си-си-си" тип йырлағанын әйтә һәм балаларға ҡулдары менән ҙур сәйнүкте күрһәтеп "сы-сы-сы" тип, "си-си-си" тип бәләкәй сәйнүк булып 3-4 тапҡыр әйтергә тәҡдим итә. Аҙаҡтан кем ниндәй сәйнүкте һайлап ала, шуның йырын бөтәһе бергә ҡушылып йырлайҙар.

«Нимә артыҡ?» уйыны. Һауыт-һаба атамалары әйтелә, улар араһында нимә артыҡ икәнлеге билдәләтелә:

а) сынаяҡ, ҡалаҡ, ҡул, тәрилкә;

б) самауыр, өҫтәл, сәйнүк, көршәк, сәнске.

«Һүҙҙең аҙағын әйтеп бөт!» уйыны. Тәрбиәсе һүҙҙең беренсе өлөшөн әйтә, ә балалар аҙағын әйтеп, тамамлап ҡуялар:

*сәй-…, сына – …, сама - …, сәнс - …,өҫ - …, ултыр - …, ашъяу - …, тәрил - …, кәст - ….*

«Ниндәй өн беренсе?» уйыны. Тәрбиәсе балаларға предметлы һүрәттәр күрһәтә һәм һүҙҙең беренсе өнөн билдәләп, ҡул күтәреп, асыҡ итеп өндө әйтергә тәҡдим итә: *ссс-әйнүк, ссс-ынаяҡ, ссс-амауыр, өөө-ҫтәл, ааа-лма, әәә-флисун, ҡҡҡ-уян, әәә-тәс, ааа-йыу, ттт-өлкө, ббб-үре.*

Тәрбиәсе балаларға яңы шиғыр һөйләй һәм уны бергәләп ятларға тәҡдим итә: *Сәйнүк йырлай си-си тип,*

*Сынаяҡта сәй-сәй тип,*

*Сәй бик тәмле, эс-эс тип.*

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Нимәләр тураһында һөйләштек?
- «С» өнөнә башланған һүҙҙәрҙе әйтеп сығығыҙ!
- «Сәй» һүҙе менән һөйләм төҙөгөҙ!
- Кем яңы шиғырҙы һөйләп ишеттерә?

**24 – се дәрес**

**Тема:** "Йорт хайуандары һәм ҡоштары"

**Маҡсат:** а) элек әйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу; «йорт хайуандары, йорт ҡоштары» *тигән дөйөмләштереү һүҙҙәрен иҫтә ҡалдырыу.*

б) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе типик конструкцияларҙа ҡулланырға өйрәтеү; хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

в) һүҙҙәрҙә өндөң урынын билдәләү күнекмәләре,

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, йорт хайуандары һәм ҡоштары төшөрөлгән предметлы һүрәттәр, светофорҙың төҫлө түңәрәктәре.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Ҡалаҡ», «Орсоҡ». Дөрөҫ тын алыуға күнегеү: «Һабын ҡыуыҡтары өрөү»:

а) балалар ултырған килеш баштарын күкрәккә эйеп, танау менән тын алыу;

б) баштарҙы өҫкә күтәреп, тыныс ҡына һауаны танау аша сығарыу – «һабын ҡыуыҡтары осороу»;

в) башты төшөрмәйенсә, танау менән тын алыу;

г) башты күкрәккә төшөрөп, тын ғына һауаны танау аша кире сығарыу.

«Бармаҡ» уйынын уйнатыу.

Ҡурсаҡ Айгөл инә. Ул бөгөн циркта булғанын әйтә һәм үҙенең унда нимәләрҙе күргәнен әйтергә һорай. Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә:

- Был нимә? - Был бесәй.

- Бесәй нимә эшләй? Бесәй балаҫта ята.

- Был нимә?  - Был эт. - Эт нимә эшләй? - Эт һикерә.

- Был нимә?  - Был – әтәс. – Әтәс нимә эшләй? - Әтәс ҡысҡыра.

- Был нимә? - Был – тауыҡ. -Тауыҡ нимә эшләй? -Тауыҡ ем сүпләй.

- Был нимә? - Был һыйыр. - Һыйыр нимә эшләй? -Һыйыр бесән ашай.

- Был нимә? - Был ат. - Ат нимә эшләй? - Ат һыу эсә.

- Был нимә? - Был кәзә. – Кәзә нимә эшләй? Кәзә кәбеҫтә ашай.

- Был нимә? - Был ҡаҙ. - Ҡаҙ нимә эшләй? - Ҡаҙ һыуҙа йөҙә.

Тәрбиәсе балаларҙан был хайуандарҙың һәм ҡоштарҙың ҡайҙа йәшәгәнлеген билдәләргә һәм дөйөмләштереп: йорт хайуандары һәм йорт ҡоштары тип әйтергә өйрәтә.

«Дөрөҫ һайла!» уйыны. Балалар ошо һүрәттәр араһынан тәүҙә йорт ҡоштарын табып алып, фланелеграфҡа ҡуялар, уларҙың атамаһын һәм нимә эшләүен әйтәләр. Аҙаҡтан – йорт хайуандарын табып, ошо уҡ эште башҡаралар.

Тәрбиәсе:

- Балалар, мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, ә һеҙ ундағы йәнлектәрҙең атамаһы ниндәй өндән башланғанын әйтегеҙ, ярармы? Кем зирәк икән? Һүрәттәр: *бесәй, һыйыр, ҡаҙ, кәзә, ат,  тауыҡ.*

Тәрбиәсе:

- Айгөлгә йыр йырлап, шиғыр һөйләп ишеттерәйек: «Был - мин», «Сәпәкәй» йырҙарын йырлайҙар, Гөлфиә Юнысованың «Светофор» шиғырын иҫкә төшөрәләр (әгәр онотолған булһа, тәрбиәсе үҙе һөйләп ишеттерә һәм бергә ҡабатлайҙар).

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Айгөл циркта ниндәй йорт хайуандарын күргән? Һанап әйтегеҙ!

- Айгөл циркта ниндәй йорт ҡоштарын күргән? Һанап әйтегеҙ!

- Светофорҙың түңәрәктәре ниндәй төҫтә һәм улар нимәне аңлата, күрһәтегеҙ! Светофор ниндәй өндән башлана?

## 25 – се дәрес

**Тема:** "Ҡыр хайуандары һәм ҡоштары"

**Маҡсат:** а) тәүге йылда өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу һәм уларҙы типик конструкцияларҙа ҡулланырға өйрәтеү;

б) яңы һүҙҙәр менән таныштырыу: Оҙон ҡолаҡ, Тайыш аяҡ, Хәйләкәрбикә, Уҫалбай, Осло мөгөҙ, Мыяубикә, татлы,

в) хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) үҙ-ара башҡортса диалогта ҡатнашырға өйрәтеү.

**Йыһаз:** ҡуян, айыу, төлкө, бүре, эт, кәзә, бесәй һүрәттәре; фланелеграф, һауыт-һаба һүрәттәре, «Тирмәкәй» әкиәте китабы.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Ҡалаҡ», «Орсоҡ». Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр «Ҡулдарҙы йылытыу», «Һабын ҡыуыҡтары өрөү», «Ел булып өрөү».

Ишек ҡағалар. *Ҡуян, айыу, төлкө, бүре, эт, кәзә, бесәй* инәләр. Тәрбиәсе: - Бөгөн беҙгә ҡунаҡтар килгән. «Һаумы, һинең исемең нисек?» уйынын уйнап алайыҡ! (һәр йәнлек балалар менән менән танышып, һаулыҡ һорашып, үҙенең исемен әйтеп сыға:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин ҡуян. Исемем Оҙон ҡолаҡ!

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин айыу. Исемем Тайыш аяҡ!

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин төлкө. Исемем Хәйләкәрбикә!

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин төлкө. Исемем Хәйләкәрбикә!

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин бүре. Исемем Уҫалбай!

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин кәзә. Исемем Осло мөгөҙ!

- Һаумыһығыҙ, балалар! Мин бесәй. Исемем Мыяубикә!

Тәрбиәсе: - Балалар, әйҙәгеҙ, ҡунаҡтарға улар тураһында йомаҡтар сисеп ишеттерәйек әле:

- Ҡолағы оҙон, ҡойроғо ҡыҫҡа, үҙе ҡурҡаҡ. Был нимә?

- Аяҡтары кәкере, үҙе ҙур, бал ашарға ярата. Был нимә?

- Мин өй һаҡлайым, сит кешене индермәйем! Был нимә?

- Мин уҫал, минән бөтәһе лә ҡурҡалар. Был нимә?

- Минең һөҙем бик татлы, ышана күрмә тағы. Был нимә?

- Мин йомшаҡ, иркә, үҙем һөт яратам. (тәрбиәсе балаларға һүҙҙәрҙең мәғәнәһен рус телендә аңлата ала).

*«Дөрөҫ һайла!» уйыны.* Тәрбиәсе балаларға һүрәттәр араһынан тәүҙә йорт хайуандарын табып алып, фланелеграфҡа ҡуйырға, атамаһын һәм нимә эшләүен әйтергә һорай. Аҙаҡтан – ҡыр хайуандарын табып, ошо уҡ эште башҡарырға һорай.

*Дидактик уйын «Нимә артыҡ?»* Һүрәттәрҙе теҙеп, улар араһында ниндәй предмет артыҡ икәнлеген билдәләү:

*Ҡаҙ, тауыҡ, әтәс, самауыр, ҡарға, турғай.*

*Айыу, бүре, төлкө, һыйыр, ҡуян.*

*Сынаяҡ, ҡалаҡ, көршәк, сәскә, тәрилкә.*

Тәрбиәсе:

- Балалар, хайуандар беҙгә «Урманда» тигән уйын алып килгән. Әйҙәгеҙ, уйнайыҡ! (һүҙҙәрен ятлайҙар).

*Беҙ йөрөйбеҙ урманда,*

*Матур йәшел болонда.*

*Айыуҙар ҙа бар бында (бүреләр, төлкөләр, ҡуяндар һ.б.)*

*Бик күңелле беҙгә бында.*

(ҡул сабалар, һүҙҙәрҙе 3-4 тапҡыр ҡабатлайҙар). Шунан тәрбиәсе артынан теҙелешеп, һүҙҙәрҙе йырлап, хайуандар хәрәкәттәрен күрһәтеп уйнайҙар (ике-өс тапҡыр).

Тәрбиәсе: - Балалар, «б» өнөнән башланған ниндәй һүҙҙәрҙе беләбеҙ, иҫкә төшөрәйек: *ббб-үре, ббб-армаҡ, ббб-есәй, ббб-аш.*

Тәрбиәсе: - Балалар, мин һеҙгә бик матур китап алып килдем. Бына ҡарағыҙ әле. Нимә тураһында был китап? Кем белә? (тәрбиәсе сағыу

биҙәлгән «Тирмәкәй» әкиәте тураһындағы китапты күрһәтә, бергәләп унда нимәләр төшөрөлгәнен асыҡлайҙар. Балалар рус телендә һөйләһәләр, тәрбиәсе ярҙамында башҡортсаға әйләндерәләр. Тәрбиәсе китапты уҡып ишеттерә).

*Дәресте йомғаҡлау.*

- «Тирмәкәй» әкиәтендә нимәләр тураһында уҡыныҡ?

- Ҡыр хайуандарын күрһәтәйек һүрәттәрҙән!

- Йорт хайуандарын күрһәтәйек һүрәттәрҙән!

**26 – сы дәрес**

**Тема:** Әкиәт яратабыҙ.

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу һәм дөрөҫ әйтергә өйрәнеү: әкиәт, хәреф, өн, герой (-ҙар),

б) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе типик конструкцияларҙа ҡулланырға өйрәтеү; «өн» һәм «хәреф» төшөнсәләрен аңлатыу;

в) хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү, тауыш менән идара итә белеүҙе нығытыу.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре; башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Айгөл, «А» хәрефе яҙылған карточка, «Тирмәкәй» әкиәтенең өҫтәл театры персонаждары, йорт һәм ҡыр хайуандарының һүрәттәре.

***Дәрес барышы:***

Өҫтәлдә «Тирмәкәй» әкиәтенең ҡурсаҡ театры персонаждары.

Тәрбиәсе: - Балалар, беҙ бөгөн театр уйнайбыҙ. Үткән дәрестә «Тирмәкәй» әкиәтен уҡыныҡ. Унда ниндәй геройҙар бар ине, иҫкә төшөрәйек (балалар тәрбиәсе менән бергәләп әкиәт персонаждарын атап, өҫтәл театры ярҙамында уйнап күрһәтәләр).

Тәрбиәсе: - Балалар, был хайуандар нисек тауыш сығаралар, кем әйтеп күрһәтә (һәр бер йәнлектең тауышын көслө тауыш, аҙаҡ әкрен генә әйтеп күрһәтәләр).

Артикуляция һәм тын алыу күнекмәләрен башҡарыу.

**«Урманда» уйынын** уйнау, тәүҙә һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү.

Ишек туҡылдаталар. Ҡурсаҡ Айгөл инә. Ҡулында «А» хәрефе. Айгөл һаулыҡ һораша һәм юлда ошо карточканы табыуын әйтә:

- Был нимә икән? Унда нимә төшөрөлгән икән? Балалар, һеҙ беләһегеҙме?

Был хәрефте белгән балалар «А» өнө тип әйтә алалар. Тәрбиәсе «А» өнөн һуҙып әйтергә ҡуша. Аҙаҡ бергәләп һығымта яһайҙар: өндө беҙ ишетәбеҙ һәм тауыш менән әйтәбеҙ. Карточкаға күрһәтеп – беҙ ундағы билдәне күрәбеҙ һәм уҡый алабыҙ. Был «А» өнөн аңлатҡан символ, ул *хәреф* тип атала. «А» өнө булған һүҙҙәрҙе кем белә, әйтегеҙ әле?

Тәрбиәсе: - Балалар, өҫтәлдә күп хәрефтәр ята, улар араһынан «А» хәрефен табып күрһәтәйек ( 3-4 «А» хәрефе һалына).

- Хәҙер мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, уларҙа нимә төшөрөлгән, шуның атамаһын әйтеп, «А» өнөнөң урынын билдәләйбеҙ: *ат, ҡаҙ, баш.*

*«Яңылышма!» уйыны.* Балаларға һүҙҙә «А» өнө булһа, сәпәкәй итергә ҡушыла: *кәзә, айыу, бүре, әтәс, бармаҡ, атай, Айгөл, ҡуян, баш.*

*«Нимә артыҡ?» уйынын* уйнау:

Айыу, кәзә, бүре, төлкө;

Һыйыр, әтәс, тауыҡ, төлкө.

*Дәресте йомғаҡлау:*

- «Тирмәкәй» әкиәтендә ниндәй хайуандар тураһында һөйләнелә, һанап сығығыҙ.

«А» өнө һүҙҙең ҡайһы урынында килә: *ат.* «А» өнө ниндәй хәреф менән билдәләнә, миңә табып күрһәтегеҙ!

Кемдең исеме «А» хәрефенән башлана?

Тәрбиәсе: бер-беребеҙгә иҫәнлек-һаулыҡ, бәхет-шатлыҡ теләп хушлашайыҡ! Һау булығыҙ, балалар!

**27 – се дәрес**

**Тема: "Сыбар тауыҡ".**

**Маҡсат**: а) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыу һәм типик конструкцияларҙа ҡулланырға өйрәтеү; яңы һүҙҙәрҙе өйрәнеү: *сыбар, сибәр, күпер, күркә, ҡурҡыныс;*

б) телмәр ағзаларын үҫтереүгә һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләре, «с», «сь» һәм «ҡ», «к» өндәренең әйтелешен һәм уларҙы айыра белеүҙе нығытыу;

в) хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре; диалог төҙөп, башҡортса һөйләшеүгә ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** «Сыбар тауыҡ һәм уның себештәре» сюжетлы һүрәте, төҙөлөш материалдары, уйынсыҡ йорт ҡоштары - әтәс, өйрәк, ҡаҙ, күркә; «с», «сь» һәм «ҡ», «к» өндәре айырмаһына предметлы һүрәттәр.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Ҡалаҡ», «Орсоҡ». Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр «Ҡулдарҙы йылытыу», «Һабын ҡыуыҡтары өрөү», «Ел булып өрөү».

Алыҫтан «ҡыт-ҡыт-ҡытаҡ», - тип тауыҡ ҡысҡырғаны ишетелә.

Тәрбиәсе тауыҡты «тип-тип-тип» әйтеп саҡыра. Шунан бергәләп балалар менән саҡыралар, тәүҙә яй ғына, аҙаҡ - көслөрәк тауыш менән.

- Ҡыт-ҡыт-ҡыт, – тип кәрзиндән тауыҡ килеп сыға. Балалар алдында йөрөй, маҡтана:

- Мин матур, мин сибәр, сыбар, ҡыт-ҡыт-ҡыт, мин матур …

- Сыбар тауыҡ ҡайҙа бараһың? – тип һорай тәрбиәсе (2-3 тапҡыр һорай). Тауыҡ яуап бирмәй.

-Ки-ки-ри-күк! Ҡайҙа бараһың, тауыҡ? - тип һорай әтәс. Тауыҡ өндәшмәй.

Тәрбиәсе: - Балалар, әйҙәгеҙ, күмәкләп һорайыҡ, – ти. (күмәкләп ҡабатлайҙар)

- Сыбар тауыҡ ҡайҙа киттең? (2-3 тапҡыр). Тауыҡ:

- Мин … (бер бала исеме) Катяға әйтәм, - тип баланың ҡолағына бышылдай. Ошо рәүешле 4-3 баланың ҡолағына нимәлер бышылдай.

Тәрбиәсе балаларҙан:

- Нимә тине, сыбар тауыҡ? Ҡайҙа китте?

- Һыуға китте, – тиҙәр балалар.

- Сыбар тауыҡ, ниңә һиңә һыу?

- Себештәрҙе эсерәм, – ти тауыҡ.

Тауыҡ күпергә (төҙөлөш материалдарынан) барып етә, унда ҡарға ултыра. Тауыҡ ҡурҡа:

-Ҡыш-ҡыш-ҡыш, – тип ҡарғаны ҡыуа.

- Балалар, әйҙәгеҙ ҡарғаны ҡыуайыҡ, – ти тәрбиәсе.

-Ҡыш-ҡыш-ҡыш, ҡарға кит бынан! (күмәкләп, тәүҙә шым ғына, ә аҙаҡ – ҡысҡырып).

Тауыҡ һыу алып ҡайтып китә.

Урамда (фланелеграфта) тауыҡты йорт ҡоштары ҡаршылай. Балалар үҙҙәре уларҙың һүрәтен табып, атамаһын әйтеп, фланелеграфҡа урынлаштыралар: Был әтәс (өйрәк, ҡаҙ, күркә).

Тәрбиәсе һәр ҡош нисек тауыш биргәнен әйттерә һәм балалар ошо ҡоштар булып тауыҡҡа рәхмәт әйтәләр: «Крә-крә, рәхмәт һиңә, Сыбар тауыҡ!» һ.б.

*«Ҡоштар» уйыны.*

Балалар үҙҙәре теләгән ҡоштар булып, уларҙың тауышын сығарып, бүлмә буйлап югереп йөрөйҙәр. Тәрбиәсе «Ҡурҡыныс ҡарға килә» - тигәс, балалар: «Беҙ ҡасабыҙ ҡарғанан!», - тип урындарына ултыралар. Кем өлгөрмәй, шуны ҡарға алып китә.

*«Нимә юҡ?» дидактик уйыны.* Өҫтәлдә йорт хайуандары һәм ҡоштары (уйынсыҡтар). Балалар уларҙы ҡарап, иҫтә ҡалдыралар. Уйынсыҡтар яулыҡ менән ябыла, тәрбиәсе мөғжизәле һүҙҙәр әйтеп яулыҡты аса (абра-ка-дабра-бумс) һәм күрһәтмәй генә берәй уйынсыҡты ала:

- Нимә юҡ? Балалар яуап бирә.

Тәрбиәсе балаларға предметлы һүрәттәр күрһәтә һәм һүҙҙә «ҡ» өнө булһа - бер тапҡыр, «к» өнө булһа – ике тапҡыр ҡул сабырға тәҡдим итә: ҡарға, кишер, ҡаҙ, күркә, ҡалаҡ, тәрилкә. Һәр һүҙҙе балалар хор менән ҡабатлайҙар.

Ошондай уҡ күнегеү «с», «сь» өндәре айырмаһына үткәрелә: *сәскә, сыбар, сибәр, сусҡа, бесәй, себеш, суҡыш.*

Тәрбиәсе «Тауыҡ һәм уның себештәре» сюжетлы һүрәтте элә һәм балалар менән бергәләп хикәйә төҙөйҙәр:

- Был тауыҡ. Уның себештәре бар. Тауыҡ ҙур, ә себештәр бәләкәй, йомшаҡ, һары. Себештәр һыу эсә. Сыбар тауыҡ ҡыуана.

*Дәресте йомғаҡлау.*

## 28 – се дәрес

**Тема:** "Ҡыш килде"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу һәм дөрөҫ әйтергә өйрәнеү: *баҙ, таң, тоҙ, йондоҙ, ун ике, яланғас, йомаҡ, быйма, бейәләй;*

б) һөйләмдә типик конструкцияларҙы ҡулланырға өйрәтеү: *Ҡыш килгән. Тышта һыуыҡ. Ҡар яуа. Ерҙе ҡар ҡаплаған.*

в) «ҙ» һәм «з» өндәренең айырмаһын һиҙемләүҙе, уларҙы дөрөҫ әйтә белеүҙе нығытыу;

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү күнекмәләре;

д) үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү; хәтерҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡышҡы кейем кейгән ҡурсаҡ, «Ҡыш» темаһына сюжетлы һүрәт.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе өндәр әйтелешен нығытыуға күнекмәләр үткәрә: телмәр ағзаларын үҫтереүгә күнекмәләр: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Ҡалаҡ», «Орсоҡ», «Ҡойма».

Серәкәй нисек йырлай: з-з-з.

Серәкәй ҡыҫылды, ҡысҡыра: ҙ-ҙ-ҙ-ҙ.

Беҙ йырлайбыҙ:

ҙа-ҙа-ҙа аҙ-аҙ-аҙ

ҙе-ҙе-ҙе өҙ-өҙ-өҙ

ҙо-ҙо-ҙо ыҙ-ыҙ-ыҙ

Ҡыҙ, ҡаҙ, тоҙ, баҙ, ҡайҙа, йондоҙ, ҙур.

Телтөҙәйткесте ятлау:

ҙа-ҙа-ҙа - ҡаҙҙар киткән һуң ҡайҙа?

ҙы-ҙы-ҙы - ҡаҙҙар йылғаға барҙы,

ҙә-ҙә-ҙә - рәхәтләнеп йөҙ, әйҙә.

Ҡышҡы кейемдә ҡурсаҡ керә: - Һаумыһығыҙ! Минең исемем Зифа. Тышта һыуыҡ, өшөнөм. Һеҙҙә уйнарға яраймы?

- Әйҙүк, үт, сисен. Йылы кейенгәнһең икән, сисен! (Ҡурсаҡты сисендерә, тәрбиәсе балаларға уның кейемдәренең атамаһын әйтеп тора).

- Был пальто (тун).

- Был шарф (башлыҡ, бүрек, бейәләй, быйма, итек).

Балалар һүҙҙәрҙе тәрбиәсе артынан ҡабатлап, әйтелешен нығыталар.

- Зифа, беҙҙең балалар башҡортса һөйләшә беләләр, шиғыр, йыр беләләр, тыңла әле:

*Бесәй, бесәй, бесәй шул.*

*Бесәй әле кескәй шул.*

*Үҙе мырлай ҙа мырлай,*

*Әллә ул шулай йырлай.*

Был шиғыр нимә тураһында? Күрһәтегеҙ уның һүрәтен! Бесәй ниндәй? Беҙ тағы ла бер шиғыр беләбеҙ:

*Беҙ, беҙ, беҙ инек,*

*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*

*Баҙға төшөп май ашаныҡ,*

*Таң атҡансы юҡ булдыҡ! (йондоҙҙар).*

Был шиғыр нимә тураһында? Был – йомаҡ, ул йондоҙҙар тураһында.

Зифа беҙгә бер һүрәт алып килгән. Рәхмәт һиңә, Зифа! Ҡарайыҡ әле, балалар. («Ҡыш» темаһына сюжетлы һүрәт).

- Был Зифа. Ул урамда уйнай. Урамда матур. Бөтә нәмә ап-аҡ. Ниңә аҡ булған?

- Дөрөҫ, ерҙе ҡар ҡаплаған. Ерҙә, эскәмйәлә, ағастарҙа ҡар ята. Был ҡыш. Беҙгә ҡыш килгән. Тышта һыуыҡ. Ерҙе ҡар ҡаплаған. Ҡар яуа.

Зифа йылы кейенгән. Зифаның кейемдәрен тағы бер тапҡыр ҡабатлап нығытыу.

- Был тун. Ул йомшаҡ, йылы, ҡара төҫтә.

-Зифа аяғына йылы быйма (итек) кейгән.

Башында бүрек (башлыҡ), ҡулдарында – бейәләй.

Зифа өшөмәй.

Тәрбиәсе Рәми Ғариповтың шиғырын уҡый:

*Ҡыш булғас,*

*Ҡар яуғас,*

*Бар ағас яланғас.* (балалар менән бергәләп ятлап алалар).

Тәрбиәсе: - Беҙ нимә тураһында шиғыр уҡыныҡ?

- Ҡыш тураһында. Ағастар яланғас, йәғни улар япраҡтарын ҡойған. Уларға һыуыҡмы? Юҡ, сөнки ҡар уларҙы ҡаплай, йылыта.

- «Ҡыш» һүҙе ниндәй өндән башлана?

- «Ҡыш» һүҙе менән һөйләм төҙөйөк әле.

Тәрбиәсе ҡуян һүрәтен күрһәтә һәм унын нимә икәнлеген һорай. «Ҡуян» һүҙе менән шул уҡ эште башҡаралар. Шиғырҙы иҫкә төшөрәләр.

*Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,*

*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.*

*Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,*

*Ҡолағы оҙон икән!*

Дәресте йомғаҡлау.

### 29 – сы дәрес

### Тема: "Урамда ҡыш"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу һәм дөрөҫ әйтергә өйрәнеү: *көрәк, көрәй, миҙгел, болонда;*

б) өйрәнелгән һүҙҙәрҙе типик конструкцияларҙа ҡулланырға өйрәтеү: *ҡар көрәй. Ул нимә кейгән? Уның туны ниндәй?*

в) «ҫ» һәм «с» өндәренең айырмаһын һиҙемләүҙе, уларҙы дөрөҫ әйтә белеүҙе нығытыу; һүҙҙәрҙә өндөң урынын һәм нисә өн барлығын билдәләй белеүҙе нығытыу;

г) фекерләү, уйлау белеү һәләтен үҫтереү, ятланған шиғырҙарҙы иҫкә төшөрөү;

д) үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** «Урамда ҡыш» темаһына сюжетлы һүрәт, ҡыр һәм йорт хайуандары һүрәттәре,

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Ҡалаҡ», «Орсоҡ». Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр башҡарыла.

Телтөҙәйткес: Ҫа-ҫа-ҫа - ҡайһылай матур баҫа

Ҫә-ҫә-ҫә - еләҫ ел иҫә

Ҫө-ҫө-ҫө - бик матур төҫө.

Фланелеграфта «Урамда ҡыш» темаһына сюжетлы һүрәт. Тәрбиәсе һүрәткә күрһәтеп, балаларҙан һорауҙарға яуап бирергә һорай:

- Был кем? - Был Зифа.

- Ул нимә эшләй?

- Ул тышта уйнай.

- Уның ҡулында нимә? - Ул көрәк менән ҡар көрәй.

- Ул нимә кейгән?

- Уның туны ниндәй? һ.б.

- Был ниндәй миҙгел?

- Ҡыш ваҡытында тәбиғәттә ниндәй үҙгәрештәр була?

«Урманда» уйыны. Тәрбиәсе уйын һүҙҙәрен иҫкә төшөртә:

*Беҙ йөрөйбеҙ урманда,*

*Матур йәшел болонда.*

*Айыуҙар ҙа бар бында (бүреләр, төлкөләр, ҡуяндар һ.б.)*

*Бик күңелле беҙгә бында.*

Тәрбиәсе: Беҙ йәшел урманда түгел, ә ҡар ҡаплаған ап-аҡ болонда йөрөйбөҙ. Шуның өсөн йырҙы ла икенсе төрлө итеп йырлайыҡ:

*Беҙ йөрөйбеҙ урманда,*

*Ҡар ҡаплаған болонда.*

*Айыуҙар ҙа бар бында (бүреләр, төлкөләр, ҡуяндар һ.б.)*

*Бик күңелле беҙгә бында.*

*Дидактик уйын «Дөрөҫ ҡуй!».* Тәрбиәсе таҡтаны ике өлөшкә бүлә һәм бер яҡҡа - ҡыр хайуандары, икенсе яҡҡа – йорт хайуандары һүрәттәрен ҡуйырға ҡуша. Һәр йәнлекте һүрәтләү кәрәк.

Тәрбиәсе фланелеграфтағы хайуандарҙы яңынан үҙе күрһәтеп, уларҙың атамаһын ҡабатлата һәм һүҙҙең ниндәй өндән башланғанын билдәләтә. Шиғырҙарҙы ҡабатлайҙар:

*А. Ҡыш булғас,*

*Ҡар яуғас,*

*Бар ағас яланғас.*

*Б. Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,*

*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.*

*Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,*

*Ҡолағы оҙон икән!*

Тәрбиәсе: - Балалар, ҡыш көнө кешеләр нисек кейенә? Ҡыш көнө ни өсөн ҡуян аҡ тун кейә? «Тун» һүҙендә нисә өн бар?

*Дәресте йомғаҡлау.*

- Ҡыш көнө һыуыҡмы, әллә йылымы?
- «Ҡыш» һүҙе ниндәй өндән башлана? Был һүҙҙә нисә өн бар?

### 30 - 31– се дәрестәр

**Тема:** "Ҡыш бабай"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу һәм дөрөҫ әйтергә өйрәнеү: *бирсәткә(-ләр), аҡ юрған, Ҡар бабай, Һыуыҡ бабай, Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, туңдыр(-а,-ам).*

б) типик конструкцияларҙы ҡулланырға өйрәтеү: *ҡар яуа, ҡар ирей, ергә осоп төшә, аҡ юрған ҡаплай;*

в) «һ»өнөнөң әйтелешен нығытыу;

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү; фекерләүҙе, күҙ алдына килтерә белеү һәләтен үҫтереү; *Зифа итек (быйма, тун, бүрек, бейәләй) кейә* типик грамматик һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланыуҙы нығытыу;

д) башҡорт телендәге һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыу.

**Йыһаз:** «Зифа урамда уйнай» сюжетлы һүрәте, ҡурсаҡ Айыуҡай, ҡурсаҡ Айгөл, уйын мөйөшө янында, сана шыуырға тау һәм уйынсыҡ сана әҙерләнгән, тәрилкәлә ҡар өйөмө, фланелеграф, ҡағыҙҙан киҫелгән аҡ түңәрәктәр, кейем-һалым, йорт һәм ҡыр хайуандары һүрәттәре,

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе ҡурсаҡ Айыуҡай менән инә. Фланелеграфта «Зифа урамда уйнай» сюжетлы һүрәте эленеп тора. Айыуҡай һаулыҡ һорашҡас, һүрәткә ҡарап тора. Тәрбиәсе:

- Айыуҡай, һин нимә ҡарайһың, – ти. Айыуҡай һүрәттәге бөтә ерҙә ятҡан ҡарға күрһәтеп: - Был нимә? Үҙе ап-аҡ, – ти.

Тәрбиәсе балаларға аңлата:

- Айыуҡай ҡышын йоҡлай, шуға ҡышты, ҡарҙы белмәй. Әйҙәгеҙ әле, беҙ уға һөйләп бирәйек! Тәрбиәсе ярҙамсы һорауҙар менән балаларҙан һүрәттең эстәлеген һөйләтә:

- Был кем? Был – Зифа.

- Ул нимә эшләй? (уйнай).

- Был нимә? (ҡар).

- Ҡар ниндәй? (аҡ, һыуыҡ, ҡулды өшөтә).

- Ҡар нимә эшләй? (ҡар яуа).

- Белдеңме инде, Айыуҡай? – тип һорай тәрбиәсе.

- Юҡ, тағы ла һөйләгеҙ әле, зинһар өсөн! – ти Айыухан.

Тәрбиәсе балаларға «кейенергә һәм тышҡа уйнарға сығырға», Айыуҡайға ҡарҙы күрһәтергә тәҡдим итә. Үҙе ҡурсаҡ Айгөлдө кейендерә, кейенеү барышында балаларҙан йылы кейемдәрҙең атамаларын иҫкә төшөрөүҙе һорай:

- Тышта һыуыҡ. Өҫкә тәүҙә нимә кейәбеҙ? (салбар, йылы кофта). Юлда ҡар ята, аяҡтарға нимә кейәбеҙ? Баш өшөмәһен өсөн, нимә кейергә кәрәк? Иң аҙаҡ өҫкә нимә кейәбеҙ? (тун йәки пальто). Ҡулдарға нимә кейәбеҙ (бейәләйҙәр йәки бирсәткәләр).

Тәрбиәсе: - Бына беҙ тышта (уйын мөйөшө янында, сана шыуырға тау һәм уйынсыҡ сана әҙерләнгән). Бөтә ерҙә ҡар. Бына Зифа беҙгә ҡарҙан

тау эшләп ҡуйған, афарин! (Тәрилкәлә ятҡан ҡарҙан һәр балаға семетеп алып, ҡар бирә):

- Балалар, ҡарағыҙ, ҡар ниндәй төҫтә? Ҡар йомшаҡмы? Һыуыҡмы? Устарҙы йомоп, әҙ генә күтәреп торһаҡ, ҡар нимә эшләй? (ирей, ул һыуға әйләнә). Ҡар өҫтән, һауанан осоп килеп, төшә ергә. Шуға ла уға «Ҡар яуа», - тип әйтәләр. Бына тәүге ҡар тураһында нисек итеп яҙған Нияз ағай Сәлимов. Шиғыр «Аҡ юрған» тип атала:

*Аҡҡа сорнап бар донъяны*

*Тәүге ҡар яуа ергә.*

*Күбәләктәй ҡарҙар менән*

*Уйнайбыҙ бергә-бергә.*

Айыуҡай, һин нисек уйлайһың, ниңә шиғыр «Аҡ юрған» тип аталған икән?

Айыуҡай: - Белдем-белдем! Бөтә ер аҡ ҡарға күмелә, ерҙе ҡар юрған кеүек ҡаплай, хатта шул юрған аҫтында мин йоҡлайым.

Тәрбиәсе: - Өҫтән ҡар бөртөктәре яуа, өрәйек әле уларға! (дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр).

- Ҡарҙан туптар әүәләйбеҙ: «һоп-һоп-һоп». Бына ҙур туптар килеп сыҡты! Бына бәләкәй генә туптарҙы тәгәрәтәбеҙ. Ҡулдар өшөнө, әйҙәгеҙ уларҙы «һу-һу-һу» тип йылытайыҡ, үҙебеҙ һикерәйек «топ-топ-топ»!

Тәрбиәсе фланелеграфҡа ҡағыҙҙан киҫелгән түңәрәктәр ярҙамында Ҡар бабайҙы эшләп ҡуя һәм балаларҙан ни өсөн уның шулай аталғанлығын белешә. Ҡар бабайҙы Һыуыҡ бабай йәки Ҡыш бабай тип йөрөтәләр. Ни өсөн? (сөнки ул һыуыҡ, ул ҡарҙан эшләнгән, ул кешеләрҙе өшөтә, туңдыра).

**«Ике Ҡыш бабай» уйыны.** Ике Ҡыш бабай һайлана: беренсеһе – ҡыҙыл танаулы Ҡыш бабай, икенсеһе – күк танаулы Ҡыш бабай. Улар зал уртаһында торалар. Балалар стена янында теҙелешкәндәр. Ҡыҙыл танаулы Ҡыш бабай:

*Мин – ҡыҙыл танау,*

*Килтерәм аҡ ҡарҙар.*

Күк танаулы Ҡыш бабай:

*Мин – күк танаулы бабай*

*Үҫтерәм боҙ тауҙар,*

Ҡыш бабайҙар бергә:

*Туңдырабыҙ һеҙҙе беҙ,*

*Ҡурҡығыҙ һеҙ беҙҙән!*

Балалар: - *Ҡурҡмайбыҙ беҙ һеҙҙән!*

Балалар икенсе яҡ стенаға йүгереп үткәндә, Ҡыш бабайҙар уларҙы тоторға тырышалар. Уйын 1-2 тапҡыр ҡабатлана.

*«Нимә артыҡ?» дидактик уйыны.*

Фланелеграфта предметлы һүрәттәр эленгән. Улар араһынан ниндәй һүрәт артыҡ икәнлеген билдәләү кәрәк. Тәүҙә балалар предметтарҙың атамаһын әйтеп сығалар, шунан ниндәй һүрәт артыҡ, ни өсөн икәнлеген әйтәләр:

Тун, салбар, бейәләй, быйма, шыршы.

Тауыҡ, һыйыр, ҡаҙ, сана, быҙау, кәзә.

*«Ниндәй өн беренсе?»* - түбәндәге һүҙҙәрҙә беренсе өндө билдәләү: ҡыш, бабай, ҡар, юрған, ерҙе, ҡаплаған.

Дәресте йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Ҡалаҡ», «Орсоҡ». Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр башҡарыла.

Тәрбиәсе байрамса биҙәлгән шыршы һүрәтен күрһәтеп, балаларҙан был нимә тип һорай. Балалар рус телендә аңлата алалар.

Шыршы – это елка. Ул матур биҙәлгән – она украшена красиво. Шыршыны Яңы йылда биҙәйҙәр – Елку украшают на Новый год. Шыршы байрамына Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу килә – На новогоднюю елку приходят Дед Мороз и Снегурочка. Улар балаларға бүләк алып киләләр – Они детям приносят подарки.

Тәрбиәсе өҫтәлгә шыршы ҡуя һәм балаларға уны биҙәргә тәҡдим итә. Һәр хәрәкәтте һүҙ ярҙамында аңлатыу кәрәк:

- Был нимә? Был шыршы.

- Шыршыны нимә эшләйбеҙ? (биҙәйбеҙ).

- Шыршыны нимә менән биҙәйбеҙ? (уйынсыҡтар менән).

(тәрбиәсе балаларҙың үҙҙәренән теләк буйынса уйынсыҡ һайлата һәм уның атамаһын әйтеп, шыршыға элдертә).

Ишек туҡылдаталар: Телеграмма килгән, унда «Тиҙҙән Яңы йыл байрамы етә. Шиғырҙар, йырҙар әҙерләгеҙ!» - тип яҙылған.

Элек өйрәнелгән шиғырҙарҙы, йырҙарҙы ҡабатлайҙар.

*«Ике Ҡыш бабай»* уйынын ҡабатлау.

*«Зифа урамда уйнай»* сюжетлы һүрәте буйынса әңгәмә.

*«Һүҙҙең аҙағын әйтеп бөт!» уйыны.* Тәрбиәсе һүҙҙең беренсе өлөшөн әйтә, ә балалар аҙағын әйтеп, тамамлап ҡуялар: *шыр-(шы)…, биҙә- (нек)…, һыу – (ыҡ)…, бейә- (ләй) …, ҡарһы – (лыу), күстә – (нәс)... , бай (-рам).*

*«Шыршы» һүҙе менән һөйләм төҙөгөҙ. Был һүҙ ниндәй өндән башлана?*

Гөлфиә Юнысова апай яҙған «Ҡыш бабай» шиғырын өйрәнәйек:

*Һаумы, һаумы, Ҡыш бабай,*
*Ник оҙаҡланың былай?*
*Беҙ һине нык көткәнгә*
*Төштәргә керҙең буғай.*

*Әйҙә, әйҙә, Ҡыш бабай,*
*Һәр саҡ бергә булырбыҙ.*
*Һин ҡарҙан тау яһарһың,*
*Ә беҙ сана шыуарбыҙ.* Дәресте йомғаҡлау.

## 32-33 – сө дәрестәр

**Тема:** "Яңы йыл байрамы"

**Маҡсат**: а) яңы һүҙҙәрҙе отоп алыу, дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: *Яңы йыл, өшөй, өшөмәһен, өсөн*;

б) артикуляция күнекмәләрен үткәреү: *шы, ыш, ши* өндәр теҙмәһен, *«ш»һәм «ө»* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеүҙе нығытыу;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *Ҡарҙан нимә эшләп була? Балалар ҡыш көнө нисек кейенә? Балалар ҡыш көнө нисек уйнайҙар?*

г) балаларҙың хәтерләү, иҫтә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү;

д) телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Йыһаз:** «Ҡыш килде» темаһына сюжетлы һүрәт, уйынсыҡ шыршы, уны биҙәү өсөн уйынсыҡтар, фланелеграф, предметлы һүрәттәр, «Т» хәрефе.

### *Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе: "Балалар, тышта ҡар яуа. Ҡар бөртөктәрен осорайыҡ әле. Һауаны эскә алабыҙ ҙа көс менән "һу-һу" тип әйтеп, устағы ҡар бөртөктәрен өрөп төшөрәбеҙ (һ-ғ тапҡыр). Артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләрен башҡарыу.

«Ҡыш килде» темаһына сюжетлы һүрәтте ҡарау һәм әңгәмәләшеү:

- Балалар, был ниндәй ваҡыт?

- Нисек белдегеҙ, ҡыш ваҡыты икәнлеген?

- Ҡар ниндәй төҫтә? Ул һыуыҡмы? Өйгә индерһәк, ҡар нимә эшләй?

- Ҡарҙан нимәләр эшләп була?

- Беҙ ҡыш көнө нисек кейенәбеҙ? Өҫтөбөҙгә нимә кейәбеҙ? Аяҡтарға (ҡулдарға) нимә кейәбеҙ? Баш өшөмәһен өсөн нимә кейәбеҙ?

- Ҡыш балалар тышта нимә эшләйҙәр? Улар нисек уйнайҙар?

"Ел" уйыны. Тәрбиәсе: *"Ел сыҡты, ул әкрен генә "ш-ш-ш" тип иҫә".* (балалар бүлмә буйлап әкрен генә йөрөп, өрөп күрһәтәләр). *"Ел тынды"* - балалар сүкәйеп ултыралар. *"Ел көсәйҙе, ул "ш-ш-ш" тип шәп иҫә".* Балалар көслө ел булып, "ш-ш-ш" тип өрәләр һәм бүлмә буйлап, әйләнә-әйләнә йөрөйҙәр. *"Ел тынды",* - тип әйткәс, балалар тағы сүкәйеп ултыралар. Уйын һ-ғ тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе:

- Балалар, ҡыш көнө ниндәй байрам була әле? Ул байрамға нисек әҙерләнәләр? Кем ҡыш, шыршы, Ҡар бабай тураһында шиғырҙар белә?

(балалар шиғырҙарҙы иҫкә төшөрөп, һ-ғ шиғырҙы һөйләп сығалар)

Тәрбиәсе: - Беҙ бөгөн тағы бер шиғыр өйрәнәбеҙ. Уны Рәғиҙә апай Янбулатова яҙған һәм ул «Яңы йыл байрамы» тип атала:

*Ыршы матур, шыршы матур,*
*Шыршы һәр саҡ йәм-йәшел.*
*Энәләрен ҡоймай бер ҙә,*
*Һәр ваҡытта йәп-йәш ул.*

*Шыршы матур биҙәкләнһә,*
*Ҡыш бабай ҙа ярата.*
*«Ҡотло булһын, Яңы йыл!» - тип,*
*Беҙгә бүләк тарата.*

Тәрбиәсе өҫтәлгә шыршыны ҡуя һәм балаларға, һәр хәрәкәтте һүҙҙәр ярҙамында аңлатып, уны биҙәргә тәҡдим итә.

*Был – шыршы. Уның йәшел энәләре бар. Шыршы ҡыш килгәс тә энәләрен ҡоймай. Шыршыны матур уйынсыҡтар менән биҙәйбеҙ. Ҡыш бабай беҙгә бүләктәр бирә. «Яңы йыл менән, дуҫтар!».*

*«Шыршыға уйынсыҡтар һайла!»* - балалар уйынсыҡтарҙың атамаһын әйтеп, шыршыға эләләр: туп, шар, алма, әтәс, айыуҡай, йондоҙ, ҡар бөртөктәре, төлкө, ҡуян.

*«Бүләк» һүҙе* ниндәй өндән башлана?

*Тағы ла «б» өнө булған һүҙҙәрҙе* уйлап тап: бармаҡ, бала, балыҡ, батыр, баш, бесәй, бүре, быҙау, бабай (балалар ҡыйынғынһа, тәрбиәсе һүрәттәр күрһәтә).

*«Тәржемәселәр» уйыны.* Тәрбиәсе рус телендә һөйләмдәр әйтә, балалар уны башҡортсаға тәржемә итәләр:

Скоро Новый год. Мы украшаем елку. Мы учим стихи и песни. На елку придет Дед мороз. Он подарит нам подарки.

*«Ике Ҡыш бабай»* уйынын ҡабатлау.

Дәресте йомғаҡлау.

## Икенсе дәрес

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә: артикуляция

гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны. Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр: «Кем алыҫыраҡ өрә?» уйыны – өҫтәлдәге мамыҡтарға өрөү, ҡулдарҙы өрөп йылытыу, туп кеүек һикереү һ.б.

Тиҙәйткестәрҙе ҡабатлау:

*1. Беҙ, беҙ, беҙ инек,*
*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*
*Баҙға төшөп май ашаныҡ,*
*Таң атҡансы юҡ булдыҡ!*

*2. Һыуыҡ һыу һалҡын була, һыуыҡ килһә – һыу туңа.*

Ишек туҡылдаталар, тоҡ күтәргән Ҡыш бабай инә:

- Һаумыһығыҙ, балалар! Бик матур итеп башҡортса һөйләшкән тауыштар ишетеп килдем. Мине таныйһығыҙмы, мин кем? Дөрөҫ, мин - Ҡыш бабай. Алыҫтан киләм. Ял итеп алайым әле, һеҙҙең һөнәрҙәрҙе күрәйем.

Тәрбиәсе: - Балалар, әйҙәгеҙ, Ҡыш бабайға шиғырҙар, йырҙар йырлап ишеттерәйек. Ниндәй уйындар беләбеҙ, уйнап күрһәтәйек!

*Ҡыш булғас,*
*Ҡар яуғас,*
*Бар ағас яланғас. (Рәми Ғарипов яҙған).*

*Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,*
*Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.*
*Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,*
*Ҡолағы оҙон икән! (М. Бикбова).*

*Аҡҡа сорнап бар донъяны*
*Тәүге ҡар яуа ергә.*
*Күбәләктәй ҡарҙар менән*
*Уйнайбыҙ бергә-бергә. (Нияз Сәлимов).*

*Һаумы, һаумы, Ҡыш бабай,*
*Ник оҙаҡланың былай?*
*Беҙ һине ныҡ көткәнгә*

*Төштәргә керҙең буғай.*

*Әйҙә, әйҙә, Ҡыш бабай,*

*Һәр саҡ бергә булырбыҙ.*

*Һин ҡарҙан тау яһарһың,*

*Ә беҙ сана шыуарбыҙ. (Гөлфиә Юнысова).*

Ҡыш бабай: - Бигерәк оҫта һөйләйһегеҙ! Хәҙер уйнап алайыҡ әле, етеҙ балалармы икән һеҙ?

*«Туңдырам-туңдырам» уйыны.* Балалар тәңәрәккә тора, Ҡыш бабай уртала. Балалар, түңәрәк буйлап, «Һаумы, һаумы, Ҡыш бабай!» Г.Юнысованың шиғырын таныш көйгә һалып, йырлап әйләнәләр. Улар туҡтап, ҡулдарын Ҡыш бабайға күрһәтәләр, ә Ҡыш бабай, ҡулдарҙы йәшермәҫ элек, кемдең ҡулына тейеп өлгөрә, был балалар уйындан сығалар. h-ғ тапҡыр уйын ҡабатлана.

Ҡыш бабай: - Бигерәк етеҙ балалар икәнһегеҙ, мине тамам арыттығыҙ! Тағы ла ниндәй һөнәрҙәрегеҙ бар?

*«Нимә артыҡ?» дидактик уйыны.*

Фланелеграфта предметлы һүрәттәр эленгән. Улар араһынан ниндәй һүрәт артыҡ икәнлеген билдәләү кәрәк. Тәүҙә балалар предметтарҙың атамаһын әйтеп сығалар, шунан ниндәй һүрәт артыҡ, ни өсөн икәнлеген әйтәләр:

Тун, салбар, бейәләй, быйма, шыршы.

Тауыҡ, һыйыр, ҡаҙ, сана, быҙау, кәзә.

Ҡыш бабай: - Мин һеҙҙең нимәне белмәгәнде беләм. «Тун» тигән һүҙ ниндәй өндән башлана, берегеҙ ҙә әйтә алмаясаҡ! (балалар әйтәләр).

*«Т» өнөн нисек билдәләйҙәр?* Кем белә? (хәрефте күрһәтеп). Нимәгә оҡшаған? (сүкешкә). Был өндән башланған һүҙҙәр әйтәйек әле: *таяҡ, тауыҡ, тараҡ, таш.*

*«Кем беренсе булып дөрөҫ һөйләм төҙөр?»* - түбәндәге һүҙҙәр ярҙамында һөйләм төҙөү: Ҡыш бабай, ҡар, ерҙе, ҡаплаған, менән.

*«Ҡыш килде» сюжетлы һүрәт* буйынса хикәйә төҙөү.

*«Тәржемәселәр» уйыны.* Тәрбиәсе рус телендә һөйләмдәр әйтә, балалар уны башҡортсаға тәржемә итәләр:

*Скоро Новый год. Мы украшаем елку. Мы учим стихи и песни. К нам пришел Дед Мороз. Он принес подарки.*

Матур уйынсыҡтар менән биҙәлгән шыршыны бүлмә уртаһына ҡуялар. Балалар менән Ҡыш бабай – тәрбиәсе бергәләп уның тирәләй түңәрәктә йөрөйҙәр һәм Рәғиҙә Янбулатова яҙған «Яңы йыл байрамы» шиғырын таныш көйгә һалып йырлайҙар:

*Шыршы матур, шыршы матур,*
*Шыршы һәр саҡ йәм-йәшел.*
*Энәләрен ҡоймай бер ҙә,*
*Һәр ваҡытта йәп-йәш ул.*

*Шыршы матур биҙәкләнһә,*
*Ҡыш бабай ҙа ярата.*
*«Ҡотло булһын, Яңы йыл!» - тип,*
*Безгә бүләк тарата.*

Балалар түңәрәктә Ә. Зиннурованың *«Был - мин» тигән йырын* йырлап, йәки магнитофон яҙмаһына ҡушылып, йырҙың һүҙҙәре буйынса үҙҙәренең тән өлөштәрен күрһәтәләр: *«Бармаҡтар» уйынын* уйнап күрһәтәләр. Ҡыш бабай балаларҙы маҡтап, уларға бүләктәр таратып сыға. Дәресте йомғаҡлау.

**34– се дәрес**

**Тема: "Төҙөүселәр"**

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: *төҙөүсе (-ләр), күтәргес кран, кирбес (-тәр), таш, бысҡы, йышҡы, сүкеш, сөй, йорт.*

б) телмәр органдарын үҫтереүгә һәм нығытыуға бағышланған артикуляция күнекмәләре, «ҡ» һәм «к» өндәренең әйтелешендәге айырманы һиҙемләү һәм дөрөҫ әйтә белеүҙе нығытыу;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *Атайым – төҙөүсе. Ул йорт төҙөй. Йортто кирбестән (таштан) төҙөй.*

г) балаларҙың һиҙеп-тойоу һәләтлеген үҫтереү, күҙәтеүгә, сағыштырыуға өйрәтеү күнекмәләре башҡартыу;

д) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, үҙ-ара башҡортса аралашыуға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** фланелеграф, «Төҙөүселәр» темаһына сюжетлы һүрәт, ҡарға һәм уның ҡошсоғо һүрәте, балта оҫтаһы, бысҡы, сөй, сүкеш, йышҡы.

***Дәрес барышы:***

Балалар ултырғыстарҙа ултыралар. «Ҡ» өнөнөң әйтелешенә күнегеүҙәр:

*ҡа-ҡа-ҡа-аҡ-аҡ ҡо-ҡо-ҡо-оҡ-оҡ ҡу-ҡу-ҡу-уҡ-уҡ*

*Һүҙҙәрҙә: ҡул, аяҡ, ҡолаҡ, бармаҡ, ҡар, ҡаш, ҡыш, ҡыҙ.*

*Телтөҙәйткес: ҡарға килгән ҡарғаға, ҡарғаларын ҡарарға.*

Тәрбиәсе ҡарғаның һәм уның балаһының һүрәтен күрһәтеп ҡарғаның асыулы булыуын, сөнки ул балаһына ем тапмаған икәнлеген әйтеп, асыулы ҡарға булып ҡысҡырып күрһәтә: *"Ҡар-ҡар-ҡар".* Балаларға үҙенең артынан ҡарға ҡысҡырыуын ҡабатлата, хор менән, айырым-айырым ҡысҡырып ҡарайҙар. Тәрбиәсе ҡарғаға ем бирә, ул шатланып: *"Кар-кар-кар"* - тип ҡысҡыра. Уның балаһы ла *"Кар-кар-кар"*- тип ҡысҡыра. Балалар ҙа ҡабатлай.

*"Ҡар-ҡар-ҡар"* һәм *"Кар-кар-кар"* һүҙҙәрен бер нисә тапҡыр аралаштырып тағы ла әйтәләр.

Тәрбиәсе: *"Ҡарғалар ем ашай туйҙылар. Улар ирендәрен ялайҙар. Беҙ ҙә улар артынан ҡабатлайыҡ әле",* - ти. Тәрбиәсе артынан балалар ҡабатлайҙар (тәрбиәсе күрһәтеүенә ҡарап, уның артынан ҡабатлайҙар):

- ирендәр асыҡ, йылмайыу ҡиәфәтендә, тел менән ирендәрҙе түңәрәтеп ялап сығыу;
- телде ауыҙҙан сығарып, ирендәр мөйөшөнә еткереп, уңға, һулға йөрөтөү;
- туңдырма ялау – телде ауыҙҙан ныҡ ҡына сығарып, кире индереү (күнегеүҙәр 3-4 тапҡыр ҡабатлана).

Тәрбиәсе фланелеграфҡа «Төҙөүселәр» темаһына һүрәт элә:

- Балалар, һүрәттә нимә күрәбеҙ? (подъемный кран – күтәргес кран, йорттар, кешеләр).

- Күтәргес кран нимә эшләй? (кирбестәр күтәрә).

- Кирбестән нимә эшләйҙәр? (йорт).

- Йорт эшләгән кешеләрҙе нисек атайҙар? (төҙөүселәр).

-Йорттарниндәй? (бейек, ҙур).

Тәрбиәсе дөйөмләп: - Төҙөүселәр йорт төҙөйҙәр. Йортто кирбестән төҙөйҙәр. Кирбестәрҙе өҫкә күтәргес кран күтәрә. Атайым – төҙөүсе. Ул йорт төҙөй.

*«Балта оҫтаһына нимә кәрәк?» уйыны.* Балта оҫтаһы һүрәте, ул өҫтәл эшләй. Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр (балта, бысҡы, сөй, сүмес, ҡайсы, бысаҡ, сүкеш, йышҡы, биҙрә, һ.б.) күрһәтә. Балалар уларҙың атамаһын әйтеп, балта оҫтаһына кәрәкме, юҡмы икәнлекте билдәләйҙәр.

*«Бер - күп» уйыны.* Балаларға предметлы һүрәт күрһәтелә, улар предметты атап, уны күплектә әйтергә тейештәр: кирбес – кирбес-тәр; балта – балта-лар; сүкеш – сүкеш-тәр; йышҡы – йышҡы-лар; йорт – йорт-тар, кран – кран-дар; төҙөүсе – төҙөүсе-ләр; машина- машина-лар.

*«Өндөң урынын тап!» уйыны.* Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, уның атамаһын әйтергә һорай һәм «ҡ» өнөнөң һүҙҙең ниндәй урынында килеүен билдәләтә: ҡайсы, ҡояш, балыҡ, ҡуян, бысаҡ, ҡурай.

Шул уҡ күнегеү «к» өнө менән башҡарыла: кирбес, кран, күлдәк, кәзә, өйрәк.

Ҡоролма материалдар менән йорттар төҙөү. Балалар 3-4 төркөмгә бүленәләр. Һәр төркөм үҙҙәре теләгән йорттарҙы өҫтәлдә конструктор ярҙамында төҙөйҙәр. Аҙаҡ һәр төркөм нимә төҙөгәнен, ниндәй материалдар ярҙамында (кирбес, таш) төҙөүҙәрен һөйләйҙәр.

*«Сағыштыр!» уйыны* – ҡала йорто һәм ауыл өйөн сағыштырыу:

Ҡала йорто – бейек, ҙур, кирбестән эшләнгән.

Ауыл өйө – тәпәш, бәләкәй, ағастан эшләнгән.

«Кирбес» һүҙе менән һөйләм төҙ!

«Кирбес» һүҙендә беренсе өн ниндәй?

«Ҡуян» һүҙендә беренсе өн ниндәй?

Дәресте йомғаҡлау:

**35 – се дәрес**

**Тема:** "Ҡышҡы уйындар"

**Маҡсат:** *а) яңы һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм мәғәнәһен үҙләштереү: йыл миҙгеле, тышта рәхәт, күңелле, мамыҡ шарҙар.*

б) телмәр органдарын үҫтереүгә һәм нығытыуға һәм дөрөҫ тын алыуға бағышланған артикуляция күнекмәләре; «ш, с» өндәрен дөрөҫ әйтеүҙе нығытыу;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *саңғы шыуалар, сана (тау) шыуа, ҡар бәрә, бәрешә, хоккей уйнайҙар,*

г) балаларҙың иғтибарлылығын, аң-зиһенен, хәтерен үҫтереү күнекмәләре башҡартыу;

д) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, дуҫлыҡ, бер-береңә ихтирам тойғолары тәрбиәләү.

**Йыһаз:** «Ҡышҡы уйындар» һүрәте, йомарланған мамыҡ туптар, «А» хәрефе, «Тирмәкәй» әкиәте персонаждары һүрәттәре, мольберт.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе мольбертҡа «Ҡышҡы уйындар» темаһына сюжетлы һүрәт элә һәм балаларға һорау бирә:

- Был ҡайһы йыл миҙгеле? (ҡыш).
- Был нимә? (ҡар). Ҡар ниндәй? (аҡ, һыуыҡ, йомшаҡ)
- Балалар нимә эшләй? (уйнай). Улар нисек уйнайҙар?
- Улар тауҙан сана шыуа. Был сана. Был тау (балалар ҡабатлайҙар).
- Балалар нисек кейенгән?
- Балалар йылы кейенгән. Был малай. Ул башлыҡ, тун, быйма кейгән.
- Ҡулына нимә кейгән? Бейәләй кейгән. Ул тау өйә.
- Ҡыҙҙар нимә эшләй? Ҡыҙҙар сана шыуа.
- Улар нисек кейенгән? - Өҫтәренә нимә кейгәндәр?
- Был малайҙар нимә уйнайҙар? (хоккей уйнайҙар).
- Улар аяҡтарына нимә кейгәндәр? (коньки).
- Был балалар саңғы шыуалар. Ә был балалар ҡар бәрешә.

*«Ҡар бәрешеү» уйыны.* Балаларға мамыҡ шарҙар өләшеп бирелә һәм балалар күмәкләп «ҡар» бәрешәләр.

Тәрбиәсе:

- Ултырығыҙ, бына беҙ ҙә уйнап алдыҡ. Яңы һүҙҙәрҙе ҡабатлап алайыҡ әле: *Урамда ҡыш. Ҡар яуа, һыуыҡ. Балалар урамда уйнай. Улар йылы кейенгән. Малайҙар хоккей уйнай, саңғы шыуа. Ҡыҙҙар сана шыуа. Балалар ҡар бәрешә. Тышта рәхәт.*

Дөрөҫ тын алыу һәм «ш, с» өндәрен әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәреү: артикуляция гимнастикаһы - «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны.

| | |
|---|---|
| Са-са-са – сана | Ша-ша-ша - Шамил |
| Са-са-са – саңғы | Ша-ша-ша - шаяра |
| Са-са-са – Самат | Ша-ша-ша – шаян |
| Сы-сы-сы – сысҡан | Шы-шы-шы - шыуа |
| Сы-сы-сы – сыбар | Шы-шы-шы - шыршы |
| Сы-сы-сы – сыйырсыҡ | Шы-шы-шы – шырпы |

*Тиҙәйткестәр:*

*Саңғыһын сисеп Самат самауырҙан сынаяҡҡа сәй ҡоя.*

*Шыршы ҡаршыһында шыма һырғалаҡтан шуҡ малайҙар тау шыуа.*

Тәрбиәсе: -Ҡыш, Яңы йыл, Ҡыш бабай тураһында шиғырҙарҙы иҫкә төшөрәйек (кемдәр һөйләй ала, шулар һөйләй. Тәрбиәсе ярҙам итә).

Тәрбиәсе: - Балалар, мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, уларҙа нимә төшөрөлгән, шуның атамаһын әйтеп, «А» өнөнөң урынын билдәләйбеҙ: *ат, ҡар, сана.*

Кем өҫтәлдән «А» хәрефен табып күрһәтә?

*«Яңылышма!» уйыны.* Балаларға һүҙҙә «А» өнө булһа, сәпәкәй итергә ҡушыла: *тау, айыу, бүре, кәзә, бармаҡ, атай, саңғы, ҡуян, сана, салбар* (балалар ҡыйынһынһа, тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә).

*«Нимә артыҡ?» уйынын уйнау:*

Айыу, кәзә, бүре, төлкө;

Сана, саңғы, коньки, салбар.

- «Тирмәкәй» әкиәтендә ниндәй хайуандар тураһында уҡыныҡ, һанап сығығыҙ (өҫтәлдән һүрәттәрен табып күрһәтәләр).

*Дәресте йомғаҡлау:*

Тәрбиәсе: бер-беребеҙгә иҫәнлек-һаулыҡ, бәхет-шатлыҡ теләп хушлашайыҡ! Һау булығыҙ, балалар!

**36 – сы дәрес**

**Тема:** "Күҙҙәр, ҡолаҡтар"

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **йылан, мөгөҙ, мыйыҡ;** ***үтелгәндәрен нығытыу;***

б) телмәр органдарын үҫтереүгә һәм нығытыуға, фонематик ишетеү һәләтен формалаштырыуға, «с», «ҫ» өндәренең айырмаһын билдәләй белеүгә күнекмәләр үткәреү;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *ҡайҙа кәзәнең (һыйырҙың, ҡаҙҙың, бесәйҙең, ҡарғаның, йыландың) күҙе? Уларҙың күҙе нисәү? Күҙҙәр йәнлектәргә нимә өсөн кәрәк?* Эйәлек заты ялғауын ҡуллана белеүҙе нығытыу. Һүҙҙәрҙе берлектә һәм күплектә ҡуя белеүҙе нығытыу.

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, өйрәнергә теләк уятыу.

**Йыһаз:** кәзә, һыйыр, ҡаҙ, бесәй, ҡарға, йылан, эт һүрәттәре, фланелеграф йәки ковролин.

***Дәрес барышы:***

Балаларға тәрбиәсе йәнлектәр төшкән һүрәттәрҙе күрһәтә һәм уларҙың атамаһын әйтеп, улар кеүек тауыш сығарырға тәҡдим итә: кәзә – *бә-ә-ә, бә-ә-ә*, һыйыр – *мө-ө-ө, мө-ө-ө*, ҡаҙ – *ға-а, ға-а, ға-а,* бесәй – *мыяу-мыяу*, ҡарға – *ҡаррр, ҡарр*, йылан - *ҫҫҫ -ҫҫҫҫ* тип тауышлана.

Телмәр ағзаларының хәрәкәтсәнлегенә һәм һығылмалығына күнегеүҙәр үткәрелә: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк», «Ҡойма».

Ҡойма аҫтынан һыу аға: с-с-сссс

Ҡойма аҫтынан ыҫылдап йылан сыға: ҫ-ҫ-ҫҫҫҫ

Асыҡ ижектәр: ҫа-ҫа-ҫа - ныҡ баҫа

çә-çә-çә - икмәк кисә

çө-çө-çө - сәскәнең төçө

Ябыҡ ижектәр: аç-аç-аç – ныҡ итеп баç

әç-әç-әç - тәҙрәлә бәç

өç-өç-өç - сәскәләге төç

Тәрбиәсе һүрәттәрҙе яңынан күрһәтеп, һәр йәнлектең тән өлөштәрен күрһәтергә һорай:

-Ҡайҙа кәзәнең (һыйырҙың, ҡаҙҙың, бесәйҙең, ҡарғаның, йыландың) күҙе? Уларҙың күҙе нисәү? Күҙҙәр йәнлектәргә нимә өсөн кәрәк?

- Ҡайҙа кәзәнең (һыйырҙың, ҡаҙҙың, бесәйҙең, ҡарғаның, йыландың) ҡолағы? Уларҙың ҡолағы нисәү? Ҡолаҡтар йәнлектәргә нимә өсөн кәрәк?

- Нимәнең мөгөҙө бар? Кәзәгә, һыйырға мөгөҙ нимә өсөн кәрәк?

- Нимәнең суҡышы бар?

- Нимәнең мыйығы бар?

- Нимәнең мыйығы, суҡышы юҡ?

- Йылан нисек хәрәкәтләнә? Унының аяҡтары, ҡулдары бармы?

Тәрбиәсе балаларға ошо йәнлектәрҙең баштары силуэты төшкән ҡағыҙ биттәре таратып бирә һәм уларҙа баш өлөштәрен (күҙҙәр, ҡолаҡтар, танау, ауыҙ, мыйыҡ, мөгөҙ, суҡыш) төшөрөргә һорай.

Тәрбиәсе балаларҙың һүрәттәрен ковролинға теҙеп ҡуя һәм ҡунаҡҡа күп йәнлектәр килгәнен әйтә.

*«Бер - күп» уйыны.* Балаларға юғарылағы һүрәттәр күрһәтелә, уларҙың атамаһын әйтеп, һүҙҙе күплектә ҡуйырға тейештәр:

*кәзә – кәзәләр; һыйыр – һыйырҙар; ҡаҙ - ҡаҙҙар; бесәй – бесәйҙәр; ҡарға – ҡарғалар; йылан – йыландар.*

*«Нимә юҡ?»* уйыны. Тәрбиәсе таҡталағы һүрәттәргә күрһәтеп:

- Мин «Төн» - тип әйтһәм, һеҙ күҙҙәрегеҙҙе йомаһығыҙ. Шул ваҡытта тәрбиәсе бер һүрәтте йәшерә. Тәрбиәсе «Көн» - тип әйтһә - балалар

күҙҙәрен аса. «Нимә юҡ?» - тип һорай тәрбиәсе. Юҡ булған предметтың атамаһын балалар хор, аҙаҡ бер-ике бала айырым әйтәләр.

Тәрбиәсе: - Балалар, Ә. Зиннурова апайҙың *«Был - мин» тигән йырын йырлайыҡ* әле. Йырҙың һүҙҙәре буйынса тән өлөштәрен күрһәтәйек:

- Бына танауым, күҙем, башым, ҡулым, бармағым, аяғым (бер-нисә тапҡыр йырлап, һүҙҙәрҙең әйтелешен нығыталар).

*«Ниндәй өндән башлана?»* түбәндәге һүҙҙәрҙә беренсе өндө билдәләргә: танау, күҙ, баш, ҡул, бармаҡ, аяҡ.

Дәресте йомғаҡлау:

- Күҙҙәр ни өсөн кәрәк?

-Ҡолаҡтар ни өсөн кәрәк?

- Бесәйгә мыйыҡ ни өсөн кәрәк?

- Мөгөҙө менән һыйыр нимә эшләй?

**37 – се дәрес**

**Тема:** "Буратино – беҙҙең ҡунаҡ"

**Маҡсат:** *а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:* балта оҫтаһы, юнған, ырғый*; үтелгәндәрен нығытыу*;

б) балаларҙы *-мы, -ме, -мө* киҫәксәләрен дөрөҫ ҡулланырға, һүҙҙә беренсе өндө билдәләргә өйрәтеү; «Һ» өнөнөң символы (хәрефе) менән таныштырыу;

в) типик һөйләмдәрҙе өйрәтеү: *Буратино атлай-мы (йоҡлай-мы, ашай – мы, һ.б.?)*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү, башҡортса һөйләшергә өйрәнергә теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ Буратино, «Һ» өнөнөң символы-хәрефе, өҫтәл һүрәте, хәрәкәтте аңлатҡан символдар йәки һүрәттәр, пластилин.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе йомаҡ әйтә һәм балаларҙан уны сисергә һорай:

*Дүрт кешегә бер эшләпә (өҫтәл).* Өҫтәлдең һүрәтен күрһәтә һәм уны кем эшләгәнен һорай. Борон заманда бер балта оҫтаһы шулай өҫтәл эшләп

арығас, үҙенә иптәшкә тип ағастан малай юнған. Бына ул (Буратиноның һүрәтен күрһәтә). Уның исеме нисек?

Буратино бик шаян малай булған. Тәрбиәсе хәрәкәтте һүрәтләгән символдар йәки һүрәттәр ярҙамында Буратино башҡарған эш-хәрәкәттәрҙе күрһәтә, ә балалар уларҙы башҡортса әйтәләр: *югерә, һикерә, ырғый, бейей, йырлай, йоҡлай, ашай, уйнай.*

Символдарҙы бутап күрһәтеп, -мы, -ме, -мө киҫәксәләрен ҡулланыуға күнегеү:

Буратино атлай-мы? Юҡ, ул ултыра.

Буратино йоҡлай-мы? Юҡ, ул ашай.

Буратино уйнай-мы? Юҡ, ул йоҡлай.

Буратино югерә-ме? Юҡ, ул рәсем төшөрә.

Тәрбиәсе: - Буратино уҡырға өйрәнә. Уға ярҙам итәйек. Ирендәрҙе, телдәрҙе уйнатып алайыҡ: «Йылмайыу», «Энә», «Сәғәт», «Бәүелсәк», «Аттар», «Ҡалаҡ», «Эйәкте туңдырыу», «Ҡул һыртын туңдырыу».

*«Ниндәй өн беренсе?»* - һүҙҙә беренсе өндө билдәләү: *баш, аяҡ, ҡул, танау, теш, күҙ, тел.*

*«Һ» өнөнөң символы* менән таныштырыу. Тәрбиәсе: - Балалар, был һүрәттә нимә төшөрөлгән. Һыйыр. Был һүҙҙә беренсе өн ниндәй? Ул нисек әйтелә? Ҡулдарҙы йылытайыҡ! (һо-һо-һо). Тәҙрә быялаһына өрәйек: һө-һө-һө.

«Һ» өнө бына ошолай яҙыла. Ул нимәгә оҡшаған, дөрөҫ – ултырғысҡа. Буратино менән бергәләп, *«һ» өнөнә һүҙҙәр* уйлап табайыҡ: *һөт, һыуыҡ бабай, һуған, һарыҡ, һаумы.*

*«Иғтибарлы бул!» уйыны.* «Һ» өнө булһа, балалар тора. Булмаһа – ҡул сабалар: *һыйыр, алма, һуған, кишер, һөт, ҡоймаҡ, һарыҡ, кәзә, себеш, һыу.*

Пластилиндан «Һ» өнөнөң символын әүәләйҙәр һәм был өнгә һүҙҙәр уйлап әйтәләр.

Буратиноға көсөк тураһындағы шиғырҙарҙы һөйләп ишеттерәләр.

Буратино, һиңә беҙҙең дәрес оҡшанымы?

«Һ» өнө нимәгә оҡшаған? *Һыу, һөт* һүҙҙәрендә «һ» өнө бармы? Ул өн һүҙҙең ҡайһы ерендә килә? *Дәресте йомғаҡлау.*

### 38– се дәрес

### Тема: "Айгөлдөң тыуған көнө"

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: аш бүлмәһе, аш, аша (-й, -йҙар, -йым), ашъяулыҡ, себен, бал ҡорто, бысраҡ ; үтелгәндәрен ныҒытыу;***

б) балаларҙы исемдең төбәү килеш ялғауҙарын дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү;

в) *з* һәм *ҙ* өндәренең айырмаһын ишетә, әйтә белергә өйрәтеү*;*

г) бәйләнешле телмәр үҫтереү, телгә ҡыҙыҡһыныу, өйрәнергә теләк уятыу.

**Йыһаз:** уйынсыҡ һауыт-һаба, себен менән бал ҡорто һүрәте, «Һ» һәм «А» хәрефтәре.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе: "Ҡояш сыҡты. Ҡурсаҡтар ҙа, бөжәктәр ҙә йоҡонан торҙо. Бына себен менән бал ҡорто ла (һүрәттәрен күрһәтеп) иртәнге физкультура күнекмәләрен эшләйҙәр. Себен: *ззз-ззз-ззз*, бал ҡорто: *ҙҙҙ-ҙҙҙ-ҙҙҙ* тип йырлай-йырлай, ҡулдарын алға, өҫкә, ситкә һуҙалар ҙа, шунан аҫҡа төшөрәләр", - ти. Балаларҙы торғоҙоп, уларҙан себен һәм бал ҡорто бызылдауын һәм улар эшләгән хәрәкәттәрҙе ҡабатлата (һ- ғ) тапҡыр.

Тәрбиәсе себен һәм бал ҡорто тураһында әңгәмә үткәрә. Бал ҡорто бал йыя, ул беҙгә ярҙам итә. Себен бысраҡ ерҙәрҙе ярата. Ул төрлө микробтарҙы йыйып, осоп йөрөп тарата. Шуға ла өйҙән себенде ҡыуырға кәрәк.

Тәрбиәсе: "Хәҙер ҡулдарҙы йыуабыҙ, ҡурсаҡтарҙы ла йыуындырабыҙ. Ҡунаҡҡа барабыҙ. Бөгөн Айгөлдөң тыуған көнө".

Уйын мөйөшөндә ҡурсаҡтарға өҫтәлдәр ҡуйылған, һауыт-һаба әҙерләнгән. Унда балаларҙы Айгөл ҡаршы ала. Бүләк бирәләр, тыуған көнө менән ҡотлайҙар.

Тәрбиәсе ҡурсаҡтарҙы өҫтәл артына ултырта һәм уларҙы һыйлар өсөн нимәләр эшләргә кәрәклеген балаларҙан һорай-һорай, өҫтәл йыйыуҙы күрһәтә:

- Өҫтәлгә нимә түшәйбеҙ? (ашъяулыҡ).

- Өҫтәлгә ниндәй һауыт-һаба ҡуябыҙ? (самауыр, сәйнүк, сынаяҡтар, ҡалаҡтар, тәрилкәләр).

- Өҫтәлгә ниндәй ашамлыҡтар ҡуябыҙ? (ҡоймаҡ, бәлеш, сәк-сәк, шәкәр, кәнфит, бал).

- Ҡурсаҡтар нимә ашай? - Ҡурсаҡтар нимә эсә?

Элек өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе ҡабатлап сығалар.

*«Нимә артыҡ?» уйыны:* сынаяҡ, самауыр, сәйнүк, сәк-сәк, тәрилкә, ҡалаҡ,

Бәлеш, икмәк, ҡоймаҡ, кәнфит, шәкәр, бал ҡорто, сәк-сәк.

*«Бер - күп» уйыны.* Тәрбиәсе әйткән һүҙҙәрҙе күплектә ҡуйып әйтеү: *сынаяҡ, самауыр, сәйнүк, сәк-сәк, тәрилкә, ҡалаҡ, бәлеш, икмәк, ҡоймаҡ, кәнфит, шәкәр, бал ҡорто, сәк-сәк.*

*«Аҡ ҡалас» уйыны.* Балалар түңәрәккә баҫалар. Йырҙың һүҙҙәренә тап килтереп хәрәкәттәр башҡарып, түңәрәк буйлап йөрөйҙәр. Уртала ҡурсаҡ Айгөл:

*Айгөлдөң тыуған көнөндә*

*Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас:*

*Бына шундай ул бейек,*

*Бына шундай ул тәпәш,*

*Бына шундай киңлектә,*

*Бына шундай тарлыҡта.*

*Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,*

*Теләгәнеңде һайлап ал.*

Ҡурсаҡ Айгөл кемде һайлай, шул бала түңәрәк уртаһына тора һәм уйын яңынан башлана:

*Булаттың тыуған көнөндә*

*Беҙ саҡырҙыҡ ҡунаҡтар.*

*Ҡунаҡтарҙың килеүенә*

*Беҙ бешерҙек ҡоймаҡтар.*

*Ҡоймаҡтарға ҡараһаң,*

*Бына шулай күпергән,*

*Бына шулай йәйелгән,*

*Бына шулай ҡыҫылған,*

*Ҡоймағыңды майлап ал*

*Теләгәнеңде һайлап ал.*

(уйынды «Йәйғор» хрестоматияһынан 86-сы биттән ҡара, 1-се китап).

Тәрбиәсе: - Был ниндәй өндөң символы-билдәһе. «Һ» өнө нимәгә оҡшаған? Бармаҡтар менән һауала уны яҙып ҡарайыҡ әле.

«Һ» өнө булған һүҙҙәрҙе уйлап табайыҡ әле!

*«Кемгә, нимәгә?» уйыны.* Төбәү килеш ялғауын ҡулланыуҙы нығытыу: бирәм кемгә? әсәйгә, атайға, балаға, Айгөлгә, ҡунаҡҡа. Һалам нимәгә? өҫтәлгә, һандыҡҡа, иҙәнгә, сумкаға, ҡулыма.

«А» - был хәреф нисек әйтелә, ул ниндәй өндөң символы-билдәһе? «А» өнө булған һүҙҙәр уйлайыҡ!

Дәресте йомғаҡлау.

**39 – сы дәрес**

**Тема:** "Беҙҙә ҡунаҡтар "

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *беҙ (-гә), өҫтәл (-дә), күңелле, ҡунаҡ (-тар), ҡоймаҡ (-тар), эҫе, болғайым – болғайым;* үтелгәндәрен нығытыу;

б) артикуляция күнекмәләре: «*ҫ*» өнөн дөрөҫ әйтергә өйрәтеү;

в) бәйләнешле телмәр үҫтереү, шиғыр ятларға өйрәтеү;

г) телде өйрәнеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу,теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡтар Айгөл менән Буратино, уйынсыҡ һауыт-һаба, 3-4 ҡурсаҡ.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе: *"Балалар, бөгөн беҙгә ҡунаҡтар килә. Ҡунаҡтарҙы һыйларға ҡоймаҡ бешерәйек",* - ти.

*"Ҡоймаҡ бешерәбеҙ" уйынын* уйната: бер ҡулдың усы өҫтөндә (һауытта) икенсе ҡулдың һуҡ бармағы менән болғау хәрәкәттәре яһап: *болғайым – болғайым* тип әйтергә. Тәрбиәсе тәүҙә хәрәкәт үтәлешен үҙе күрһәтә. Шунан устарын бер-береһенә шапылдатып һуғып - "ҡоймаҡ бешереп" - *беште – беште, үҙе эҫе-эҫе* тип һамаҡлайҙар. Уйын һ-ғ тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе балалар менән бергәләп өҫтәлгә һауыт-һаба ҡуя һәм эш барышында типик һөйләмдәрҙе ҡабатлата:

*Өҫтәлгә ашъяулыҡ йәйәбеҙ.*

*Өҫтәлгә самауыр, сынаяҡ (сәйнүк, тәрилкә) ҡуябыҙ.*

*Өҫтәлгә ҡалаҡтар һалабыҙ.*

*Тәрилкәлә ҡоймаҡтар.*

*Сынаяҡта сәй һ.б.*

Тәрбиәсе балаларға шиғыр өйрәтә:

*Айгөлдөң тыуған көнөнә*

*Беҙ саҡырҙыҡ ҡунаҡтар,*

*Ҡунаҡтарҙың килеүенә*

*Беҙ бешерҙек ҡоймаҡтар* (шиғыр күмәкләп, айырым-айырым ҡабатлатыла).

Ишек шаҡыйҙар. Ҡунаҡтар инә. Һаулыҡ һорашҡас, уларҙы өҫтәл артына ултырталар, балалар нимә эшләгәнлектәрен яҥынан ҡабатлап, әйтеп сығалар. Өйрәнелгән шиғырҙы ла һөйләп ишеттерәләр.

*«Аҡ ҡалас» уйыны.* Уйынды иҫкә төшөрөп, ҡабатлап ә-һ тапҡыр уйнап алалар.

Тәрбиәсе: - Был ниндәй өндөҥ символы-билдәһе. «Һ» өнө нимәгә оҡшаған? Бармаҡтар менән һауала уны яҙып ҡарайыҡ әле.

«Һ» өнө булған һүҙҙәрҙе уйлап табайыҡ әле!

*«Кемгә, нимәгә?» уйыны.* Төбәү килеш ялғауын ҡулланыуҙы нығытыу: бирәм кемгә? әсәйгә, атайға, балаға, Айгөлгә, ҡунаҡҡа. Һалам нимәгә? өҫтәлгә, һандыҡҡа, иҙәнгә, сумкаға, ҡулыма.

«А» - ниндәй өндөҥ символы-билдәһе? «А» өнө булған һүҙҙәр уйлайыҡ!

Тәрбиәсе: - Беҙҙеҥ ҡунаҡ Буратино күп нәмә эшләй белә, ҡарағыҙ әле! Буратино булып төрлө эш-хәрәкәттәрҙе күрһәтә, ә балалар уларҙы башҡортса әйтәләр: *югерә, һикерә, ырғый, бейей, йырлай, йоҡлай, ашай, уйнай.*

Тәрбиәсе юрамал эш-хәрәкәттәрҙе бутап әйтеп, -мы, -ме, -мө киҫәксәләрен дөрөҫ ҡулланыуҙы нығыта:

Буратино атлай-мы? Юҡ, ул ултыра.

Буратино йоҡлай-мы? Юҡ, ул ашай.

Буратино уйнай-мы? Юҡ, ул йоҡлай.

Буратино югерә-ме? Юҡ, ул рәсем төшөрә.

*«Нимә артыҡ?» уйыны:* предметлы һүрәттәр күрһәтелә, уларҙың атамаһын балалар әйтеп сығалар һәм нимә артыҡ икәнлеген билдәләйҙәр:

Самауыр, сәйнүк, сынаяҡ, тәрилкә, туп, ҡалаҡ.

Бәлеш, икмәк, сәк-сәк, кәнфит, ашъяулыҡ, бутҡа.

*Дәресте йомғаҡлау.*

**40 – сы дәрес**

**Тема:** "Беҙҙең Аҡбай "

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *эт (-ем), өрә, шаян, йомшаҡ, Аҡбай; Аҡтүш, һалбыр, ялбыр;* үтелгәндәрен нығытыу;

б) артикуляция күнекмәләре: *р һәм һ* өндәрен дөрөҫ әйтеүҙе нығытыу;

в) һорауҙарға аңлы рәүештә яуап бирә белергә өйрәтеү;

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк, уятыу.

**Йыһаз:** уйынсыҡ ике эт балаһы, төҙөлөш материалдары.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе ҙур йомшаҡ эт уйынсыҡты күрһәтеп, балаларҙан һорай: *Был нимә?*

Тәрбиәсе: *"Был-эт. Уның исеме Аҡбай",* - тип әйтә.

Аҡбай: *"Мин Аҡбай. Һинең исемең нисек?"* - тип танышып сыға. *"Мин өрә беләм: һау-һау-һау. Һеҙ минең һымаҡ өрә беләһегеҙме?* (балалар уның артынан ҡабатлай).

*Мин асыуланһам, «ррр-ррр-ррр» тип ырылдайым, ә һеҙ минең һымаҡ әйтә беләһегеҙме?* (балалар ҡабатлай). Матур итеп өрөр өсөн мин көн дә ошолай күнекмәләр эшләйем:

Ра-ра-ра – уррра, уррра

Ра-ра-ра – бына ул китеп бара

Ра-ра-ра – кем китеп бара?

Ра-ра-ра – йә, үҙең уйлап ҡара!

Тәрбиәсе: - Йә, балалар, танынығыҙмы? Кем китеп бара? Аҡбай китеп бара. Ул да беҙҙең кеүек өндәрҙе дөрөҫ әйтеү күнекмәләре башҡара. Бергәләп ҡабатлайыҡ әле: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк», «Ҡойма» күнегеүҙәре үткәрелә.

Аҡбай: - Беләһегеҙме, минең турала Рәғиҙә Янбулатова апай бик матур шиғыр яҙған, мин уны һеҙгә һөйләп ишеттерәм. Ул «Аҡбай дуҫ» тип атала:

*Ап-аҡ булғанға маъмай,*

*Атаным уны Аҡбай.*

*Минән бер аҙым ҡалмай,*

*Мине бәләнән һаҡлай.*

Тәрбиәсе: - Бик матур шиғыр. Ысынлап та тап Аҡбай тураһында икән. Ҡарағыҙ әле, балалар! Үҙе ап-аҡ төҫтә. Үҙе йомшаҡ, матур. Үҙе һәр саҡ өрә-өрә хужаһын һаҡлай. «Аҡбай» һүҙендә ике «а» өнө бар, табығыҙ әле, ул һүҙҙең ҡайһы ерендә килә?

Ишек туҡылдаталар. Ҡурсаҡ Айгөл инә, ул үҙенең эте Аҡтүште тотҡан. Айгөл һаулыҡ һораша һәм ҡунаҡҡа үҙенең этен алып килеүен әйтә. – Был минең этем. Уның исеме Аҡтүш. Ул ҡара төҫтә, ә түше аҡ. Шуға ла уны Аҡтүш тип атаныҡ.

Абдулхаҡ Игебаев ағай минең этем тураһында ла шиғыр яҙған, тыңлағыҙ әле. Шиғыр «Аҡтүш» тип атала:

*Аҡтүш исемле*

*Этем бар минең.*

*Һин уны күрһәң,*

*Ҡыҙығыр инең.*

*Үҙе бәләкәс,*

*Ҡолағы һалбыр.*

*Ә түше ап-аҡ,*

*Ҡойроғо ялбыр.*

Тәрбиәсе: Балалар, әйҙәгеҙ, көсөктәрҙе сағыштырып ҡарайыҡ! Улар ниндәй? (бәләкәй, йомшаҡ, матур). Ҡолаҡтары ниндәй? (һалбыр).

Ҡойроҡтары ниндәй? (ялбыр). Аҡбай ниндәй төҫтә? (аҡ), ә Аҡтүш? (ҡара), тик унының түше генә аҡ.

*«Нимә эшләй?» уйыны.* Тәрбиәсе көсөктәрҙе берәм-берәм алып, төрлө хәрәкәттәр эшләтә. Балалар уларҙың хәрәкәттәрен башҡортса әйтергә тейештәр *(һикерә, ырғый, ята, югерә, ялай, өрә, ҡойроғон болғай, өй һаҡлай, һ.б.)*

Төҙөлөш материалдарынан Аҡбай менән Аҡтүшкә өй эшләйҙәр. Эш барышында өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе ҡабатлап сығалар.

**41 – се дәрес**

**Тема:** "Эт хужаһын нисек тапҡан?"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *ҡурҡаҡ, ҡурҡҡан, арыҫлан, хужа, кеше, хеҙмәт итә;* үтелгәндәрен нығытыу;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән күнегеүҙәр үткәреү, *"б, ң, э"* өндәренең әйтелешен нығытыу, телмәр ағзаларының һығылмалылығын, хәрәкәтсәнлеген үҫтереү;

в) бәйләнешле телмәр үҫтереү: яңы типик һөйләмдәрҙе отоп алыу: *Мин хужа эҙләйем. Мине үҙеңә ал!*

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк, уятыу.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ бесәй балаһы, ҡурсаҡ Айгөл; эт менән бүре, эт менән айыу, эт менән арыҫлан, эт менән кеше һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе дөрөҫ әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә:

Артикуляция гимнастикаһы: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны.

Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр: «Кем алыҫыраҡ өрә?» уйыны – өҫтәлдәге мамыҡтарға «өф-өф» тип өрөү; «Ҡулдарҙы йылытайыҡ!» уйыны – ҡулдарҙы ыуалап, «һу-һу»тип өрөү;

Ҡурсаҡ Айгөл инә, ул үҙенең эте Аҡтүште тотҡан. Тәрбиәсе:

- Балалар, Аҡтүш тураһында кем шиғырҙы һөйләп ишеттерә?

(бер-ике бала һөйләй).

Тәрбиәсе: - Аҡбай, Аҡтүш – улар нимәләр? Һеҙ улар тураһында нимә беләһегеҙ? Беҙ бөгөн «Эт нисек хужа тапҡан?» тигән башҡорт халыҡ әкиәте менән танышабыҙ.

Борон-борон заманда бер эт булған. Ул үҙенә хужа эҙләгән (хозяина искал). Эт бүрене осратҡан:

- Һаумы, бүре! Мин хужа эҙләйем. Мине үҙеңә ал!

Эт бүре менән киткән. Айыуҙы күреп, бүре ҡурҡҡан: - Ҡасайыҡ, айыу килә! Ул беҙҙе ашар!

Эт бүренең ҡурҡаҡ икәнен белгәс, айыу янына барған. Эт:

- Һаумы, айыу! Мин хужа эҙләйем. Мине үҙеңә ал!

Эт айыу менән киткән. Арыҫланды күреп, айыу ҡурҡҡан:

- Ҡасайыҡ, арыҫлан килә! Ул беҙҙе ашар!

Эт айыуҙың ҡурҡаҡ икәнен белгәс, арыҫлан янына барған. Эт:

- Һаумы, арыҫлан! Мин хужа эҙләйем. Мине үҙеңә ал!

Эт арыҫлан менән киткән. Кешене күреп, арыҫлан ҡурҡҡан:

- Ҡасайыҡ, кеше килә! Ул беҙҙе үлтерер!

Эт арыҫландың ҡурҡаҡ икәнен белгәс, кеше янына барған. Эт:

- Һаумы, кеше! Мин хужа эҙләйем. Мине үҙеңә ал!

Шунан бирле эт кеше менән йәшәй һәм уға хеҙмәт итә.

Тәрбиәсе: - Балалар, әкиәт оҡшанымы? Эт кешегә нисек хеҙмәт итә, иҫкә төшөрәйек әле! (һүрәттәр ярҙамында һалдаттарға, күҙҙәре насар күргән кешеләргә ярҙам итеүен, өй һаҡлауын һ.б. аңлатыу).

*«Беҙ - дрессировщиктар» уйыны.* Теләк буйынса бер бала алға сыға, икенсеһе уға төрлө командалар бирә: *тор, ултыр, ят, һикер, эс, өр.*

Ошо уҡ уйынды тәрбиәсе ҡатмарландыра ала: уйынды алып барыусы бала эт башҡарған хәрәкәттәрҙе өнһөҙ күрһәтә, ә ултырған балалар

хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, һүҙ менән әйтеп баралар: *беҙ торабыҙ, беҙ ултырабыҙ, һ.б.*

*«Өндөң урынын тап!» уйыны.* Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, уның атамаһын әйтергә һорай һәм «а» өнөнөң һүҙҙең ниндәй урынында килеүен билдәләтә: *айыу, ат, Аҡбай, Аҡтүш.*

*«Нимә артынан нимә килә?»* - балаларға «Эт нисек хужа тапты?» әкиәте буйынса буталған рәүештә һүрәттәр бирелә: эт менән бүре, эт менән айыу, эт менән арыҫлан, эт менән кеше. Балаларға уларҙы әкиәттәге тәртип буйынса таҡтала теҙеп ҡуйып, әкиәттең эстәлеген һөйләргә тәҡдим ителә.

*«Нимә артыҡ?» уйыны.* Һүҙҙәр рәтенән артыҡ һүҙҙе табырға:

а) *арыҫлан, айыу, бүре, һыйыр;*

*б) кәзә, әтәс, тауыҡ, һарыҡ, төлкө, ат, быҙау.*

*«Ниндәй?»* - әкиәттәге хайуандарҙы һүрәтләп һүҙҙәр уйлау.

Дәресте йомғаҡлау:

Бөгөн ниндәй әкиәтте уҡыныҡ? Әкиәттә нимәләр тураһында белдек? Әкиәттә иң көслө, иң батыр кем булды? *Кеше* һүҙендә беренсе өн ниндәй? Әкиәттә һеҙгә нимә оҡшаны?

**42 – се дәрес**

**Тема:** "Ағайым – һалдат "

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **һалдат; ил сиктәре, донъяла, ҡыйыу, батыр, көслө, һәйкәл;** ***үтелгән һүҙҙәрҙе һәм типик һөйләмдәрҙе нығытыу;***

б) «*ҡ»* өнөнөң дөрөҫ әйтелешен нығытыу;

в) бәйләнешле телмәр үҫтереү; балаларҙың хәтерен, иғтибарлылығын, фекерләүен үҫтереү;

г) телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү.

**Йыһаз:** эт менән бүре, эт менән айыу, эт менән арыҫлан, эт менән кеше һүрәттәре, һалдат һүрәте, А. Матросовтың һәйкәле һүрәте,

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләрен үткәрә.

*«Нимә артынан нимә килә?»* - балаларға «Эт нисек хужа тапты?» әкиәте буйынса буталған рәүештә һүрәттәр бирелә: эт менән бүре, эт менән айыу, эт менән арыҫлан, эт менән кеше. Балалар әкиәттең сюжеты буйынса һүрәттәрҙе таҡтала теҙеп, уның эстәлеген иҫкә төшөрәләр.

Тәрбиәсе:

- Балалар, донъяла иң көслө кем булды? (кеше). Дөрөҫ, кеше иң көслө. Ул донъяла иң аҡыллы һәм иң көслө. Кеше күп нәмәләр эшләй белә, ул күп һөнәр эйәһе. (Һалдат һүрәте күрһәтә):

- Был кем? (һалдат)

- Һалдат нимә эшләй? Балалар рус телендә яуап бирә алалар, тәрбиәсе улар фекерен башҡортсаға тәржемә итә (Ил сиктәрен дошмандан һаҡлай, армияла хеҙмәт итә).

- Һалдаттың ҡоралдары ниндәй була? (мылтыҡ, ҡылыс, автомат, граната, пистолет)

- Һалдат ниндәй булырға тейеш? (ҡыйыу, батыр, көслө)

Тәрбиәсе А. Матросовтың һәйкәле һүрәтен күрһәтеп, балалар мнеән уның кем булыуы, ни өсөн уға һәйкәл ҡуйылыуы, ул ниндәй батырлыҡ күрһәтеүе тураһында әңгәмә үткәрә. Һәйкәл Өфөлә ҡуйылған, сөнки А. Матросов һуғышҡа Өфөнән киткән. Ул башҡорт егете. Уның ысын исеме Мөхәмәтйәнов Шәкирйән Юныс улы. Герой. Башҡортостанда Учалы районында тыуған.

*«Минең кеүек ҡабатла!» уйыны.* Бер бала алға сыға, урындан балалар уға бер-бер артлы төрлө командалар бирәләр: *тор, ултыр, ят, һикер, эс, өр, танауыңды күрһәт, ҡулдарыңды өҫкә күтәр, аяҡтарыңды тыпырлат.*

Ошо уҡ уйынды тәрбиәсе ҡатмарландыра ала: уйынды алып барыусы бала урындарында ултырған балаларға төрлө хәрәкәттәрҙе өнһөҙ күрһәтә, ә ултырған балалар был хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, һүҙ менән әйтеп баралар: *беҙ торабыҙ, беҙ ултырабыҙ, һ.б.*

*«Өндөң урынын тап!» уйыны.* Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, уларҙың атамаһын әйтергә һорай һәм «һ» өнөнөң һүҙҙең ниндәй урынында килеүен билдәләтә: *һалдат, һарыҡ, һәйкәл, һуған, һыйыр.*

*«Нимә артыҡ?» уйыны.* Һүҙҙәр рәтенән артыҡ һүҙҙе табырға:

а) *мылтыҡ, ҡылыс, автомат, граната, айыу;*

*б) кәзә, тауыҡ, һарыҡ, ат, быҙау.*

*в) тәрилкә, кәстрүл, ҡалаҡ, сәйнүк, ҡоймаҡ, сынаяҡ.*

***«Ниндәй?»** уйыны.* Тәрбиәсе һүрәттәр күрһәтә, ундағы предметтарҙы һүрәтләп балаларҙан һүҙҙәр уйлата:

а) айыу – уҫал, көслө, ҙур, бал ярата;

б) бесәй – йомшаҡ, бәләкәй, матур;

в) һуған – әсе, түңәрәк, бәләкәй;

г) һалдат – батыр, ҡыйыу, көслө.

***«Нисә өлөштән тора?» уйыны.*** Тәрбиәсе һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлергә тәҡдим итә. Тәүҙә үҙе балаларҙан ҡул һырттарын эйәк аҫтына ҡуйҙыртып, «алма» һүҙен ижектәргә бүлеп күрһәтә, аҙаҡ – бергәләп бирелгән һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүләләр: *кәзә, быҙау, һәйкәл, һалдат, мылтыҡ.*

*Кеше* һүҙендә беренсе өн ниндәй? *Кеше* һүҙе нисә өлөштән тора? Кем был һүҙҙе өлөштәргә бүлеп күрһәтә?

*Дәресте йомғаҡлау:* Бөгөн нимәләр тураһында белдек? Ниндәй кеше һалдат була ала?

**43 – сө дәрес**

**Тема:** "Беҙ – ил һаҡсылары"

*Маҡсат:* ***а) үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡабатлау;***

б) артикуляция күнекмәләрен башҡарыу: *«ҫ»* өнөнөң дөрөҫ әйтелешен нығытыу;

в) «Әйе - юҡ!» һүҙҙәрен һәм *-мы, -мо, -мө* киҫәксәләрен дөрөҫ ҡуллана белеүҙе нығытыу;

г) балаларҙы үҙенең уй-фекерен үҙаллы әйтә белергә өйрәтеү, хәтерҙе, иғтибарлылыҡты үҫтереү.

**Йыһаз:** хәрби кейемдәге *һалдат, матрос, осоусы* һүрәттәре; катер, корабль, һыу аҫты кәмәһе, самолет, ракета, вертолет, машина, танк, бронетранспортер һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балаларға хәрби кейемдәге *һалдат, матрос, осоусы* һүрәттәрен күрһәтеп, уларҙың ниндәй һөнәр эйәләре икәнлеге тураһында әңгәмә үткәрә: - *Һалдат, матрос, осоусы* - улар ил һаҡсылары. *Һалдат* ил сиктәрен ерҙә, *матрос* – диңгеҙҙә, *осоусы* – һауала һаҡлай.

Тәрбиәсе: - Һалдат нимәне йөрөтә? (машина, танк, бронетранспортер).

- Матрос нимәне йөрөтә? (катер, корабль, һыу аҫты кәмәһе).

- Осоусы нимәлә оса? (самолет, ракета, вертолет).

Тимәк, балалар, ил һаҡсылары беҙҙе ер, һауа, һыу киңлектәрендә һаҡлайҙар. Улар ниндәй булалар? (батыр, ҡыйыу, көслө, етеҙ).

*«Әйе - юҡ!» уйыны.* Тәрбиәсе һорауҙарына балалар йә «әйе», йә «юҡ» тип әйтеп, тулы яуап бирәләр:

Самолетты кем йөрөтә? Матросмы? (Юҡ, самолетты летчик йөрөтә).

Самолетты кем йөрөтә? Һалдатмы? (Юҡ, самолетты летчик йөрөтә).

Самолетты кем йөрөтә? Летчикмы? (Әйе, самолетты летчик йөрөтә).

Кораблды кем йөрөтә? Летчикмы? (Юҡ, кораблды матрос йөрөтә).

Самолетты кем йөрөтә? Һалдатмы? (Юҡ, самолетты летчик йөрөтә).

Самолетты кем йөрөтә? Летчикмы? (Әйе, самолетты летчик йөрөтә).

Танкты кем йөрөтә? Летчикмы? (Юҡ, танкты һалдат-танкист йөрөтә).

Танкты кем йөрөтә? Матросмы? (Юҡ, танкты һалдат-танкист йөрөтә).

Танкты кем йөрөтә? Танкистмы? (Әйе, танкты һалдат-танкист йөрөтә).

*«Өндөң урынын тап!» уйыны.* Тәрбиәсе *һалдат, матрос, осоусы* һүрәттәрен күрһәтә, уларҙың атамаһын әйтергә һорай һәм һүҙҙең башында ниндәй өн килеүен билдәләтә.

*«Нимә артыҡ?» уйыны.* Һүҙҙәр рәтенән артыҡ һүҙҙе табырға:

а) *мылтыҡ, ҡылыс, автомат, граната, айыу;*

*б) летчик, матрос, осоусы, капитан, табип.*

*в) танк, корабль, ракета, комбайн.*

*«Нисә өлөштән тора?» уйыны.* Тәрбиәсе һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлергә тәҡдим итә: һалдат, матрос, самолет, танк, һәйкәл.

*«Кем нимәне йөрөтә?»* - *һалдат, матрос, осоусы* һүрәттәре күрһәтелә һәм балаларға кемдең нимәне йөрөтөүен әйтергә тәҡдим ителә:

Һалдат танкты йөрөтә.

Матрос кораблде йөрөтә.

Осоусы самолетты йөрөтә.

Дәресте йомғаҡлау:

- Беҙ бөгөн нимәләр тураһында һөйләштек?

- Ил сиктәрен кемдәр һаҡлай?

- Һалдаттар ниндәй була?

- Матростар ниндәй була?

- Осоусылар ниндәй була?

- Ҙур үҫкәс, армияла кем булып хеҙмәт итәр инегеҙ?

**44 – се дәрес**

**Тема:** "Әсәйҙәр байрамына әҙерләнәбеҙ "

*Маҡсат:* ***а) үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡабатлау;***

б) артикуляция күнекмәләрен башҡарыу; һүҙҙә өндөң урынын билдәләй һәм һүҙҙе ижектәргә бүлә белергә өйрәтеүҙе нығытыу;

в) терәк һүрәттәр ярҙамында хикәйә төҙөргә өйрәтеү, «Әсәйҙәр байрамы» тигән шиғырҙы ятларға өйрәтеү;

г) балаларҙы үҙенең уй-фекерен үҙаллы әйтә белергә өйрәтеү, хәтерҙе, иғтибарлылыҡты үҫтереү.

**Йыһаз:** өйрәнелгән уйынсыҡ йәнлектәр, йә уларҙың һүрәттәре, ковролин, хикәйә төҙөү өсөн терәк һүрәттәр.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе ковролинға йә фланелеграфҡа *тауыҡ себеше, көсөк, быҙау, кәзә бәрәсе, ҡолонсаҡ* һүрәттәрен элә һәм балаларҙан уларҙың атамаларын әйттерә.

Был - себеш (көсөк, быҙау, бәрәс, ҡолонсаҡ).

Тәрбиәсе балаларға өҫтәлдән был йәнлектәрҙең әсәйҙәрен табып, улар эргәһенә ҡуйырға һорай. Балалар һүрәтте ҡуйып: - «Был тауыҡ. Ул себештең әсәйе», тип әйтә.

Тәрбиәсе: - Бөтә кешеләрҙең дә, хайуандарҙың да әсәләре бар. Әсәйҙәр үҙ балаларын бик яраталар, төрлө һөнәргә өйрәтәләр. Беҙҙең әсәйҙәр беҙгә тәмле аштар бешерә, матур кейемдәр, уйынсыҡтар һатып алалар, беҙҙең тәртипле, аҡыллы, ҙур булып үҫеүебеҙҙе теләйҙәр.

Тиҙҙән әсәйҙәр байрамы. Байрамға беҙ бүләктәр әҙерләйбеҙ. Бөгөн Ғариф Ғүмәр ағай яҙған «Әсәйҙәр байрамы» тигән шиғырҙы ятларға өйрәнәбеҙ:

*Әсәйҙәрҙең ҙур байрамы –*

*Һигеҙенсе март бөгөн.*

*Байрам булғас, бигерәк йәмле,*

*Барыбыҙ ҙа шат бөгөн.*

*Йырҙар йырлап, бейей-бейей*

*Түңәрәкте урайбыҙ,*

*Әсәйҙәрҙе яратабыҙ,*

*Уларҙы беҙ ҡотлайбыҙ.*

("Йәйғор" хрестоматияһы, 1-се китап, 105-се бит).

Шиғырҙы тәүҙә тәрбиәсе үҙе тасуири итеп һөйләй, балалар өсөн таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлата һәм балалар бергәләп һ-ғ тапҡыр хор менән ҡабатлайҙар. Аҙаҡ – бер нисә бала айырым һөйләп ишеттерә.

*«Ниндәй өн беренсе?» уйыны.* Тәрбиәсе һүҙҙәр әйтә һәм һүҙҙең башында ниндәй өн килеүен билдәләтә: *әсәй, атай, өләсәй, байрам, шиғыр.*

*«Һүҙ нисә өлөштән тора?» уйыны.* Тәрбиәсе балаларҙан ҡул һырттарын эйәк аҫтына ҡуйҙыртып, һүҙҙе ижектәргә бүлергә тәҡдим итә: *.байрам, бөгөн, балалар, беҙ, ҡар, һыуыҡ, малай, ҡыҙ.*

*«Нимә артыҡ?» уйыны.* Һүҙҙәр рәтенән артыҡ һүҙҙе табырға:

*а) бүре, төлкө, кәзә, айыу;*

*б) бәрәс, себеш,ҡолосаҡ, көсөк, ат.*

*в) тәрилкә, бәлеш, сәк-сәк, ҡоймаҡ, һурпа.*

*«Хикәйә төҙө!»* - тәрбиәсе әсәйҙәр байрамына бағышланған терәк (опорные) һүрәттәр күрһәтә һәм бәләкәй генә хикәйә төҙөргә тәҡдим итә:

а) Календарь битендә 8 һаны һәм сәскәләр төшкән. (Тиҙҙән 8-се март – әсәйҙәр байрамы);

б) Малай кеше шиғыр һөйләй (уға исем бирәләр, ул шиғыр һөйләй, ниндәй шиғыр һөйләй – уны атайҙар);

в) Бер төркөм балалар бейейҙәр (беҙ бейеп күрһәттек)

г) Сәскәләр гөлләмәһе, төҫлө пластилиндан, һ.б. эшләнгән төрлө әйберҙәр һүрәте (Беҙ әсәйҙәргә бүләктәр әҙерләнек).

**Дәресте йомғаҡлау:**

- Беҙ ниндәй шиғыр өйрәндек? Ул кем тураһында?

- Байрамға беҙ нимәләр әҙерләйбеҙ?

- Кем үҙенең әсәйе тураһында бәләкәй генә хикәйә төҙөп һөйләй?

## 45 – се дәрес

Тема: "Бүләктәр һайлайбыҙ"

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **тиҙҙән, ҡотлайым, һөйөклө, гөлләмә;** ***үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;***

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *р, ы, и* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы башҡорт кейемдәре менән таныштырыу ;

г) үҙ-ара аралашырға теләк уятыу.

**Йыһаз:** «Әсәйҙәр байрамы» сюжетлы һүрәте; күк, һары, ҡыҙыл, алһыу төҫтәге сәскәләр; шул уҡ төҫтәге фломастерҙар, сәскәләр гөлләмәһе; һәр балаға сәскә силуэты төшөрөлгән ҡағыҙ бите, түңәрәктәр, икешәр япраҡ, елем һәм бумала.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе дәресте башлап, тиҙҙән байрам буласағын әйтә. Балаларҙан ул ниндәй байрам икәнлеген белешә. «Әсәйҙәр байрамы» сюжетлы һүрәтен элеп, әңгәмә үткәрә: тиҙҙән 8-март – әсәйҙәр байрамы була. Беҙ әсәйҙәргә, өләсәйҙәргә, апайҙарға, һеңлеләргә бүләктәр әҙерләрбеҙ. Бөгөн бик матур шиғыр өйрәнербеҙ. Уны Айһылыу Йәғәфәрова апай яҙған, ул «Гөләм» тип атала:

*Әсәйем сәскә ярата,*
*Мин беләм.*
*Тамсы гөлдәр үҫтерәм мин,*
*Һыу һибәм.*
*8-се март көнөндә*
*Әсәйемә бүләк иттем*
*Гөләмдө.*
*Шатлыҡ балҡый әсәйемдең*
*Йөҙөндә:*
*- Ҙур булып үҫсе, балам,*
*Үҙең дә.*

Тәрбиәсе шиғыр эстәлеге буйынса әңгәмә үткәрә, шиғырҙың мәғәнәһенә төшөнөргә ярҙам итә. Шиғырҙы 4-5 тапҡыр ҡабатлап, яттан һөйләргә өйрәнәләр.

Тәрбиәсе балаларға байрамға сәскәләр һүрәтен төшөрәсәктәрен әйтә. *Күк, һары, ҡыҙыл, алһыу* төҫтәге сәскәләрҙе күрһәтеп, уларҙың төҫтәрен әйтергә һәм айырырға өйрәнәләр.

*"Иғтибарлы бул!" уйыны.* Тәрбиәсе сәскәләрҙе күрһәтеп, улар ниндәй төҫтә икәнлеген әйтергә һорай. Балалар алдарында ятҡан фломастерҙар араһынан шул уҡ төҫтө табып, алып күрһәтәләр һәм һәр сәскәне ниндәй фломастер менән буяғандар икәнлеген әйтеп, төҫтәрҙе асыҡлап, уларҙың әйтелешен нығыталар һәм өҫтәл янына сығып: «Был *күк (һары, ҡыҙыл, алһыу) сәскә»,* - тип әйтәләр.

*«Нимә артыҡ?» - себеш, тауыҡ, әтәс, эт, төлкө, бесәй;*

*Туп, ҡурсаҡ, дөңгөр, ҡалаҡ, машина.*

Айгөл инә, уның ҡулында сәскәләр гөлләмәһе (букет). Үҙенең тәрбиәсегә сәскәләр алып килеүен әйтә. Айгөл балаларға: "Һеҙ сәскәләр яратаһығыҙмы, мин яратам. Был ниндәй сәскә? (ҡыҙыл, күк, һары, алһыу).

Тәрбиәсе: "Беҙ хәҙер әсәйҙәргә бүләк әҙерләйбеҙ – йәбештереп, сәскәләр эшләйбеҙ". Һәр балаға сәскәнең силуэты төшөрөлгән ҡағыҙ бите, түңәрәктәр, икешәр япраҡ, елем һәм бумала тарата. Эш барышында тәрбиәсе түбәндәге һөйләмдәрҙе балалар менән ҡабатлай: *Тиҙҙән әсәйҙәр байрамы. Мин әсәйемде ҡотлайым. Мин уға сәскә бүләк итәм. Сәскә матур, ҡыҙыл төҫтә. Әсәйем шатлана.*

Дәресте йомғаҡлау: - Тиҙҙән ниндәй байрам була? - Сәскәләрҙе кемгә бүләк итәбеҙ? - Сәскәләр ниндәй? - Шиғырҙы кем һөйләп ишеттерә?

**46 – сы дәрес**

**Тема:** "Йыл миҙгелдәре "

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:* яҙ, ҡыш, көҙ, йәй, келәм, болот, ямғыр; *үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;**

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ә, ө, ф* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) йомаҡтар сисергә, тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе билдәләй белергә өйрәтеү;

г) балаларҙың иғтибарын, хәтерен үҫтереү, башҡортса үҙ-ара һөйләшергә ынтылыш уятыу.

**Йыһаз:** ковролин; *ҡыш, яҙ, йәй, көҙ* миҙгелдәрен һүрәтләгән сюжетлы һүрәттәр, һәр балаға ҡағыҙ битендә төшөрөлгән ағас һүрәте, төҫлө ҡәләмдәр.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм уларҙы бүлмә уртаһына ҡулға-ҡул тотоноп, бәләкәй түңәрәк яһап, торорға саҡыра. Тәрбиәсе: "Был – һабын ҡыуыҡы, беҙ хәҙер уны өрөп тултырабыҙ", - ти.

Балалар бергә "Өфф-ф" тип өрә-өрә, яй ғына артҡа табан сигеп, түңәрәкте ҙурайталар. Шул рәүешле ҡул суҡтары айырылғансы баралар һәм ҡулдар ысҡынғас, "Пух-х-х" тип ҡыуыҡты (шарҙы) шартлаталар (3-4 тапҡыр). Тағы ла дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр һәм артикуляция гимнастикаһы үткәрелә – ҡулдағы мамыҡтарҙы өрөп төшөрөү, ҡул суҡтарын өрөп йылытыу, һ.б.; «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны.

Тәрбиәсе ковролинға «Ҡыш» миҙгелен һүрәтләгән сюжетлы һүрәт элә һәм балалар менән әңгәмә үткәрә: - *Ҡыш көнө. Ҡар яуа. Балалар Ҡар бабай эшләйҙәр. Улар сана, саңғы шыуалар.*

Тәрбиәсе балаларға күҙҙәрен йоморға ҡуша, шул ваҡытта һүрәтте яҙ миҙгеленә арналған икенсе һүрәт менән алмаштыра:

- Мин бөгөн мөғжизәләр эшләүсе апай. Хәҙер ниндәй һүрәт күрәбеҙ? *Яҙ. Ҡар ирей. Үләндәр сыға. Ағастар япраҡ яра.*

Балалар тағы ла күҙҙәрен йоморға ҡуша, шул ваҡытта һүрәт йәй миҙгеленә арналған икенсе һүрәт менән алмаштырыла:

*Йәй. Ҡояш ҡыҙҙыра. Бөтә ерҙә сәскәләр үҫә. Балалар һыу инәләр.*

Балалар тағы ла күҙҙәрен йоморға ҡуша, шул ваҡытта һүрәт йәй миҙгеленә арналған икенсе һүрәт менән алмаштырыла:

*Көҙ. Япраҡтар ҡойола. Ямғыр яуа. Беҙ йәшелсә йыябыҙ.*

Тәрбиәсе йомаҡтар әйтеп, йыл миҙгелдәрен аңлатҡан һүҙҙәрҙе ныҒыта:

*а) Ап-аҡ юрған таптым,*

*Ер өҫтөнә яптым. (ҡыш)*

*Аҡ бабай, аҡ бабай,*

*Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай! (ҡыш)*

*б) Ҡарҙар ирей, һыу таша,*

*Талдар бөрөһөн аса (яҙ).*

*в) Сыға болоттар,*

*Яуа ямғырҙар,*

*Үҫә игендәр,*

*Йәмләнә ҡырҙар. М. Ғафури. (йәй)*

*г) Көтөп алғас һалҡын көҙҙө*

*Күл өҫтөнә ятты көҙгө (боҙ).*

*Аяҡ аҫты – төҫлө япраҡ,*

*Йомшаҡтан атлап киләм.*

*Шул япраҡтан өләсәйем,*

*Әйтерһең, һуҡҡан келәм. Нияз Сәлимов.(көҙ)*

*«Ниндәй өн беренсе?» уйыны.* Тәрбиәсе һүҙҙәр әйтә һәм һүҙҙең башында ниндәй өн килеүен билдәләтә: *яҙ, ҡыш, көҙ, йәй.*

*«Һүҙ нисә өлөштән тора?» уйыны.* Тәрбиәсе балаларҙан ҡул һырттарын эйәк аҫтына ҡуйҙыртып, һүҙҙе ижектәргә бүлергә тәҡдим итә: *япраҡ, көҙгө. келәм, болот, ямғыр.*

*«Нимә артынан нимә килә?» уйыны.* Һүрәттәр араһынан ниндәй миҙгел артынан ниндәйе килеүен билдәләтеү. Тәүҙә *яҙ* миҙгеленә тәрбиәсе йомаҡ йәки шиғыр әйтеп билдәләтә.

*«Йыл миҙгелдәрен һүрәтлә!»* Тәрбиәсе балаларға дүрт өлөшкә бүленгән һәм һәр өлөштә ағас силуэты төшөрөлгән ҡағыҙ биттәре таратып бирә:

- Балалар, беҙ бөгөн йыл миҙгелдәре тураһында һөйләштек. Ҡағыҙ битендәге ағас ҡышын, йәйен, яҙын, көҙөн ниндәй була икән, шуны төҫлө ҡәләмдәр менән буяп күрһәтегеҙ. Эште өйҙә тамамларға мөмкин.

Дәресте йомғаҡлау.

**47 – се дәрес**

**Тема:** "Яҙ килә. Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ, сыҡ!"

*Маҡсат: а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:* бысраҡ, ҡауын, мышы; *үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ҙ, о, с* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) киҫмә «ҙ» хәрефе менән таныштырыу;

г) үҙ-ара аралашырға теләк уятыу; һамаҡты ятлап, иҫтә ҡалдырыу.

**Йыһаз:** «Яҙ килде» темаһына сюжетлы һүрәт, өйрәнелгән йорт һәм ҡыр хайуандары һүрәттәре, «Ҙ» өнөнөң символы-билдәһе,

**Дәрес барышы**

Тәрбиәсе «Яҙ килде» темаһына сюжетлы һүрәтте күрһәтеп, әңгәмә үткәрә:

- Был ниндәй ваҡыт? (яҙ)

- Нисек белдек, яҙ икәнлеген? (ҡар ирей, һыуҙар аға, ҡоштар ҡайтҡан)

- Ҡар ниндәй? (ҡар бысраҡ)

- Ҡар иреп нимәгә әйләнә? (һыуға)

- Ҡар ни өсөн ирей? (Ҡояш ҡыҙҙыра, ҡарҙы иретә)

Тәрбиәсе: -Балалар, элек башҡорттар яҙҙы һағынып, ҡояшты саҡырғандар, тиҙерәк ҡар иреүен һәм йәшел үлән сығыуын теләгәндәр. Улар ҡояшты саҡырып, ошондай һамаҡ һөйләгәндәр:

*Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,*

*Һыуыҡ бабай, кит, кит!*

*Көндәр йылынып китһен*

*Һәм ҡарҙар иреп бөтһөн!*

Балалар менән бергәләп һамаҡты өйрәнәләр.

Тәрбиәсе:

- Ҡояш ниндәй? (һары, түңәрәк, яҡты, йылы)

- Ул нимәгә оҡшаған? (ҡоймаҡҡа, ҡауынға, тупҡа, тәрилкәгә һ. б.)

- Ҡояш нимә эшләй? (йылыта, яҡтырта, ҡыҙҙыра)

Тәрбиәсе балаларға: «Яҙ килде. Ҡояш йылыта, йәшел үләндәр сыға, ҡоштар йылы яҡтан ҡайта, йәнлектәр шатлана», - тип һөйләмдәр төҙөп әйтергә өйрәтә.

*"Беҙгә кем ҡунаҡҡа килде?" уйыны.* Тәрбиәсе хайуандарҙың һүрәттәрен күрһәтә һәм уларҙың атамаһын балаларҙан әйттереп, ковролинға теҙә бара: *ҡуян, терпе, төлкө, бүре, айыу, мышы, ат, кәзә, әтәс, тауыҡ, ҡаҙ, бесәй.*

*«Көн – төн» уйыны.* «Көн» тип әйткәндә балалар таҡталағы һүрәттәрҙе иҫтә ҡалдырырға тырышалар. «Төн» тип әйткәндә, улар күҙҙәрен йомалар, тәрбиәсе ниндәйҙер бер һүрәтте алып йәшерә. балалар нимә юҡ булғанын әйтергә тейештәр.

*«Осто-осто» уйыны.* Балалар түңәрәккә торалар. Тәрбиәсе түңәрәк уртаһында. Ул оса торған һәм осмай торған әйберҙәрҙең исемен бутап әйтеп, һүҙҙе әйткән һайын «Осто-осто» тип ҡулын күтәрә. Балалар уның артынан тик осҡан предметтарҙы ғына әйткәндә ҡулдарын күтәрергә тейештәр. Берәй бала яңылышһа, тәрбиәсе уға: «Бар, улайһа һин дә ос!», - тип урынын бирә.

Осто, осто – ҡарғалар осто.
Осто, осто – турғайҙар осто.
Осто, осто – ҡурсаҡтар осто.
Осто, осто – тауыҡтар осто.
Осто, осто – ҡуяндар осто.
Осто, осто – һыйырҙар осто.
Осто, осто – себендәр осто.
Осто, осто – малайҙар осто.

Осто, осто – шыршылар осто.
Осто, осто – кәкүктәр осто. (Йәйғор, ү- се китап, ғғ – се бит).
(Уйын һ-ғ тапҡыр ҡабатлана).

«Ҙ» өнөнөң символы-билдәһе күрһәтелә. Ул нимәгә оҡшаған? Өс һанына, йәки «з» хәрефенә тип әйтеүҙәре мөмкин. «Ҙ» өнө нисек әйтелә? Тештәр араһында тел осон ҡыҫып, һауа сығарабыҙ: ҙҙҙ-ҙҙҙ. Был бал ҡортоноң йыры: ҙҙҙ-ҙҙҙ-ҙҙҙ.

«Ҙ» өнө булған һүҙҙәрҙе уйлап табыу: *ҙур, быҙау, беҙ, ҡаҙ.*

*«Кем нисек йырлай?» уйыны.* Себен нисек йырлай? Бал ҡорто нисек йырлай? Һабын ҡыуыҡтарына нисек өрәбеҙ? Ҡулдарҙы нисек йылытабыҙ? Ҡоймаҡтарҙы нисек бешерәбеҙ? Ҡаҙ нисек ыҫылдай? Ат нисек саба?

«Ҡаҙ» һүҙендә беренсе өн ниндәй? Икенсе өн ниндәй? Иң аҙаҡҡы өн ниндәй?

*«Иғтибарлы бул!» уйыны.* Тәрбиәсе һүҙҙәр әйтә. Һүҙҙә «Ҙ» өнө булһа, балалар ҡул сабалар: *быҙау, һарыҡ, баҙ, себеш, күҙҙәр, ауыҙҙар, ҡояш, ҙур, ат, ҡымыҙ.*

Дәресте йомғаҡлау.

**48 – се дәрес**

**Тема:** "Аҙна көндәре"

*Маҡсат:*

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, кесаҙна, йома, шәмбе, йәкшәмбе, аҙна;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ш, ы, и* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы һүҙҙәрҙә өндөң урынын таба; һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлә белергә өйрәтеү;

г) башҡорт телендә үҙ-ара аралашырға теләк уятыу.

**Йыһаз:** ете тажлы ҡурай сәскәһе төшкән логотип, 1-ҙән 7 –гә тиклем цифрҙар яҙылған карточкалар.

## Дәрес барышы

Тәрбиәсе балалар менән артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләрен үткәрә. Тәрбиәсе:

- Балалар, беҙҙең әсәйҙәр, атайҙар ҡасан ял итәләр? Улар менән беҙ ҙә бергә ял итәбеҙ, шулай бит! Нисә көн беҙ бергәләп өйҙә ял итәбеҙ? Шунан һуң тағы ла эш көндәре башлана. Беҙ ҙә балалар баҡсаһына көн һайын килеп дәрестәрҙә ҡатнашабыҙ, уйындар уйнайбыҙ, шиғырҙар, йырҙар өйрәнәбеҙ.

- Ялдан һуң килгән иң беренсе көн нисек атала, рус телендә әйтергә мөмкин. Понедельник. Башҡортса – ул *дүшәмбе* тип атала.

Икенсе көн – *шишәмбе.*

Өсөнсө көн – *шаршамбы.*

Дүртенсе көн – *кесаҙна.*

Бишенсе көн – *йома.*

Алтынсы көн – *шәмбе.*

Етенсе көн – *йәкшәмбе.*

Ете көндө бергә ҡушһаң - бер *аҙна* була. Тимәк, аҙна эсендә ете көн бар.

- Бармаҡтар ярҙамында аҙна ниндәй көндәрҙән торғанлығын әйтеп китәйек әле. Бармаҡтар менән уйнап, һәр бармаҡҡа аҙна исемдәрен ҡушып әйтеп сығалар:

Беренсе бармаҡ – *дүшәмбе.*

Икенсе бармаҡ – *шишәмбе.*

Өсөнсө бармаҡ – *шаршамбы.*

Дүртенсе бармаҡ – *кесаҙна.*

Бишенсе бармаҡ – *йома.*

Алтынсы бармаҡ – *шәмбе.*

Етенсе бармаҡ – *йәкшәмбе.*

Бына тағы ла бер *аҙна* үтеп китте.

Ковролинға ете тажлы ҡурай сәскәһе төшкән логотип элә. Уның нимә икәнлеген бергәләп билдәләйҙәр һәм сәскәнең тажларын бергәләп һанап сығалар:

- Ковролиндағы сәскәнең нисә тажы бар? Һанайыҡ әле! Ете таж.

Беренсе тажға «1» һанын яҙып ҡуябыҙ (1 цифраһын беркетә, артабан шул рәүешле), сөнки ул *аҙнаның беренсе көнө.* Аҙнаның беренсе көнө нисек атала? Аҙнаның беренсе көнө – *дүшәмбе.*

Икенсе тажға «2» һанын яҙып ҡуябыҙ, сөнки ул *аҙнаның икенсе көнө.* Аҙнаның икенсе көнө нисек атала? Аҙнаның икенсе көнө – *шишәмбе.*

Өсөнсө тажға «3» һанын яҙып ҡуябыҙ, сөнки ул *аҙнаның өсөнсө көнө.* Аҙнаның өсөнсө көнө нисек атала? Аҙнаның өсөнсө көнө – *шаршамбы.*

Дүртенсе тажға «4» һанын яҙып ҡуябыҙ, ул *аҙнаның дүртенсе көнө.* Аҙнаның дүртенсе көнө нисек атала? Аҙнаның дүртенсе көнө – *кесаҙна.*

Бишенсе тажға «5» һанын яҙып ҡуябыҙ, ул *аҙнаның бишенсе көнө.* Аҙнаның бишенсе көнө нисек атала? Аҙнаның бишенсе көнө – *йома.*

Алтынсы тажға «6» һанын яҙып ҡуябыҙ, ул *аҙнаның алтынсы көнө.* Аҙнаның алтынсы көнө нисек атала? Аҙнаның алтынсы көнө – *шәмбе.*

Етенсе тажға «7» һанын яҙып ҡуябыҙ, ул *аҙнаның етенсе көнө.* Аҙнаның етенсе көнө нисек атала? Аҙнаның етенсе көнө – *йәкшәмбе.*

Бына тағы ла бер *аҙна* үтеп китте.

Тәрбиәсе: - Беҙ аҙнаның ниндәй көндәре ял итәбеҙ? Кем сығып уларҙы сәскәлә күрһәтә? Алтынсы һәм етенсе көндәр. Улар нисек аталалар? *Шәмбе, йәкшәмбе.*

*«Ш» өнөн тап! уйыны.* Тәрбиәсе аҙна көндәрен әйтә, балалар һүҙҙә «ш» өнө булһа, ҡул сабалар.

*«Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүл!» - йома, шәмбе, йәкшәмбе, дүшәмбе* һүҙҙәрен ижектәргә бүлеү.

Айгөл инә. Ул бер шиғыр ятлағанын әйтә һәм уны һөйләп ишеттерә:

*Ҡунаҡ булдыҡ өләсәйҙә*

*Шәмбе, йәкшәмбе.*

*Килдек һағынып баҡсаны – дүшәмбе.*

*Йыр өйрәндек шишәмбелә,*

*Сана шыуҙыҡ шаршамбыла.*

*Кесаҙнала көнө буйы*

*Уйнаныҡ беҙ майҙансыҡта.*

*Бик тиҙ үтеп киткән аҙна,*

*Килеп еткән тағы йома.*

*Йыйынабыҙ өләсәйгә*

*Шәмбегә һәм йәкшәмбегә. (Нафиҡова З.F.)*

Дәресте йомғаҡлау:

- Аҙнала нисә көн? Иң беренсе көн нисек атала? Кем бармаҡтар ярҙамында аҙна көндәрен әйтеп сыға?

**49 – сы дәрес**

**Тема:** "Башҡортостан – беҙҙең ил"

**Маҡсат:** *а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:* Ватан, тыуған ил, зәңгәр, йылтырай, балҡый; *үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; [*ғ, ҡ, уы*] өндәрен ижектәрҙә, һүҙҙәрҙә дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү тәртибе менән таныштырыу;

г) үҙ-ара аралашырға теләк уятыу, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** предметлы һүрәттәр – ҡарға, турғай, ҡарлуғас, ҡарағат, алмағас, ҡарағай; тәбиғәт күренешен һүрәтләгән картина, йорт һәм ҡыр хайуандар һүрәттәре.

**Дәрес барышы:**

Тәрбиәсе балаларға һүрәттәр таратып бирә (ҡарға, турғай, ҡарлуғас, ағас, ҡарағат, алмағас, ҡарағай) һәм ундағы предметтарҙың атамаларын әйтергә һорай.

- Балалар, беҙ әйткән һүҙҙәрҙә ниндәй өн бөтәһендә лә ишетелде? (*ғ* өнө). Хәҙер ҡул суҡтары, бармаҡтар менән уйнап алайыҡ:

*«Ишектә йоҙаҡ (в дверях замок)»:*

(пальцы обеих рук сцеплены между собой и сжаты в кулак)

*Асып булмай йоҙаҡты:* («замок» поворачивают налево-направо, вверх-вниз). *Шаҡылдатам – шаҡылдатам* (стучат «замком» по коленям)

*Өйрөлдөрәм – өйрөлдөрәм,* (крутят «замок» в разные стороны)

*Тартам – тартам. Астым.* (пальцы разжались и «замок» открылся!)

Башҡортса дөрөҫ һөйләшер өсөн өсөн телмәр ағзаларына гимнастика эшләп алайыҡ:

«Йылмайыу» - ирендәр асыҡ, тештәр ҡыҫылған – йылмаябыҙ.

«Борғо» - ирендәрҙе түңәрәкләтеп алға табан һуҙыу.

«Бәүелсәк» - телде уңға-һулға йөрөтөү.

«Туңдырма ялау» - телде тышҡа – эскә йөрөтөү.

«Тамаҡ сайҡау» - аҫҡы эйәкте һуҙып, башты артҡа ташлап, тамаҡ сайҡағанда «Ғ» өнөн әйтеп, хәрәкәт башҡарыу.

*Телтөҙәткес өйрәнәбеҙ:*

Ҡарға килгән ҡарғаға – ға – ға – ға

Ҡарғаларын ҡарарға - ға – ға – ға

Киткән былар баҙарға – ға – ға- ға

Майлы ҡоймаҡ алырға – ға – ға -ға

Тәрбиәсе: - Балалар, беҙ һеҙҙең менән һүҙҙе ишетәбеҙ һәм әйтәбеҙ. Иҫкә төшөрәйек әле, һүҙҙе әйткәндә ниндәй ағзалар ярҙам итә? (ауыҙ, тел, тештәр, яңаҡ, эйәк). Һәр ағзаны бергәләп күрһәтеп баралар.

*Һүҙҙе ижектәргә бүлеү:*

- Балалар, һүҙҙәр өлөштәрҙән тора. Уларҙы өлөштәргә бүлергә эйәк ярҙам итә. Ҡулды эйәк аҫтына ҡуябыҙ. Һүҙҙе әйткәндә эйәк ҡулға нисә тапҡыр тейә – һүҙ шул тиклем өлөштәрҙән тора. Хәҙер бергәләп һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүләбәеҙ. Мин һүрәттәрҙе күрһәтәм, унда төшкән предметтың атамаһын әйтәбеҙ, һүҙҙе әйткәндә ҡул һырты эйәк аҫтында: ҡар – ға, тур – ғай, ҡа – ра – ғат, ҡар – лу – ғас, ҡа – ра – ғай.

*«Өндөң урынын тап!»* - тәрбиәсе балаларға һүҙҙәр әйтә, балалар ул һүҙҙәрҙә «ғ» өнөнөң урынын табалар: Ғәли, ҡарға, ağac, турғай, Ғата.

Ҡурай моңо тауышы ишетелә. Тәрбиәсе балаларҙан ниндәй музыка ҡоралы уйнағанын, ул ниндәй халыҡтың музыка ҡоралы икәнлеген һорап белешә. Тәрбиәсе:

- Балалар, беҙ ниндәй республикала йәшәйбеҙ? Беҙҙең республика тураһында Рәшит Ниғмәти исемле башҡорт халыҡ шағиры ошондай шиғыр яҙған:

Беҙҙең Ватан шундай матур

Ҡояштай балҡып тора.

Тауҙары зәңгәр болоттай

Күктәргә ҡалҡып тора.

Һыуҙары терегөмөштәй

Йылтырап ағып тора.

Баҡсаларында емештәр

Ерҙәргә тамып тора.

Ниндәй матур шиғыр яҙған Рәшит Ниғмәти. Балалар, нимә ул Ватан? Бөгөн беҙ шул турала һөйләшербеҙ.

Ватан – ул рус телендә Родина тигәнде аңлата. Тимәк Ватан – ул беҙ йәшәгән ер. Ул беҙҙең тыуған ил. Беҙҙең тыуған илебеҙ – Башҡортостан. Беҙ ошо илдә тыуғанбыҙ һәм йәшәйбеҙ. Башҡортостан бигерәк матур ил. Бына һүрәткә ҡарағыҙ әле: унда ниндәй матур, ҡуйы ағаслы урмандар үҫә, тауҙары бейек, күктәргә ашып тора, йылға-күлдәре күп. Яландарында төрлө-төрлө сәскәләр үҫә. Беҙҙең ил ҡош-ҡортҡа һәм йәнлектәргә лә бай.

Башҡортостанда йәшәгән ниндәй хайуандарҙы беләбеҙ, өҫтәлдәге һүрәттәрҙе алып күрһәтегеҙ әле? айыу, ҡуян, бүре, мышы, төлкө.

Беҙҙең урмандарҙа ниндәй ҡоштар йәшәй? турғай, кәкүк, бөркөт, ҡарлуғас, һандуғас, ҡарға.

Тәрбиәсе: *«Айыу, бүре юҡ икән!» уйынын* уйнап алайыҡ:

Айыуҙы һанашмаҡ аша һайлайҙар: *Тауыҡ, әтәс, сыпсыҡ, берең ҡал, берең сыҡ!*

Айыуға бүлмәнең бер мөйөшөндә "өң" билдәләнә, ә балалар бүлмәнең икенсе башында үҙ "өйҙәрендә"- ултырғыстарында ултыралар. Балалар йырлай-йырлай айыу йөрөгән яҡҡа күмәкләп еләк йыйырға китәләр (тәрбиәсе уйындың ҡағиҙәһен русса аңлата):

*Еләк йыям, еләк йыям,*

*Әсәйемә бүләккә.*

*Бында еләк күп икән,*

*Айыу, бүре юҡ икән.* (һуңғы ике юл ике тапҡыр ҡабатлана).

Балалар йырлап бөткәс, "айыу" өңөнән йүгереп сығып, уларҙы баҫтыра, балалар "өйҙәренә" ҡасалар. Тотолған бала, йә башҡа бала үҙ теләге менән "айыу" була, уйын яңынан башлана.

*«Нимә артыҡ?» уйыны.* Бирелгән һүҙҙәр араһында ниндәй һүҙ артыҡ, табайыҡ әле:

а) турғай, ҡарға, кәкүк, ҡарлуғас, *әтәс*, һандуғас.

б) айыу, бүре, ҡуян, төлкө, мышы, *кәзә.*

*«Иғтибарлы бул!» уйыны.* Тәрбиәсе һүҙҙәр әйтә, әгәр һүҙҙә «ғ» өнө булһа, балалар ҡул сабалар: *кәкүк, һандуғас, ҡарға, тыуған ил, Башҡортостан, турғай, Ватан, ағай, шағир, тауҙар.*

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Нимә тураһында һөйләштек? - Нимә ул Ватан? Беҙҙең Ватан нисек атала? Ул матурмы? - Ватан һүҙен өлөштәргә бүлеп күрһәтәйек!

## 50 – се дәрес

**Тема:** "Өфө – беҙҙең баш ҡала"

*Маҡсат: а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:* һәйкәл, зәңгәр, шаҡмаҡ, башҡала, Ватан; *үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ө, ф* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы һүҙҙең өндәр схемаһын төҙөргә өйрәтеү;

г) Тыуған илгә һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

**Йыһаз:** Салауат Юлаев статуэткаһы һәм портреты, Башҡортостан Республикаһы гербы, һабын, һуған, аҡ ҡағыҙ биттәре, төҫлө ҡәләмдәр, ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар, һәйкәл трафареты.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе: - Балалар, әйҙәгеҙ, әҙерәк уйнап алайыҡ әле! Мин һеҙгә тиҙәйткес әйтәм, ә һеҙ уны бер тын алышында ҡабатлап әйтегеҙ:

*Һыуыҡ һыу һалҡын була,*

*Һыуыҡ килһә – һыу туңа.*

-Афарин, балалар! Хәҙер телдәрҙе уйнатып алайыҡ:

«Сәғәт» - телде уңға-һулға йөрөтөү;

«Йылмайыу» - ирендәр асыҡ, тештәр ҡыҫылған – йылмаябыҙ.

«Борғо» - ирендәрҙе түңәрәкләтеп алға табан һуҙыу.

«Туңдырма ялау» - телде тышҡа – эскә йөрөтөү.

- Бәләкәй баланы нисек йоҡлатабыҙ? әә-әә-әә-әәә

- Эт нисек өрә? һау – һау – һау

- «Һ» өнө һуҙыламы, уны йырлап буламы? (юҡ)

*«Ишектә йоҙаҡ» уйыныҘ*

*Асып булмай йоҙаҡты:*

*Шаҡылдатам – шаҡылдатам*

*Өйрөлдөрәм – өйрөлдөрәм,*

*Тартам – тартам, астым.*

Тәрбиәсе: - Балалар, беҙ бөгөн һүҙҙе шаҡмаҡтар ярҙамында яҙырға өйрәнәбеҙ. Беҙ ҡайҙа йәшәйбеҙ? Өфөлә. Дөрөҫ, Өфө – беҙҙең башҡала. Хәҙер Өфө һүҙен яҙырға өйрәнәбеҙ.

- «Өфө» һүҙе ниндәй өндән башлана; *(аңлатыу фланелеграфта күрһәтеп башҡарыла).*

- Дөрөҫ, беренсе өн «Ө» өнө! Ул һуҙыламы? Уны һуҙып йырлап буламы? Йәгеҙ бергәләп, йырлап ҡарайыҡ әле: *өөөө-өөөөө.* Һуҙыла.

- Тимәк, «Ө» өнө һуҙынҡы өн, уны һуҙып йырлап була. Һуҙынҡы өндө беҙ ҡыҙыл шаҡмаҡ менән билдәләйбеҙ.

- «Өфө» һүҙендә ниндәй өн икенсе булып килә?

- Дөрөҫ, «Ф» өнө! Уны һуҙып йырлап ҡарайыҡ әле. Һуҙылмай, йырлап булмай. Быңдай өндәрҙе «тартынҡы» өн тип атайҙар. Тартынҡы өндө зәңгәр шаҡмаҡ менән билдәләйбеҙ.

- «Өфө» һүҙендә ниндәй өн өсөнсө булып килә?

- Дөрөҫ, өсөнсө өн «Ө» өнө! Ул һуҙыла, уны һуҙып йырлап була! Тимәк, ул һуҙынҡы өн. Беҙ һуҙынҡы өндө ниндәй шаҡмаҡ менән яҙабыҙ? Дөрөҫ, ҡыҙыл шаҡмаҡ менән.

Тәрбиәсе: - Бына, балалар, беҙ «Өфө» тигән һүҙҙе шаҡмаҡтар ярҙамында яҙырға өйрәндек. Кем үҙаллы фланелеграфҡа сығып яҙып күрһәтә? (ә-һ бала башҡара).

Ҡурай моңо ишетелә. Тәрбиәсе Р.Ниғмәтиҙең «Ватан» шиғырын һөйләй һәм балалар менән шиғырҙың эстәлеге буйынса әңгәмә үткәрә:

- Шиғырҙа нимә тураһында әйтелә?

- Нимә ул Ватан?

- Беҙҙең Ватан нисек атала?

- Башҡортостандың башҡалаһын кем белә? - Дөрөҫ, балалар, Өфө – беҙҙең Ватаныбыҙ Башҡортостандың башҡалаһы. Ул бик матур. Унда бейек йорттар, сәскәле урамдар, һәйкәлдәр, театрҙар бар. Мин хәҙер һеҙгә бер статуэтка күрһәтәм, кем таныр икән унда кем һүрәтләнгән икәнлеген?

- Дөрөҫ, балалар, был Салауат Юлаев һәйкәле. Һәйкәл рус телендә ***памятник*** була. Ҡабатлайыҡ әле «һәйкәл» һүҙен (3-4 тапҡыр).

Һүҙҙе беҙ телмәр ағзалары ярҙамында әйтәбеҙ «һәйкәл». Ҡолаҡтар аша уны ишетәбеҙ. Телмәр ағзаларына нимәләр инә? (ауыҙ, тел, тештәр, ирендәр, яңаҡтар, эйәктәр).

Һүҙҙе әйткәндә, ауыҙ эсенән һауа сыға һәм эйәк аҫҡа төшә. Ҡул һыртын эйәккә ҡуйып, «Һәйкәл» һүҙен өлөштәргә бүләйек әле: һәй – кәл. Эйәк ҡул һыртына нисә тапҡыр тейҙе? Ике тапҡыр, тимәк «һәйкәл» һүҙе ике өлөштән тора. Һәйкәлгә тағы ла ҡарайыҡ әле:

- Кем ул Салауат Юлаев? Дөрөҫ, ул башҡорт халҡының милли батыры. Ни өсөн уға һәйкәл ҡуйылған? (ул батыр, ҡыйыу булған. Ватанды һаҡлаған, уны маҡтап йырҙар, шиғырҙар сығарған). Ни өсөн уны ат өҫтөндә төшөргәндәр. Ул дошмандарға ҡаршы һуғышҡан, Ватанды һаҡлаған. Ҙур ғәскәр менән етәкселек иткән. Беҙҙең кеүек русса ла һәм башҡортса ла һөйләшкән. Ҡурайҙа уйнаған, шиғырҙар, йырҙар яҙған. Салауатты халыҡ онотмай. Уның исемен күп ауылдарға, урамдарға, мәктәптәргә ҡушҡандар. Салауат тигән ҡала һәм район бар. (балалар аңламаһа, тәүҙә рус телендә аңлатырға мөмкин).

Тәрбиәсе гербты күрһәтеп, һорай: - Балалар, Салауат Юлаевтың рәсеме ҡайҙа төшөрөлгән? Был нимә; Был герб. Ул Башҡортостандың дәүләт тамғаһы.

«Кем таный?» уйыны. Тәрбиәсе балаларға Өфө ҡалаһы буйлап сәйәхәткә китергә тәҡдим итә. «Трамвайға ултырып», бүлмәнең төрлө еренә эленгән Өфөнөң билдәле урындары төшөрөлгән һүрәттәрҙе күрһәтә һәм балаларҙан уларҙың нимә икәнлеген әйтеүен һорай: *цирк, Салауат Юлаев һәйкәле, Дуҫлыҡ монументы, телецентр, Еңеү паркындағы мәңгелек ут, Башҡорт дәүләт академия театры бинаһы, Ҡурсаҡ театры бинаһы.*

Тәрбиәсе: - Салауат Юлаев яҙған бер шиғырҙы һөйләп ишеттерәм:

*Ай, Уралым, Уралым,*

*Күгәреп ята Уралым.*

*Нурға сумған түбәһе –*

*Күккә ашҡан Уралым!*

*Һине маҡтай йырҙарым,*

*Һине данлай йырҙарым! (мәғәнәһен русса аңлата)*

Тәрбиәсе: - Балалар, һеҙ Өфөнө бик яҡшы беләһегеҙ икән! Моғайын, ата-әсәйҙәрегеҙ менән йыш ҡына был урындарҙа булаһығыҙҙыр. Өләсәйгә лә ҡунаҡҡа бараһығыҙ инде ял көндәрендә. Ял көндәре нисек атала әле? Кем иҫенә төшөрҙө? Айгөлдөң шиғырын яттан һөйләп, аҙна көндәрен иҫкә төшөрәйек:

*Ҡунаҡ булдыҡ өләсәйҙә*
*Шәмбе, йәкшәмбе.*
*Килдек һағынып баҡсаны – дүшәмбе.*
*Йыр өйрәндек шишәмбелә,*
*Сана шыуҙыҡ шаршамбыла.*
*Кесаҙнала көнө буйы*
*Уйнаныҡ беҙ майҙансыҡта.*
*Бик тиҙ үтеп киткән аҙна,*
*Килеп еткән тағы йома.*
*Йыйынабыҙ өләсәйгә*
*Шәмбегә һәм йәкшәмбегә.*

Бармаҡтарҙа күрһәтеп, аҙна көндәренең бер-бер артлы килеү тәртибен ҡабатлап сығалар.

*Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп* алайыҡ: *урам, ҡала, Салауат, һәйкәл, башҡала, матур, ҙур, ҡурай, шағир.*

Ишек туҡылдаталар. Айгөл инә, ул ауылдан килгәнен әйтә. Тау башында бик матур һәйкәл күргәнен әйтә. Ул кемгә ҡуйылған икән?

Балалар Айгөлгә Салауат Юлаев һәйкәле тураһында белгәндәрен һөйләйҙәр: Был һәйкәл – Салауат Юлаевҡа ҡуйылған. Ул батыр. Башҡорттар илен дошмандарҙан һаҡлаған. Ул ҡыйыу, көслө, батыр кеше булған. Шиғыр яҙған. Йырҙар сығарған, ҡурайҙа уйнаған. Уның һүрәте Башҡортостандың гербында бар.

Айгөл балаларҙы маҡтай, рәхмәт әйтә. Бергәләп Салауат һәйкәлен төшөрәләр: тәрбиәсе балаларҙы алдан әҙерләп ҡуйылған өҫтәл артына ултырырға саҡыра. Унда һәр бала өсөн таҙа ҡағыҙ бите, төҫлө ҡәләмдәр,

ҡырҡылған һәйкәл силуэты әҙерләнгән. Силуэттың ситенән ҡәләм менән йөрөтөп, уны ҡағыҙ битенә төшөрәләр һәм буяйҙар.

**Дәресте йомғаҡлау:** - Кем *Өфө* һүҙен ковролинда шаҡмаҡтар ярҙамында яҙып күрһәтә? - Салауат Юлаев һәйкәле ҡайһы ҡалала ҡуйылған? - Салауат Юлаев ниндәй булған? - Кем «Һәйкәл» һүҙен өлөштәргә бүлеп күрһәтә?

## 51 – се дәрес

**Тема:** "Кем ҡайҙа йәшәй?"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *оя, өң, умарта, ағас ҡыуышлығы, урмәксе, урмәксе ауы, өкө;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *у, ң, ө* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы өндөң урынын билдәләй белергә, һүҙҙе ижектәргә бүлергә өйрәтеү;

г) башҡортса үҙ-ара аралашырға ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһаз:** йәнлектәр һәм улар йәшәгән урындарһүрәте, «Ҡ» өнөнөң символы-билдәһе, предметлы һүрәттәр.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм дөрөҫ тын алыу һәм өндәрҙе дөрөҫ әйтеүгә ауыҙ-тел гимнастикаһы үткәрә:

Артикуляция гимнастикаһы: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны.

Дөрөҫ тын алыуға күнекмәләр: «Кем алыҫыраҡ өрә?» уйыны – өҫтәлдәге мамыҡтарға «өф-өф» тип өрөү; «Ҡулдарҙы йылытайыҡ!» уйыны – ҡулдарҙы ыуалап, «һу-һу»тип өрөү;

«Ҡ» өнөнөң әйтелешен нығытыу.

ҡа-ҡа-ҡа ҡарға

ҡо-ҡо-ҡо ҡоймаҡ

ҡы-ҡы-ҡы ҡыҙ

ҡу-ҡу-ҡу ҡул

Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, уларҙың атамаһын әйттерә һәм уларҙың өйө ҡайҙа икәнлеген билдәләтә:

*Ҡарға ояһында йәшәй. Уның ояһы ағас башында.*

*Төлкөнөң өңө (нора) ер аҫтында. Ул өңдө ерҙе соҡоп эшләй.*

*Бал ҡорто умартала йәшәй. Умартаны кеше эшләй. Элек бал ҡорттары ағас ҡыуышлығына оялағандар.*

*Йорт хайуандары кеше эргәһендә һарайҙа йәшәй.*

*Үрмәксе ау үреп, шунда йәшәй (паутина).*

*Өкө ағас ҡыуышлығында (дупло) йәшәй.*

*«Нимә эшләй?» уйыны.* Тәрбиәсе йорт һәм ҡыр хайуандары һүрәттәрен күрһәтеп, улар нимә эшләй тигән һорауға кем күберәк ҡылымдар әйтеп, тулы яуаптар бирер тип тәҡдим итә:

- Ҡарға нимә эшләй? (ҡысҡыра, ашай, атлай, оса, һикерә, югерә һ.б)
- Ҡарға ҡайҙа йәшәй?
- Быҙау нимә эшләй? (баҡыра, ашай, эсә, имсәк имә, уйнай, ялай, һ.б.)
- Быҙау ҡайҙа йәшәй?
- Себеш нимә эшләй?
- Себеш ҡайҙа йәшәй?
- Айыу нимә эшләй?
- Айыу ҡайҙа йәшәй?
- Ҡурсаҡ Айгөл нимә эшләй?
- Ҡурсаҡ Айгөл ҡайҙа йәшәй?

Тәрбиәсе: Мин һеҙгә шиғыр уҡып ишеттерәм, беҙ уны бергәләп ятлап алырбыҙ. Ул «Бәләкәстәр» тип атала, уны Айһылыу апай Йәғәфәрова яҙған:

*Һыйырҙың быҙауы бар,*
*Өйрәктең – бәпкәләре,*
*Аҡбайҙың – көсөктәре,*
*Турғайҙың – ҡошсоҡтары.*

*Аттың ҡолонсағы бар,*
*Һарыҡтың – бәрәстәре,*
*Ә Таңсулпан апайымдың –*

*Игеҙәк бәпестәре.*

Шиғырҙы 3-4 тапҡыр ҡабатлап, ятлап алалар. Аҙаҡ бер нисә бала айырым шиғырҙы яттан һөйләп ишеттерә.

*«Нимәнең әсәһе?» уйыны.* Тәрбиәсе ковролинға шиғырҙағы хайуандар балаларының һүрәтен ҡуя һәм уларҙың әсәһен өҫтәлдәге һүрәттәр араһынан табып, шиғыр юлдары менән әйтергә һорай.

*«Осто-осто» уйыны.* (46-сы дәресте ҡара).

(Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана).

«Ҡ» өнөнөң символы-билдәһе күрһәтелә. Ул нимәгә оҡшаған? «Ҡ» өнө нисек әйтелә? Балыҡ ашағанда, тамаҡ төбөнә ҡылсыҡ торған икән, уны нисек сығарабыҙ: ҡҡҡ-ҡҡҡ-ҡҡҡ.

«Ҡ» өнөнә йырлап була торған өндәрҙе ҡушып, йырлап ишеттерәбеҙ: *ҡааа-аа, ҡооо-оо, ҡууу-уу, ҡыыы-ыы.*

«Ҡ» өнө булған һүҙҙәрҙе уйлап табыу: *ҡаҙ, ҡыҙҙар, ҡулдар, ҡурсаҡ, ҡарға, ҡымыҙ, ҡыйыу.*

«Ижектәргә бүл!» - юғарыла бирелгән һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү.

«Өндөң урынын тап!» - бирелгән һүҙҙәрҙә «ҡ» өнөнөң урынын билдәләү: *ҡар, баҡа, аяҡ.*

*Дәресте йомғаҡлау:* - Бөгөн нимәләр тураһында һөйләштек? - Һәр кемдең үҙ өйө була, шулай бит? Һүрәттәр күрһәтәм, был йәнлектәр ҡайҙа йәшәй, тулы итеп яуап бирегеҙ: *урмәксе, айыу, төлкө, кәзә, өйрәк.*

## 52 - се дәрес

**Тема:** "Тирмәкәй" әкиәте менән таныштырыу

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **өҫкә, менә, боҙа;** ***үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;***

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; һүҙҙә өндәрҙе ишетә һәм урынын билдәләй белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) "Айыу- бүре юҡ икән" уйынын һәм «Тирмәкәй» әкиәтен уйнарға өйрәтеү;

г) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** «Тирмәкәй» әкиәте китабы, унының персонаждарын һүрәтләгән өҫтәл театры ҡурсаҡтары.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балаларға элек өйрәнгән бармаҡ уйындарын уйната:

*Был бармаҡ – олатай,*

*Был бармаҡ – өләсәй,*

*Был бармаҡ – апай,*

*Был бармаҡ – атай,*

*Был бармаҡ – әсәй,*

*Был бармаҡ – бәләкәй,*

*Унының исеме* – (һәр бала үҙенең исемен әйтә).

Тәрбиәсе бармаҡтарҙы уйнатып алырға тәҡдим итә:

*Беҙ йүгерҙек урамға, югерешеп уйнарға* – һуҡ һәм урта бармаҡтарҙы өҫтәл йә итәк буйлап йүгертеү, бармаҡтарҙы йөрөткәндә "тып-тып" тип әйтеп барыу кәрәк;

*Тәүҙә барҙыҡ шым ғына* (саҡ ҡына ишетерлек тауыш менән);

*Аҙаҡ барҙыҡ ныҡ баҫып* (ҡысҡырып әйтеү. Был осраҡта аяҡтар менән дә ярҙам итеп була).

*Рәхәтләнеп бейенек, матур итеп уйнаныҡ* (аяҡтар бейей, бармаҡтар пианинола уйнай).

Тәрбиәсе: - Балалар, башҡорт һүҙҙәрен әйтер өсөн телмәр ағзаларына күнекмәләр эшләп алайыҡ: «Йылмайыу», «Энә», «Тештәрҙе таҙартыу», «Көрәк», «Әүһәләк». «Бармаҡ» уйыны.

Тәрбиәсе: - Бына миндә бик матур китап, һүрәттәре төҫлө, сағыу буяуҙар менән буялған. Был китап «Тирмәкәй» тигән рус халыҡ әкиәте тураһында. Уҡыйыҡ әле бергәләп китапты (тәрбиәсе уҡып сыға һәм әкиәт геройҙарының һүҙҙәрен өҫтәл театры ҡурсаҡтары ярҙамында әйттереп, әкиәтте сәхнәләштерергә өйрәтә):

Яланда тирмә тора. Иң беренсе тирмә эргәһенән кем үткән? Сысҡан:

- Тирмә-тирмәкәй! Был тирмәлә кем йәшәй?

Бер кем дә яуап бирмәгән. Сысҡан тирмәгә инеп, шунда йәшәй башлаған. Тирмә эргәһенә баҡа килгән:

- Тирмә-тирмәкәй! Был тирмәлә кем йәшәй?

- Мин сысҡан! Һин кем?

- Мин баҡа!

- Әйҙә бергәләп йәшәйек!

Баҡа тирмәгә инә, улар икәүләп йәшәй башлайҙар. Шул рәүешле ҡуян, төлкө, бүре, тирмә эргәһенә килеп, һорашалар һәм тирмәлә бергә йәшәй башлайҙар. Тик ҙур айыу ғына тирмәгә һыймағас, ул тирмә өҫтөнә менә һәм тирмәне боҙа. Аҙаҡ бөтә хайуандар бергәләп матур, ҙур тирмә төҙөп, бергә йәшәй башлайҙар.

Тәрбиәсе: - Балалар, әкиәт оҡшанымы? Кемдәр тирмәлә йәшәгән, һанап китәйек: сысҡан, баҡа, ҡуян, төлкө, бүре, айыу.

Был һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүләйек! Һәр һүҙ ниндәй өндән башлана икән, билдәләйек.

*«Айыу, бүре юҡ икән!» уйынын* уйнап алайыҡ:

*Еләк йыям, еләк йыям,*

*Әсәйемә бүләккә.*

*Бында еләк күп икән,*

*Айыу, бүре юҡ икән*

Тәрбиәсе: - Балалар, бик матур уйнанығыҙ! Хәҙер **«баҡа»** тигән һүҙҙе зәңгәр һәм ҡыҙыл шаҡмаҡтар ярҙамында яҙып ҡарайыҡ әле: беренсе өн ниндәй? «Б» өнө. Ул һуҙыламы? Юҡ! Уны ниндәй шаҡмаҡ менән билдәләйбеҙ? Зәңгәр шаҡмаҡ менән. Икенсе өн ниндәй? «А» өнө, ул һуҙыла, уны ҡыҙыл шаҡмаҡ менән яҙабыҙ. Өсөнсө өн - «Б», уны зәңгәр

шаҡмаҡ менән яҙабыҙ. Дүртенсе өн – «А», ул һуҙыла. Уны ҡыҙыл шаҡмаҡ менән яҙабыҙ.

Дәресте йомғаҡлау: - Беҙ бөгөн нимәләр эшләнек? «Тирмәкәй» әкиәтен уҡыныҡ, «Баҡа» һүҙен шаҡмаҡтар менән яҙҙыҡ. Кем өҫтәл янына сығып, әкиәт геройҙарын бер-бер артлы теҙеп күрһәтеп бирә?

## 53 – сө дәрес

**Тема:** "Тирмәкәй" әкиәтен сәхнәләштереү

**Маҡсат:** а) үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; һүҙҙә өндәрҙе ишетә, дөрөҫ әйтә һәм уларҙың урынын билдәләй белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы тасуири итеп үҙҙәре башҡарған хайуандар ролен уйнарға өйрәтеү;

г) балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү, йомаҡтар сисә белергә өйрәтеү.

**Йыһаз:** өҫтәл театрының «Тирмәкәй» әкиәте персонаждары, тирмә.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балаларға йомаҡтар әйтә:

Баҙҙа йәшәй, дошманы бесәй (сысҡан).

Йәйен һоро, ҡышын аҡ, ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ (ҡуян).

«Баҡ-баҡ» килеп түңәрәк күлдә эт өрә (баҡа).

Ҡыҙыл билле ҡыҙ килде, ҡыланды ла юғалды (төлкө).

Йәйен – урманда батша, ҡышын – ҡарҙан да аҫта (айыу).

Күҙҙәре яныл, тештәре ыржайып, ашарға эҙләнә (бүре). Йомаҡтарҙың мәғәнәһен тәрбиәсе рус телендә аңлата ала.

- Балалар, был хайуандар ниндәй әкиәттә йәшәйҙәр? Улар нисек һөйләшәләр, беҙ хәҙер уйнап күрһәтербеҙ. Тәүҙә әкиәт геройҙарының һүҙҙәрен ҡабатлап сығайыҡ:

- Тирмә-тирмәкәй! Был тирмәлә кем йәшәй?

- Мин сысҡан! Һин кем?

- Мин баҡа!

- Әйҙә бергәләп йәшәйек!

- Кем сысҡан ролен башҡара?

Шул рәүешле тәрбиәсе һәр ролдең һүҙҙәрен бөтә балалар менән бергә һ-ғ тапҡыр ҡабатлап сыға һәм роль башҡарыусы балаларҙы билдәләй. Бүлмә уртаһына йәки өҫтәл өҫтөнә тирмә ҡуйыла һәм әкиәттең һәр персонажы уның янына килеп үҙ һүҙҙәрен әйтә. Башҡа балалар тамашасылар ролендә.

Тамаша бөткәс, тәрбиәсе балаларҙан әкиәт оҡшанымы, ниндәй хайуан ныҒыраҡ оҡшаны – шуларҙы билдәләй.

*«Нимә артыҡ?» уйыны.* Тәрбиәсе әйткән һүҙҙәр араһынан ниндәй һүҙ артыҡ икәнлеген балалар билдәләп әйтергә тейеш:

а) тирмәлә кемдәр йәшәй – айыу, бүре, төлкө, ҡуян, терпе, баҡа, сысҡан.

б) урманда үҫә: ҡайын, шыршы, имән, сирен.

в) түтәлдә кишер, һуған, кәбеҫтә, алма үҫә.

Кишер, һуған, кәбеҫтә, алма һүҙҙәрен өлөштәргә бүләйек! Һәр һүҙ ниндәй өндән башлана икән, билдәләйек.

*«Алма»* һүҙен зәңгәр һәм ҡыҙыл шаҡмаҡтар менән яҙайыҡ.

Дәресте йомғаҡлау:

Тирмәгә бөтәһе нисә хайуан һыйған, һанайыҡ әле? Кем тирмәгә һыймаған, ни өсөн?

Тирмә һүҙе нисә өлөштән тора? Ниндәй өндән башлана?

## 54 - се дәрес

**Тема:** "Сыйырсыҡ"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *йылы, яҡтан, сыйырсыҡ, сүкеш,* ;
үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү: һүҙҙе ижектәргә бүлергә һәм өндәрҙең урынын билдәләргә өйрәтеү;

в) балаларҙың типик грамматик конструкцияларҙы ҡуллана белеүен нығытыу: *ағастар япраҡ яра, йәшел үләндәр сыға, ҡояш ныҡ йылыта;* «Сыйырсыҡ» уйынын уйнарға өйрәтеү.

г) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен,
иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** яҙ миҙгелен сағылдырылған һүрәт, сыйырсыҡтың ҙурайтылған һүрәте.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләре үткәрә. Яҙ миҙгелен сағылдырылған һүрәт буйынса әңгәмә үткәрә:

- Был һүрәттә ниндәй ваҡыт төшөрөлгән? Ағастар япраҡ ярырға әҙерләнә. Ер ҡарҙан асылған. Ерҙә йәшел үләндәр сыға. Ҡояш нык йылыта. Балалар урамда уйнайҙар. Ҡоштар йылы яҡтан ҡайта. Ҡарағыҙ әле, ике малай бәләкәй генә өй эшләйҙәр:

Туҡ-туҡ!..
Бына сөй,
Яһайбыҙ бәләкәй өй.
Сүкеште һуҡма яҙа!
Бына башы ҡуйылды,
Кескәй ишек уйылды.
Эй, сыйырсыҡ, сыйырсыҡ,
Кескәй өйҙө ҡарап сыҡ! (А. Йәғәфәрова)

- Малайҙар кемгә өй эшләгәндәр? Сыйырсыҡ алыҫтан беҙҙе һағынып ҡайтҡан. Беҙ уны матур өй эшләп ҡаршылайбыҙ. Ул унда балалар сығара. Беҙҙең баҡсаны бөжәктәрҙән таҙарта. Иртә менән беҙгә матур йырҙарын йырлай (аудиояҙма ҡуйып, тыңлатырға мөмкин).

Сыйырсыҡтың ҙурайтылған һүрәтен күрһәтеп, уның төҫө, тән өлөштәре менән таныштырабыҙ: суҡышы, күҙҙәре, ҡанаттары, тәпәйҙәре, ҡойроғо бар. Үҙе йылтыр ҡара төҫлө.

*«Сыйырсыҡ» уйынын* уйнатыу - балалар араһынан "сыйырсыҡ" һайлана. Ҡалған балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк буйлап, йырлап йөрөйҙәр, ә "сыйырсыҡ" уртала йоҡлап ултыра. Балалар йырлап бөткәс: "Сыйырсыҡ, ояңдан осоп сыҡ",- тип әйтәләр, ә "сыйырсыҡ" ҡулдары менән осҡан һымаҡ хәрәкәттәр эшләп, түңәрәк эсендә йөрөй. Йыр бөткәс, балалар туҡтайҙар һәм көй әйтеп (йә музыка менән) ҡул сабалар, ә "сыйырсыҡ" төрлө хәрәкәттәр менән бейей һәм кемгә баҫа – шул уның урынына "сыйырсыҡ" була. Уйын ҡабатлана. Йырҙы тәүҙә күмәкләп ятлап алалар:

*Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ,*
*Ояңдан осоп сыҡ.*
*Оҡшаһа был өйөң,*
*Түгелһен моң – көйөң!*

Һүҙҙәрҙе *өлөштәргә бүлеп* алайыҡ: сыйырсыҡ, суҡыш, ҡойроҡ, ҡанаттар, тәпәйҙәр.

*«Өй» һүҙен* ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ:

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Сыйырсыҡ файҙалы ҡошмо? Ул ниндәй ярҙам күрһәтә кешегә?

«Сыйырсыҡ» һүҙе нисә өлөштән тора?

**55 – се дәрес**

**Тема:** "Бүлмә гөлдәре"

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **сәскә (-ләр), үҫә (-ләр), күбәләк (-тәр);** ***үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;***

б) балаларҙың төҫтәрҙе, төрлө тауыштарҙы ишетеп, айыра белеү һәләтен үҫтереү; һүҙҙәрҙә өндөң урынын билдәләргә, һүҙҙе ижеккә бүлергә, шаҡмаҡтар ярҙамында өн анализы башҡара белергә өйрәтеү;

в) аңлы рәүештә диалог төҙә һәм яуап бирә белергә өйрәтеү;

г) балаларҙа башҡортса аралашырға теләк уятыу.

**Йыһаз:** ҡағыҙ, дөңгөр, тас, сүмес менән һыу, сынаяҡ аҫты менән өҫтө, бүлмә гөлө, күк, һары, ҡыҙыл сәскәләр һәм шул уҡ төҫтәге күбәләктәр, ҡурсаҡ Айгөл.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе ширма артында ҡағыҙ ҡыштырлата, дөңгөр (погремушка) шылтырата, тасҡа һыу ҡоя, бармаҡтары менән өҫтәлдә туҡылдай, сынаяҡ сылтырата һәм балаларҙан нимә тауышы икәнлеген билдәләргә һорай. Балалар әйткәс, предметтың үҙен күрһәтеп, тағы ла ҡабатлата.

Тәрбиәсе өҫтәлгә бүлмә гөлөн алып ҡуя һәм: "Был нимә?"- тип һорай. Балаларҙың цветок, горшок, земля һ.б. тип әйтеүҙәре мөмкин. Улар әйткән һүҙҙәрҙе тәрбиәсе башҡортсаға тәржемә итә һәм был һүҙҙәрҙең әйтелешен өйрәнәләр: көршәк, сәскә, тупраҡ.

Тәрбиәсе балаларға сәскәнең ниндәй өлөштәрҙән тороуын күрһәтеп, әңгәмә үткәрә: ботаҡ, япраҡ, тамыр, сәскә. Сәскә матур итеп үҫһен өсөн нимә эшләргә кәрәклеген, бүлмә гөлөн нисек тәрбиәләүҙе аңлата: һыу ҡоябыҙ, тупраҡты йомшартабыҙ, ашлама бирәбеҙ.

Балалар тәрбиәсе менән бергәләп тәбиғәт мөйөшөнә баралар һәм ундағы сәскәләр менән танышалар: яран гөлө, тамсы гөлө, бальзамин, бегония, фиалка. Тәрбиәсе балаларға һорауҙар бирә:

- Бында нисә бүлмә гөлө? (биш)

- Улар нисек атала?

- Гөлдәрҙең ниндәй өлөштәре бар, кем күрһәтеп әйтә?

- Гөлдәр матур үҫһен өсөн нимә эшләргә кәрәк?

- Сәскәләр ниндәй төҫтә?

Айгөл инә, уның ҡулында сәскәләр гөлләмәһе (букет). Үҙенең тәрбиәсегә сәскәләр алып килеүен әйтә. Айгөл балаларға: "Һеҙ сәскәләр яратаһығыҙмы, мин яратам. Был ниндәй сәскә?(ҡыҙыл, күк, һары). Сәскәне күбәләктәр ҙә ярата" - ти.

Тәрбиәсе *"Сәскәләр һәм күбәләктәр" уйынын* уйната: өҫтәлдә Айгөлдөң сәскәләре. Балалар уларҙың төҫтәрен әйтеп сығалар. Сәскәнең төҫөнә ҡарап, шул уҡ төҫтәге күбәләкте уның өҫтөнә ҡуялар: Был ҡыҙыл сәскә. Уны ҡыҙыл күбәләк ярата.

- «Гөл» һүҙендә *нисә өн?* Беренсе ниндәй өн? Икенсе ниндәй өн? Өсөнсө булып ниндәй өн килә? Был һүҙҙе ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ!

Тәрбиәсе:

- Мин «Сәскә үҫә» тип әйтһәм, һеҙ нимәне күҙ алдына килтерәһегеҙ? Дөрөҫ, сәскәне. Сәскә нимә эшләй? Сәскә үҫә. Беҙ был һүҙҙәрҙе схема ярҙамында яҙа алабыҙ:

Беренсе һүҙ – сәскә. Уны квадрат ярҙамында билдәләйбеҙ. Икенсе һүҙ – үҫә. Уны ла квадрат ярҙамында билдәләнек. Сәскә нимә эшләй? Сәскә үҫә! Был ике һүҙҙе бер-береһе менән һыҙыҡса йәки уҡ ярҙамында тоташтырабыҙ.

Тимәк, беҙ «Сәскә үҫә» тигән һүҙҙәрҙе квадраттар ярҙамында (схема) ярҙамында яҙҙыҡ. Был схема буйынса икенсе һүҙҙәрҙе лә уҡып була: Азат уйнай. Ҡурсаҡ йоҡлай. Йәшел япраҡ.

*«Өндөң урынын тап!» уйыны.* Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, уның атамаһын әйтергә һорай һәм «ә» өнөнөң һүҙҙең ниндәй урынында килеүен билдәләтә: *әтәс, сәскә, кәзә.*

*«Нимә артынан нимә килә?»* - балаларға «Эт нисек хужа тапты?» әкиәте буйынса буталған рәүештә һүрәттәр бирелә: эт менән бүре, эт менән айыу, эт менән арыҫлан, эт менән кеше. Балаларға уларҙы әкиәттәге тәртип буйынса таҡтала теҙеп ҡуйып, әкиәттең эстәлеген һөйләргә тәҡдим ителә.

*Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп* алайыҡ: хужа*, тапҡан, гөлдәр, сәскә.*

Дәресте йомғаҡлау:

- Беҙ бөгөн нимә тураһында һөйләштек?

- Бүлмә гөлдәре ҡайҙа үҫә? Уларҙы ҡыш көнө тышҡа сығарып буламы?
- Гөлдәрҙең нимәләре бар? «Гөл» һәм «сәскә» һүҙен русса нисек атайбыҙ? (цветок)

Балалар дәрестәге үҙҙәренең эшенә баһа бирәләр.

**56 – сы дәрес**

**Тема:** "Аквариумда нимәләр йәшәй?"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *өрәбеҙ, өрҙөк, ҡыуыҡтар, төрлө, балыҡ (-тар);* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ө, ҙ, ҡ, ғ* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) – мы, -ме, -мө, -мо һорау киҫәксәләре ярҙамында бирелгән һорауға яуап бирә белергә өйрәтеү;

г) балаларҙы һорау бирергә һәм уға яуапларға өйрәтеү.

**Йыһаз:** һабын ҡыуыҡтары өрөргә кәрәк булған набор, балыҡтары булған аквариум, ҡумтала ятҡан 5-6 уйынсыҡ, бал ҡорттары, тауыҡтар, ҡаҙҙар һәм балыҡтар һүрәттәре, һәр балаға балыҡ силуэты төшкән альбом бите һәм төҫлө ҡәләмдәр.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балаларға һабын ҡыуыҡтары өрә торған әйберҙәргә күрһәтә лә, уларға йомаҡ әйтә (мәғәнәһен русса аңлата):

*Һабынлы һыуҙан сыҡҡан*

*Әйләнеп матур шарға,*

*"Ҡояшҡа киттем мин", - тип*

*Осто ул юғарыға.*

*Ләкин барып етмәне,*

*Шунда уҡ ул шартланы.*

Балаларҙан йомаҡты сисергә һорай, улар русса яуап бирһәләр, башҡортсаға тәржемә итә: "һабын ҡыуығы – мыльный пузырь".

Тәрбиәсе һабын ҡыуыҡтарын өрөп күрһәтә һәм балалар уларҙың осоуын күҙәтәләр. Аҙаҡ тәрбиәсе балаларға күкрәккә тулы итеп һауа алып, "өфф-ф" итеп өрөп, был ҡыуыҡтарға осорға ярҙам итергә һорай (ғ-ж, тапҡыр).

Шунан тәрбиәсе балаларҙан һорай:

- Беҙ нимә эшләнек? (шарҙар йәки ҡыуыҡтар өрҙөк).
- Һабын ҡыуыҡтары нindәй? (улар матур, төрлө-төрлө).
- Ҙур ҡыуыҡтар бармы? (ҙур ҡыуыҡтар бар).
- Бәләкәй ҡыуыҡтар булдымы (эйе, бәләкәй ҡыуыҡтар булды).
- Беҙ нисек итеп өрҙөк? ("өфф-ф" итеп өрҙөк).
- Ҡыуыҡтар ниндәй төҫтә? (ҡыуыҡтар ҡыҙыл, йәшел, күк, һары төҫтә).

Тәрбиәсе балалар менән артикуляция һәм дөрөҫ тын алыу күнекмәләре үткәрә.

Тәрбиәсе балаларҙы аквариум эргәһенә килеп, балыҡтарҙы күҙәтергә саҡыра һәм балаларға һорау бирә:

- Балыҡтар күп-ме? (*-ме* һорау киҫәксәһен айырыбыраҡ әйтеп)
- Балыҡтар ҙур - мы? (юҡ, балыҡтар бәләкәй)
- Балыҡтар матур –мы? (эйе, балыҡтар матур)
- Балыҡтар һөйләшә – ме? (юҡ, балыҡтар һөйләшмәй)
- Балыҡтар атлай-мы? (юҡ, балыҡтар атламай, улар йөҙә)
- Балыҡтар ҡайҙа йөҙә? (балыҡтар һыуҙа йөҙә).

Балалар урындарына ултыралар. Тәрбиәсе балыҡ һүрәтен күрһәтеп, улар менән әңгәмәләшә: балыҡтың тән өлөштәрен һанап сығалар – башы, күҙҙәре, ауыҙы, ҡойроғо, ҡанаттары. Кәүҙәһе шыма, тәңкәләр менән ҡапланған, сөнки һыуҙа йөҙөргә шулай уңайлы. Балыҡтың аяҡтары, ҡулдары бармы?

Тәрбиәсе балаларға *"Эйе, юҡ" уйынын* уйнарға тәҡдим итә. Тәрбиәсе предметлы һүрәттәрҙе күрһәтеп, балаларҙан һорай: "Был сәскәме?" Сәскә булһа, балалар: "Эйе, был сәскә", әгәр сәскә булмаһа "Юҡ, был

сәскә түгел", - тип яуаплайҙар. (эт, балыҡ, айыу, кәзә, бүре, һыйыр, көсөк һүрәттәре).

*«Өндөң урынын тап!» уйыны.* Тәрбиәсе предметлы һүрәттәр күрһәтә, уның атамаһын әйтергә һорай һәм «б» өнөнөң һүҙҙең ниндәй урынында килеүен билдәләтә: *балыҡ, бүре, быҙау.*

*«Нимә артынан нимә килә?»* - балаларға «Эт нисек хужа тапты?» әкиәте буйынса буталған рәүештә һүрәттәр бирелә: эт менән бүре, эт менән айыу, эт менән арыҫлан, эт менән кеше. Балаларға уларҙы әкиәттәге тәртип буйынса таҡтала теҙеп ҡуйып, әкиәттең эстәлеген һөйләргә тәҡдим ителә.

*«Нимә артыҡ?» уйыны:* тамыр, япраҡ, ботаҡ, сәскә, балыҡ.

Кәзә, әтәс, һарыҡ, төлкө, быҙау.

*Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп* алайыҡ: япраҡ, ботаҡ, балыҡ, хужа.

«Эт» һүҙен ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ:

Тәрбиәсе балаларға балыҡ силуэты төшкән альбом биттәре таратып бирә һәм уны төҫлө ҡәләмдәр менән буярға тәҡдим итә. Балыҡтарҙы буяп бөткәс, таҡта эргәһендәге ептәргә элеп ҡуйып, ҙур "аквариум" эшләйҙәр. Эш ваҡытында өйрәнелгән һүҙҙәр нығытыла.

**57- се дәрес**

**Тема:** "Бөжәктәр донъяһы"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *бөжәктәр, ҡуңыҙ, себен, серәкәй, сыйырсыҡ, һағыҙаҡ;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ҡ, р, ң, у,* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларға һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлергә, ижектәрҙән һүҙ төҙөргә, һүҙгә өн анализы башҡарырға өйрәтеүҙе дауам итеү;

г) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** себен, бал ҡорто, серәкәй, һағыҙаҡ һүрәттәре, ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар, һөйләмдәрҙең схемаһы.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша, балалар ҙа бер-береһе менән һаулыҡ һорашып, бер-береһенә яҡшы теләктәр теләйҙәр. Тәрбиәсе:

- Телде уйнатып алайыҡ әле! Ул ҡайҙа йәшәй! (бүлмәлә - ауыҙ эсендә). Телдең хужаһы кем? (һин, мин – һәр кем үҙенең теленең хужаһы). Тел ҡайҙа уйнарға ярата? (бүлмәнең түбәһендә – на потолке). Тел ҡоймаларҙы (тештәрҙе) ҡарап сыҡты. Ишектәрҙе (ирендәрҙе) һепереп алды. Юлда ул ҡоштарҙы осратты. Урманда нисек турғай сирҡылданы? сиҡ-сирыҡ- сиҡ-сирыҡ.

Тумыртҡа нисек туҡылданы? (тоҡ-тоҡ)

Бүре нисек олоно? үүү-үүү.

Айыу нисек аҡырҙы? ааа-ааа.

Тел фермаға барып сыҡты. Унда һыйыр баҡырҙы: мөө-ммөө.

Эт ырылданы: ыррр-ыррр. Өрөп тә ебәрҙе: һаоу-һаоу!

Ике ҡуңыҙ талаштылар: жжжуу – жжжжы, ыжжж - ужжж.

Тел йылғаға барып етте. Арыны, ял итергә ултырҙы. Һауа саф, таҙа. Тел рәхәтләнеп тын алды (күрһәтегеҙ). Сыйырсыҡтың йырын тыңланы: фьюүүү-фьюүүү. Эргәһенән себен осоп китте: бззз – бззз. Бал ҡорто бал эҙләп сәскәгә килеп ҡунды: ҙҙҙҙҙ-ҙҙҙҙ.

Афарин, бөтәгеҙ ҙә бик матур итеп уйнаттығыҙ телегеҙҙе!

Тәрбиәсе:

- Балалар, был һүрәттәргә ҡарап әйтегеҙ әле, унда нимәләр төшөрөлгән? (себен, бал ҡорто, серәкәй, һағыҙаҡ). Уларҙы дөйөмләштереп, бер һүҙ менән нисек әйтеп була? Бөжәктәр (насекомые).

Бөжәктәр тәбиғәттә файҙалы эш башҡаралар, сәскәнән сәскәгә ҡунып, уларға емешләнергә ярҙам итәләр. Бал ҡорттары бик файҙалы бал йыялар. Ләкин себендәрҙе, серәкәйҙәрҙе өйгә индерергә яраймы? Юҡ, улар беҙҙе тешләйҙәр, төрлө микробтар алып киләләр. Бөжәктәрҙе ҡоштар тотоп ашайҙар.

*«Сыйырсыҡ» уйынын* уйнатыу.

*Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп алайыҡ*: себен, серәкәй, сыйырсыҡ, һағыҙаҡ, бөжәк.

«Бал» һүҙен ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ.

Түбәндәге һөйләмдәрҙең схемаһын төҙәбеҙ.

*Мин бал яратам.*

*Сыйырсыҡ серәкәй ярата.*

Йәй көнө матур.

«Нимә артыҡ?» уйыны. Бирелгән һүҙҙәр араһында ниндәй һүҙ артыҡ икәнлеген билдәләү:

а) себен, серәкәй, сыйырсыҡ, һағыҙаҡ.

б) сыйырсыҡ, тумыртҡа, турғай, әтәс, һандуғас, кәкүк.

«Ижектәрҙән һүҙ төҙө!» - бирелгән ижектәр менән һүҙ уйлап табыу: кә-…, сыйыр-.., һы-…, һан-…, ма-…

«Кем ҡысҡыра?» уйыны. Тәрбиәсе шиғыр уҡый, балалар кем тураһында һүҙ барғанды әйтергә тейештәр:

-Ки-ки-ри-күк,

Тороғоҙ иртүк! (әтәс)

- Ға-ға-ға-ға,

Киттек беҙ бергә һыуға! (ҡаҙҙар)

Гөлдөр, гөлдөр,

Илебеҙ гөлдөр! (күгәрсен). (А. Йәғәфәрова). Дәресте йомғаҡлау.

**58- се дәрес**

**Тема:** "Ҡурай тыңлайбыҙ "

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **көй, ҡурай, тын алыу, һауа сығарыу*; уткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;**

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; *ш, у, ө, ҡ* өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы башҡорт халҡының музыка ҡоралдары менән таныштырыу ;

г) балаларҙы һүҙъяһалыш ысулдары менән таныштырыу, уларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡағыҙҙан эшләнгән ҡурайҙар, әкиәт персонаждары, ҡурай, дөңгөр, барабан, ҡумыҙҙа уйналған көй яҙылған аудио йәки видеояҙма, ҡурсаҡ Айгөл.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе аудио йәки видеояҙма аша уларға ҡурай тауышын ишеттерә һәм:

- Балалар, тыңлағыҙ әле, ниндәй матур көй. Был ниндәй музыка ҡоралының тауышы икән? Кемдең ҡурайҙы күргәне бар? Бына өҫтәлдә музыка ҡоралдары, улар араһында ҡурай бармы, кем күрһәтә? Ул ниндәй музыка ҡоралына оҡшаған?(дудкаға).

Тәрбиәсе: - Ҡурай – оҙон ағас үләндән эшләнә. Үләндең ике осон ҡырҡып, трубка (оҙон нәҙек торба) яһайҙар. Ҡурайҙың эсе буш, тишектәре бар. Ҡурайҙы ауыҙға алып, эсенә өрәләр, ә бармаҡтар менән тишектәренә бер-бер артлы баҫалар. (күрһәтә). Шулай көй сыға. Ҡурай уйнаған кешенең тыны оҙон булырға тейеш. Уның өсөн көн дә күнекмәләр эшләү кәрәк. Бына шулай: эскә танау аша тын алабыҙ ҙа, ауыҙҙан һауаны оҙаҡ итеп сығарабыҙ. (тәүҙә үҙе күрһәтә, аҙаҡ балалар ҡабатлайҙар):

Ауыҙ аша тын алып – ауыҙ аша сығарыу. Танау аша тын алып – ауыҙ аша сығарыу. Ауыҙ аша тын алып, бер-бер артлы танау тишектәренән сығарыу. Устарҙа ятҡан мамыҡтарға өрөү. Бер тын алышында «ә», «ү», «ө», «и», «а» өндәрен һуҙып йырлау.

Ҡурайҙа уйнаған видео йәки аудио яҙма ҡуйыла. Тәрбиәсе балаларҙан:

- Был ағай нимәлә уйнаны? - тип һорай. - Ҡурайҙа уйнаған кеше нисек атала? Ул *ҡурайсы* була, бейегән кеше *бейеүсе* була.

Балаларға ҡағыҙҙан эшләнгән ҡурайҙар таратыла: улар бергәләп «ҡурайҙа» уйнайҙар. Был күнекмә ваҡытында ҡурай көйө яҙылған аудиояҙма ҡуйыу отошло була. Беҙ кем булдыҡ? Беҙ – ҡурайсылар.

Ҡурсаҡ Айгөл инә. Уның ҡулында дөңгөр һәм ҡумыҙ. Ул өләсәһенән ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнгәнлеген әйтә. Балаларға уйнап ишеттерә (аудиояҙма).

Тәрбиәсе балаларҙан: - Был ниндәй музыка ҡоралы? - тип, дөңгөрҙө күрһәтеп һорай. Тәрбиәсе балаларға башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарының атамаһын тағы ла һанап китергә тәҡдим итә: *ҡурай, дөңгөр, ҡумыҙ.*

*«Нимә артыҡ?» уйыны:* ҡурай, ҡумыҙ, дөңгөр, сәскә.

Тәрбиәсе балаларға *"Эйе, юҡ" уйынын* уйнарға тәҡдим итә. Тәрбиәсе предметлы һүрәттәрҙе йәки үҙҙәрен күрһәтеп, балаларҙан һорай: "Был ҡураймы?" Ҡурай булһа, балалар: "Эйе, был ҡурай", әгәр ҡурай булмаһа "Юҡ, был ҡурай түгел", - тип яуаплайҙар. (ҡумыҙ, дөңгөр, барабан, пианино һүрәттәре).

*«Ниндәй өндән башлана?»* уйыны – һүҙҙәрҙә беренсе өндө билдәләү: ҡурай, ҡумыҙ, дөңгөр, барабан, пианино.

Тәрбиәсе: Беҙ хәҙер халыҡ инструменттары оркестры булып уйнайбыҙ. Һеҙгә мин музыка ҡоралдары таратып бирәм: ҡурай, ҡумыҙ, дөңгөр, барабан. Тәүҙә ҡыҙҙар уйнай, шунан малайҙар. Кем матурыраҡ уйнар икән! Малайҙар уйнағанда, ҡыҙҙар бейей. Аҙаҡ – киреһенсә.

Беҙгә ҡунаҡҡа «Тирмәкәй» әкиәте геройҙары килгән, ҡарағыҙ әле! (өҫтәл ҡурсағы театры персонаждарын күрһәтә). Кем уларҙың исемдәрен һанап китә? Кем улар булып бейергә теләй? Башҡалар музыка ҡоралдарында уйнай (аудиояҙма ҡуйыла), балалар музыка ҡоралдарында уйнаған һәм хайуандар ролендә бейегән хәрәкәттәрҙе башҡаралар.

Тәрбиәсе әкиәт персонаждарын һәм музыка ҡоралдарын бергә күрһәтеп, балаларҙан кемдең ниндәй музыка ҡоралында уйнағанын әйтергә тәҡдим итә:

- Кем нимәлә уйнай? (айыу, ҡурай). Ҡуян менән дөңгөр. Төлкө менән ҡумыҙ. Бүре менән пианино. Сысҡан менән барабан.

*Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп* алайыҡ: сысҡан, бүре, ҡурай, ҡуян, дөңгөр, бесәй.

*«Ҡош» һүҙен ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар* ярҙамында яҙайыҡ:

*Дәресте йомғаҡлау.*

- Беҙ бөгөн нимәләр тураһында һөйләштек?

- Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын кем һанап китә?

- Ҡурайҙа уйнаған кешене нисек атайҙар?

- «Ҡ» өнөнә ниндәй музыка ҡоралдары исеме башлана?

**59 - сы дәрес**

**Тема:** "Кем йыр ярата?"

**Маҡсат:** а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү, үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү: һүҙҙә өндәрҙе ишетә, дөрөҫ әйтә һәм өндәрҙең урынын таба белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙа матурлыҡҡа ҡарата ынтылыш тәрбиәләү;

г) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** өйрәнелгән хайуандар һүрәте, «Мин үҙемде яратам» тигән йырҙың аудиояҙмаһы, һәр балаға ҡағыҙ бите, төҫлө ҡәләмдәр.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм уларға тел менән уйнап алырға тәҡдим итә. Тәрбиәсе:

- Һәр бер нәмә йырлай белә. Хәҙер кем йырлай икәнлеген әйтеп ҡарайыҡ. Тәрбиәсе һүрәттәр күрһәтә, ә балалар һүрәттәге хайуандың нисек йырлағанын әйтәләр: *һыйыр, әтәс, тауыҡ, бал ҡорто, серәкәй, өкө, ел.*

- Балалар, һеҙ ниндәй йырҙар ятатаһығыҙ? Кем йырлап ишеттерә?

Тәрбиәсе: - Мин хәҙер бер йырҙың яҙмаһын ҡуям. Ул йыр нимә тураһында икән, кем танып әйтер?

- Дөрөҫ, был «Мин үҙемде яратам» тигән йыр (әгәр әйтә алмаһалар, тәрбиәсе үҙе һөйләй). Ул йырҙың һүҙҙәрен Инга Илембәтова апай яҙған, ә көйөн Әльфиә Зиннурова апай уйлап тапҡан, әйҙәгеҙ уның һүҙҙәрен өйрәнәйек:

*Ҡушымта:*

Там, там, там, трам - там – там,
Мин үҙемде яратам.
Там, там, там, трам - там – там,
Мин һеҙҙе лә яратам.
Яратам мин илемде,
Матур башҡорт телемде,
Уйнап-көлөп үткәрәм
Һәр бер яңы көнөмдө.

Яратам атайымды,
Яратам әсәйемде.
Етәкләйем уларҙы
Биреп йылы усымды.

*Ҡушымта шул уҡ:*

Баҫһам көҙгө алдына
Күрәм унда үҙемде.
Һоҡланып ҡарап торам
Ала алмай күҙемде.

*Ҡушымта шул уҡ:*

Ҡояш апай күктән беҙгә
Йылмайып ҡарап тора.
Мин һеҙҙе бик яратам, тип
Теләктәр теләп тора.

*Ҡушымта шул уҡ:*

(йырҙың һүҙҙәрен балаларға тәржемә итеп аңлата)

Тәрбиәсе: - Балалар, йырҙа кем тураһында йырлана. Мин, минең турала, шулай бит. Кем йырҙы йырлай, ул үҙе тураһында йырлай.

Нимә тураһында йыр? атай, әсәй, яҡындар, туған тел, туған ил, йылмайып торған ҡояш тураһында. Шундай матур йырҙың һүҙҙәре, шундай яҡшы көйө, шулай бит! (аудиояҙмаға ҡушылып йырлайҙар).

«Йыр» һүҙен шаҡмаҡтар ярҙамында яҙыу.

Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү: *әсәйем, атайым, көҙгө, ҡояш, яратам.*

*Атайым, әсәйем, яратам, башҡорт теле* һүҙҙәре менән һөйләмдәр төҙөргә.

Балаларға ҡағыҙ бите, төҫлө ҡәләмдәр таратып бирелә һәм йырҙың эстәлеге буйынса һүрәт төшөрөргә тәҡдим ителә. Рәсем ваҡытында өйрәнелгән һүҙҙәр ҡабатлатыла.

Дәресте йомғаҡлау.

**60- сы дәрес**

**Тема:** "Һабантуй – яҙ байрамы!"

Маҡсат:

а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *һоло, тары, арпа, ҡолға, боҙоҡ;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү: һүҙҙә өндөң урынын билдәләргә, һүҙҙе ижектәргә бүлеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙы башҡорт халҡының байрамы менән таныштырыу;

г) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** «Һабантуй» байрамы тураһындағы һүрәт, ҡурсаҡ Айгөл, балалар йәбештергән сәскәләр төшкән панно, уның уртаһында ҡурай сәскәһе, пластилин.

***Дәрес барышы:***

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм телдәрҙе уйнатып, башҡортса һөйләшергә әҙерләп алырға тәҡдим итә. Уйындан һуң балаларға ниндәй башҡорт байрамдарын белеүҙәрен һораша.

«Һабантуй» байрамын кем белә (һүрәт ярҙамында аңлата)? Ул нимәне аңлата, русса ул нисек тәржемә ителә: һабан – плуг, туй – праздник. Значит, праздник плуга. Һабантуйҙы ҡасан байрам итәләр? Яҙ көнө, яланда сәсеү эштәре бөткәс. Яҙ көнө нимә сәсәләр? Бойҙай, һоло, тары, арпа (пшеница, овес, пшено, ячмень).

Байрамда нимә эшләйҙәр? Атта сабышалар. Батырҙар көрәшә. Ҡурайҙа уйнайҙар, бейейҙәр. Ҡалаҡҡа йомортҡа һалып, югерәләр. Тоҡ менән һуғышалар. Бейек ҡолғаға ярышып менәләр.

Тәрбиәсе: - Хәҙер беҙ ҙә уйнап алайыҡ:

*«Осто – осто» уйынын уйнайыҡ.* Балалар түңәрәккә баҫа. Һанашмаҡ менән бер бала һайлана, йәки тәрбиәсе үҙе алып барыусы була. Алып барыусы уртаға баҫа һәм оса торған һәм осмай торған нәмәләрҙең атамаһын буташтырып әйтеп, ҡулын өҫкә күтәрә. Балалар оса торған нәмә әйтелгәндә генә ҡулдарын күтәрергә тейештәр, ә осмай торған нәмә әйтелһә – сүкәйеп ултыралар. Уйын тәртибен боҙған балалар – түңәрәктән сыға бара.

*Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп* алайыҡ: *ҡалаҡ, һабантуй, аттар, көрәш, ҡолға, байрам, яҙ.*

*«Тоҡ»* һүҙен ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ:

*«Боҙоҡ телефон» уйынын* уйнайбыҙ. Балалар ултырғыста, йәки эскәмйәлә теҙелеп ултыралар. Тәрбиәсе үҙенең эргәһендә ултырған балаға берәй һүҙ әйтә. Мәҫәлән, "алма", ә бала күршеһенең ҡолағына бышылдап ҡына ошо һүҙҙе әйтә. Һәр бала һүҙҙе нисек итеп ишеткән, шул килеш күршеһенә еткерә. Бөтә балалар ҙа әйтеп бөткәс, уйынды алып барыусы иң аҙаҡтағы баланан нимә ишеткәнен һорай. Шул рәүешле бөтә балаларҙан да һорап сығыла. Кем һүҙҙе яңылыш әйтә, ул бала рәттең аҙағына күсеп ултыра.

*«Һүрәт буйынса хикәйә төҙ!»* - һабантуй байрамы тураһында сюжетлы һүрәт ковролинға элenә. Тәүҙә бергәләп ҡарап сығалар, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәләр. Тәрбиәсе һорауҙар бирә:

- Был ниндәй байрам?
- Байрамға кемдәр килгән?

- Кемдәр көрәшә?

- Тоҡ менән кем югерә?

- Атта кем саба?

- Байрамда күңеллеме?

Дәресте йомғаҡлау.

## 61 - се дәрес

**Тема:** "Думбырала уйнайым"

*Маҡсат:* ***а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү:*** **думбыра, ҡобайыр;** ***үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;***

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү: һүҙҙә өндәрҙең урынын билдәләргә, өн анализы башҡара белеү күнекмәләрен үткәреү; в) балаларҙы башҡорт музыка ҡоралдары менән таныштырыу ;

г) үҙ-ара аралашырға теләк уятыу, иғтибарлылыҡ, хәтер үҫтереү.

**Йыһаз:** думбырала уйналған көй аудиояҙмаһы, төрлө тауыш сығарған предметтар, башҡорт музыка ҡоралдары һүрәттәре, һөйләмдәр схемаһы.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе: - Хәҙер беҙ башҡортса матур итеп һөйләшергә өйрәнер өсөн телде, тештәрҙе, ирендәрҙе уйнатып, уларҙы әҙерләп алайыҡ әле:

- Ауыҙҙы киң итеп асырға һәм бер нисә секунд асыҡ тоторға.

- «Ә-ә-ә» тип һуҙып *бер, ике, өс* тигәнсе йырларға, ә ҡулдар менән ошо ваҡыт эсендә сәпәкәйләргә.

- Ирендәр әҙ генә асыҡ, тештәрҙе бер-береһенә тигеҙеп, еңелсә туҡылдатыу;

- "Йылмайыу"- ирендәр асыҡ, йылмайыу күренешендә, тештәр ҡыҫылған. «З-з-з» тип серәкәй йырын йырлау.

- Ҡойманы әҙ генә астыҡ – серәкәй ҡыҫылды, йырлай алмай. Ул тик «Ҙ-ҙ-ҙ» тип тауыш бирә (телде теш араларына ҡыҫтырыу).

Балалар, беҙ ҙә йырлап ҡарайыҡ әле:

З-з-з - *кә-зә*

Ҙ-ҙ-ҙ - *ҡайҙа (3-4 тапҡыр ҡабатлайҙар)*

-Танау аша тәрән итеп тын алыу, яй ғына ауыҙ аша һауаны сығарыу;

- "Эйәкте туңдырыу" - өҫкө иренде аҫҡы ирен аҫтына төшөрөргә, бер тын эсендә аҫҡа, эйәккә һалҡын һауаны өрөү;

-"Ҡулдың һыртын туңдырайыҡ" - ябыҡ ирендәрҙе йылмайған кеүек һуҙырға, ҡул һыртын эйәккә терәргә, тын алырға ла, тын бөткәнсе ҡул һыртына өрөргә.

Ҡурсаҡ Айгөл инә. Ул балаларға *"Тауышты таны!" уйынын* уйнарға тәҡдим итә. Ҡорған артында ҡағыҙ ҡыштырҙаған, барабан туҡылдаған, крандан һыу тамған, сүкеш менән тимергә һуҡҡан һәм дөңгөр (погремушка) шылтыраған, думбырала уйнаған тауыштар ишетелә. Балалар тауыш сығарған предметтарҙы танып, уларҙың исемдәрен әйтәләр. Русса әйтһәләр, Айгөл башҡортсаға тәржемә итә. Һуңынан Айгөл (тәрбиәсе) был предметтарҙы балаларға күрһәтеп, уларҙан был әйберҙәрҙең нисек тауышланғанын әйттереп сыға:

*Ҡағыҙ "шырҡ-шырҡ"ти.*

*Барабан "бом-бом" ти.*

*Һыу "тып-тып" ти.*

*Сүкеш "туҡ-туҡ" ти.*

*Дөңгөр "шылтыр-шылтыр" ти.*

*Думбыра «динь-динь» тип йырлай.*

Балалар менән думбыраны алып, тикшереп ҡарайҙар. Тәрбиәсе уның һүрәтен күрһәтеп һөйләй: думбыра башҡорттарҙың боронғо музыка ҡоралы. Уның корпусы грушаға оҡшаған, өс ҡылы бар. Ҡылдары йә металдан, йә һуҙып киптерелгән тарамыштан (мускул һәм һөйәктәрҙе тоташтырған һуҙылыусан ныҡ һәм тығыҙ туҡыма) эшләнә. Ошо ҡылдарҙы бармаҡ остары менән сиртеп уйнайҙар. Думбыраның көйөнә ҡушылып ҡобайырҙар әйтелгән.

Айгөл думбыраны алып уйнай (аудиояҙма), балаларға бейергә тәҡдим итә. Балалар күмәкләп бейейҙәр, йүгереп уйнайҙар.

«Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын тап!» уйыны – балаларға өҫтәлдәге һүрәттәр араһынан музыка ҡоралдарын табырға тәҡдим ителә: *ҡурай, дөңгөр, ҡумыҙ, думбыра.*

Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүләйек: *ҡурай, дөңгөр, ҡумыҙ, думбыра.*

*«Ҡурай»* һүҙен ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ.

«Иғтибарлы бул!» уйыны. Һүҙҙә «б» өнө булһа, ҡул сабабыҙ, булмаһа – ҡулдарҙы итәккә һалабыҙ: әтәс, балыҡ, баҡа, ҡурай, думбыра, айыу, бүре, тауыҡ, бесәй.

«Өндөң урынын тап!» - «б» өнөн һүҙҙәрҙә табырға: балыҡ, баҡа, бабай, әбей, бармаҡ, думбыра.

Бирелгән һөйләмдәргә схема төҙөргә:

Мин думбырала уйнайым.

Беҙ урамда уйнайбыҙ.

Атайым эшкә китте.

Дәресте йомғаҡлау:

- Нимәләр тураһында бөгөн һөйләштек?

- Думбыраның нисә ҡылы бар?

- Ҡурайҙың нисә тишеге бар?

-Кем «Ҡурай» һүҙен өлөштәргә бүлеп күрһәтә?

**62- се дәрес**

**Тема:** "Хайуандарҙың балаларын табайыҡ"

**Маҡсат:** а) үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу;

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү; башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ишетә, дөрөҫ әйтә белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙа тәбиғәткә, йәнлектәргә ҡарата хәстәрлек тойғолары тәрбиәләү; балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** кәрзин, хайуандар балалары һәм әсәләре, ковролин, ҡурай моңо аудиояҙмаһы, ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар, һөйләм схемаһы.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша, балалар ҙа бер-береһе менән һаулыҡ һорашып, бер-береһенә яҡшы теләктәр теләйҙәр. Тәрбиәсе:

- Телде уйнатып алайыҡ әле! Ул ҡайҙа йәшәй! (бүлмәлә - ауыҙ эсендә). Телдең хужаһы кем? (һин, мин – һәр кем үҙенең теленең хужаһы). Тел ҡайҙа уйнарға ярата? (бүлмәнең түбәһендә – на потолке). Тел ҡоймаларҙы (тештәрҙе) ҡарап сыҡты. Юлда ул ҡоштарҙы осратты. Урманда нисек өкө ухылданы? ууу-ууу.

Тумыртҡа нисек туҡылданы?

Бүре нисек олоно? үүү-үүү.

Айыу нисек аҡырҙы? ааа-ааа.

Тел фермаға барып сыҡты. Унда һыйыр баҡырҙы: мөө-ммөө.

Эт ырылданы: ыррр-ыррр.

Ике ҡуңыҙ талаштылар: жжжуу – жжжжы, ыжжж - ужжж.

Тел йылғаға барып етте. Арыны, ял итергә ултырҙы. Һауа саф, таҙа. Тел рәхәтләнеп тын алды (күрһәтегеҙ).

Һыу инергә һыуға төштө. Һыу һыуыҡ. Нисек һыуыҡ, күрһәтегеҙ! Тел өшөнө, ҡалтырай башланы (күрһәтегеҙ). Бышҡыра, сөскөрә башланы, нисек? Температураһы күтәрелде, ауырып китте: эээх, өөөф, уууф, әәәһ. Табип килде, Телгә әсе дарыу бирҙе, сырайын һытып, дарыуҙы эсеп ебәрҙе. Нисек әсе булды, күрһәтегеҙ!

Тел йоҡлап китте. Нисек йоҡланы, күрһәтегеҙ!

Афарин, бөтәгеҙ ҙә бик матур итеп уйнаттығыҙ телегеҙҙе!

Тәрбиәсе: - Балалар, ошо кәрзиндә хайуандар балалары йыйылған. Улар әсәләрен юғалтҡандар. Беҙ уларҙың әсәләрен табырға ярҙам итәйек, - тип, кәрзиндән хайуандарҙың балаларын сығарып күрһәтә, улар булып тауыш сығара һәм балаларға һорау бирә:

- Сип-сип-сип-сип! Был нимәнең тауышы? Был нимә? (тауыҡ себеше). Ул аҙашҡан! Нимә уның әсәһе? Кем әйтә?

- Дөрөҫ, был себеш. Уның әсәһе тауыҡ.

- Кря-кря-кря! Был нимәнең тауышы? Был нимә? (өйрәк себеше). Ул аҙашҡан! Нимә уның әсәһе? Кем әйтә? (өйрәк).

- Бәә-бәә-бәә! (кәзә бәрәсе).

- Мөө-мөө-мөө! (быҙау).

- Мяу-мяу-мяу! (бесәй балаһы)

Тәрбиәсе ковролинға әсәләре менән бергә балаларын әйтеп, өҫтәлдәге һүрәттәрҙе элеп ҡуйырға һорай:

-Был быҙау. Уның әсәһе һыйыр (артабан ошо рәүешле дауам ителә).

- Ниндәй хайуандар урманда йәшәй, һүрәттән күрһәтегеҙ әле: айыу, бүре, төлкө, мышы, тейен, ҡуян.

Ошо һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүлеп алайыҡ: айыу, бүре, төлкө, мышы, тейен, ҡуян.

«Төлкө» һүҙен ҡыҙыл һәм зәңгәр шаҡмаҡтар ярҙамында яҙайыҡ:

Аудиояҙманан ҡурай моңо яңғырай. Тәрбиәсе уның ниндәй музыка ҡоралы икәнен һорай һәм балаларға «Ҡурай» уйыны уйнарға тәҡдим итә. Балалар түңәрәккә баҫалар, ҡулдары менән ҡурай уйнаған хәрәкәттәрҙе башҡаралар һәм:

*Бына беҙҙең ҡурай,*
*Ул шулай уйнай.*
*Тып-тып итеп баҫабыҙ,*
*Бейешәбеҙ беҙ шулай.*

(шиғырҙың һуңғы ике юлын әйткәндә тыпырҙап бейеп, үҙҙәре тирәләй әйләнәләр). Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

Тәрбиәсе ковролинда һөйләм схемаһын күрһәтә һәм ошо схема буйынса ҡурай тураһында һөйләм уйларға тәҡдим итә: Мин ҡурайҙа уйнайым. Атайым ҡурайҙа уйнай. Дәресте йомғаҡлау.

## 63-64 - се дәрестәр

**Тема:** "Дарыу үләндәре"

Маҡсат: а) яңы һүҙҙәрҙе өйрәтеү: *кесерткән, бәпембә, юл үләне, мәтрүшкә, андыҙ;* үткән дәрестәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе нығытыу*;*

б) балаларҙың фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү: һүҙҙә өндәрҙе ишетә, дөрөҫ әйтә һәм һүҙҙә өндәрҙең урынын таба белеү күнекмәләрен үткәреү;

в) балаларҙың һүҙ байлығын, хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү.

**Йыһаз:** дарыу үләндәре һүрәттәре, һөйләм схемаһы, зәңгәр һәм ҡыҙыл шаҡмаҡтар.

*Дәрес барышы:*

Тәрбиәсе балалар менән һаулыҡ һораша һәм уларға ла бер-береһе менән сәләмләшеп, дәресте башлап ебәрә:

- Телде уйнатып алайыҡ әле! Ул ҡайҙа йәшәй! (бүлмәлә - ауыҙ эсендә). Телдең хужаһы кем? (һин, мин – һәр кем үҙенең теленең хужаһы). Тел ҡайҙа уйнарға ярата? (бүлмәнең түбәһендә – на потолке). Тел ҡоймаларҙы (тештәрҙе) ҡарап сыҡты. Юлда ул ҡоштарҙы осратты. Урманда нисек кәкүк ҡысҡыра? кә-күк, кә-күк. Ҡарға нисек ҡысҡыра? (ҡар-ҡар-ҡар).

Тумыртҡа нисек туҡылданы?

Айыу нисек олоно? ууу-ууу.

Йылан нисек ыҫылдай? ҫҫҫ-ҫҫҫ.

Тел фермаға барып сыҡты. Унда кәзә баҡырҙы: бәә-бәәә.

Ҡаҙ ҡаҡылданы: ҡаҡ-ҡаҡ.

Ике ҡуңыҙ талаштылар: жжжуу – жжжжы, ыжжж - ужжж.

Ел сыҡты: үүү-үүү. Ағастар шауланы: шшш-шшш. Ямғыр башланды: тып-тып-тып. Беҙ өйгә югерҙек: топ-топ-топ.

Афарин, балалар, бик матур итеп һеҙҙең телдәр уйнаны. Хәҙер был һүрәттәргә ҡарағыҙ әле, нимәләр төшөрөлгән? (үләндәр).

Ниндәй үләндәр күрәһегеҙ? (балалар рус телендә әйтә алалар, тәрбиәсе тәржемә итә). *Кесерткән, бәпембә, юл үләне, мәтрүшкә, андыҙ (девясил).* Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн беҙ уларҙы бергә йыйғанбыҙ икән?

-Дөрөҫ, былар дарыу үләндәре!

*Кесерткәнде* ҡайнатып эсәләр, унда файҙалы витаминдар күп. Бәләкәй себештәргә лә уны ваҡ ҡына итеп турап бирәләр. *Бәпембә лә*

витаминға бай. Уны салат итеп турап ашайҙар. Сәскәһенән тәмле ҡайнатма (варенье) эшләйҙәр. *Юл үләнен* ауыртҡан ергә бәйләҙәр, төнәтмәһен эсәләр. *Мәтрүшкәне* һалҡын тейгәндә сәй итеп эсәләр. *Андыҙ* бик күп сирҙәрҙе дауалай: юткергәндә, һыуыҡ тейгәндә уны ҡайнатып эсәләр.

Балалар, дарыу үләндәрен йыйып, киптереп, дарыу эшләйҙәр. Дарыу өсөн уларҙы махсус үҫтерәләр. Беҙҙең Башҡортостанда был үләндәр йыш осрай. Уларҙы таный һәм ҡуллана белергә кәрәк.

*«Һөйләү буйынса таны!»* - тәрбиәсе өйрәнелгән дарыу үләндәрен тасуирлап һөйләй, уның һөйләүе буйынса балалар танып әйтергә тейеш:

а) Япраҡтары киртләс – киртләс (резные), һарай артында үҫә, ҡул тейһә – яндыра (кесерткән). Балалар һәр үләндең атамаһын әйткәс, тәрбиәсе уларҙың һүрәтен күрһәтә һәм атамаһын хор менән 3-4 тапҡыр ҡабатлап әйттерә.

б) Сәскәләре ҡояш кеүек түңәрәк, өҙһәң – ап-аҡ һуты сыға. Ваҡыт үтеү менән сәскәһе матур шарға әйләнә, өрһәң – орлоҡтары осоп китә (бәпембә).

в) Ул һәр саҡ юл ситендә үҫә, сәскәһе башаҡ кеүек (юл сәскәһе).

г) Ул урманда, яланда үҫә, еҫе аңҡып тора, сәскәләре ваҡ ҡына, гөлләмә кеүек йыйылған, алһыу күк төҫлө (мәтрүшкә).

д) Һыу буйында бейек булып үҫә. Һары сәскәле, япраҡтары ҙур, киң, тамырҙары тәрән булып ергә инә (андыҙ).

«Ҡурай» уйынын уйнатыу.

*«Һүҙҙәрҙе өлөштәргә бүл!»* уйыны: андыҙ, мәтрүшкә, бәпембә, кесерткән.

*«Сәскә»* - һүҙен шаҡмаҡтар ярҙамында яҙырға.

Бирелгән ижектәр менән һүҙҙәр төҙөргә: дум - ….(быра), мәтрүш - …(кә), ан - ….(дыҙ), кесерт - ….(кән), да - …(рыу).

*«Һөйләмдәр төҙ!» уйыны* – бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү: урман, мәтрүшкә, сәскә.

Уларҙың схемаһын төҙәйек.

*Дәресте йомғаҡлау:*

- Ниндәй дарыу үләндәре беләһегеҙ?

- Кесерткәнде яланғас ҡул менән өҙөп буламы?

Һәр дарыу үләне менән айырым һөйләшеү үткәреп, уның һүрәттәрен йәки үҙҙәрен дәрескә алып килеп, тикшереүҙәр үткәреү мөмкин. Шулай уҡ башҡа дарыу үләндәрен дә өҫтәп өйрәнеү – балаларҙың телмәрен үҫтереүгә ярҙам итәсәк. Нияз Сәлимов шиғырҙарын ҡулланырға мөмкин:

**Мәтрүшкә**

*Күп кешеләр бик борондан*
*Мәтрүшкәне ярата.*
*Һалҡын тейһә, ул һәр кемгә*
*Дауа сиргә ҡарата.*

**Андыҙ**

*Был үлән дә бик шифалы –*
*Болонда үҫә андыҙ.*
*Уны маҡтап, әсәй әйтә:*
*Андыҙһыҙ – донъя һанһыҙ.*

**Кесерткән**

*Кесерткәнде «һоп!» тиеп,*
*Сыға алам һикереп.*
*Саға алмай ҡалғанға*
*Илай микән үкереп?*

Йыл аҙағына тиклем ҡалған дәрестәрҙе тәрбиәсе үҙ ҡарамағы буйынса үткәрә: уҡыу йылы аҙағында ата-әсәләр өсөн байрам үткәреүҙе алыу һәм балаларҙың телде үҙләштереү кимәлен асыҡлауға бағышланған дәрестәр алыу мотлаҡ кәрәк тип һанала.

## Йөкмәткеһе

| | |
|---|---|
| Аңлатма яҙыу | |
| Башҡорт дәүләт теленә өйрәтеүҙең төп маҡсаттары һәм принциптар | |
| Кескәйҙәргә тел өйрәтеүгә төп талаптар һәм принциптар | |
| Программаға нигеҙләнгән принциптар | |
| Башҡорт теленә өйрәтеүҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәре | |
| Программа:<br>а) беренсе йылда өйрәтеү өсөн<br>б) икенсе йылда өйрәтеү өсөн | |
| Ҡушымталар:<br>а) «Афарин» - телде өйрәнеү кимәлен билдәләүгә күрһәткестәр һәм эш төрҙәре:<br>- өлкән төркөм өсөн;<br>- мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн. | |
| б) Башҡортса-русса һүҙлек | |
| в) «Башҡортса һөйләшәбеҙ» - тәүге йылда башҡорт телен өйрәтеүгә яҡынса перспектив-тематик план һәм дәрестәр өлгөләре | |
| г) «Башҡортса һөйләшәбеҙ» - икенсе йылда башҡорт телен өйрәтеүгә яҡынса перспектив-тематик план һәм дәрестәр өлгөләре | |
| Йөкмәткеһе | |

**Азнабаева Фирдаус Гисовна**
**Нафикова Закия Галиахметовна**

**Искра**

**Программа-руководство, конспекты занятий и диагностические задания для обучения государственному башкирскому языку детей разных национальностей в условиях детского сада**